# Ағиҙел

Өфө,
май
2013

5(1081)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.05. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 200 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0059.13.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2013 (5,1081)**

# БЫЛ ҺАНДА:

*Бөйөк Еңеүгә – 68 йыл!*

**Азат Мағазов.** Кешелек үҙен үҙе һаҡлаһын! ....................................5

ШИҒРИӘТ

**Тимер Йосопов.** Эй, ғүмерҙәр!.. Шиғырҙар. .............................7
**Марсель Ғафуров.** Әсәй. Шиғырҙар. ........................................17
**Хәлиҙә Миһрани.** Ябай шағирә. Шиғырҙар. .............................21
**Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.** Төркиәлә шиғриәт байрамдары. ............26

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Мансаф Ғиләжев.** Ҡәнзәфәр таштары.
Роман. Башы. ...................................................................................32
**Рәйлә Сабитова.** Артыҡбикә. Повесть-монолог. Аҙағы. ......92

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Евгений Шишкин.** Ғәйеплеме ни мин? Драма. ........................121

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Ҡарлуғас Ғөбәйҙуллина, Айгөл Алтынбаева,**
**Илһөйәр Сәлихова, Айнур Фәхретдинов.**
Әҙәбиәткә – йәштәр күҙлегенән. ....................................................158

*Бөйөк Еңеүгә – 68 йыл!*

**Фәрит Вахитов.** Снайпер. ............................................................169
**Марсель Сабирйәнов.** Бирешмәнек. ............................................181
**Гөлсөм Хисмәтова.** «Батырҙарҙың да батыры» ............................183

ТЕРЕ ХӘТЕР

**Гөлнур Ҡасҡынова.** «Түгелеп илап ҡалдым...» ............................185

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*К 68-летию Великой Победы!*

**А. Магазов.** Пусть человечество бережет само себя!

ПОЭЗИЯ

**Т. Юсупов, М. Гафуров, Халида Миграни.** *Стихи.*
**Ф. Губайдуллина.** Поэтические вечера в Турции.

ПРОЗА

**М. Гилязев.** Камни Канзафара. *Роман. Начало.*
**Р. Сабитова.** Отчуждение. *Повесть-монолог. Окончание.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**Е. Шишкин.** Виноват ли я? *Драма.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**К. Губайдуллина, А. Алтынбаева, И. Салихова, А. Фахретдинов.** Литература с точки зрения молодых.

*К 68-летию Великой Победы!*

**Ф. Вахитов**. Снайпер.
**М. Сабирьянов.** Не пали духом — выдержали.
**Г. Хисматова.** «Настоящий герой».

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Г. Каскинова.** «Рыдала, прощаясь...»

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәскә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

*Бөйөк Еңеүгә – 68 йыл*




# КЕШЕЛЕК ҮҘЕН ҮҘЕ ҺАҠЛАҺЫН!



Минең быуын бала саҡтан уҡ «Беҙ – тыныслыҡ яҡлы!» тигән аһәңле лозунг шауҡымында үҫте, кәрәк саҡта илебеҙ изге саҡырыу хаҡына яу юлдарында миллион-миллион ҡорбандар бирҙе. Орандай яңғыраған ошо саҡырыу бөгөн дә иң актуаль халыҡ-ара сәйәси мәсьәләләрҙе күҙ уңында тоторға әйҙәй. Был өндәмә фронт һәм тыл ветерандарының сығыштарында әйтелә, фронтовиктарҙың окоптарҙан яҙған хаттарында телгә алына, ә ул хаттар ғаилә архивтарында, музейҙарҙа ҡәҙерләп һаҡлана.

1945-тең 9 майы... 1941-ҙең 22 июне... Ике дата ла оноторлоҡ түгел! Береһе – сикһеҙ шатлыҡ символы, икенсеһе – бөтмәҫ хәсрәт... Эйе, беҙ һуғыш афәттәре хаҡында китаптарҙан уҡып йә иһә кинофильмдарҙан ҡарап ҡына фекер йөрөтмәйбеҙ, шуға ла тыныслыҡ тигән бөйөк һүҙ ғәзиздәрҙән-ғәзиз һанала.

Бер уйлаһаң, бөтә донъя тарихы иҫәпһеҙ-һанһыҙ сыуалыштарға, әхлаҡи ҡиммәттәрҙең кәмегән, хатта юҡҡа сыҡҡан осорҙарына, әллә ниндәй революцияларға, фашизмдың баш ҡалҡытыуына тығыҙ бәйле. Ғалимдарҙың хеҙмәтенә күҙ һалһаң, иҫең китер: биш мең йыл дауамында кешелек донъяһы ни бары ике йөҙ ҙә ҡырҡ өс көн генә яуһыҙ-дауһыҙ тормош көткән. Ғәжәп бит, бер йылға ла тулмай! Һөҙөмтәлә үҙенән-үҙе һорау тыуа: «Беренсе һәм Икенсе Бөтә донъя һуғыштарын кисергән кешелек ниңә һаман да һабаҡ алманы икән? Ни өсөн әле тегендә, әле бында ҡан ҡойғос ыҙғыштар ҡуба, ниңә ул йәки был илдә ракета-ядро арсеналы ишәйә?»

Әлбиттә, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы барса илдәрҙең үҙ-ара тыныс, килешеп-һыйышып йәшәүе өсөн байтаҡ саралар күрә, әммә яңы донъя һуғышы ҡупмаҫ, тип тә өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Сириялағы ҡатмарлы хәлдәр, Төньяҡ Корееяның Көньяҡ Кореяға, бер ыңғайҙан күршеләренә атом бомбаһы менән янауы, Пакистандың, Ирандың, Һиндостандың әленән-әле янъяллы белдереүҙәре тотош цивилизация һәм глоболизация көстәрен хафалы

хистәргә сорнай. Ул ғына ла түгел, массовый юк итеү ҡоралдарының арта барыуы һөҙөмтәһендә йәшел бишегебеҙ – Ер планетаһы Йыһанда тупланған зарарлы болоттар менән бәрелешеп, бөтөнләй юкка сығыуы ихтимал. Хәлбүки, кешелеккә ошондай мәхшәрҙәрҙең оло афәт килтерәсәге Ҡөрьән, Библия кеүек мөҡәддәс китаптарҙа ла иçкәртелә. Ә бит кешелеккә аҡыл, яҡты тойғолар, юғары әхлаҡи ҡиммәттәр өләшкән Бөтә Донъя Аңы, нисек кенә фекер йөрөтһәк тә, йәшәү һәм үлем ҡыçаларында камиллаша барыуына, хәҡиҡәткә ынтылышына ишара яһай. Ҡыçкаһы, планеталар хәрәкәте һәм йондоҙҙар системаһы серҙәренә тәрәнерәк төшөнә барған һайын, бер яҡтан, йәшәү, зиһен сиктәре киңәйһә, икенсе яҡтан, йәшәйештең һәләкәт менән йәнәш икәнлегенә нығыраҡ инанабыҙ. НАТО базаларының ишәйеүе, байтағының илебеҙ сиктәренә яҡыная барыуы уйландырмай ҡалмай.

Рәсәй дәүләтенең һуңғы осорҙа халыҡ-ара хәлдәрҙе көйләүгә йүнәлтелгән етди аҙымдары, оборона өлкәһендәге мутлыҡтарға ҡарата күргән саралары, тәбиғи, күңелдәргә ышаныс, өмөт саҡкылары өçтәй. Күптән түгел Рәсәй Федерацияһы Президенты, Баш командующий В. В. Путиндың «көтөлмәгән» фарманы буйынса Ҡораллы Көçтәребеҙҙең байтаҡ подразделениеларында ҡоласлы хәрби учениелар уҙғарылыуы, личный составтың һәм техникабыҙҙың ярайһы яҡшы билдәләр алыуы, йәшермәйем, минең – хеҙмәт һәм һуғыш ветеранының – йөрәгендә ғорурлыҡ уятты. Тимәк, беҙ – һаман да тыныслыҡ яҡлы, кәрәк икән – Ватан, хатта ки донъя именлеген намыç менән һаҡларға булдыҡлыбыҙ һәм бурыслыбыҙ. Был хаҡта В. В. Путин Германияға эш визиты менән барғанында ла телгә алды.

Совет кешеләренең, шул иçәптән Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең, революцияға тиклемге, йәнә Беренсе һәм Икенсе Бөтә донъя һуғыштары араһындағы ҡатмарлы тормошон үҙемдең «Үрге Димдә ай ҡойона» исемле трилогиямда ижтимағи-социаль юçыҡта ентекле генә һүрәтләгәйнем. Әйткәндәй, романдарымда Хоҙай һүҙенә, Хаҡ Тәғәлә фәһеменә апаруҡ йыш мөрәжәғәт иттем. Әлеге фекерҙәрем дә шундағы фәлсәфәгә ауаздаш. Сөнки Йыһан – ул Бөтә Донъя Аңы, кешелек иһә – Йыһандың бер өлөшсәһе генә. Кем әйтмешләй, ай-һай, бер үк тырмаға ҡабат басыуҙары уғата ҡиммәткә төшмәçме?!

**Азат МАҒАЗОВ,**
**яҙыусы,**
**отставкалағы авиация полковнигы.**

**Тимер**
**ЙОСОПОВ**

# *Эй, ғүмерҙәр!..*

***

*Арабыҙҙан һалҡын елдәр иҫте,*
*Йөрәк өшөй, һыуыҡ...*
*Елдәр иҫә,*
*Таша инде хәҙер*
*Йыһан тигән ҡыуыҡ...*
*Һалҡын елдәр,*
*Түбәләрҙә ҡунып,*
*Болоттарҙы һүтә.*
*Арабыҙҙа һаман көн имшемәй,*
*Ә ғүмерҙәр үтә...*

***

*Күҙҙәренә салынғанда*
*Һыуҙан сыҡҡан быу — ана,*
*Ерле юҡтан йыуана,*
*Торғаны бер диуана.*
*Ауыҙын асып тора,*
*Елкәһен ҡашып тора.*
*Көтмәгәндә енләнә,*
*Үҙ алдына һөйләнә,*
*Ҡапыл йылмая икән,*

---

*Тимер Йосопов (1938) Дыуан районы Әпсәләм ауылынан. БДУ-ны, Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙы тамамлай. Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе 75 йәше менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*Хәлеме ни көйләнә...*
*Көҙҙәре яҡынлаһа ла,*
*Сәскәләргә бал төшкән.*
*Төпһөҙ күкте тал тишкән,*
*Сәстәренә сал төшкән.*
*Ҡоштар оса ҡамылдан,*
*Тертләйме ни ҡапылдан.*
*Уйланып тора оҙаҡ,*
*Яҙған һымаҡ аҡылдан.*
*Болот — күктең еләне,*
*Күңеленме биләне.*
*Бер малайҙы һөйә-һөйә,*
*Уға бәхет теләне.*
*Аңҡы-тиңке атлаһа ул,*
*— Аҡһаҡ, — тиҙәрҙер инде.*
*Шыр аҡыллылар уны:*
*— Ахмаҡ, — тиҙәрҙер инде.*
*Һулыған бер гөл күрһә,*
*Ҡаштарын төйә инде:*
*— Имгәнгән күҙ нурым, — тип*
*Йәндәре көйә инде.*
*Уның өсөн был ҡояш*
*Күктә яҡты миң бит ул.*
*— Кем?— тиһегеҙ һеҙ уны,*
*Был мин бит ул, мин бит ул.*

## Яланда

*Йырта-йырта елдәрҙе,*
*Һыҙғанып та еңдәрҙе,*
*Үткәрәбеҙ яландарҙа*
*Иң-иң оҙон көндәрҙе.*
*Бала саҡ туғайҙары,*
*Бала саҡтың өндәре.*
*Бесән йыя инек бында,*
*Йылдай, оҙон көндәре.*
*Кемдәре һуң,*
*Кемдәре,*
*Былбылмы ни — телдәре...*
*Күҙҙәре ялтыр-йолтор,*
*Үҙҙәре ялбыр-йолбор,*
*Салбары һалбыр-һолбор,*
*Арбаһы ҡалдыр-ғолдор.*
*Был көн —*
*Әй, оҙон — йылдыр...*
*Был малайҙар тигәнең,*
*Сылтыраймы йүгәнең,*

*Бер-бер артлы аттарҙа*
*Тарттырабыҙ күбәһен.*
*Ҡәбәнгә ир бесән атһа,*
*Тишерҙәй күк түбәһен.*
*Тик һаман, эсте өҙөп,*
*Ҡоштары һайрай талда.*
*Тик ағайҙар юҡ янда,*
*Тик еңгәләр юҡ янда,*
*Тик апайҙар юҡ янда...*
*Бала саҡ — ҡасҡан кейек,*
*Һауалар хәҙер бейек,*
*Елдәре үтә бейеп...*
*Бер яңғыҙым яланда*
*Торамын башты эйеп...*

***

*Тауҙарымда ҡанат кирәм,*
*Бында ҡотло тағаным.*
*Күҙ менән ҡаш араһында*
*Ялмап алам яланын.*
*Томандары ҡалҡына ла*
*Быуҙай яндыра икән.*
*Ҡылдай нәҙек кенә салғым*
*Һыуҙай алдыра икән.*
*Ҡоштай талпыныуҙарым,*
*Уттарға ҡабыуҙарым.*
*Ҡоласымды кирә-кирә,*
*Эй, бесән сабыуҙарым.*
*Шундай ҡуйы аҡтамырҙы*
*Ҡайырып алыуҙарым...*
*Иҫемә лә инеп сыҡмай,*
*Эй, арып-талыуҙарым...*
*Күкһелләнеп ятҡан һыртты*
*Боландай үтер инем.*
*Ҡылдай салғым үткер ине,*
*Үҙем дә үткер инем...*
*Йылдар уҙған,*
*Шул уҡ тауҙар.*
*Елдәре әсе үттәй.*
*Сал бөркөттәй,*
*Ҡанат кирәм,*
*Тик салғым ғына үтмәй,*
*Уттар сығармай күгем дә,*
*Уттар сығармай күҙем.*
*Салғыма һис тел тейҙермәм,*
*Үтмәҫләнгәнмен үҙем.*

*Яланымда ярыламын*
*Ғүмеремдең көҙөндә,*
*Ярай әле, ҡояш уйнай*
*Минең салғы йөҙөндә.*

***

*Шәп йырсының мин янында торам —*
*Беҙҙең яҡтың һайрар ҡошолор ул.*
*Был инәлтә.*
*Бер ағайым әйтә:*
*— Ә һин йырла, һиңә ҡушылыр ул.*
*Йыр тигәндә ялындыраммы ни,*
*Дуҫ ҡушылды,*
*Йыһан тыңлаймы ни,*
*Шишмәләрең әллә зыңлаймы ни!..*
*Һабантурғай шул саҡ*
*Сырлаймы ни.*
*Бөгөлә-һығыла*
*Мин дә йырланым бит,*
*Һыйғыр ғына талдай елберләнем.*
*Ағай ҡолағыма шыбырлай бит:*
*— Етәр һиңә,*
*Арыу дөңгөрләнең...*
*...Оятымдан уйылырҙай булдым,*
*Инәйемме иҙән ярығына?*
*Дуҫым йырлай,*
*Һаман шишмә зыңлай,*
*Шишмә таша,*
*Һыймай арығына.*
*Телем ҡатҡан,*
*Тауыштарым ҡайтҡан,*
*Туламайым ғүмер улағында.*
*Яндарымда моңло дуҫым да юҡ,*
*Йыры зыңлай һаман ҡолағымда.*
*Хәтһеҙ ара үттем,*
*Хәтһеҙ ара,*
*Хәтәр дауылдарҙа елберләнем.*
*Йыр башлаһам,*
*Ел шыбырлай миңә:*
*— Етәр һиңә,*
*Арыу дөңгөрләнең...*

***

*Йондоҙҙарҙы икәү күҙәтәбеҙ,*
*Дөрт тараф та асты ҡосағын.*
*Йәйҙең йылы еле бер иҫкәйне,*
*Ҡабыҙҙы бит йондоҙ усағын.*
*Һыуҙай яҡты икән бөгөн төнө,*

*Йондоҙҙары эре,*
*Орлоҡтай.*
*Алыҫтарҙа ялағайы ялтлай,*
*Хәле бөткән уттай, офоҡта.*
*Йыһан тып-тын,*
*Елдәр ҡуҙғалыр ҙа*
*Йондоҙҙарҙың ҡуҙын таратыр.*
*Туҙғып киткән кҫстәй,*
*Ғаләм гөжләй.*
*Оҙаҡламай инде таң атыр.*

***

*Йоҡлаймы Иҙелең,*
*Йоҡлаймы батырҙай?*
*— Етте! — тип,*
*Уянып,*
*Тик бер һҫҙ ҡатырҙай.*
*Һиҙенде, ахыры,*
*Гел ятып ялҡҡанын.*
*Кҫтәрҙе өҫтөнә*
*Яп-ялтыр ҡалҡанын.*
*Иҙел дә баҫылған,*
*Тҫгел ул кисәңге.*
*Тулҡында сайҡала*
*Ҡалҡандың киҫәге...*

## Яр буйлап...

*I*

*Йырғанаҡтар гөрләгәндә*
*Сәсәп цҙән ҡарҙарына,*
*Ҡилеп сыҡҡан бер уҙаман*
*Бала сағы ярҙарына.*
*Аҡылыңдан яҙҙыра шул*
*Был яҙҙарың, тим, нишләтә.*
*Үҙ алдына һөйләнә бит,*
*Урын тапмай ул эшләпә.*
*Кҫк тулҡындар ҡағыламы*
*Аяғыңдың аҫҡайына.*
*Яҙ етһә лә*
*Һис иремәҫ*
*Ҡарҙар ҡунған башҡайына.*
*Келәп һала,*
*Уйланамы,*
*Һағыштары әллә бөрә?*
*Ҡулын болғай икән дәһә,*
*Әллә кемгә сәләм бирә.*
*Ҡаршы ярҙа,*

*Күҙен ҡыҫып,*
*Ҡап-ҡара бер малай тора,*
*Иҫе китмәй донъяһына,*
*Килештереп ҡалай тора,*
*Ә уҙаман шаҡ ҡатҡан шул,*
*Сал сәстәрен елдәр үрмәй.*
*— Һаумы? — ти ул,*
*Малай уны*
*Әллә күрә, әллә күрмәй.*
*— Һаумы? — ти сал, —*
*Бала сағым,*
*Ишетмәйме тауышҡайым.*
*Һине бар, имеш, тип белмәй,*
*Күрмәй яңы танышҡайың.*
*— Һаумы әле, бала сағым,*
*Батҡанһың бит туҙандарға.*
*Малай ғәмһеҙ,*
*Малай өнһөҙ,*
*Тауыш бирмәй уҙғандарға...*
*Сал уҙаман,*
*Ҡайттыңмы ни*
*Был тарафҡа көҙҙәреңдән?*
*Түҙем генә бирһен инде,*
*Йәш атыла күҙҙәремдән.*
*Йәш атыла күҙҙәремдән,*

*Сал уҙаман — мин үҙем бит.*
*Йәшләнгән ике күҙем бит,*
*Ярай әле, мин түҙем бит,*
*Ҡайтыр төйәгем — көҙөм бит.*

*II*

*Яҙҙар шаулай,*
*Ташҡын таша,*
*Сыҙай алмай ярһыуыма,*
*Ара үтәм,*
*Сәпелдәтеп*
*Баҫа-баҫа ҡар һыуына.*
*Әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан*
*Был егет тә таныш, буғай.*
*Арғы ярға баҫҡан да ул,*
*Кемгә икән ҡулын болғай?*
*Әллә инде сырай һытам.*
*Был егетең таныш бит ул,*
*Әллә үҙен сырамытам...*
*Тыуған ерҙә усаҡ һүнгән,*
*Ерем — йылы бауыр миңә.*

*Баш әйелә,*
*Түбәмдәге*
*Ҡарҙар шундай ауыр миңә.*
*Бөтә донъя — хәрәкәттә,*
*Тик алдымда — таш тын икән.*
*Үткәндәр менән арала —*
*Йылдар икән,*
*Ташҡын икән.*
*Ә бер малай*
*Туғай буйлап*
*Арғымаҡта бара елеп.*
*— Һау бул, — тиеп*
*Ҡулын болғай*
*Арғы ярҙа ҡара егет...*

## Ни ҡылырһың?

*Ҡыйралып та ятты күпме эштәр,*
*Сабырлыҡтың ҡалдым сиктәрендә.*
*Аҙмы өмөттәрем янды минең*
*Ялтыраған кәсә төптәрендә.*
*— Эш — бүреме, ҡасмаҫ, — тигәнмен мин,*
*Йәнәһе лә, инде үсем ҡанды.*
*Ә шулай ҙа*
*Һаман эсем янды,*
*Тауҙай өйөлгән дә эшем ҡалды.*
*Ярай әле, үстәремә килдем,*
*Һемерере күпме һемерелгән.*
*Ҡыйралып та ята ҡырҡ эшем, тим,*
*Өмөттәрем инде емерелгән.*
*Аңҡы-тиңке килеп*
*Атлағанда,*
*Ҡайтыр юлдарыма ярҙар ауған,*
*Аҙмы эштәрем, тим, осланмаған,*
*Осланмаған эшкә ҡарҙар яуған.*
*Күңел тынысланды,*
*Эй, йылмайып,*
*Һөйгән йәрем керҙе төштәремә.*
*Ҡайтып булмай,*
*Юҡһа саңдар ҡуныр*
*Тамамланмай ҡалған эштәремә.*
*Күнеп бөттөм, ахыры,*
*Лаңҡылдаған*
*Уҫал елдәрҙең был ерҙәренә.*
*Сабырлыҡ, тим,*
*Түҙемлек, тим, бирһен,*
*Шағирҙарҙың, тимен, йәрҙәренә.*
*Яҡты яҙҙар көтәм,*

*Ғүмер буйы*
*Хәстәрем бар йәнде өтөп торған.*
*Бер уйлаһаң,*
*Ҡалай рәхәт миңә:*
*Эштәрем бар мине көтөп торған.*
*Өлгөрөргә кәрәк,*
*Өлгөрөргә,*
*Етә ләһә икән эңерҙәрем.*
*Эшең осланһа һуң, —*
*Ни ҡылырһың,*
*Осланыр ҙа ҡуйыр ғүмерҙәрең.*
*Осланыр ҙа ҡуйыр ғүмерҙәрең...*

***

*Йәшлегемдең тарафына*
*Тағы ла юл алайым.*
*Әй буйҙарына төшәйем,*
*Төшәйем, юғалайым.*
*Ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскәләрҙе*
*Алдарыма өймәгеҙ.*
*Тәүге йәрҙәр ятҡа ҡала,*
*Минең төҫлө һөймәгеҙ.*
*Ҡәпәсемде атып бәрҙем,*
*Тотонғандай дәү эшкә.*
*Болоттарҙы ярып үттем,*
*Әйләнгәс тә дәрүишкә.*
*Хатта айға юлланғанмын*
*Һөйөү тигән ғазаптан.*
*Бәрелгәнмен, һуғылғанмын —*
*Иҫкә килдем аҙаҡтан.*

***

*Өмөт — йылдар шырлығында*
*Ялҡын тигән бер тейен.*
*Тәүге йәремдең исеме —*
*Йөрәктә утлы төйөн.*
*— Ел дә үтмәҫ, — тигәйнең һин, —*
*Икебеҙҙең араға.*
*Ымһындырҙың,*
*Ярам асыҡ,*
*Ҡағылма һин яраға.*

***

*Тыңлап ҡына ултырғанда*
*Ел-дауылдарҙың әрен,*
*Алдарыңа килеп баҫа*
*Йәшлектә һөйгән йәрең.*
*Тәүге йәрең...*
*Ҡараштары*

*Йыһандың нурын йыйған...*
*... Икенән үргән толомо,*
*Әйтерһең, — ике йылан.*
*Буй тигәне хәтәр ҡойон, —*
*Өмөт гөлөн урыусы.*
*Ике ҡашы — ике һөлөк —*
*Йөрәк ҡанын һурыусы.*
*Туҡта, туҡта,*
*Ни һөйләйһең,*
*Юғалтма һүҙ айышын,*
*Үҙгәрт уйҙың ағышын,*
*Күңелеңдә сайпыла бит*
*Күҙәләмә һағышың.*
*Һинең алда ғәйеплемен,*
*Ярлымын да ғәрлемен.*
*Бер уйлаһаң — һаман яңғыҙ,*
*Бер уйлаһаң — йәрлемен.*
*Үткәндәргә ҡарай еләм,*
*Юлҡайҙарым уң булыр.*
*Һине күреп ҡалайымсы,*
*Ә күрмәһәм — һуң булыр...*
*Ашығайым,*
*Тауҙар тағы*
*Өҫтөнә ҡар ябына.*
*Һуңламайым...*
*Күсеүем бар*
*Донъяның аръяғына...*
*Табышырмы, ҡауышырмы*
*Төнөммө был — көнөммө?*
*Яҙмышмы һуң, яңылышмы,*
*Төшөммө был — өнөммө?*
*Йәшлек ҡояшы ҡалҡынды,*
*Эстәремде ут алды.*
*Төшөммө һуң, өнөммө һуң,*
*Донъялары буталды.*
*Ҡара уттар өтә мине —*
*Күҙҙәреңдең ҡараһы.*
*Шундай татлы ғазап икән*
*Төш менән өн араһы.*

***

*Эй, ғүмерҙәр,*
*Эй, ғүмерҙәр,*
*Теременме ни һаман?*
*Минең дә, тим, тыуғаныма,*
*Тулғаныма мең заман...*
*Күкте йондоҙҙай тултырып,*
*Балҡып булмаҫтыр инде.*
*Ғаләмдәге йәш ай төҫлө*

*Ҡалҡып булмаҫтыр инде.*
*Ҡурғаш һымаҡ болоттарҙан*
*Талды инде ҡулбашым.*
*Өшөйөм,*
*Ниңә йылытмай*
*Ҡояш тигән ҡорҙашым?*

## Ҡурай

*Һығылып та сыҡты ҡурай моңо,*
*Иңрәп сыҡты күңел түренән.*
*Тояҡтарҙан уттар сәсрәйме ни,*
*Яу уҙамы тауҙар үренән.*
*Һығыла ла иңрәй ҡурай моңо,*
*Бар тирә-йүн моңға тулышҡан.*
*Аҫыл ирҙәр һуғышҡамы инә,*
*Әллә сыға микән һуғыштан?*
*Иңрәп кенә китә ҡурай моңо,*
*Быуаттарҙан килгән зар микән?*
*Һулышҡайы ниңә өҙөлөп китә,*
*Һулышҡайын быуған дар микән?*
*Һығылып та сыҡты ҡурай моңо,*
*Урап алды Урал итәген.*
*Уҙғандарҙан урап ҡайтаһыңмы,*
*Уҙғандарға әллә китәһең?*
*Һығылып та сыҡты ҡурай моңо,*
*Наҙға күмеп яҙҙың иртәһен.*
*Иҫкә килгәс, бер саҡ*
*Иртәгәндең*
*Тәҙрәһенме әллә ситтәһең?*
*Ҡурай, ана, дәртле көйҙәр һуҙа,*
*Көйгә килтерҙе бит күгемде.*
*Моңдан ташам,*
*Һауаларға ашам,*
*Моң тулҡыны сайҡас күңелде.*

## Ваҡыт

*Был донъяла аяуһыҙы Ваҡыт икән,*
*Был донъяла Ваҡыт икән бәғерһеҙе.*
*Һындыра ла*
*Һине талдай бөгә икән,*
*Уның өсөн әҙәм икән кәҙерһеҙе.*
*Үлем белмәҫ,*
*Юғалмаған бер саҡта ла,*
*Кем тиһегеҙ?*
*Ваҡыт икән кәберһеҙе.*
*Ат эҙләгән малай инем,*
*Бабай итте*
*Ни арала ғына шулай кәҙерһеҙе.*



**Марсель ҒАФУРОВ**

## *Әсәй*

*Леп-леп килгән йөрәк менән*
*Әсәһен һөйә малай.*
*Һөйөүе таңғы ысыҡтай,*
*Бешеп еткән алмалай.*

*Үҙе еңмеш, текә маңлай —*
*Үҙ аршыны һәр нигә.*
*Әсәһе ябай, ә уға*
*Тиңә-тиңдәй Тәңрегә.*

*Нурлы йорт, ҡояшлы күгең —*
*Әсәйең биргән бүләк.*
*Көтмәгәндә иңкә төшөп,*
*Мең ҡат өҙөләр үҙәк.*

*Йылдар үтер... Был тойғонан*
*Бөйөк эштәр яралыр.*
*Һөйөү менән генә кеше*
*Кеше булып ҡалалыр.*

## *Тылсым әйәһе*

*Ап-аҡ һөттән биҙрә зыңлай.*
*Юҡ, зыңламай — ул йырлай.*
*Әсәй сығарған был моңдо*
*Донъя таң ҡалып тыңлай.*

---

*Марсель Ғафуров (1933) Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай, армияла хеҙмәт итә. Оҙаҡ йылдар республика матбуғатында эшләне. Әҙәбиәткә шиғриәт аша килде. Хикәйә, очерк жанрында ла әүҙем эшләй. Рус телендә яҙа.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 80 йәше менән ҡотлайбыҙ.*

*Әсәйҙең ҡулына һеңгән*
*Икмәк еҫе, һөт еҫе.*
*Тормош бары ошо еҫтән*
*Миңә башлана төҫлө.*

*Итәгеңә йәбештем дә*
*Тыпылдап атлап киттем.*
*Ҡулыңдың йылыһын тойоп,*
*Күпме юлдарҙы үттем.*

*Офоҡтарым киңәйҙеләр,*
*Бейегәйҙе күктәрем.*
*Ерҙә һин булғанға, әсәй,*
*Йәшен булып күкрәнем.*

*Һинең мөғжизәле ҡулың —*
*Тылсым ғына торғаны.*
*Ҡулдарыңа башын һалһын,*
*Ир етһә лә, улының.*

## Хәтер

*Олондарҙа әле һут йүгерә,*
*Иртә әле япраҡ ҡойолорға.*
*Тик миҙгелдәр, кинәт яңылышып,*
*Ҡотоп елен ҡушты туҙынырға.*

*Ҡарҙар яуҙы...*
*Усаҡ ялҡындары*
*Ялпылданы ап-аҡ түтәлдәрҙә.*
*Уйлыларҙы ҡыҙыл ҡәнәферҙәр*
*Алып ҡайтты алыҫ үткәндәргә.*

*Оҙаҡ яталманы был тәүге ҡар —*
*Йылы ине әле ерҙең өҫтө.*
*Йәйҙе тиҙ үк онотмағыҙ, тиеп*
*Ҡәнәферҙәр әйтәләрҙер төҫлө.*

*Йәйҙе генә түгел...*
*Күҙ алдында*
*Һуғыш үткән ҡышҡы ҡанлы ялан...*
*Ҡанлы яландарҙан әсәйҙәрҙең*
*Сәскә кеүек мәле салланған.*

## Ҡалҡан

*Хыялында малай һәр саҡ*
*Йөҙҙө аҡ болоттарҙа.*
*Ҡулсатырын ҡыҫып тотоп,*
*Һикерҙе ҡыйыҡтарҙан.*

*Йылдар үтте, егет булды —*
*Күктән ҡоштай атыла.*
*Ергә төшөп етер-етмәҫ*
*Парашюты асыла.*

*Йөҙөнсө ҡат...*
*Ә әсәһе*
*Меңенсе ҡат үләлер.*
*Улын һәр саҡ сабый итеп,*
*Ҡошсоҡ итеп күрәлер.*

*Аптырарһың, был әсәйҙәр —*
*Ҡуян йөрәкле көйгә —*
*Нисек бөркөт үҫтерәләр*
*Ҡалҡан булырҙай илгә?!*

## *Атай*

*Яугир ине...*
*Шиғриәттән*
*Утыҙҙа уҡ ситләште.*
*Мин генә ул, шиғыр тиеп,*
*Бөгөнгәсә серәштем.*

*Шиғыр уйлап сығарылмай,*
*Ул — диңгеҙҙәге балыҡ:*
*Һәләтең булһа, тотаһың —*
*Йөрөмәйһең алданып.*

*Шағир икенсел булалмай,*
*Был һөнәр түгел — булмыш.*
*Тормош тигән бәйгеләрҙә*
*Ижад — яҙмыштан уҙмыш.*

*... Һуғыш бөткән, тип торманы,*
*Сыҡты ул алыштарға.*
*Ҡаты талаптары менән*
*Һыйманы ҡалыптарға.*

*Һынап ҡарай һүрәтенән,*
*Ҡартайырға уйламай.*
*Йәп-йәш кенә яугир егет*
*Алдында мин — бер малай.*

## *Атай кәңәше*

*Сиселмәҫлек булһа алгебраның*
*Мәсьәләһе, көн-төн баш ватып,*
*Атайыма барам йүгерептәр:*
*«Тешем үтмәй...» — тиеп, аҡланып.*

*Ә ул күҙ һала ла китабыма:*
*«Ҡабаланма, уйлан яҡшылап!*
*Еңел хәл ителһә, эшме ни ул —*
*Һәр бер нәмә була ҡатлы-ҡат».*

*Ҡатмарлы ла тормош хәҡиҡәтен*
*Ғүмерлеккә уйҙы күңелгә.*
*Яҙмышыма һис тә зарланманым,*
*Көйләнмәнем бер ҙә еңелгә.*

*Ауырлыҡтар инде иҙә төшһә,*
*Хәтерләйем: «Уйлан яҡшылап!*
*Еңел хәл ителһә, эшме ни ул —*
*Һәр бер нәмә була ҡатлы-ҡат».*

### *Күрше*

*Күрше баҡсаһына «һунар» өсөн*
*Кесерткәнен байтаҡ татыным.*
*Әйтер ине алмағас хужаһы:*
*«Тапмай ҡалмам яза ҡатыһын!»*

*Бына бер саҡ, көлөмһөрәй төшөп,*
*Саҡырҙы бит үҙе баҡсаға.*
*Балланып та бешкән алмалары:*
*«Мине, мине ал!» — тип баш ҡаға.*

*Ни эшләптер, татын һис тапманым*
*Алланып та торған алманың.*
*Ҡойма аша алғандары менән*
*Нисек сағыштыра алаһың?!*

*Теге мәлдә яугир ҡаны ташты,*
*Дыуамаллыҡмылыр, нимәлер...*
*Һәр малайҙа осрар был ҡылыҡты*
*Ҡабаландан: «Насар!» — тимәгеҙ.*

*Күрше ағайыма рәхмәт —*
*Аҡыллы булған икән.*
*Миңә ғүмергә етерлек*
*Бирәгәй һабаҡ биргән.*

*Оноттом мин ҡойма аша*
*Баҡсаға йөрөү «юл»ын.*
*Ҡапҡаһы асыҡ булғанда*
*Кәрәкмәй быҙдай уйын.*

**Руссанан Фәнил КҮЗБӘКОВ тәржемәләре.**



**Хәлиҙә**
**МИҺРАНИ**

## *Ябай шағирә*

*Ярай, һинеңсә булһын: мин — яп-ябай шағирә,*
*Инде ни хәл итәһегеҙ: түгелмен ҡатын-түрә.*
*Ынтылмайым түрәлеккә, түгелмен аҡса ҡоло,*
*Шағирәлек — минең өсөн бәхет бит ул иң оло.*
*Бәлки, тормош тәгәрмәсем абына ла һөрөнә*
*Баралыр ҡара ерҙән шағырлап, кәлтер-көлтөр,*
*Әммә рухым — осар ҡош, һөйә гел иркенлекте,*
*Ҡанатым — илһам, йәшәүем — болотһоҙ зәңгәр күктер.*
*Мин бирәүгә лә баш түгел, үҙем дә баш эймәйем,*
*Шөкөр итәм хәләленә, харам ризыҡ еймәйем.*
*Бар шөғөлөм — шиғыр яҙыу, мин башҡаны белмәйем,*
*Шағирәлегемде Йыһан бүләгенә тиңләйем.*

## *Ауылыма мәҙхиә*

*Күҙ алдымда бейек тирәктәрем,*
*Ситән буйындағы кесерткән —*
*Барыһын да өҙөлөп һағындым мин,*
*Шул ауыл бит беҙҙе кеше иткән.*

---

*Хәлиҙә Миһрани (1957) — Көйөргәҙе районы Бәләкәй Муса ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Район мәктәптәрендә уҡытыусы, «Көйөргәҙе», «Юшатыр» район-ҡала гәзиттәрендә тәржемәсе, хәбәрсе, «Китап» нәшриәтендә мөхәррир булып эшләй.*
*Үҙнәшер ысулы менән сығарған шиғыр йыйынтыҡтары авторы.*

*Тар тыҡрыҡтан һыуға барыуҙарым,*
*Бесәй үләнендә аунауҙар,*
*Текәтауҙан сана шыуыуҙарым,*
*Олотауҙа еләк йыйыуҙар;*

*Аҡморонда киске уйындарҙа*
*Гармун моңдарына бейеүҙәр,*
*Тәүге мөхәббәтем ҡосағында:*
*«Айырылмайыҡ мәңге!» — тиеүҙәр —*

*Береһе лә онотолмай бит ул,*
*Һәммәһе лә яҡын күңелгә.*
*Олоғайған һайын йыш иҫләүҙәр*
*Һис тә түгел, ахыры, тигенгә.*

*Тыуған тупраҡ тарта, тиеүҙәре*
*Дөрөҫ икән, дөрөҫ, әйгенәм!..*
*Үҙем ҡайталмаһам, һис юғында*
*Уйым менән ҡайтып әйләнәм.*

## Һинд йырҙары

*Һинд йырҙары Һималайҙай бөйөк,*
*Ганг кеүек киң һәм тәрәндәр.*
*Иҫ киткес моң! Хайран ҡалдырырлыҡ —*
*Башҡорт йырҙарына бәрәбәр.*

*Һиндтар ҙа бит, тыңлап торһаң әгәр,*
*«Мөхәббәт» тип йырлай беҙҙеңсә.*
*Хистәребеҙ, уйҙарыбыҙ уртаҡ,*
*Көн итһә лә ҡәүем үҙенсә.*

*Башҡорт һымаҡ, ул да гел йырлаған,*
*Бер илде лә баҫып алмаған.*
*Әҙәм Ғәлиәссәләмдән таралған*
*Барса халыҡ ерҙә бер туған!*

## Көҙәтеү

*Ҡыҙыл яҡут муйынсағы муйылдың,*
*Алтынланды еләне лә ҡайындың,*
*Йәшел камзулын ташламай шыршыҡай —*
*Һәр ҡайһыһы үҙенсә, һай, ҡупшыҡай!*

*Көҙгө тәбиғәт биҙәнде байрамса:*
*Ҡейенделәр, яһандылар барынса;*
*Ҡинәнделәр ҡышҡа керер алдынан,*
*Үкенмәҫлек булһын, типтер, һуңынан.*

*Бер төҫләләр ҡыш еткәстен бар(ы)һы ла:*
*Ап-аҡ кәфенлек буранда урана...*
*Ә яҙҙарын аҡ япманы ырғытып,*
*Яңы тормош башлай, башын ҡалҡытып.*

*...Кешеләрҙең яҙы-көҙө бер килә —*
*Үтеп киткәс, кире ҡайтмай һис кенә.*
*Матур йәшәйексе шуға гел генә —*
*Әҙәм ғүмере булалыр тик бер генә.*

*Япраҡта, сепрәктә эш тормай —*
*Күңел күркен һаҡлайыҡсы һис боҙмай.*
*Һин бит тәбиғәттең гүзәл емеше —*
*Үҙ-үҙеңде йәмһеҙләмә, эй, Кеше!*

## *Аҡсарлаҡ*

*Бер аҡсарлаҡ саңҡып оса ла һуң*
*Иҙел өҫтәрендә кәйелеп.*
*Эҙләй микән әллә бәхетен ул,*
*Йәшәгеһе килгәс һөйөләп...*

*Аҡсарлаҡҡа ҡарап, һыҙлай йөрәк:*
*Яңғыҙлыҡтан яман хәлдәр юҡ.*
*Мөхәббәтһеҙ ерҙә йәшәүҙәр юҡ,*
*Мөхәббәтһеҙ нурлы мәлдәр юҡ.*

*Аҡсарлаҡҡа аҡ бәхеттәр юрап*
*Ултырамын Иҙел ярында...*
*Ҡоштар осор, һыуҙар ағыр әле*
*Ерҙә Бөйөк Һөйөү барында!*

## *Тоҙйылғакай*

*Ғашиҡ булдым мәғрур тауҙарыңа,*
*Әсир итте һомғол шыршылар.*
*Йөрәгемә майҙай яғылдылар*
*Тоҙйылғала көмөш шаршылар.*

*Һәр ташыңды, һәр бер тамсыңды ла,*
*Тоҙйылғаҡай, тиҙ үк үҙ иттем.*
*Шат тауышлы йылтыр сылбырыңды*
*Иҫем китеп көн дә күҙәттем.*

*Инйәрҙәге йәрҙәр ғорур, тиҙәр,*
*Тауҙарҙан был, бәлки, күскәндер.*
*Күпме шулай Инйәр сибәрҙәре*
*Һөйөү ғазаптарын кискәндер.*

*Тоҙйылғаҡай, татлы һыуҙарыңды*
*Инйәреңә илтеп ҡояһың.*
*Әсе яҙмыш насип булмаһын тип,*
*Шифа һыуың эсеп ҡуямын.*

## ***О, Богема!***

*Ауыл һайын йөрөй Аҡмуллабыҙ*
*Арбаһына тейәп китаптарын.*
*Аптыраған көндән Рәми ағай*
*Мәмерйәлә яҙа хитаптарын.*

*О, Богема! Нимә үҙгәрҙе һуң?*
*Һин әле лә шулар хәлендәһең.*
*Бал да май эсендә йөҙөү ҡайҙа —*
*Хаҡ һүҙ өсөн ситкә тибеләһең.*

*«Рәссам ас булырға тейеш» икән —*
*Рухи аҙыҡ ауыҙ итәһегеҙ.*
*Ижад емештәрен тирә-тирә,*
*Был донъянан иртә китәһегеҙ.*

*Таҙарынһын өсөн бысраҡ донъя,*
*Юғары Көс һеҙҙе ебәргәндер.*
*Ығы-зығы* ипкә килһен өсөн,*
*Мәңге йәшәй һеҙҙең йәндәрегеҙ.*

---

*Ығы-зығы* — хаос, буталсыҡ.*

## *Яралы ҡош*

Рожденные ползать летать не могут.
М. Горький.

*Күктә түгел, ерҙә. Эх, ерҙә шул...*
*Ҡанһыраған, ана, батыр ҡош.*
*Ҡанаттарын елпеп ала ла ул,*
*Тик барыһы юҡҡа, бар(ы)һы буш.*
*Күҙкәйҙәрен бар(ы)бер мөлдөрәтмәй,*
*Ғорур бағып ҡарай донъяға.*
*Осоп китермен, тип өмөт өҙмәй,*
*Тыуып үҫкән яҡҡа — ояға.*
*Ҡанаттары, бәлки, уңалыр ҙа,*
*Төҙәлерме йөрәк яраһы?*
*Йәнгенәһе әле булған сакта,*
*Көрәшерлек хәле ярайһы.*
*Зәңгәр күкте иңләп осор бер саҡ,*
*Һоҡланырҙар ерҙә шыуғандар.*
*(Алмайҙар бит болоттарҙы ҡоса*
*Шыуыр өсөн генә тыуғандар).*
*Ауыҙ ҡыйшайтма һин, түбәндәге!*
*Яралы ҡош — түгел имгәк һис!*
*Бахыр, тиеп уны йәлләмәгеҙ —*
*Ер ҡорттары ғына ерәнгес.*
*Яралы ҡош — бар(ы)бер ҡанатлы йән,*
*Уйҙа күкте гиҙеү — шөғөлө.*
*Нисек кенә түбәнһетһәләр ҙә,*
*Күктәгесә ҡала фиғеле!*
*Күктәгесә ҡала фиғеле!!!*

# ТӨРКИӘЛӘ ШИҒРИӘТ БАЙРАМДАРЫ...

«Бөтә донъяны төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәте менән таныштырыу – беҙҙең иң юғары бурысыбыҙ», – тип әйткән бөйөк шәхес, ғалим, яҙыусы, халҡыбыҙҙың ғорурлығы Әхмәтзәки Вәлиди Туған.

... Беҙ бала саҡта олатайҙар «Донъяла ожмах иле бар, тиҙәр. Унда ағастар аллы-гөллө сәскәләр менән ҡапланған, төрлө-төрлө ҡоштар мөғжизәле тауыштар сығарып һайрар, алтын балыҡлы диңгеҙҙәр алтын ҡомло ярҙарын әленән-әле ялап таҙартып торор. Унда халыҡ телен бысратмаҫ, гел аҡтан кейенер...» – тип һөйләгәндәрен ишеткән бар ине. Тик бына ожмах илен, Һинд киноларын ҡарап, моғайын, ошо ишеткәндәр Һиндостандалыр, тип уйлай торғайным. Ә хәҙер инде, донъялар үҙгәреп ил сиктәре асылғас, бындай ожмах иленең Төркиәлә икәнлегенә инандым.

Беренсе тапҡыр төрөк халҡы вәкилдәре менән 1-се интернат-мәктәптә осрашырға тура килде. Уларҙың итәғәтле, тәртипле һәм бик тәрбиәле икәнлектәре күҙгә салынып тора ине.

Икенсе осрашыу бер нисә йыл үткәс Нефтекама ҡалаһында Башҡорт-төрөк лицейында булды. Балалар йәшәгән бинаның бер бүлмәһенә мине урынлаштырҙылар, һәм ошо уҡыу йортондағы илтифатлылыҡ, тәртип, таҙалыҡҡа минең иҫем китте. Беренсенән, бүлмәләрҙең бер генә ишегендә лә бик юҡ, ул уҡытыусылар йәшәгән бүлмәме, уҡыусыларҙың йоҡо бүлмәһе булһынмы – барыһына ла инергә мөмкин. Бөхтәлек, таҙалыҡ, ireклек, бер-береңә ҡарата ихтирам. Балалар иртәнге, төшкө, киске аштар араһында сәй бүлмәһенә инеп, батмус менән сәй-шәкәр, тәм-том алып, ял бүлмәләренә сығып сәй эсеп алалар, телевизор ҡарайҙар. Телевизион тапшырыуҙарҙы инглиз телендә лә ҡарарға мөмкинлек бар. Бүлмәләрҙә тик икешәр генә бала йәшәй. Мәктәптә лә белем алыр өсөн бөтә шарттар тыуҙырылғайны. Парталарҙа уҡыу әсбаптары өс телдә: башҡортса, инглизсә, төрөксә һәм һүҙлектәр... Ни сәбәп менәндер ошо лицейҙар кемгәлер оҡшаманы, һәм уларҙы тиҙ арала бер-бер артлы ябып та ҡуйҙылар. Имештер, «сит илгә аҡыллы баштарҙы ылыҡтырыу». Әйтерһең, хәҙер һәләтле йәштәр әҙ китәләр сит тарафтарға. Хатта, күмәртәләп китәләр. «Ҡайҙа ғына ла йөрөмәй, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы», – тиелә халыҡ йырында. Ә хәҙер ир-егет кенә түгел, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бәхет эҙләп ниндәй генә тарафтарға барып сыҡмайҙар ҙа ни нәмәгә генә тарымайҙар.

ТӨРКСОЙ тарафынан 2009 йылда Анкара ҡалаһында «Башҡорт шәжәрәләре» тигән бик матур сифатлы китап нәшер ителгәс, Истамбул университетының Евразия институтында уның исем туйы үткәрелгәйне.

Унда ТӨРКСОЙ-ҙың генераль директоры Дусен Ҡасеинов үҙенең ҡотлау һүҙендә ТӨРКСОЙ-ҙың Башҡортостан менән бәйләнештәре булдырылыуына байтаҡ ваҡыт, һәм был бәйләнештәр йылдан-йыл үҫешә бара, тигәйне. Профессор Гекчен Төркиәнең иң боронғо уҡыу йорттарының береһе Стамбул университеты башҡорт ғалимдары менән хеҙмәттәшлек итергә һәр ваҡыт әҙер. Ошо Истамбул уҡыу йортонда билдәле башҡорт тарихсыһы, ғалим Әхмәтзәки Вәлидиҙең оҙаҡ йылдар – 40 йылдан ашыу эшләүен дә һыҙыҡ аҫтына алып үткәйне.

2012 йылдың декабрендә Өфө ҡалаһында тағы ла бер күркәм сара уҙғарылды. Күренекле башҡорт яҙыусыһы Динис Бүләковтың төрөк телендә нәшер ителгән китаптарының исем туйы үтте. Унда Төркиәнән йәш ғалимә, ошо баҫмаларҙың тәржемәсеһе Нигяр Ҡалҡан, Анкара ҡалаһының Этимесгут районы мэры урынбаҫары Алаатин Сонат, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министрлығының халыҡ-ара ТӨРКСОЙ ойошмаһындағы вәкиле Әхәт Сәлихов ҡатнашты.

Шул уҡ көндәрҙә ТӨРКСОЙ тарафынан уҙғарылған шиғриәт, мәҙәниәт байрамдары, уларҙың бик күп һәм төрлө-төрлө тарафтарҙа уҙғарылыуы бер шәлкем аллы-гөллө төҫтәге сәскәләрҙең һәр береһе үҙенсә хуш еҫ бөркөп тороуын хәтерләтә. Мәҫәлән, үткән йылдың июль айында Тарсус ҡалаһында ун беренсе олоҫтар араһы сәсәндәр байрамында Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, күренекле сәсәниә Розалия Солтангәрәева ҡатнашып, яңы ижад үрҙәр яуларға дәртләнеп ҡайтҡайнылар, ә ноябрь урталарында Чанаккале ҡалаһында Дүртенсе Бөтә донъя төрки телле халыҡтарҙың шиғриәт байрамында шағирәбеҙ, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Тәнзилә Дәүләтбирҙина саҡырылып, был сараға хайран ҡалып, үҙе лә матур шиғырҙары, иҫ китмәле моңло тауышы менән халыҡ йырҙарын да башҡарып, унда йыйылған әҙәбиәт һөйөүселәренең күңелен арбап ҡайтты. Ғалимә Зәйтүнә Шәрипова, журналист Айгиз Баймөхәмәтов Трабзон ҡалаһындағы сараларҙа ҡатнаштылар. Әҙәбиәткә, мәҙәниәткә, сәнғәткә ҡағылышлы байрамдар ҡайһы ғына тарафта уҙғарылһа ла, ТӨРКСОЙ уларҙы бик зауыҡлы, юғары кимәлдә, һәр ҡатнашыусыны дәртләндереп, хыялландырып, күңелдәрҙә изгелек, гүзәллек тойғолары тыуҙырып тормошҡа ашыра. Бындай сараларға сығымдарҙы йәлләмәйҙәр, сөнки әҙәбиәттең заманға һәм киләсәкте тәрбиәләүгә йоғонтоһо ҙур икәнлеген аңлаған кешеләр генә эшләйҙер унда.

«Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күр»,– тиҙәр халыҡта. Бер нисә йыл элек миңә лә ошо ожмах илен үҙ күҙҙәрем менән күрергә, күреү генә түгел, уның юғары мәҙәниәтле кешеләре менән аралашырға, һөйләшергә мөмкинлек тыуҙы. Дөрөҫөрәге, мине Самсун ҡалаһында уҙғарылған Икенсе Бөтә донъя төрки телле халыҡтарҙың шиғриәт байрамында ҡатнашырға саҡырҙылар, әлбиттә, ТӨРКСОЙ-ҙағы республикабыҙҙың мәҙәниәтенең абруйлы илсеһе Әхәт Сәлихов ҡатнашлығында.

Самсун… Төркиәнең Ҡара диңгеҙ буйындағы иң мөғжизәле порттарының береһе. Был ҡала Төркиәнең яҙмышын үҙгәртеүҙә ҙур роль уйнаған, тип тә әйтәләр, сөнки 1919 йылдың 19 майында фәҡәт ошо ҡалала

Төрөк Республикаһына нигеҙ һалыусы Мостафа Кемаль үҙенең көрәштәштәре менән Самсунға пароход менән килеп төшә һәм халыҡҡа мөрәжәғәт итә, аҙаҡ сит ил интервенттарына ҡаршы милли алышта еңеп сыға.

Бик матур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан Самсун ҡалаһы: бер яҡтан ул Ҡара диңгеҙ көҙгөһөнә ҡарай, икенсе яҡтан ике ҙур (Ҡыҙылырмаҡ һәм Йәшелырмаҡ) йылғалары уны биҙәй.

Был тарафтарҙа кешеләр палеологик дәүерҙә үк йәшәгән. Йәшел урмандары, шифалы минераль һыулы инештәре, дүрт йөҙ егерме төрлө ҡоштар төйәге булған ошо ожмах иләндә шиғриәт һөйөүсе, спорт менән шөғөлләнеүсе, үҙ мәҙәниәтен һыу һымаҡ белеүсе халыҡ йәшәй.

Интернеттан алынған мәғлүмәттәр буйынса, 1899 йылда Самсун ҡалаһына 373 башҡорт, татар ғаиләһе күсеп килгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар унда нисек йәшәй, имен-амандармы, үҙ тамырҙарын беләләрме – быны асыҡларға мөмкинлек булманы.

Төркиәлә үткән өс көн дә минең хәтеремә тылсымлы төш булып уйылып ҡалды. Феодора Калак исемле бик һылыу ҡыҙ миңә Самсун ҡалаһы тураһында күп нәмәләр хаҡында тасуири итеп һөйләргә һәм бик күп мөғжизәле урындарҙы күрһәтергә өлгөрҙө.

Самсун ҡалаһында һәйкәлдәр бик күп, ифрат та Ататөрк Мостафа Кемалға арналғандары. Бер генә илдә лә китапҡа һәйкәл күргәнем юҡ ине, бында бик лайыҡлы рәүештә китапҡа һәйкәл ҡуйылған.

Ҡаланың мэры Юсуф Зыя Йылмаз – бик ихтирамлы, итәғәтле кеше. Ул беҙҙе үҙенең эш бүлмәһендә ҡаршы алды һәм иң тәүҙә сәй, тәм-том тәҡдим итте. Әйтергә кәрәк, ҡайҙа ғына барһаң да, иң тәүҙә сәй йәки һыу менән һыйлайҙар. Беҙ ҙә: «Һыйлағанда һыу эс», – тибеҙ бит. Хөрмәтле Юсуф Зыя Йылмаз үҙенең бик юғары мәҙәниәтле икәнен иҫбатланы. Уның төрөк әҙәбиәтен генә түгел, башҡа төрки телле халыҡтарҙың да әҙәбиәтен, мәҙәниәтен белеүе, ғөмүмән, шиғриәт һөйөүе асыҡланды аралашыу барышында. Губернатор Хөсәйен Аҡсой ҙа шағирҙарҙы ихлас ҡабул итте, байрам сараларында шиғриәт кисәләре тамамланғансы үҙе тамашалар залында ултырҙы, ә инде сара аҙағында һәр беребеҙҙе сәхнә түренә саҡырып, гүзәл сувенирҙар тапшырҙы. Шуны лә әйтергә кәрәк: шағирҙар ҡайһы тарафтан килгән – сәхнәлә шул илдең флагы элеүле торҙо. Башҡортостан символына ҡарап мин ғорурлыҡ тойғоһы кисерҙем.

Университеттың әҙәби факультетында ла студенттар менән осрашыу үтте. Һәр кем үҙ телендә лә, төрөксә лә шиғырҙарын уҡыны. Шулай уҡ телде һаҡлап ҡалыу мәсьәләләре, әсә теленең камиллығы, инглиз һүҙҙәре менән телде боҙмау хаҡында бик әһәмиәтле һөйләшеү барҙы.

Опера һәм балет театрында Явуз Бюлент Бакилер исемле төрөк шағиры менән осрашыу булды. Осрашыу өс сәғәттән артығыраҡ барһа ла, һис кем урынынан ҡуҙғалманы. Кисен Ататөрк мәҙәниәт үҙәгендә шиғриәт кисәһе уҙғарылды. Мине иң таң ҡалдырғаны – студенттарҙың, тамашасыларҙың шиғриәткә ҡарата хөрмәте, хатта мөхәббәте, сөнки, байрам бик оҙаҡ барыуына ҡарамаҫтан, бер кем ҡуҙғалып, инеп-сығып

йөрөмәне, сара бөтөү менән барыһын бәреп-йығып кейем алырға ташланманы. Барлыҡ шағирҙар сәхнәнән төшөп урамға уҡ сыҡмайынса, тамашасылар үҙ урындарында ҡалып алҡышлап торҙо.

Бер нисә йыл элек, 22 – 25 сентябрҙә, Төркиәнең Элазыг ҡалаһында ТЮРКСОЙ булышлығында ун туғыҙынсы Халыҡ-ара Хазар шиғриәт байрамы үтте. Был сараны «Олоҫтар араһы Хазар шиғриәт аҡшамдары» тиҙәр. Хазар халыҡ-ара шиғриәт байрамына Якуп Делиомероглу – Евразия Яҙыусылар союзының рәйесе етәкселек итте.

Ун туғыҙынсы Халыҡ-ара шиғриәт байрамы Хазар Элазыг ҡалаһының губернаторы, Төркиәнең Мәҙәниәт һәм туризм министрлығы, Ататөрк исемендәге Тел һәм тарихтың Юғары комитеты ярҙамы менән ТӨРКСОЙ тарафынан ойоштороła. Халыҡ-ара Төрки телле шиғриәт байрамы – төрки әҙәбиәт донъяһында киң билдәле сара. Тәүге шиғриәт кисәһе үҙенең иҫ китмәле матурлығы, тәбиғәтенең гүзәллеге менән дан алған Хазар күле эргәһендә 1992 йылдың 5 декабрендә уҙғарылған. Беренсе йылдан башлап һәр бер байрамды – ошо кисәләрҙе ниндәй ҙә булһа данлыҡлы төрки телле халыҡтарҙың арҙаҡлы әҙәбиәтсеһе һәм шағирына бағышларға тип хәл ителгән. Мәҫәлән, ун бишенсе Хазар шиғриәт байрамы Сыңғыҙ Айытматовҡа бағышланған булған. Был сарала бөйөк яҙыусы үҙе ҡатнашҡан. Элазыг ҡалаһында яҙыусы иҫән саҡта уҡ уның исемендәге парк асылған. Ошо күркәм байрамда ҡатнашҡан шағирҙарҙың береһе былай тип һөйләне: «Урам буйлап тантаналы йөрөгәндә һәр балкондан сәскәләр шәлкеме ташлайҙар, маҡтап ҡысҡыралар: «Сыңғыҙ Айытматовҡа дан! Дан! Дан!» – тип. Шул тиклем гүзәл байрам булды. Бөйөк яҙыусы үҙе: «Мине бер ерҙә лә, бер илдә лә ул тиклем ҙурлағандары юҡ ине, меңмең рәхмәттәр Төркиәнең гүзәл Элазыг ҡалаһына һәм уның халҡына!»– тип күҙ йәштәрен һөртөп баш эйҙе».

Бөйөк Мехмет Эрсой Акифтың вафат булыуының 75 йыллығына бағышланған быйылғы байрамда ла төрлө төрки телле илдәрҙән шағирҙар, шағирәләр килгәйне. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ ҡыҙы Мәржән Ершуова, Әзербайжан ҡыҙы Рабиға Зейлалова, Ҡырғыҙстандың халыҡ шағиры, профессор, филология фәндәре докторы Омар Солтанов, йәш шағирә Рохат Жуманозорова, Косовонан Зейнал Бексас, Үзбәкстан егете Бабахан Шәрипов, шулай уҡ Македония, Молдавия, Сыуашстандан һәм Төркиәнең үҙенән бик күп яҙыусылар, шағирҙар бар ине.

Беҙҙе төрлө-төрлө урындарға шиғыр байрамдарына йөрөттөләр, студенттар, уҡыусылар менән осрашыуҙар бәхете тейҙе. Мәҫәлән, Евразия Яҙыусылар союзының рәйесе Якуп Делиомероглу бей, Рабиға Зейлалова, Шабан Абаҡ, мин һәм тағы ла бер нисә төрөк шағиры Кебан мәктәбенә барҙыҡ. Мин төрөк уҡыусылары менән осрашыуҙы көтөп алдым. Ҡыҙыҡһынып сәхнәнән ҡарап ултырам: беҙҙең уҡыусылар һымаҡ уҡ шаяндар, теремектәр, ләкин уларҙа шиғриәткә, әҙәбиәткә ҡарата ихтирам бик ҙур. Шағирҙар сығыш яһағанда бер генә тауыш та ишетелмәй. Дәррәү ҡул сабалар. Мин үҙемдең шиғырҙарымды башҡортса уҡыным. Уны Якуп Делиомероглу бей төрөк теленә тәржемә итеп торҙо. Аҙаҡ уҡыусылар менән бергә фотоға ла төштөк.

Элязыг ҡалаһының ҙур майҙанында шиғриәткә, әҙәбиәткә бағышланған тантаналы йөрөш булды. Милли оркестр уйнай, милли кейемдә алда йәш егеттәр бара, бар халыҡ сәскәләр ташлай, олоһо ла, кесеһе лә, әҙәбиәтте, яҙыусыларҙы ихтирам итеү йөҙөнән, ошо төркөмгә ҡушыла. Әҙәбиәткә, шиғриәткә ихтирам, һөйөү итеү менән һуғарылған тантаналы ошо йөрөштә мин дә атлайым, биттәрем буйлап субырҙап йәш аға, күңелдең ниндәйҙер нескә ҡылдары зымбыр-зымбыр килә. Бына, исмаһам, сара! Иҫ китмәле йөрөштәрҙән һуң, кескәй сабыйҙарҙан алып һаҡалтай олатайҙарға тиклем, хатта ҡала губернаторы үҙе лә иң ҙур әҙәбиәт белгесе булып сығыш яһай икән, нисек йәштәрҙә телгә ҡарата ихтирам булмаһын да, нисек улар әҙәбиәт яратмаһын.

Элязыг ҡалаһының ҡатын-ҡыҙҙар араһынан тәүге депутаттарының береһе Сармин Балык үҙенең сығышында былай тине: «Беҙ үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе, шиғриәтебеҙҙе күрһәтеп, мосафир шағирҙарҙың да мәҙәниәте, ижады менән танышабыҙ…»

Евразия Яҙыусылар союзынын рәйесе Якуп Делиомероглу бейҙең бөтә төрки телдәрҙә лә һөйләшә белеүе, иҫ китмәле тәрән мәғәнәле сығыштары, үҙ-үҙен ябай тотоуы, һәр беребеҙ менән ихлас аралашыуы беҙҙе таң ҡалдырҙы, үҙенә ғашиҡ итте.

Уҙғарылған шиғриәт кисәләренән алынған уй-хистәрҙе һанап бөтөрөрлөк түгел, үҙеңә быйның шаһиты булырға кәрәк.

ТӨРКСОЙ тарафынан уҙғарылған Башҡортостан көндәре, һабантуйҙар, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен төрөк телендә нәшер итеү, уларҙы республикабыҙ китапханаларына бүләк итеү – былар барыһы ла бушлай эшләнә. Хатта үткән йыл уҙғарылған «Аҡ торна» тәржемәселәр конкурсының бағымсыһы ла ТӨРКСОЙ ойошмаһы булды.

Бөйөк шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең исемен мәңгеләштереп таҡтаташ асыу, урамдарға, парктарға биреү, 2010 йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан итеү – былар барыһы ла, беҙҙеңсә әйткәндә, егетлек.

Егетлек тигәндән, ошо бөтә уҙғарылған сараларҙа Башҡортостан шағирҙары ҡатнаша алыуы өсөн ойошторoccусыларға бик ҙур рәхмәттәремде еткерәһем килә. Уларҙың беренсеһе, әлбиттә, беҙҙең яҡташыбыҙ, Төркиәлә бик күп башҡорт китаптарының төрөк теленә тәржемә ителеүенә барлыҡ көсөн, һәләтен һалған, үҙе лә шиғри күңелле ғалим, ҡаһарман егет Әхәт Ғөбәй улы Сәлиховтыр. ТӨРКСОЙ ярҙамында, Әхәт Ғөбәй улының тырышлығы менән сығарған китаптарҙы һанап ҡына китәйем:

1. Ахмет-Заки Валиди Тоган. «История башкир», Анкара, 2003 йыл. *(Авторҙарҙың береһе).*

2. Мифтахетдин Аҡмулла. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк…» Анкара, 2007. *(Тәржемә, баҫмаъа әҙерләү).*

3. Мәжит Ғафури. Был донъяны тотоп торған мөхәббәт. Анкара, 2011 йыл. *(Тәржемә, баҫмаъа әҙерләү).*

4. Йәләлетдин Руми. Мәүләнә. (Конья, 2009). *(Тәржемә, нәшер итеү).*

5. Фотоальбом. «Башкортостан – жемчужина Евразии». Анкара, 2011. *(Дөйөм етәкселек итеү).*

6. Төрлө ил ғалимдарының ғилми эштәре. «Башҡорттар: тарих һәм заман». Анкара, 2008. *(Авторҙарының береһе, әҙерләү, нәшер итеү, тәржемә).*

7. Башҡорт шәжәрәләре. Анкара, 2009. *(Авторы, тәржемә, баҫмаға әҙерләү).*

8. Динис Бүләков. Упҡын өҫтөндә бейеү. *(Нигяр Ҡалҡан тәржемәһендә)*, Анкара, 2012.

9. Динис Бүләков. Ғүмер бер генә. *(Нигяр Ҡалҡан тәржемәһендә)*, Анкара, 2012.

Әхәт Сәлихов, ысынлап та, беҙҙең башҡорт әҙәбиәтен төрки телле халыҡтар араһында киң пропагандалаусы. Уны бөтә донъя әҙәбиәте кимәленә күтәреүсе, тиһәм, һис тә яңылышмайымдыр.

ТӨРКСОЙ халҡыбыҙ, тарихыбыҙ, йәшәйешебеҙ, булмышыбыҙ хаҡында тәржемә итеү генә түгел, баҫтырып сығарыу мәшәҡәттәрен дә үҙ өҫтөнә ала. Башҡортостан яҙыусыларының Төркиәлә, Ҡаҙағстанда, башҡа төбәктәрҙә уҙғарылған сараларҙа ҡатнашыуҙарына ла ошо ойошманың ярҙамы ифрат та ҙур. Төркиәгә ТӨРКСОЙ тарафынан саҡырылған яҙыусылар Рауил Бикбаев, Риф Тойғонов, Йомабикә Ильясова, Ғәйнислам Ибраһимов, сәсәниә Розалия Солтангәрәева, Айгиз Баймөхәмәтов, ғалимә Зәйтүнә Шәрипова, Хисмәтулла Юлдашев, Лилиә Ҡәйепова, Фәнил Күзбәков, Гөлназ Ҡотоева, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Илдус Ҡаһарманов, Марсель Сәлимов һ.б., һ.б. булдылар. Уларҙың һәр береһе үҙенең сәхифәләренән йәшәү йәме, рух күтәренкелеге, ижад үрҙәренә әйҙәрлек илһам алып ҡайтты.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған әйткән: «Бөтә донъяны төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәте менән таныштырыу беҙҙең иң юғары бурысыбыҙ». Ошо бөйөк бурыс бик юғары кимәлдә Төркиәлә үтәләлер, моғайын. Ә беҙҙең яҙыусыларыбыҙҙың төрки телле халыҡтарҙың шиғриәт байрамдарында ҡатнашыуы шулай уҡ башҡорт шиғриәте менән башҡа халыҡтарҙы таныштырырға, туғандаш халыҡтар араһында дуҫлыҡ күперҙәрен нығытырға һис шикһеҙ ярҙам итә. Төрки теле халыҡтар юғалмаһын, һүнмәһен, телебеҙ офоҡтары киңәйһен өсөн ваҡытын да, көсөн дә йәлләмәй хеҙмәт итеүселәргә мең-мең рәхмәттәр уҡып, баш эйергә генә ҡала.

Инде ике тиҫтә ваҡыт эсендә дауам иткән сараларҙы күҙаллаһаң, шундай иҫ киткес миһырбанлыҡ, донъяға ғашиҡ булырлыҡ хистәр тыуҙырыусы эштәр атҡарған өсөн ТӨРКСОЙ ойошмаһына һәйкәл ҡойорлоҡ. Хәйер, киләсәк быуынды төрки телле халыҡтарҙың шиғриәт гәүһәрҙәре йоғонтоһонда тәрбиәләү үҙе киләсәккә һәйкәл түгелме ни?

**Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары.**



Мансаф
ҒИЛӘЖЕВ

# ҠӘНЗӘФӘР ТАШТАРЫ

## РОМАН

1775 йылдың 17 мартында Екатерина II-нең Пугачев болаһын «*Мәңгегә онотолорға һәм тәрән өндәшмәҫ һаҡларға*» тигән манифесы иғлан ителде.

Ағиҙелдең һул яғына урынлашҡан, кем «Ашҡаҙар», кем «Эстәрле» пристане тип йөрөткән урында халыҡ ҡайнаша. Майҙан – баҙар түгел, сөнки бында тик ирҙәр генә, етмәһә бөтәһе лә ҡоралды. «Ҡорал» тигәндәре шул киҫтән, уҡһаҙаҡ, суҡмар, айбалта, һөңгө, ике йә өс йәпле ағас һәнәк. Яр буйындағы ағастарға, ҡағылған ҡаҙыҡтарға аттар бәйләнгән, тышауланғандары арыраҡ көҙгө елдәр киптерергә өлгөргән үләнде ялмап йөрөй. Сентябрь айы аҙағы ғына булыуға ҡарамаҫтан, көндәр яман һыуытып ебәрҙе. Төндө ышыҡһыҙ урында үткәреү бөтөнләй мөмкин түгел. Ә инде һанаулы ғына өйҙәргә кем кереп ҡуна алһын? Шуға күрә эңер төшөүгә тирә - йүндә усаҡтар ҡабынды. Яҙғы ташҡындан ҡалған ағастарҙы ла һөйрәп килтереп утҡа ташлайҙар.

Берәүҙәр танышын юғалтҡан – исемен ҡысҡыра. Икенселәр «Ырымбур алыҫмы?» ти, өсөнсөләр Петр батшаның кемлеген һораша... Йөҙ-йөҙ кешенең ниңә йыйылғанлығын да, һүҙ нимә хаҡында барғанлығын да тиҙ генә аңларлыҡ, төшөнөрлөк түгел. Етмәһә, бында йыйылған башҡорто ла, татары ла, русы ла, сыуашы ла, марийы ла тауышын йәлләмәйенсә шаулай ҙа шаулай.

– Муксин Абдусалямов, Салават Юлаев, Султанмурат Янышев и остальные, разберитесь со своими людьми?! Доложите!

*Мансаф Ғиләжев (1933) — башҡорт әҙәбиәтендә сатира һәм юмор жанрына, журналистикаға тос өлөш индереүсе авторҙарҙың береһе, уның прозаһы ла уҡыусылар күңеленә яҡын. Мансаф Тажетдин улының маҡтаулы исемдәре һәм наградалары байтаҡ: Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге хөкүмәт премияһы лауреаты. Заманында уға СССР Дәүләт телевидение һәм радио комитетының бер нисә Маҡтау грамотаһы тапшырылды, ә якташтары «Саҡмағош районының почетлы гражданины» тигән шәһрәтнамә бирҙе. Авторыбыҙҙы 80 йәше менән ихлас күңелдән тәбрикләйбеҙ һәм уҡыусыларға әҙиптең яңы әҫәрен тәҡдим итәбеҙ.*

– Кем әмер бирә? – тип эргәһендәгеләргә боролмайынса ғына һорап ҡуйҙы бирәү. – Ниңә ул тиклем аҡыра?

– Михаил Ураков шикелле. Подпоручик. Тупланған сиреүҙе губернаторға ул алып барырға тейеш, ти ...

– Йә, нимә эшләйбеҙ, Ҡәнзәфәр, беҙҙең исемдәрҙе ҡысҡырғансы бынан шылыу хәйерлерәктер?

– Борсолма, Йәғәфәр, беҙҙең командаларыбыҙ юҡ. Ана, Мөҡсин менән Солтанморат бында ла алда. Ҡан есен тойған бүреләй, килеп тә еткәндәр. Ә Салауат тигәне кем? Белмәйһеңме?

– Юлай Аҙналин тигән старшинаны ишеткәнең барҙыр, моғайын. Биләмәһен тартып алып, Әсем заводын һалғас, хаҡлыҡ юллап йөрөнө шикелле. Шуның малайы.

– Юҡ, белмәйем. Эсемде ишеткәнем бар былай, – тине Ҡәнзәфәр.

Яҡындағы усаҡҡа ҡоро ботаҡтар ташланды һәм ялҡын күтәрелде. Ҡәнзәфәрҙең йөҙөнә яҡтылыҡ төштө. Битен ҡапларға теләпме, усын ҡаштары өҫтөнә күтәрҙе. Оҙонсараҡ йөҙө, һырты беленерлек ҡабарынҡы тура танауы, нескә мыйығы, хатта саҡ ҡына ҡыҫыла төшкән зәңгәр күҙҙәре ап-асыҡ күренде. Өҫтөндә әҙрәс бишмәт, башында төлкө бүрек ине.

Ер аҫтынан тигәндәй, алдарында Мөҡсин пәйҙә булды. Ул шунда уҡ:

– Һин йөҙ башы бит, отряд йыйҙыңмы? – тип Ҡәнзәфәргә ҡоро һәм тупаҫ өндәште.

– Губернатор Рейнсдорптан да, батша воеводаһы Богдановтан да бер төрлө лә күрһәтмә, указ алманым.

– Бәлки, һиңә ялған батша үҙ манифесын махсус тапшыртҡандыр? Ут менән шаяра күрмә, кейәү. Мулла икәнеңде лә онотма.

Ҡәнзәфәр Мөҡсингә яуап бирмәне, терһәген Йәғәфәргә тейҙерҙе һәм ситкәрәк китте. Иптәше уға эйәрҙе.

– Ошо бәндәне кемгә оҡшатаһың? – Ҡәнзәфәр башын Йәғәфәргә борҙо.

– Танауы, күҙҙәре, бәй, ҡомаҡты хәтерләтә.

– Төлкө ул. Ҡулынан килһә, бәндәләрҙе сысҡан урынына ашар, сәйнәмәй йотор ине.

– Шундай хәшәрәттәрҙе ер күтәреүенә аптырайым.

– Ни эшләргә һуң, Йәғәфәр дуҫ? Ырымбур губернаторы Яйыҡҡа яҡын башҡорт олоҫтарының старшиналарына, йөҙ баштарына Пугачевҡа ҡаршы һуғышыу өсөн бик ашығыс биш йөҙ кеше туплап ебәрергә бойороҡ ебәргән. Кем ул Пугачев?

– Ә һин Петр Өсөнсө хаҡында ишеткәнең бармы?

– Бар. Үлгәненә биш былтыр. 1762 йылда уны бәреп төшөрөп, власҡа ҡатыны Екатерина Икенсе менеп ултырҙы. Имеш, Петр үлмәгән, ә ҡасҡан. Рәсәй буйлап ун йыл буйы йәшенеп йөрөгән, ти.

– Бәлки, шулайҙыр. Батша тиклем батшаның түгел, асҡа интеккән бисараның был яҡты донъянан киткеһе килмәй. Тимәк, Пугачев-Петр – аҫыл ҡош. Шулай булмаһа, губернатор уны тотоп биреүсегә – биш йөҙ, үлтереүсе табылһа, уға ике йөҙ илле һум вәғәҙә итмәҫ ине. Шундай указ сығарған бит.

– Ә биш көндән һуң Петр Федорович башҡорт халҡына атап үҙе манифест менән мөрәжәғәт итте. Таныштыңмы, Йәғәфәр?

– Эйе. Әгәр ҙә ябай халыҡ уға хыянат итмәй, тоғоролоҡло хеҙмәт күрһәтһә, уға ер, һыу, урман, торлаҡ, диңгеҙ, болондар, икмәк, кейем-һалым, эш хаҡы, ҡурғаш, дары бүләк итәсәк. Ҡыҫҡаһы, кешеләр үҙҙәре теләгәнсә ғүмер кисерәсәк.

– Шәп указмы?

– Раз икән, уның өсөн һуғышырға була. Халыҡты ҡол хөкөмөндә йәшәткән өсөн Әбей батшаны яҡларғамы ни?

Ҡәнзәфәр өндәшмәне. Усаҡтарҙан алыҫлашҡанлыҡтан, йөҙө күренмәй ине. Үҙ-үҙе менән генә һөйләшкәндәй: «Петр үлгәндә минең әлеге сағым кеүек булған. Әле уға ҡырҡ биш», – тип ҡуйҙы.

– Әллә батшалар эргәһендә торҙоңмо?

– Тороуын торманым, әммә Петр Өсөнсө бер аҙ таныш. Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнаштым да инде. Ул – Петр Беренсенең ейәне. Атаһы немец. Мин дә Пруссияға ҡаршы һуғышып йөрөнөм. Петр Өсөнсө, батша булғас та, Пруссия менән килешеү төҙөнө. Йәғни рустарҙың дошманына ҡул бирҙе. Рәсәй өсөн нисәмә йылдар дауамында ҡан ҡойоуҙар, йән ҡыйыуҙар юҡҡа сыҡты.

– Немец, тиһең, ниңә улайһа Федорович?

– Рус батшаһын Ульрихович йә иһә Фридрихович тип атап булмай ҙа инде.

– Ә-ә, беҙҙең Пугач батша ла Федоровичҡа әйләнгән булып сыға.

– Юҡҡа баш ватмайыҡ, Йәғәфәр. – Ҡәнзәфәр тауышын ҡыҫты. – Петр Өсөнсөнөң үҙенә юлланайыҡ. Танышайыҡ. Һорашайыҡ. Кәңәшен тыңлайыҡ. Ставкаһы Берда – беҙҙеңсә Бәрҙе биҫтәһендә. Ул тарафтарҙа булғаным бар. Юлды беләм.

– Тәүәккәләйек, Ҡәнзәфәр. Уйымса, йәшәү артабан былай дауам итергә тейеш түгел. Кемгәлер ҡол булғансы, илеңдең улы бул ...

Стәрле йылғаһының үренә ҡарай ашыҡмай ғына атланылар. Уларға тағы дүрт кеше ҡушылды. Уйҙары – һәр ҡайһыһына икешәр ат эләктереп, көньяҡҡа ҡарай юлға сығыу.

Ҡайҙа барғанын, кемгә ҡаршы һуғышырға кәрәген аңламаған халыҡ үҙенсә баш вата, зарлана, шаулай. Мөҡсин кеүек старшиналар, һыйыр көтөүе араһында йөрөгәндәй, ҡулдарынан ҡамсыларын төшөрмәйенсә төркөмдән-төркөмгә еҫкәнеп йүгергеләне. Петр батша хаҡында һөйләшеүҙе ишетһәләр: «Етер, ахмаҡтар, кемгә хеҙмәт итеүегеҙҙе хәтерләгеҙ. Антын боҙоусыларға – һуҡтырыу йә баструк! – тип ҡысҡыралар. – Ялған батша хаҡында ялған хәбәр таратыусыларҙы хәҙер үк, аяҡ-ҡулдарын бығаулап, Өфө төрмәһенә оҙатырға!..»

Ығы-зығынан һәм ҡараңғынан файҙаланып, Ҡәнзәфәрҙәр, һәр ҡайһыһы һыбай менеп, өҫтәмә ат алып, Мәләүез почтаһы яғына ҡарай йүнәлде. Әгәр ҙә туҡтатыусылар табылһа, яуаптары шул: «Губернаторға мөһим хәбәр илтәбеҙ. Кәрәкһә, Стәрлетамаҡ пристанендә торған отрядҡа барып һорағыҙ». Әгәр ҙә фетнәселәргә юлыҡһалар, Петр Федорович менән осрашыу – төп маҡсат.

Көн тамам яҡтырыуға ғына Ағиҙел буйындағы Бөгөлсән ауылына етеләр. Бында сыуаштар, татарҙар йәшәй икән.

Аттарҙы ял иттереп, тамаҡтарын туйҙырғас ҡына юлды дауам итәсәктәр. Ярай әле, Ашҡаҙар тамағында бер нисә көн торорға яҙған, юҡһа төн эсендә был тиклем араны үтеп булмаҫ ине. Тегендә аттарҙың юғалыуын беленгәндер һәм Мөҡсин менән Солтанморат эҙләй башлағандыр Ҡәнзәфәрҙе.

Бөгөлсәндән дә өй һайын берәр ирҙе, атын, ҡоралын алдырып, хеҙмәткә саҡырғандар. Ҡайһы батшаны – Әбейҙе, әллә Петр Өсөнсөнө яҡларғамы икәнлеген белеүсе юҡ.

– Незнай, незнай, кемдә власть, шул хаҡлы. Яңы батша Кәтринәнән һәйбәт, ти. Имеш, Ағиҙелде лә, ер-болондо ла ябай халыҡҡа бирә, балыҡ тоторға, һунарға ла рөхсәт итә. Дөрөҫө нисектер, незнай. Малайҙы алып киттеләр әле. Атһыҙ ҡалдыҡ, – тип һөйләнеп торҙо берәү. – Беҙ – суҡынған сыуаштар, татарҙар Ырымбур тарафынан күсеп килдек. Үҙегеҙ кем булаһығыҙ һуң? Ҡиәфәтегеҙгә

ҡарағанда, юлбаҫарҙарға оҡшамағанһығыҙ. Әгәр шикләнәһегеҙ икән, аттарығыҙҙы анауы яр ситендәге иҫке амбарға ҡуйып тороғоҙ. Элек тоҙҙо шунда һаҡлай торғайныҡ. Пристань Бөгөлсәндә ине бит. Алты-ете йыл элек Ашҡаҙарға күсерҙеләр. Тамаҡ йүнләп туймаһа ла, тоҙға интекмәнек.

Шулай итеп, сыуаш ҡарты ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә байтаҡ тарих һөйләне лә бирҙе.

Бала сағынан уҡ күпте белергә, төпсөнөргә яратҡан Ҡәнзәфәр һорамай түҙмәне:

– Ниңә Бөгөлсән тип атанығыҙ?

– Был төштә Ағиҙел ниңәлер ныҡ бөгөлгән. Матур урын. Яңы батша килһә, йәшәү арыуланыр ине лә бит, незнай, донъяны ҡайҙа табан бөгөрҙәр?

– Үҙең кем яҡлы?

–Ҡыҙыҡ һорау. Халыҡҡа дөрөҫлөк кәрәк. Алдамаһындар, ҡыйратмаһындар, таламаһындар. Әҙәм рәтле ыштан да кейә алмай, ас йәшәүҙән ниндәй мәғәнә. Бәлки, һеҙҙең тарафтарҙа көнитмеш икенселер?

– Һе, – тип көлөмһөрәне Ҡәнзәфәр, – Рәсәйҙең һәйбәт урыны бармы ни? Рустар ғүмер баҡый талау арҡаһында ғына йәшәгән бит. Батшаларын, байҙарын, генералдарын, губернаторҙарын әйтәм.

– Бик тәүәккәл кешегә оҡшағанһың, шулай ҙа һаҡланыбыраҡ һөйлә. Донъя шымсылар, һатлыҡ йәндәр менән тулған. Булмағанды ла булған тип алып китергә генә торалар. Старшиналарҙың белгәне шул. Һи-и, элекке ихтилалдарҙан һуң күпме егеттәр эҙһеҙ юғалды ... Һеҙ, моғайын, Ырымбурғалыр? Ҡайтышлай, туҡтап, хәбәрҙәр һөйләп китегеҙ. Бикҡол аша бараһығыҙҙыр?..

Ноябрь башы ғына булһа ла, ерҙе ҡаплап ҡар ятты. Һирәк хәл. Башҡа йылдарҙа иретеп, ямғырлы ҡар яуып интектерһә, 1773 йыл әллә ҡалай күңелгә шом һалыусан булды. Ер ҡоро ҡалыу ғына түгел, тәүге ҡарҙар ҙа иреп һеңмәне. Ул ғынамы, мал-тыуар декабргә ҡәҙәр яланда йөрөр ине. Ә быйыл кәртәгә ябылған малдар, бындай хәл менән килешергә теләмәгәндәй, көнө буйы мөңрәй. Әйткәндәй, һуғыш өсөн йыйылған меңәрләгән аттарҙы ниндәй яҙмыш көтә? Кешеләр хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ.

Бикҡол ауылында шул мәғлүм булды: яңы батша Яйыҡтың түбәнге өлөшөндәге форпостарҙы, ҡәлғәләрҙе ҡыйратып, Ырымбурҙың үҙенә үк килеп еткән. Уны штурмлау өсөн әҙерләнергә, көс тупларға Бәрҙе биҫтәһен һайлаған, имеш. Бикҡолдар ауыр хәлдә ҡалған: Дим тарафтарына ҡарай ҡасып китһәләр, малмөлкәттәрен юғалтыуҙан, тороп ҡалһалар – карателдәрҙең өйҙәрен үртәп, үҙҙәрен үлтереп бөтөүҙәренән ҡурҡа.

Ҡыҫҡаһы, губернатор ҙа, яңы батша Федорович та үҙ яғына саҡыра. Бикҡолдар ҙа, алыҫ түгел Йөҙөй ауылы кешеләре лә ата-бабаларының йәшәү өсөн Ырымбурға яҡын урынды һайлауҙарына үкенә. Ултырғас-ултырғас, Урал тауҙары араһына, дошман аяҡ баҫмаҫ төштәргә бараһы ҡалған.

– Талаусылар, йән ҡыйыусылар ер тишегенән табырҙар, – тип һөйләнеп торҙо Ҡәнзәфәр, ҡаштарын төйөрөп. – Йөҙәрләгән башҡорт ауылдарының көлгә әйләндерелеү, меңәрләгән ир-егеттәрҙең үлтерелеүе, ҡатындарының, балаларының суҡындырылып рус байҙарына, офицерҙарына таратылып бирелеүе хаҡында әллә ишеткәнегеҙ юҡмы?

– Барлыҡҡа бар, мужыт беҙҙе ҡурҡытыу өсөн генә хәбәр тараталарҙыр, тип уйлайбыҙ. – Арала арыуыраҡ кейенгәне шулай һөйләнде. Ул бейәләйенең һырты менән танауын һөрттө. Ҡәнзәфәргә яҡыная төштө. Яртылаш тауыш менән генә өндәште. – Егерме йыл самаһы элек ниндәйҙер мулла Батырша хаҡында шаулағайнылар. Имеш, ул, донъя бутап, хатта ошо тирәләрҙә йөрөгән. Яҙмышы ниндәй икән? Һин бит Өфө тирәһенән.

Ҡәнзәфәр, «юҡ» тигәнде белдереп, башын һелкте. Әгәр ваҡыты иркен булһа, ул остазы Абдулла Ғәлиев хаҡында сәғәттәр буйы һөйләр ине. Әле иһә Бәрҙегә – Рәсәй батшаһы Петр Беренсенең ейәне Петр Өсөнсө менән осрашырға, уның ысынлап та ул икәнлеген белергә ашыға. Шуға ҡарап оҙаҡламай киләсәк яҙмыш хәл ителәсәк.

Үҙе әйтмешләй, заманында ваҡ-төйәк менән сауҙа иткән шул кеше алты һыбайлыны оҙатып ҡалды.

– Кемгә сәләм ҡушырға ла аптыралған. Әгәр яу менән был яҡҡа килергә яҙһа, беҙҙең ауылды – Бикҡолдо урап үтергә тырышығыҙ ...

Юлаусылар, аҡ ҡар өҫтөндә ат эҙҙәре ҡалдырып, алға ҡуҙғалды. Үҙенең юғары күтәрелеүен көндөн-көн кәметә төшкән ҡояш һул яҡтан эйәреп барҙы. Дала киң, сикһеҙ булып тойолдо. Ул, һулыш алырға ла онотоп, тып-тын ята. Хатта алыҫтарҙан дөйәләрҙән ҡасып һикерә-тәгәрәй килгән ҡамғаҡтар ҙа ел көтөп, хәрәкәтһеҙ ҡалған. Әле ҡайҙалыр боҫоп ятҡан ҡуяндарҙың, төлкөләрҙең эҙҙәре күҙгә салына.

Ҡәнзәфәр, атынан эйелеп, ҡамсы һабы менән бер ҡамғаҡты күтәреп осорорға ла уйлағайны, тик, ҡылған осон да һелкетерлек ел иҫмәүен иғтибарлап, кәүҙәһен турайтты.

Бер саҡ ул ҡамғаҡты Сәрмәсән буйында мал тапап бөткән көтөүлектә күргәйне. Бихисап ҙур йомғаҡты хәтерләткән сәнскеле был үҫемлектең үҙе тыуған, йәғни Саҡмағош яҡтарында үҫә алыуына ғәжәпләнгәйне. Ҡаҙаҡ далаларын ғына ерһенгән, тик дөйәләргә генә аҙыҡ була алған, ә инде был тарафтарҙа бер файҙаһыҙ үҫемлектең үрсеп китеүенән шөбһәләнгәйне лә. Ысынлап та, ер өҫтөн был зәхмәт баҫһа, әҙәм балалары игенһеҙ ҡалыуы ихтимал.

Әлеге уйҙарын атаһына еткергәс, Усай уҙаман:

– Юҡҡа борсолма, улым, беҙҙә, сәсһәң дә, үҫмәйәсәк. Уға сикһеҙ дала, тәгәрләргә ел кәрәк. Ә ниңә кәрәге булмаһын, дала кешеләре уны усаҡ тоҡандырып ебәрергә файҙалана. Ҡышҡылыҡҡа ла йыйып өйәләр. Аллаһу Тәғәлә артыҡ нәмәне яралтмаған. Әйтәйек, дегәнәкте далаға илтеп ҡара. Үҫәсәкме? Юҡ, әлбиттә. Уға тамыр йәйергә йомшаҡ ер, киң япраҡтар ебәрегә күп дым кәрәк. Ә инде ҡамғаҡҡа былар мотлаҡ түгел. Тамырына иғтибар иттеңме? Тамыры юҡ хисабында бит.

– Һин, атай, ҡамғаҡ араһында йәшәгән кешеләй һөйләйһең.

– Шулай булмай, мин Аҡтүбәгә үк барып еткән, далаларҙа ҡунған кеше ләһә.

Ҡәнзәфәрҙең атаһына һорау ғына бир, ул һәр саҡ аңлашылырлыҡ итеп яуап таба. Әгәр ҡыйынһынһа, уйлармын, һорашырмын, уҡырмын, тип икенсе юлға ҡалдырып тора. Барыбер онотмай, яуапһыҙ ҡалдырмай. Йыш ҡына:

– Белемһеҙ кеше ғәрип хөкөмөндә йәшәй. Уҡыһаң ғына донъяны аңлау мөмкин, – тип ҡабатлай.

Ә бәғзе берәүҙәр: «Фани донъяла наҙан булыу хәйерле, сөнки аңлы кеше тигеҙһеҙлеккә ҡаршы баш күтәрә, өлөш талап итә, властарға бойһонмай башлай. Һөҙөмтә шул: үҙен баструкка оҙаталар, ғаиләһе аслыҡҡа дусар», – тип фәлсәфә һата.

Уларға ни шундай яуап: «Әгәр ҙә Батырша баш күтәрмәһә, булған мәсеттәрҙе емереү, мосолмандарҙы суҡындырыу туҡтатылыр инеме? Батшабикә яңы мәсеттәр төҙөү хаҡында Указ сығарманымы ни?! Шулай икән, Ҡарыш муллаһына һәр мосолман доға уҡырға, уның фиҙа ителгән исемен күңелендә йөрөтөргә тейеш. Халыҡ өсөн йәндәрен ҡыйған батырҙарға бәйет сығарыу ғына аҙ, уларға дан йырларға бурыслыбыҙ ...»

Бердаға етәрәк Ҡәнзәфәрҙәрҙе атлы казактар төркөмө туҡтатты. Ҡулдарында ҡындан һурылған ҡылыстары ялтырай. Ҡараштары уҫал. Һорауҙары шул: «Кемдәр? Ҡайҙан? Ниндәй сәбәп менән ҡайҙа юл тотаһығыҙ? Карателдәр ебәргән шпиондар түгелһегеҙме? Дөрөҫөн әйтмәһәгеҙ – кх!»

Ҡәнзәфәр алғараҡ сыҡты. Русса яҡшы белгәнлектән, яуапты ул бирҙе.

– Башҡорт еренән. Атап әйткәндә, әгәр ишеткәнегеҙ булһа, Стәрлетамаҡ пристаненән. Килеү сәбәптәре: батша Петр Федорович менән осрашыу. Осрашыу иһә мөмкин ҡәҙәр тиҙ булһын.

Башҡаса һорау биреүсе табылманы. Төркөм икегә бүленеп, алға, артҡа баҫты, һәм бер казак,ҡулы менән ишаралап, ҡуҙғалырға ҡушты. Казактар ни өсөндөр ҡылыстарын ҡынға кире тыҡманы.

Берда тигән урында ҡоралллы казактар ҡайнаша. Араларында башҡорттар, мишәрҙәр, татарҙар ҙа байтаҡ. Ҡысҡырған, баҡырған кеше юҡ. Ярты һүҙҙән аңлашалар. Бөтәһе лә уйсан. Мөһим мәсьәләне хәл ҡылырға теләп баш ваталар һымаҡ. Килеүселәргә иғтибар итеүсе булманы.

Күп тә үтмәне, ҡолаҡсынын кейә-кейә башҡорт килде, еләнен быумаған, күрәһең, эш менән ултырған сағы булғандыр. Ул ҡаршыһында тороусыларға бер ҡарап ҡуйҙы ла үҙе артынан эйәрергә ымланы.

Тирмә ишеге алдында башына төлкө бүрек, өҫтөнә аҡ сәкмән кейгән етди ҡарашлы кеше ҡаршыланы. Тик йөҙөндә әҙ-мәҙ мөләйемлек, киң күңеллелек һиҙелә ине. Сабыуҙарын йыйып, ҡәмәр айыл башын ҡаптырҙы ла мыйығы остарын һыпырҙы.

– Кем булаһығыҙ? Ниәтегеҙ?

– Мин старшина Йәғәфәр Көсөкәев. Күндерәк буйынан. Стәрлебаш тарафтары. Ә ул – Ҡәнзәфәр ...

– Һәр кем үҙе өсөн яуап бирә, – тип асыуланып ҡараны әлеге кеше. – Йә?

– Ҡәнзәфәр Усай улы. Мулла. Сотник. Өршәк-Мең улусы. Боҙаяҙ ауылы. Мәҙрәсә ғилеме.

– Остазың?

– Абдулла Ғәли улы.

Әлеге исемде ишеткәс, ғәжәпләнеүҙән ҡаштары юғары күтәрелә төшөп, һорашыусы маңлайын йыйырҙы.

– Әллә ул? – Эйәге алға сөйөлә бирҙе.

– Эйе, ул. – Һорау биреүсенең кем хаҡында ҡыҙыҡһыныуын Ҡәнзәфәр тиҙ аңланы.

– Яныш Абдуллин старшинамы?

– Уның улы Солтанморат Янышев – Нуғай, Себер юлдарында баш старшина. Әле Стәрлетамаҡ пристанендә.

– Алма ағасынан алыҫ төшмәй, ти үзбәктәр.

– Ә һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ? – тип һорамай булдыра алманы Ҡәнзәфәр. – Донъя әтрәгәләм менән тулы, кемгә ышанырға ла белмәҫһең.

– Дөрөҫ һөйләйһең, әфәнде, кем, Усай улы. Аңлауымса, һөйләшеүеңә ҡарағанда, һин мишәр булаһың? Һеҙҙең халыҡ әлегә аҙ бында. Мин – Кинйә Арыҫлан улы булам. Батша Петр Өсөнсөнөң урынбаҫары, йәғни бөтә башҡорт атлыларына яуаплымын. Әйткәндәй, минең хатым халыҡҡа барып еттеме? – Ишек төбөндә тороусы йомошсоға мөрәжәғәт итте: – Сәй килтерегеҙ. Ә һеҙ, ҡунаҡтар, яҡыныраҡ ултырығыҙ.

– Әлибай Мырҙағоловҡа, башҡа старшиналарға яҙған хатыңдың, указыңдың да йөкмәткеһен беләм. Тәүге хатыңды Әлибай менән Көҫәпҡол Әҙәтовтың карателдәр командиры Ураҡовҡа бирелеүе миңә мәғлүм. Ураҡов Стәрлетамаҡ пристанендә тора.

– Аңлашылды, Ҡәнзәфәр. Үҙ халҡындың һатлыҡ йәндәре дошманындан йөҙ, мең тапҡыр ҡурҡынысыраҡ. Ундайҙар эргәндә йөрөй һәм дә теләһә ҡасан хәнйәрен йөрәгеңә ҡаҙай ала. Һәр беребеҙҙең бурысы – ундайҙарҙы ваҡытында таныу, фашлау.

Сәй килтерҙеләр. Биҙәкле таштан яһалған касаны ирендәренә яҡын килтергәс, Ҡәнзәфәр ни саҡлы һыуһағанын аңланы. Бындай затлы һауытты ғүмерендә тәүләп тотоуы ине. Әлбиттә, ул йә Ҡытайҙа, йә Алыҫ Көнсығыш илдәренең береһендә яһалғандыр. Һәм, моғайын, дәрәжәле берәй әфәнденең байлығы булғандыр.

– Теләгебеҙ шул ине, хөрмәтле Арыҫлан улы: бында килгән һәммәбеҙҙең дә Петр Федоровичты күргеһе, уның ысын Петр Өсөнсө икәнлеген белгеһе килә.

– Башҡорт старшиналарынан иң беренсе булып уға мин килдем. Иманым камил: ул – ысын Петр Өсөнсө. Ун йылдан ашыу ваҡыт халыҡ араһында йөрөп, ябай кешеләрҙең тормошон ныҡ өйрәнгән, артабан былай йәшәү мөмкин түгеллеген аңлап, ҡатыны Екатеринаны, йәғни, беҙҙеңсә, Әбей батшаны бәреп төшөрөргә, тигән ҡарарға килгән. Уның етәкселегендәге әлеге ихтилал – бығауҙан ысҡыныу, ирекле йәшәү өсөн берҙән-бер ышаныслы сара. Беҙ – башҡорттар, татарҙар, мишәрҙәр, башҡа халыҡтар – мотлаҡ Петр Федорович яғында булырға тейеш. Әгәр ҙә икегә бүленеп, үҙ-ара һуғышабыҙ икән, әлегенән дә яман яҙмышҡа дусар ителәсәкбеҙ. Башҡортостан күген ҡара шаршау ҡаплаясаҡ. Бурыс шул: старшиналарҙы халыҡ менән бергә үҙебеҙҙең яҡҡа ауҙарыу.

– Ә Стәрлетамаҡҡа йыйылған ғәскәр һуң? – Йәғәфәр, башын бороп, ишек яғына ымланы.

– Стәрлетамаҡ ул яҡта түгел, – тип көләмһерәне Кинйә, – минең арҡа артында. Уңды, һулды нығлап айыра белергә кәрәк. Юҡһа, ҡышын аҙашып, туңып бөтөүебеҙ ихтимал. Ә хәҙер, – Кинйә күтәрелде, – һинең менән, Ҡәнзәфәр, батшаға барайыҡ. Тылмастар, писарҙар кәрәк. Наҙанлыҡ ҙур. – Ишектән сыҡҡас, бүтәндәргә боролдо. – Ә һеҙ аҙыраҡ сабыр итегеҙ. Ошонда көтөгөҙ.

Урамда буталған кешеләр Кинйә менән баш эйеп иҫәнләштеләр, ҡайһы берәүҙәре нимәлер һорап өндәште, ләкин ул усын һелкеп, ашығыуын, ваҡыты тарлығын белдерҙе. Ҡәнзәфәрҙе эйәрткән Кинйә урам тулы халыҡты йырып Берды казагы Ситников йортона ҡарай атланы. Пугачев бейек ҡапҡалы ошо ҙур өйгә урынлашҡайны.

Атаман Емельян Иванович, Яйыҡ ҡаласығын баҫып алған кеүек еңел еңеүгә ирешәсәгенә ышанып, килгән ыңғай уҡ армияһын Ырымбурға ябырылдырҙы. Әммә, баш күтәреүселәрҙең форпостарҙа, ҡәлғәләрҙә тотҡарланыуынан файҙаланып, губернатор Рейнсдорп бөтә кешене ҡаланы ураткан ағас стеналарҙы, ҡойма-ҡапҡаларҙы нығытырға мәжбүрләне. «Әгәр Дон казагы – Ялған батша тарафынан дарға аҫылынырға теләмәһәгеҙ, ҡаланы һаҡлағыҙ!» – тип һөрән һалдылар.

Эйе, Пугачев әлегәсә һаҡлығы йомшаҡ булған ҡаланы атакалауҙа ҡиммәтле көндәрҙе ҡулынан ысҡындырҙы. Губернатор иһә, ғәскәрен ҡаланан сығарып ситтә һуғыштырмау тактикаһын ҡулланып, дөрөҫ эшләне; яугирҙарын һаҡлап ҡалды, етмеш тубы булған өс меңгә яҡын һуғышсыһы менән Ырымбурҙа бикләнде, ситтән ярҙам килгәнгәсә оборонала торорға ҡарар итте.

Егерме тубынан ҡаланы туҡтауһыҙ утҡа тотһа ла, күп кешеләрен ҡорбан итеп штурмлап ҡараһа ла, Пугачев Ырымбурҙы ҡулға төшөрә алманы.

Икенсе ноябрҙә пугачевсылар ҡаланы штурмларға тағы бер ынтылып ҡараны, хатта айырым төркөмдәр ҡәлғә валын емереп үтте, ләкин егерҙарҙың мәргән уты аҫтында, штык бәрелеше һөҙөмтәһендә артҡа алып ташланды.

Пугачев ҡалаға яҡын урында башҡорт, ҡалмыҡ атлыларын ҡалдырып, төп көсөн Берды эргәһенә күсерҙе һәм: «Ҡаланы ҡамалышта тотоп, халыҡты асҡа интектереп, баш эйҙертәсәкмен!» – тип белдерҙе.

Өйөндә Ситников үҙе һәм һаҡсылары – «гвардионецтар» ғына ине. Ҡапҡанан үткәрһәләр ҙә, ишек төбөндә дежурҙа тороусы Давилин тигән казак мылтығын алғараҡ һуҙҙы.

– Хәлең нисек, Яким? – тип өндәште уға Кинйә.

– Һине, баш полковник, үткәрәм, ә был кешене – юҡ. Үҙенән рөхсәт кәрәк. – Казак тәҙрә яғына ымланы.

– Тәртип икән – тәртип, башҡаса сара юҡ, – тип Кинйә ишеккә йүнәлде. – Саҡ ҡына көт.

Ысынлап та, Кинйә оҙаҡ торманы, ишекте яртылаш асып, Ҡәнзәфәргә инергә эйәк ҡаҡты.

Өҫтәл артында сәс ситтәре түңәрәкләп тигеҙ ҡырылған, шыма итеп һыпырылған кеше ултыра ине. Һаҡаллы эйәген йоҙороҡтарына терәгәнлектән, ҡыҙыл төҫтәге күлдәгенең киң еңдәре терһәгенә шыуған. Ишек яғына боролманы. Кинйә башын ҡағып ҡына «эйе, ул»ды аңлатҡас, Ҡәнзәфәр өҫтәлгә табан ике аҙым яһаны ла теҙләнде. Ҡара һаҡаллы әлеге бәндә ҡулының береһен эйәгенән ысҡындырҙы ла, шуны һелкеп, баҫырға ишараланы.

– Ниндәй кешеләр һеҙ? Ниңә килдегеҙ?

– Шундай хәбәр ишеткәйнек: имеш, ғәли йәнәптәре Петр Федорович пәйҙә булған. Ә беҙҙә уның вафат булыуы хаҡында иғлан ителгән татар һәм рус телдәрендә манифест бар.

– Тыңламағыҙ ундай юҡ-бар хәбәрҙе. – Пугачев бармағы менән күкрәгенә төрттө. – Мин иҫән. Мине «Емельян Пугачев» тип яҙған манифестары бына минең ҡулда, ҡарағыҙ.

– Һорарға рөхсәт итегеҙ улайһа: шул тиклем оҙаҡ ваҡыт ҡайҙа булдығыҙ?

– Ҙур боярҙарҙан ситкәрәк китергә тейеш инем. Сөнки генерал Воронцов ҡыҙы Елизавета менән йәшәнем. Шул сәбәпле Петербургтан утыҙ саҡрым ситкә киттем. Баярҙар мине күрә алманы, тоторға ғәскәр ебәрҙеләр. Ә мин кәмәгә алтмыш кеше ултыртып, немец еренә ҡастым. Цареградта – йыл ярым, немец ерендә – өс йыл, Кубанда бер йыл, Царицында, Ҡазанда, Яйыҡта йәшәнем. Бөтә ерҙә лә ябай халыҡтың нисек йәшәүен, байҙарҙан рәнйетелеүен күрҙем...

Шул саҡ өйгә ҡалмыҡ ғәскәрҙәренән депутат инде. Уны етәкселәре Петр Өсөнсөнөң үлеүе хаҡындағы манифесты һәм Батшабикә биргән билдәне күрһәтергә ебәргәндәр икән.

– Быларҙың береһенә генә лә ышанма, – тине Пугачев. – Мин тере. Миндә хеҙмәт итергә ҡал. Һиңә ҙур дәрәжә, билдә бирермен. Мә, бүләккә кафтан.

Ҡалмыҡ сығып киткәс, Пугачев Ҡәнзәфәргә боролдо.

– Һөйлә, Усаев, Башҡортостанда хәлдәр нисек?

– Төрлөсә. Стәрлетамаҡ пристаненә ғәскәр ...

Петр Федорович туп-тура Ҡәнзәфәргә ҡараны. Күҙҙәре ялтырап китте. Ҡәнзәфәр һүҙенән бүленде. «Туҡта, туҡта, был күҙҙәр, ҡаҡса йөҙ таныш кеүек тә инде. Эйе, эйе, тауышы ла ят түгел. Батшаны ул ҡайҙалыр күргәйне бит. Тик ҡайҙа? Һаташамдыр. Нимә эшләп мин батша тиклем батша менән осраша алайым, ти? Әллә һалдатта саҡта?..»

Пугачев та, күҙҙәрен ҡыҫа биреп, ҡаршыһында аяғүрә торған кешегә баҡҡан. Ул да нимәнелер хәтерләргә тырыша шикелле.

– Һөйлә-һөйлә, нимә ҡатып ҡалдың? – тип ҡабаттан һораны. – Тиҙ бул, ваҡыт тар.

– Аңлайым. Пристандә меңдән ашыу халыҡ йыйылды.

– Кемгә тип?

– Губернаторға ярҙамға.

– Беләм. Халыҡтың кәйефе нисек?

– Төрлөсә. Дөрөҫөн әйтәйем, күпселек һиңә, ғәли йәнәптәре, икеләнеп, шикләнеп ҡарай.

– Дөрөҫөн һөйләйһең, молодец. – Кинйәгә боролдо. – Насар эшләйбеҙ. Минең манифестар, указдар, мөрәжәғәттәрем халыҡҡа барып етмәй, тимәк. Еткәндәрен старшиналар йәшерә. Һинең тарафтан да хаттар кәрәк. – Ҡабат Ҡәнзәфәргә боролдо.

– Ишетеүемсә, ҡатының… батшабикә һине ҡыйраттырыр өсөн генерал Карҙы юлға сығарған. Ул ошо көндәрҙә Бөгөлмәлә булырға тейеш. Подпоручик Ураков етәкләгән пристандәге халыҡ уға ҡушыласаҡ.

Пугачев эйәген йоҙроҡтарына терәне лә тәҙрәгә ҡараны. Ыңғырашып-һыҡрап  ниндәйҙер көй сығарырға булашты.

– Кинйә, ул халыҡ минең яҡҡа сығырға тейеш. Әгәр ҙур төркөм менән, Аллам һаҡлаһын, ныҡлы бәрелеш була ҡалһа, аҙағы насар бөтәсәк. Халыҡ-ара татыулыҡ, берҙәмлек нигеҙенә һуғасаҡ.

– Килешәм.

– Килешеү – бер, ә инде быны юҡҡа сығарыу – икенсе хәл. Кем ул Ураков?

– Шул тиклем кешеләр менән етәкселек итер кеше түгел.

– Мин дә шулай уйлайым. Ҡурҡаҡ кешегә оҡшаған. Башҡорттарҙан, мишәрҙәрҙән шикләнә, уларға ышанмай.

– Ә һин миңә нисек ҡарайһың? Кемлегемде белер өсөн килгәнһең бит.

– Дөрөҫө шулай. Ә һинең ысын батша – Петр Өсөнсө икәнлегеңә шикләнмәйем.

– Халыҡты ышандырырға ярҙам ит. Әлегә бында бул. Артабанғы яҙмышыңды, иптәштәреңдекен дә хәл итербеҙ. Беҙгә грамоталы кешеләр күп кәрәк тә бит, ҡайҙан алаһың? Шулай уҡ халыҡты етәкләүселәр, уларҙы әйҙәүселәр тағын да күберәк талап ителә. – Пугачев өҫтәл артынан сығып, бүлмә уртаһына баҫты. Уның урта буйлы ғына икәнлеген күргәс, Ҡәнзәфәр аптырабыраҡ ҡалды, сөнки һөйләнеп ултырғанда, яуырынының киңлегенә, күкрәгенең ҡалҡыбыраҡ тороуына ҡарап һиммәтле кәүҙәлелер тип күҙ алдына килтергәйне.

– Кар, Кар … – Ялған батша көләмһерәп ҡуйҙы. – Воронов та түгел, шул ҡоштоң ҡарлыҡҡан тауышын ғына фамилия иткәндәр. Кинйә, Карҙы ҡайҙа, нисек ҡаршылау хаҡында кәңәшләшербеҙ. Стәрлетамаҡ командаһында кешеләрең бармы? Элемтә нисек?

– Улар араһында ышаныслы яҡташтар бар.

Пугачев күҙенең сите менән генә Ҡәнзәфәргә ҡараны, күҙен ҡыҫып алды.

– Усаевты унда ебәрергә ярамай, минеңсә. Ул Стәрлетамаҡтан ҡасып киткән. Уны беләләр. Мөҡсин, Солтанморат кеүек старшиналар Ҡәнзәфәрҙең башына етеү менән янайҙыр.

– Меңдән ашыу кешенән торған командала старшина Юлай Аҙналин улы Салауат, Ноғай юлының баш старшинаһы Әлибай Мырҙағолов бар. Әлибайға таянырға була. Минең кеше. Салауат? Йәш әле. Егермелә генә шикелле. Атаһы һикһән кешенән отряд төҙөп, етәкселек итергә уны ебәргән.

– Беҙгә ҡаршымы?

– Атаһы – элекке башҡорт ихтилалдарында ҡатнашҡан, батша властары тарафынан рәнйетелгән старшина. Завод төҙөү өсөн биләмәһен тартып алғас, судлашып йөрөүе, тик уның дәғүәһе кире ҡағылыуы хаҡында беләм. Бер заман

Ырымбур юлында осрашып һөйләшеп тә торғайныҡ. Моғайын, малайына әйтер һүҙҙәре булғандыр.

– Ҡарарбыҙ. Ырымбурҙы ҡамау, уны тупҡа тотоу дауам итәсәк. Ҡул ситтәренән туңып, уртаһын әкренләп ҡатыра. Беҙ ҙә тиҙ үк бирелмәгән ҡалаларҙы шулай туңдырырға тейешбеҙ.

Төньяҡ-көнбайыштан килеүсе крәҫтиәндәр, муллалар, йөҙ баштары, кире ҡайтыусы сауҙагәрҙәр Карҙың ҡайһы тарафтарҙа хәрәкәт итеүен Пугачевҡа еткереп торҙо. Ялған батша йыйылған хәбәрҙәрҙең дөрөҫлөгөн тикшерҙе. Сөнки имешмимештәр ҙә етерлек ине. Екатерина Икенсе ҡушыуы буйынса Ырымбур губернаһы халҡына төҙөлгән манифестың Кар ҡулында икәнлеге лә, уның ике йөҙ дананан тороуы ла мәғлүм ине. Шул манифест күсермәләрен – листовкаларҙы генерал Бөгөлмәнән сыҡҡас та тараттыра башланы. Ул етәкләгән ғәскәрҙе нығытыу йөҙөнән, Мәскәүҙән ике пехота гренадерҙар, йәғни һайлап алынған яугирҙар полкы ебәрелде.

Батшабикә әйтеүенсә, ҡасаҡ Емельян Иванович Пугачев Яйыҡ ауылдарынан үҙе кеүек бурҙарҙы, берәҙәктәрҙе йыйып, император Петр Өсөнсө исемен үҙенә алырға тәүәккәллек итеп, Яйыҡ йылғаһы буйындағы Ырымбурға табан ҡайһы бер ҡәлғәләрҙе таланы һәм туҙҙырҙы, төптән уйлай белеүсе кешеләрҙе боҙа, әхлаҡһыҙлыҡ юлына баҫтыра ... Әгәр ҙә уның ҡотҡоһона бирелеп эйәреүселәр аңдарына килеп унан ситләшмәһәләр, тәүбәгә килмәһәләр, беҙҙең асыуға һәм язаға дусар ителәсәк ...

Ләкин ғәрәсәт, дауылдағы янғынды хәтерләткән ихтилал, баш күтәреүселәр хәрәкәтен туҡтатырлыҡ, тыйырлыҡ, һүндерерлек түгел ине инде.

Генерал Кар иһә Ырымбурға ҡарай хәрәкәтен дауам итте. Бөтә борсолоуы шул: ғәскәре йәйәүлеләрҙән тора, атлылар аҙ, фетнәселәрҙе тар-мар иткәс, уларҙы тиҙ генә ҡыуып етә алмаҫ. Шулай икән, баш күтәреүселәрҙең ҡабаттан ойошоу ҡурҡынысы бар. Дөмөктөргәс аҙағынаса дөмөктөрөргә кәрәк. Тик подпоручик Ураков командаһының килеп етмәүе, ундағы башҡорт, татарҙарҙың икеләнеүе хәбәре борсоно. Әгәр ҙә меңдән артыҡ һыбайлы өҫтәлһә, фетнәселәрҙе далала ҡуян урынына ауларға булыр ине. Тик етенсе ноябрҙә Стәрлетамаҡ пристанендә халыҡ йыйып ултырған Өфө воеводаһы Богданов ебәргән хәбәр шөбһәгә һалды: Әүжән-Петров заводы крәҫтиәндәрен баш күтәртеп, ундағы туптарҙы, байлыҡтарҙы ҡулына төшөргән Афанасий Соколов (Хлопуша) биш йөҙ башҡорт оҙатыуында Пугачевҡа ҡушылырға килә. Бына-бына Йөҙөй ауылына етәсәк. Кар авангард отряды командирын Сәрмәнәйгә саҡыртты.

– Секунд-майор Шишкин, Мостафа ауылын ҡалдырып, һис кисекмәҫтән Йөҙөйгә юллан! Һиңә биш йөҙ атлыны юҡ итеү бурысын ҡуям. Приказ аңлашыламы?

– Так точно, генерал-майор әфәнде. Бойороғоғоҙ үтәлер ...

Ләкин хөкүмәт ғәскәрҙәрен етәкләүселәрҙең планы ғәмәлгә ашырылманы, Йөҙөй ауылына етәрәк һис көтмәгән яҡтан уларҙы пугачевсылар атакаланы һәм ҡулсаға алды. Кар фетнәселәргә Екатеринаның манифесын да биреп ҡараны, тик уға:

– Рәсәйҙә бер генә батша – Петр Федорович! – тип яуапланылар. – Әгәр ҙә уны таныуҙан кем баш тарта, уны – үлем, ә инде беҙҙең яҡҡа сығыусыларҙы ирек, ер, һыу, урман, байлыҡ көтә.

Генералды иң ҡурҡытҡаны ошо ине. Сөнки ул Ураков отрядында ғына түгел, үҙ командаһындағы һалдаттар араһында ла икеләнеүселәрҙе, яңы батша яғына ынтылыусыларҙы тоя ине. Ул йөҙҙән ашыу яугирын юғалтып, кире Сәрмәнәй

ауылына һыпыртты. Нәҡ ошо саҡта килеп еткән Ураков алға, генералға ярҙам ҡулы һуҙырға бойорһа ла, ғәскәре Башҡортостан яғына, Ибрай ауылына ҡарай боролдо. Оҙайлы юлда һәр саҡ алға әйҙәп атлаусы подпоручикка уларға эйәрергә генә ҡалды. Ҡулынан бер нәмә лә килмәйәсәген аңлаған Ураков Ырымбурға – Пугачевҡа ҡаршы барырға Солтанморат Янышевҡа бойороп ҡарағайны, тик үҙ мәнфәғәтен генә ҡуҙәтеүсе, хәйләкәр баш старшина Өфөгә генә түгел, хатта Бөгөлмәгә һыпыртыуҙы хуп күрҙе. Уныңса, бөтә Башҡортостан Ялған батшаға һатылған. Ул шулай ҙа өйөнөң таланғанлығы, хужалығы туҙҙырылғанлығы, Ҡаранай Моратовтың күп ер эләктереү уйы менән Ҡарыш ауылынан Ауырғазыға күсеп ултырған бай башына етеүсегә биш йөҙ һум вәғәҙә итеүе хаҡында ишеткәйне. Шуға күрә, Әбей батшаның көслө ғәскәрле генералдарына яҡынайырға кәрәк, тип уйланы. Тик шундайҙар менән генә Ялған батшаға – Дон буры Пугачевҡа ҡаршы көрәшергә мөмкин буласаҡ, сөнки бөтә старшиналар тип әйтерлек һатлыҡ йәндәргә әйләнеп бара. Ана, командирҙар араһында тәүәккәлдәре, хәрби эште белгәндәре лә юҡ түгел. Кар хурлыҡлы рәүештә еңелеп, Бөгөлмәгә ҡарай һыпыртһа, Озерный ҡәлғәһе коменданты бригадир Коф, 2400 кешенән торған ғәскәре башында көнсығыштан килеп, Ырымбурға кергән. Егерме ике тубын да ташлап ҡалдырмаған. Уны ҡамауҙа тотолған ҡалаға индереү Пугачевҡа еңелеүгә тиң. Юҡһа ул халыҡты, губернаторҙы асҡа интектереп баш эйҙерергә хыялланғайны бит. Солтанморат, әлбиттә, Пугачев яғындағы ғәскәрҙәрҙә үҫеп сығасаҡ полковниктарҙы күҙ алдына килтерә алмай ине.

Алдан уҡ үҙ-ара һүҙ ҡуйышҡан Әлибай Мырҙағолов менән Салауат Юлаев етәкләгән башҡорттар тулы килеш Пугачев атамандары Зарубин, Овчинников ғәскәрҙәренә килеп ҡушылды. Был хәл 1773 йыл ноябрь айының һалҡын унынсы көнөндә булды.

Әлибай тиҙ үк Пугачевты күрергә ашыҡһа ла, Кинйә әлегә тороп торорға кәрәклеген, батшаның ваҡыты юҡлығын аңлатты. Оҙаҡламай Ситников йортонан ниндәйҙер казак сыҡты. Ул ниңәлер танау тирәһен бейәләйе менән ҡаплағайны. Икенсе ҡулын күтәреп, Кинйә менән башын ҡағып ҡына иҫәнләште. Туҡталманы.

– Кем ул? – тип һорап ҡуйҙы Салауат серле кеүек тойолған был әҙәм хаҡында.

– Соколов-Хлопуша. Ғәйрәтле, ҡурҡыу белмәҫ кеше. Петр Федоровичтың яҡын дуҫы. Полковник.

– Әллә Уралда йөрөгән кешеме?

– Эйе, батшабыҙ үҙе ебәргәйне. Унда халыҡты ҡуҙғатып, завод ҡыйратып, үҙе менән бик күп кеше, байлыҡ, туптар алып ҡайтты.

– Ә ниңә йөҙөн ҡаплай? Кемдән ояла?

– Күп белһәң, тиҙ ҡартайырһың, – тип Кинйә Салауаттың арҡаһынан йомшаҡ ҡына ҡағып ҡуйҙы.

Шул арала дежур һалдат:

– Государға рәхим итегеҙ, – тип ишеккә ымланы.

Былар кергәндә Пугачев урталыҡта баҫып тора ине. Күрәһең, Хлопуша менән ултырып һөйләшмәгәндәр. Ул шунда уҡ Мырҙағоловты ҡосаҡлап алды. Арҡаһына шап-шоп һуға-һуға:

– Рәхмәт, Алибайка, молодец, Алибайка, – тип һөйләнде, – Шулай булырына ышандым. Ә был малайка кем? – Һоро күҙҙәрен яндырып, Салауатҡа текләп ҡараны.

– Юлай улы Салауат.

– Бында нимәгә килгән?

– Нисек нимәгә? Команда алып килде.

– Катерина манифесы буйынса, атаһы старшина Аҙналин, йәғни Юлай һикһән кеше туплап, Стәрлетамаҡ пристаненә ебәргән. Мең дә ике йөҙ кешене губернаторға, дөрөҫөрәге, һиңә ҡаршы һуғышҡа ярһыған генерал-майор Карға ярҙамға килтерергә тейеш инек. Күреп тораһың, әфәндем, беҙ иҫән-аман бында аяҡ баҫтыҡ.

Пугачев «һе» тип кенә ҡуйҙы. Көлмәне. Ул Әлибай һөйләгәндә тик Салауатҡа ғына ҡарап торҙо. Салауат, үҙ сиратында, уңайһыҙланһа ла, батша тиклем батшаны ныҡлап күреп ҡалайым, бүтәнсә форсат әллә була, әллә юҡ, тигәндәй, күҙҙәрен ситкә алманы.

– Ну, күрешәйек, – тип ҡулын һуҙҙы Пугачев.

Батшаның усы ҙур, көслө булыуына аптыраны Салауат, ә Емельян Иванович егеттең ныҡлығына, етди йөҙөнә һоҡланды. Әлибайға боролдо:

– Туйын ҡасан яһарға уйлай? Һуғыштың һуҙылыуы мөмкин бит.

– Үҙенән һора. Русса ла яҡшы белә ул.

– Ну-у, улайһа тағы ла шәп. Беҙҙеңсә ҡайҙа өйрәндең? Хәрби хеҙмәттә булмағанһыңдыр?

– Юҡ. Атай күп йөрөнө. Беҙҙең тирәлә заводтар күп. Уларҙа рус крәҫтиәндәре. Аралашырға тура килә.

– Ниндәй заводтар?

– Эҫем. Сатка. Йүрүҙән. Усть-Ҡатау. Златоус.

– О-о-о. Шул ҡәҙәр завод. Уларҙы яндырманылармы әле?

– Юҡ, Эҫемде үртәйәсәкбеҙ.

– Һеҙҙең биләмәгә һалынған өсөнмө?

– Ә һин уны ҡайҙан беләһең?

– Мин батша ла инде. Ә һин һуғыштан ҡурҡмайһыңмы?

– Хаҡлыҡ өсөн көрәштән ниндәй егет шөрләр.

– Үҙеңә команда йыя алыр инеңме?

– Ни саҡлы? Йөҙ? Биш йөҙ?

– Мең булһа, тағын да яҡшыраҡ.

– Батшаға кәрәк икән, булдырасаҡбыҙ.

– Ярай, егет, әлегә был тирәләрәк уралырһың.

– Егеттең ике бисәһе бар.

– Ну-у. – Пугачевтың ҡалын ҡаштары маңлайын йыйырҙы, ирендәре алға һуҙыла төштө. – Законлылармы?

– Башҡорттарҙа никахһыҙ ҡатындар булмай.

– Давай, барығыҙ, тамаҡ туйҙырығыҙ. Кем әйтмешләй, мосолмандарға сусҡа итен әрәм итеп булмай, уға дөйә, тәкә, ҡош ите лә ярап торор. – Пугачев кеткелдәп көлдө. – Никах. Ике ҡатын, имеш. Ырымбурҙы штурмларға әҙерләнәбеҙ. Кинйә, Әлибай, халыҡты һуғыш ысулдарына өйрәтергә кәрәк. Аҡырып йүгереүҙән генә, күсәк болғауҙан ғына һөҙөмтә аҙ. Атакаларҙы кире ҡағып ҡына торалар. Туптар аҙ, юҡ дәрәжәһендә.

– Уларҙы Урал заводтарында ҡойҙороп ҡарарға кәрәк.

– Дөрөҫ әйтәһең, Кинйә, ул хаҡта күптән уйлайым. Бүрене лә мылтыҡһыҙ ҡурҡытып булмай. Бесән, фураж хаҡында ныҡ ҡайғыртаһы бар. Икмәк бешереү юлға һалынды шикелле. Былай ашығып килгән ҡышты ла хәтерләмәйем… – Пугачев әлеге борсолоу һүҙҙәрен янындағыларға саҡ ишерерлек итеп кенә һөйләнде. – Ҡәнзәфәр нимә ҡыра?

– Ҡағыҙҙар менән мәж килә. Уйыбыҙҙы, тотҡан юлыбыҙҙы алыҫтарға еткерергә кәрәк. Башҡортостанға үҙең барып сыҡһаң, һәйбәт булыр ине. Халыҡ көтә.

– Әлегә иртә, дуҫтар. Яйыҡ буйын аҙағынаса хәл итергә кәрәк. Ҡаҙаҡтар ҙа өҙөп кенә ыңғай һүҙ әйтә һалмай. Кесе Жуздың ханы Нуралиҙың күңел ҡылдарында Рейнсдорп оҫта уйнай. Ул Нуралиға, әгәр ҙә ҡаҙаҡтар фетнәселәрҙең йәшәү урындарына барымтаға киләләр икән, ҡаршылығыбыҙ юҡ, тип хәбәр ебәргән. Ҡара халыҡҡа ни шул ғына кәрәк: шунда уҡ Ильин, Татищев, Түбәнкүл, Рассыпной ҡәлғәләренә, хуторҙарға, Яйыҡ ҡаласығына һөжүм иткәндәр һәм булған бөтә мөлкәтте, ғаиләләрҙе далаларына алып киткәндәр.

– Неплюев та башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһын шулай бутаны бит. Кесе, Урта жуздарға яҡлау эҙләп ҡасҡан илле мең башҡорттоң яҙмышы фәжиғә менән тамамланманымы ни? Егерме йылға яҡын ваҡыт үтһә лә, яра әле булһа уңалмаған.

– Шул уҡ хәлдең әле лә ҡабатланыуы ихтимал, Кинйә. Һин уҡымышлы кеше, быларҙы милләттәштәрең яҡшы белә. Уяу булырға кәрәк. – Пугачев көләмһөрәне. – Ана, Карға ярҙамға килеүсе гренадерҙар, еңеү кеҫәлә тип, саналарында йоҡлап килгәнлектән, йып-йылы килеш ҡулыбыҙға ҡапманылармы ни. – Батша эйелеп тәҙрәгә ҡараны. – Кис менән хәрби коллегия ултырышы.

– Аңланым, – тине Кинйә.

– Ырымбур. Боғаҙға ултырған һөйәк шикелле, һулышты ҡыҫа, – тип һөйләнде Пугачев, сөйгә эленгән кафтанына үрелеп. – Башҡортостандан өҫтәлмә көс алып килгәнегеҙ өсөн ҙур рәхмәт, егеттәр. Иҫтә тотормон.

Урамда тағын да һыуыта төшкәйне. Аттарҙың морондарынан пар күтәрелә, шыжлап үтеүсе сана, ҡысҡырып һөйләүселәрҙең тауыштары ишетелә ине.

Был өсәү Кинйә тирмәһенә ҡарай йүнәлде. Ишек эргәһендә уларҙы Ҡәнзәфәр ҡаршыланы. Кинйә менән килгән икәүҙе Стәрлетамаҡ пристаненда күргәйне, ләкин кемлектәрен белмәгәйне. Бәлки, әле килгән ғәскәр сафтарында булғандарҙыр. Уларға ике ҡулын һуҙып күреште.

Тирмәгә инеп, дүрткә бөкләнгән кейеҙгә ултырғас, өлкәнерәк йәштәге башҡорт Кинйәгә еүеш сепрәк бирҙе. Ул устарын һөрттө лә Әлибайға боролдо:

– Ҡулдарығыҙҙы, – тип шул сепрәкте һуҙҙы.

Шунда уҡ икенсе башҡорт ит тултырылған табаҡты ҡунаҡтар алдына ҡуйҙы.

– Кинйә абыҙ, рөхсәт итегеҙ, шундай һорауым бар, – тип Салауат башын күтәрҙе. Кинйә түбәтәйен баҫа төштө. – Бая батша ишегенән сыҡҡан кеше тиҙ үк йөҙөн ҡапланы. Әллә айырым дәрәжәләгеме? Кемгә нисек мөрәжәғәт итеү тәртиптәрен белеү ҙә кәрәктер.

– Мин дә уға иғтибар иттем, – тип ҡыҙыҡһыныуҙы ҡабарта төштө Ҡәнзәфәр. – Уның йөҙө яралы шикелле.

– Етешеп ултырығыҙ әле. Эсегеҙгә йылы аш инһен. – Ә үҙе ит киҫәген тотоп уйға ҡалды. Күҙҙәрен йомдо. Эргәләгеләр хатта уның йоҡоға талыуынан шикләнде. Кинйә ауыр көрһөндө. Тамағын ҡырҙы. Күҙҙәрен асып, бөтәһен дә барланы. – Хлопушаны әйтәһегеҙ. Ысын исем-аты – Соколов Афанасий Тимофеевич. Уның яҙмышына дошманың да дусар булмаһын. Башынан кисергәндәреме... йә, йә, етешегеҙ. Ҡоҙаға ҡунаҡҡа килмәгәнһегеҙ, команда бирелдеме, сыҡтыҡ йүгерҙек булыр. Һуғыштабыҙ, туғандар. Һөргөндәге каторжан ул. Танауы йолҡолған, битенә, маңлайына тамға һалынған. Алтмыш йәштә. Тик, аңлайһығыҙ, йөҙөнә ҡарап йәшен билдләп булмай. Элекке Тверь крәҫтиәне. Мәскәүҙә ат менән йөк ташып та йөрөгән, ти. Егерме йыл элек ошо тарафтарға һөрөлгән. Тимашев, Покров заводтарында эшләгән. Юл баҫҡан өсөн ҡамсы менән ярғандар, танауын өҙөп мәсхәрәләгәндәр. Себергә каторгаға ебәргәндәр. Унан ике тапҡыр ҡасҡан. Тағын ҡамсы. Болаға тиклем Ырымбур острогында ҡул-аяҡтары

бығаулы килеш тотолған. Коллежский советник Иван Тимашев кәңәше буйынса, губернатор Рейнсдорп, Хлопушаның ҡулына дүрт указ тоттороп, уны ихтилалсылар яғына, йәғни беҙгә ебәргән.

– Ниндәй мәрхәмәтлелек, ә. Бығауҙарын һалдырып – ирекә! Ышанмаҫлыҡ хәл.

– Мәрхәмәтлелектең төбөндә нимә ятҡанын самаламайһыңмы ни, Ҡәнзәфәр?

– Төбө – ирек!

– Ирекең шарты бар шул. Шарт иһә бер – Петр Федоровичты үлтереү. Беҙҙең батша уның «йомош»он тыңлап бөттө лә, ял иттереп, һыйлағандан һуң, Әүжән-Петров заводтарына ебәрҙе. Государҙың ышанысын тулыһынса аҡланы. Ишеткәнһегеҙҙер, Уралдан отряд, туптар, ҡаҙна аҡсаһын, байлыҡ тейәп, ат, мал-тыуар көтөүҙәре ҡыуып алып ҡайтты. Бына кем ул йөҙөн кешеләрҙән йәшереп йөрөүсе зат.

Өндәшеүсе табылманы. Тик һурпа эскәс кенә, шул уҡ Салауат:

– Кеше тиклем кешенең йөҙөн мәсхәрәләргә ниндәй выждан кәрәк, вәхшилек, – тип һөйләнде, тештәрен ҡыҫып. – Тере кешене шулай йәмһеҙләгәс ни.

– Мал урынына тамға һалалар, ә! Ҡыҙҙырылған тимер менән.

– Аптырама, Ҡәнзәфәр, – тип Кинйә уға боролдо, – ишетеп белеүемсә остазың Батырша ла шундай уҡ язаға тартылып, Петербургка, унан ары Шлиссельбург ҡәлғәһендәге төрмәгә ғүмерлеккә ябылған. Һуңғы һулышына ҡәҙәр бығауҙары һалдырылмаясаҡ.

– Халыҡты рәхимһеҙ рәүештә иҙелеүҙән, мәжбүри суҡындырыуҙан ҡотҡарырға тырышҡаны өсөнмө? Көлгә әйләндерелгән йөҙәрләгән ауылдар ... Әҙәм балаһының һуҡыр бер тинлек тә ҡәҙере юҡ... – Ҡәнзәфәр алдында ятҡан еүеш сепрәккә майлы ҡулдарын һөрттө лә устары менән йөҙөн ҡапланы. Өҙөп алыныуынан ҡурҡҡандай, танауын ҡапшаны. – Бөтә өмөт Петр Федоровичта. Тик уның етәкселегендә генә һуғышып ирек аласаҡбыҙ. Башҡаса сара юҡ. Ҡыбырламайбыҙ, ваҡытты бушҡа уҙғарабыҙ кеүек. Бынан файҙаланып, карателдәр көс туплай. Кар еңелгән икән, батшабикәнең генералдары аҙмы ни? – Күҙҙәрен күтәреп, төндөккә текләне. Асыулы йөҙөнә яҡтылыҡ төштө. Ҡиәфәтенә ҡарағанда хәҙер үк һикереп тороп тышҡа йүгереп сығыр, атҡа менеп дошманына ташланыр төҫлө ине.

– Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты була. Айҙары тулмай йән эйәһе лә тыумай. Һүҙ һуғыш хаҡында бара. Ҡаланы ҡулға төшөрөргә бер нисә тапҡыр ынтылып ҡараныҡ. Уңышҡа ирешмәнек. Әҙерлегебеҙ етешмәй. Халыҡ һаны күп, әммә ҡорал, бигерәк тә туптар юҡ дәрәжәһендә. Алыш ысулдарын белмәйбеҙ, тәртип түбән. Императорыбыҙ шуларҙы хәл итеү менән мәшғүл...

Төнгөлөккә элекке конторағa урынлаштылар. Мейесенә яғылмаһа ла, кешеләр күплектән йылынған, сисенмәй ятырға мөмкин ине. Иҙәнгә һалам, бесән түшәлгән. Боролоп ятырлыҡ та форсат юҡлыҡтан, тороп, сығып-инергә мөмкинлек булмаясағын аңлаған Ҡәнзәфәр, төнгөлөккә мәшәҡәтен ҡалдырмаҫҡа уйлап, өйгә ашыҡманы.

Аяҙ күк йөҙө йондоҙҙар менән тулы. Яңы ай, үпкәләгәндәй, ергә һырты менән тыуған. Тимәк, яуынлы буласаҡ.

«Ҡайҙа барһаң да, ҡайҙа йәшәһәң дә – шул уҡ көмбәҙ. Саҡмағошта ла, Ҡарышта ла, Боҙаяҙҙа ла, алыҫ Пруссияла ла бер үк боронғо йондоҙҙар, бер үк айҙыр. Тик шул көмбәҙ аҫтында йәшәгән кешеләрҙең яҙмыштары ғына төрлөтөрлө», – тип уйлап торҙо Ҡәнзәфәр. Һирәк-һаяҡ эттәр өрөп, аттар кешнәп ҡуя. Дежурҙағы һыбайлылар үтеп-һүтеп йөрөй. Алда хәүефле хәлдәр, ваҡиғалар көтөлөүе, буласағы ярылып ята ине. Быны тик тома һуҡыр кеше генә күрмәҫ,

һаҡбай ғына ишетмәҫ, быға һантый ғына иғтибар итмәҫ. Әгәр ҙә фетнәселәр еңелә ҡалһа, ул сағында карателдәр үткән ерҙәрҙә кеше ҡанынан шарлауыҡтар хасил буласаҡ.

Артынан һыуыҡ өйөрөлөп инмәһен өсөн, Ҡәнзәфәр ишектән ашығып инде. Мейес ҡашағындағы шәмдән һарғылт яҡтылыҡ төшә. Ярай әле, уны ҡайҙандыр табып, кемдер тоҡандырған, юғиһә атлау менән иҙән тулып ятҡан кешеләргә абыныр инең. Баҫып торған урынына ятырға йыйынғанда Салауаттың тауышы ишетелде:

– Былайыраҡ кил. Алмаш туным бар.

Ҡәнзәфәр тәүҙә табанына баҫырға урын ҡапшап, һаҡланып ҡына кешеләр аша тауыш яғына атланы. Томһа яҡтылыҡта терһәгенә таянып ятҡан Салауатты шәйләне.

Оҙаҡламай шәм янып бөтөп, һүнде. Бик күптәр хырлай. Тун аҫтында ятҡан Ҡәнзәфәрҙең керпектәренә йоҡо ҡунманы. Береһен-береһе алмаштырып, күңеле буйлап уйҙар сабышты.

Кем ул үҙен император тип иғлан иткән ҡасҡын Дон казагы Петр Өсөнсө? Емельян Иван улы Пугачевмы, әллә Екатерина икенсенең ире, ысын батша Петр Федоровичмы? Ҡайһыһы дөрөҫ? Кинйә абыҙ уны законлы «Аҡ батша» итеп таный. Старшиналарҙан иң тәүге булып бында ул килгән. Петр Өсөнсө 1728 йылда тыуған. Тимәк, уға ҡырҡ биш йәш булырға тейеш. Ә был? Уға утыҙ өс, тиҙәр. Ҡиәфәтенә ҡарағанда, ысынлап та утыҙ йәштәр тирәһендә генә. Ҡартаймаған, тиер инең, ул батша ашы ашап, аҡ һарайҙарҙа йәшәмәгән, ә ҡасып халыҡ араһында интегеп йөрөгән... Ҡаршыһына сәсе түңәрәкләп ҡырҡылған, осло һаҡаллы, сәнсеп ҡараусы шул кеше килеп баҫты. Сәнсеп ҡараусы... Ҡасандыр, ҡайҙалыр... Эйе, эйе, күргәне бар, тауышы ла хатта таныш кеүек. Һүҙҙәре хәтерҙә ҡалмаған. Юҡ, ҡалған икән. «Что уставился? И тебя такая же кара ждет. Иди, иди, шагай». «Ул!» тип әйтә һалды Ҡәнзәфәр һәм, бөтәндәрҙе уятыуынан шөрләп, һулышынан бүленде. Салауат ҡуҙғалып ҡуйҙы, өҫтөнә ябынған тунын тартты...

***

Ҡәнзәфәр, Ғабдулла Әлиев мәҙрәсәһендә биш йыл дауамында һабаҡ алғандан һуң, Саҡмағошона ҡайтты. Муллалыҡҡа белеме етерлек булһа ла, улының ун етелә генә икәнлеген иҫәптә тотоп, Усай өйләнеү хаҡында һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа ҡарар ҡылды. Остазы Ғабдулла әфәнде менән малайының артабанғы яҙмышы хаҡында төплө генә һөйләшеү ҙә булғайны. Ҡарыш муллаһы: «Улың зирәк, фекерләү һәләте һәйбәт, киләсәктә мотлаҡ уҡытыу кәрәгер ине», – тигәйне. Төплө белем бирерлек мәҙрәсәләрҙең береһе, яҡынырағы Стәрлебашта, икенсеһе Ырымбурҙан алыҫ түгел Татар Ҡарғалыһында икәнлеген әйткәйне. Теләгегеҙ бар икән, бер барыуымда Ырымбурға эйәртергә форсат табырмын, тип белдергәйне. Унда таныштары ла бар икән. Әммә ләкин был серләшеү хыялда ғына тороп ҡалды. Сөнки донъяны тетрәтерлек хәл ҡалҡып сыҡты. Аяҙ көндө күк күкрәне, йәшен уты ялтланы. Ихтилал! Уның башында халыҡ «Батырша» тип исемләйәсәк ахун торорон ул сағында кем уйлаһын. Ярай әле, етәксенең иң яҡын шәкерттәренең береһе Ҡәнзәфәр бәләгә юлыҡманы. Әгәр ҙә өйҙә – Саҡмағошта сағына тура килмәһә, моғайын, ул остазына эйәрер, уның юлынан барыр, батша бәндәләренә ҡаршы ҡорал ҡулланыр ине. Ә бит власҡа баш күтәреүселәр менән нимә булғанын Усай яҡшы белә: нәҫелдәрен ҡороталар.

Ауылдарҙа мәсеттәр төҙөргә рөхсәт ителде. Тимәк, ҡорбандар бушҡа китмәне. Уҡымышлы Ҡәнзәфәребеҙ бар, тип һөйләнеүселәр, кәңәшләшергә килеүселәр арттандан-артты. Яңғыҙ йәшәүен хупламауҙарын белдерҙеләр. Ләкин Усай: «Иртәрәк әле», – тип һәр саҡ ике һүҙ менән яуапланы.

Егетте өйләндерергә ваҡыт икәнлеген иҫкә төшөрөүселәр ҙә, тирә-йүндә нәҫелле кешеләрҙең һылыу ҡыҙҙарын димләүселәр ҙә табылды. Ундайҙарға яуап шул ине: «Күреп тораһығыҙ, был тирәләге йылғалар буйында ауылдар артҡан-дан-арта. Тәбиғи хәл: әҙәм балаһына донъя көтөү өсөн һыу, урман, ялан, йәшәү өсөн мал-тыуар, икмәк кәрәк. Ер наҡыҫлана. Шунлыҡтан алыҫыраҡ, иркенерәк урындарға күҙ ташлайһы бар. Өйләнеү ҡоро һөйләнеү генә булырға тейеш түгел, тәүҙә ныҡлы нигеҙ хаҡында уйларға, шуны хәл итергә кәрәк».

Ҡәнзәфәр атаһына ярҙамлашып йәшәй торғас, ике йыл ваҡыт үтеп тә китте. Һалдат хеҙмәтенә алыныр сағы етте. Улы урынына ярлы берәүҙең малайын ебәрергә мөмкин, тик Усай быңдай юлға баҫманы: «Һуғыш булмаһа, егет кеше һалдатта ныҒый, донъя гиҙә, илдәр, халыҡтар күрә, тәжрибә туплай, тел өйрәнә, үҙ аллы тормош ҡороп йәшәрлек кимәлгә етеп өлгөрә». Ҡәнзәфәр ҙә шул яҡлы. Әсәһе Маһинур был тәңгәлдә һүҙгә ҡушылманы. Йәшенеп иланы. Күгәрсене ун ике йәштән әллә ҡайҙа – Ағиҙел аръяғында, ниндәйҙер ғүмер ишетмәгән «Танып» тигән йылға тирәһендәге Ҡарыш ауылында оҙон ҡыштар буйы уҡып ятты. Әсә йылыһын, әсә ҡәҙерен күрә, әсәһе бешергән тәмле, туҡлыҡлы аштарҙы ашай алманы. Инде – һалдатҡа... Ҡәнзәфәрҙән ғәйре бала ла юҡ. Унан ике йыл һуң тыуған ҡыҙы сәсәк ауырыуынан вафат булды. Йүгереп йөрөй торған Мәрйәмен юғалтҡас, Маһинур саҡ хыялланманы.

Усайҙың улы пехотаға эләкте. Ул хеҙмәт итәсәк полкты оҙайлы юлға оҙаттылар. Рәсәй менән Пруссия араһында ҡабынған һуғыштың икенсе йылы ине. Кунерсдорф тирәһенә барып еткәнсе үткән араны кемдер иҫәпләнеме икән, Ҡәнзәфәр белмәне, әлбиттә. Хәйер, кемгә кәрәге бар. Хәлдән тайғас, бер аҙ ял иттерҙеләр ҙә – тағын алға. Нисәмә пар итектең табаны ашалды, ҡубып төштө. Ҡойғонмо, яндырып үлтерерлек ҡояш аҫтымы, буранмы – һин атларға тейешһең. Офицерҙарға һорау биреү, ҡаршы һүҙ әйтеү юҡ. Әгәр ҙә телең асыла икән, арҡаңа шомпол. Нисә тапҡыр һуҡтырыу – ғәйебеңә, дәрәсәрәге, командирҙың кәйефенә ҡарап. Теләһә, шомпол менән егерме, асыуы килһә, утыҙ, ҡырҡ тапҡыр ҙа һуҡтыра. Ундай бәхетһеҙлеккә юлыҡҡан бисараларҙың сейләнгән арҡаларына тиргә батып тоҙланған күлдәктәре йәбешеп әрнетә.

Кунерсдорф ауылы Одерҙағы Франкфурттың көнсығышындараҡ, килгән тәңгәлдәрәк икән. Пруссия короле Фридрихҡа ҡаршы Рәсәй, Австрия ғәскәрҙәре бергә һуғышасаҡ икән. Армияға генерал Салтыков командалыҡ итә. Кунерсдорф ауылы өсөн ҡан ҡойоу кемгә кәрәктер? Ҡомһоҙ аҡ батшабикә Елизавета ҡайҙа ҡул һуҙыуын аңлаймы икән? Берлинға ҡурҡыныс тыуғанлыҡтан, Фридрих Одер аша рус позицияларына һөжүм итмәксе, ти.

1759 йыл июль айы тамамланырға ун көн генә ҡалып бара. Ҡәнзәфәр йыл эсендә русса һөйләшергә арыу уҡ ҡына өйрәнде. Һалдаттар менән үҙ-ара әңгәмәләшеү артыҡ ҡыйын булмаһа ла, командирҙарҙың команда биреүҙәрен, һуғыш ысулдарына өйрәтеүҙәрен төшөнөүе ауыр. Кейем-формаларын таҙа, мылтыҡты майлап тотоуға артыҡ ныҡ иғтибар итәләр. Өфөнән юлға сыҡҡанда башҡорттар күп булһа ла, уларҙы бүлгеләп, башҡа частарға таратып бөтөрҙөләр. Береһен дә осратҡан юҡ. Үҙ телеңдә рәхәтләнеп туйғансы бер һөйләшһәң дә, һағыныуҙар бер аҙ баҫылыр төҫлө. Юҡ, әллә уларҙы махсус рәүештә тараталармы икән?

Штабҡа йомош менән ебәрелгән Ҡәнзәфәр үҙ полкына кире ҡайтҡанда сиҙәм өҫтөндә уфтанып, әрнешеп ултырған һалдатҡа тап булды. Күлдәге эргәһендә ята. Ҡарашы арҡаһына төштө. Әйтерһең, тиреһен билгә быуыу өсөн буй-буй ярып, тунап алғандар – ҡып-ҡыҙыл ит. Быны күргәс, Ҡәнзәфәр саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Бисараҡай башын күтәрҙе. Һоро, ҙур күҙҙәре сәнсеп ҡараны. Оҙонса,

һарғылт йөҙө ҡатып ҡалған. Оҙон булмаһа ла, ҡара сәсе бөҙөрәләнеп тора. Ул, ҡулы менән генә ишаралап, күлдәге менән арҡаһын ҡаплауҙы һораны. Өндәшмәне.

Ҡәнзәфәр яралары ҡутырлай башлаған арҡа тиреһендә күпләп осҡан себендәрҙе ҡыуып, һаҡ ҡына күлдәкте япты.

– Ҡайһы яҡтанһың? – тип һорап ҡуйҙы әлеге бәндә, саҡ ишетерлек итеп.

– Башҡортостандан.

– Уралданмы?

– Эйе. Ағиҙел тарафтары.

–Тоҙ һаллай торғанмы?

– Эйе.

– Ишеткән кеүекмен. Күлдәкте ал әле, ҡысыттыра.

Шул саҡ ашығып казак килде. Ул, строй ҡаршыһында торғандай, үрә ҡатҡан килеш:

– Хорунжий Пугачев, полковник һине эҙләтә, – тип ҡысҡырҙы.

– Ниңә һөрән һалаһың, һаҡбайҙар бармы әллә? Әллә яра төҙәлгәнсе тағын өҫтәргә иҫәпләйме? Палач! Ҡамсы беҙҙең ҡулға ла күсер әле. Беҙҙең станицала ла байрам булыр...

Ҡәнзәфәр, туҡтап оҙаҡ торорға ярамағанлығын хәтерләп, командаһы туҡталған яҡҡа ҡуҙғалды. Туҡмалған хорунжий эргәһенә килгән казак та Ҡәнзәфәргә эйәрҙе. Йомошо шул яҡталыр, күрәһең.

– Ниндәй гәйебе өсөн? – тип һорап ҡуйҙы Ҡәнзәфәр, казакка ҡарамай ғына.

– Төнгө буталышта команда начальнигының атын юғалтҡан. Яҡшы хеҙмәт иткәне өсөн полковник Иван Денисов уны үҙенә ординарец итеп ҡуйғайны. Беҙ – Дон казактарынан тупланған команда.

– Ул дамы?

– Пугачев та беҙҙең тарафтарҙан. Ун ете йәшенән казак хеҙмәтендә. Өйләнеп бер аҙна торғас та, бында оҙатҡандар. Тәүәккәл, ҡыйыу, ышаныслы әҙәм. Шуға харунжий чины бирҙеләр. Руссаға әйләндерһәң, кесе офицер чины һымаҡ. Зимовей тигән станицанан. Әйтеүенә ҡарағанда, шунда уҡ йөҙ йыл элек Степан Разин тыуған. Дөрөҫтөр, сөнки Емельян Пугачев ялғанлай торған кешегә оҡшамаған. Хорунжий бирелеп хеҙмәт итә, тип торманы полковник, бер ат өсөн ҡамсы менән ярҙырҙы. Ә бейә икенсе көндө лагерға ҡайтҡан. Денисов, бәлки, шул хәбәрҙе ишеттерергә теләйҙер...

«Шул! – тип ирендәрен ҡыбырлатты Берда биҫтәһендәге ниндәйҙер контора иҙәненә ятҡан Ҡәнзәфәр. – Пруссияның бер ауылы эргәһендә юҡ өсөн туҡмалған Дон казагы хорунжий Емельян Пугачев һәм император Петр Өсөнсө. Уларҙың ниндәй уртаҡлығы бар? Тимәк, ысын батша түгел. Әле лә тәүге осрашҡанда серле ҡараны. Мине танының ул. Һис шикһеҙ хәтеренә төшөрҙө...»

Август айының һуңғы көнөндә Пруссия ғәскәрҙәре Одер йылғаһы аша сығып, һул флангтан рус армияһын атакаланы, хатта Мюльберг тигән ҡалҡыулыҡты ҡулына төшөрҙө. Рус полктары атакаға күтәрелде. Патрондар бөткәс, штык, ҡул һуғышы башланды. Кем кемде үлтерә, шул иҫән ҡала. Һәр кем үҙ телендә ҡысҡыра, һүгенә. Һуғыш бара. Ҡәнзәфәр штык һуҙған берәүҙе шәйләп алды ла шуның башына мылтыҡ түтәһе менән тондорҙо. Аҡайған ҙур зәңгәр күҙҙәрен, аҡ сәс араһынан бөркөлөп ҡан сыҡҡанын ғына күрергә өлгөрҙө. Ғәскәре сигенә башлағанын һиҙгән король Фридрих кавалерияһына команда бирҙе. Был яҡтан казактар алға ташланды...

Йәйерәп ятҡан йәшеллек ал төҫкә манылды. Үлтерештә күрһәтмәҫкә теләгәндәй, ҡояш болоттар араһына йәшенеп, көндө ҡараңғылатты. Көлтә урынына түшәлгән кешеләр генә түгел, шулар өҫтөндә йән бирә алмай интеккән аттар ҙа тыпырсына.

«Тәңре, ниңә үҙең яратҡан әҙәмдәреңә дыуамалланырға юл ҡуяһың? Ниңә уларҙы үҙ-ара ҡыйраттыраһың? Пруссия ниңә кәрәк миңә? Ниңә мин немецты үлтерергә тейеш? Әллә ерҙе һуғартыу өсөн дым етмәйме? Шуның өсөн ҡан, йәш түгелһенме? Туҡтат, зинһар, был мәхшәрҙе?!»

Кунерсдорф ауылы эргәһендәге һуғыш туҡтаны. Һөҙөмтә шул: немецтар яғынан – ун туғыҙ мең, рус-австрия яғынан ун биш меңгә яҡын һалдат һәләкәткә юлыҡты. Иҫән ҡалғандарға, уларҙы кейемдәренә ҡарап нисә көн буйы айырырға, ерләргә тура килде. Кисә генә һуғыш барған ҡалҡыулыҡтар бейегәйә төштө. Ә бит ике аралағы һуғыш ете йылға һуҙыласаҡ ине. Әлеге лә баяғы ер бүлешеү, яңы ерҙәр, дөрөҫөрәге, башҡа илдәрҙең биләмәләрен яулау...

Был ҡәҙәрен Ҡәнзәфәр аңламай ине, әлбиттә. Мәрхүмдәрҙе ерләп йөрөгәндә ул теге туҡмалған әҙәм эргәһенә килгән казакты осратты. Эш ашығыс булһа ла, теге яҡташының тереме, түгелме икәнлеген һорамай ҡала алманы.

– Шундай хәлдә икәнлегенә ҡарамаҫтан, атакаға барҙы. Иҫән. Иртәнсәк арҡаһына май һөрттөм. Бына, исмаһам, батыр, – тине теге. – Һин дә тере ҡалғанһың. Иртәгә нимә булаһын бер Хоҙай белә.

Харунжийҙың иҫәнлеген ишеткәс, Ҡәнзәфәр хатта шатланып ҡуйҙы. Һуғыш тамамланғас, тыуған иленә, бер генә аҙна торорға өлгөргән ҡатыны эргәһенә ҡайтыр, балалар үҫтерер...

Һуғыш ғазаптарын үҙ күҙҙәре менән күреп, уның әселектәрен татып, күп Европа дәүләттәрендә булып, уларҙа йәшәүселәрҙең тормоштарына, ғөрөф-ғәҙәттәренә күҙ һалып тыуған төйәгенә әйләнеп ҡайтты Ҡәнзәфәр. Был хәбәрҙе ишеткәс, Саҡмағошта йәшәүсе һәр бабай, ир, егет уны үҙ күҙе менән күрергә ашыҡты. Уның кәүҙәһе нығыуына, күҙҙәренең етди ҡарауына, шулай уҡ нескә генә итеп мыйыҡ ебәреүенә лә иғтибар иттеләр. Хәҙер инде өлгөргән муллаға әүерелеүе хаҡында ла һүҙ сығарҙылар. Әгәр киткәнсе өйләнгән булһа, йүгереп йөрөгән балалары ҡаршы алыр ине, тип буйҙаҡ икәненә төрттөрөргә лә онотманы. Ләкин ҡыҙыҡһыныусылар ҡәнәғәтләнерлек яуап ала алманылар. «Егерме дүрт йәш – егет кеше өсөн өлгөрөп еткән саҡ. Туй яһарға ашыҡмайбыҙ. Киленде лә алыҫтаныраҡ эҙләрбеҙ. Ул ҡайтыуға урамда уйнап йөрөрлөк ҡустыһы донъяға килде. Шулай икән, Ҡәнзәфәр улыбыҙға үҙ донъяһын булдырырға тура киләсәк», – тип Усай ярым шаярып һөйләнде. Маһинур иһә, һәр саҡтағыса, һөйләшеүҙән ситтә торҙо. Килеүселәргә сәй әҙерләү менән мәшәҡәтләнде.

Аҙна-ун көн хәл алғандан һуң, әсәһе әйтмешләй, «балаһына төҫ ҡайтты». Бигерәк тә ҡатыҡ, һөт һағындырған. Әле генә мейестән сығарылған, өҫтө ҡарайып бешкән, аҫтындағы көлө уска яғылып торған эҫе икмәккә ҡатырға ла өлгөрмәгән ҡаймаҡты һылап ашау, хуш еҫле сәйҙе лә йотоп ҡуйыу – тик атай, әсәй йортонда ғына була торған тәғәмдер! Өҫтәүенә, тыуған төйәк сәскәләренән уңған ҡорттар йыйған бал да бар. Уның хаҡында Усай ҡыҙыҡ итеп, бәлки, сама белергә кәрәклеккә лә төрттөрөп: «Бал ул шундай гүзәл ризыҡ: исемен әйтһәң, бер кәмей, бармаҡ төртһәң, ике кәмей»,– тиергә ярата.

Тик тормош мәшәҡәттәре ҡулдарҙы нисек кенә бәйләмәһен, Усай өс-дүрт түмәр умартанан өҙөлгәне юҡ. Был йәһәттән: «Бал ҡорттарынан егәрлерәк булмаһаң, әлеге шөғөлгә яҡын килергә, тотонорға ярамай», – ти. «Бал ҡортоноң наҙы бар» һүҙҙәре лә шуны аңлата торғандыр. Атаһының һөйләүенә ҡарағанда,



унының атаһы, йәғни Ҡәнзәфәрҙең олатаһы ла, ҡортсолоҡто үҙ иткән. Боронғо бабалары ҡасандыр Иҙелдең (Волганың) уң яғында, Симбирск тарафтарында көн иткәндәр. Һуңыраҡ инде, ер эҙләп, ҙур даръяның һул яғына сыҡҡандар. Әҙәм балалары үрсей, бәндәләр бушыраҡ урындарға күсә, тарала бара. Бигерәк тә Яурапала ҡыҫыҡлыҡ һиҙелә, тиҙәр. Батшалар, королдәр донъяны ҡабат-ҡабат бүлешеү, ҙурыраҡ ҡалъя әләктереү өсөн халыҡтарҙы үҙ-ара ыҙғыштыралар. Һине лә ҡайҙан ҡайҙа йөрөтөп дөмөктөрә яҙҙылар. Ә күпме әҙәм балалары ошо ығы-зығыла баштарын һала. Яуыз Иван да Ҡазан ханлығын яулағанда ҡаланы ҡыйратып ҡына сикләнмәгән, бер ғәйепһеҙ сабыйҙарҙы ла утҡа ташлаған. Әле килеп башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөүҙе, сиктәрҙә ҡәлғәләр төҙөүҙе нисек аңларға? Ҡурҡытыу, алдау, үлтереү, мәсхәрәләү... Былар ғына аҙ, мәжбүри суҡындырыу... Ғилемең, беләктәреңдә көсөң бар икән, һин халҡыңды ҡулыңдан килгән тиклем яҡлашырға тейешһең.

Көндәрҙең береһендә улар, аталы-уллы, ихаталағы буш арбаға ултырып үҙ-ара әңгәмә ҡорҙолар.

Ҡәнзәфәр алдағы көндәрҙә нимәләр эшләргә белмәүен әйткәс, атай кеше был хаҡта уйлап йөрөүен, фекерен асып һалды.

– Өйләнер алдынан һинең нимә менән шөғөлләнәсәгеңде хәл итергә тейешбеҙ – иң мөһиме шул. Йомош менән Өфөгә барғас, ҡайһы бер хәбәрҙәр ишетеп, Боҙаяҙ тигән ауылға уҡ үтергә баҙнат иттем. Өфөнән бер көнлөк юлда тора. Үҙләштерелмәгән ерҙәр байтаҡ. Ергә ебәрелеүҙәренә ун йыл да юҡ әле. Кескәй йылға буйында. Урмандар күп. Стәрлетамаҡ пристаненә бара торған юл өҫтөндә. Ырымбурға, Аҡтүбәгә лә шунан үткәйнем. Оло юлда ултырыуы бик мөһим. Сауҙа юлы. Муллалары юҡ. Килеп ултырыусыларҙың ергә булған килешеүе 1775 йылға тиклем, тағын да илле йылға тип төҙөлгән килешеүҙәре Өфө провинция кәнсәләрендә сират көтөп ята икән. Ул бына-бына раҫланасаҡ, ти. Шулай булғас, алдағы көндәргә өмөт, ышаныс бар. Уйым шулай, улым.

Әлеге һүҙҙәрҙән һуң Ҡәнзәфәргә яманһыу булып китте. Эше-фәләнен, йәшәүен күҙ алдында тотманы, тағын да айырылышып, тағын ҡайҙалыр юлланыу эсен ҡырҙы. Ғүмере буйы атаһы ҡанаты аҫтында, әсәһе ҡуйынында йәшәп булмаясағын аңлаһа ла, бөгөн килеп мәңгелеккә айырылырын һиҙенде, тойҙо. Ул хәҙер бала түгел, үҙ аллы тормош ҡорор йәшкә еткән. Уны тыуған оянан ҡош балаһы шикелле осоралар.

Һалдатҡа киткәндә уйын ғына булған икән, ғүмерең ҡурҡыныс аҫтына ҡуйылғанлығы хаҡында ла уйланылмаған ул сағында. Бөтә хыял иҫән-аман ҡалып, атай-әсәй йортона әйләнеп ҡайтыу ине. Ваҡытлыса ғына айырылышыу. Ә әле?

Усай улының тынып ҡалыуын, уйҙар диңгеҙендә бәргеләнеүен аңлай ине. Баяғы һүҙҙәрҙе һөйләүе уға ла еңел бирелмәне. Ул бөгөнгәсә ауыҙын бер нисә тапҡыр асып ҡараны, теле әйләнмәне. Һуң, күрше йәшәү, көн һайын хәл белешеү, ярҙамлашыу күңелле булмаҫ инеме ни? Балаң бит. Уның тәүге тапҡыр тотоноп баҫыуы, атлап китеүе әле лә күҙ алдында. Бөгөн килеп, буш арбала алдағы яҙмышын хәл итеү хаҡында кәңәшләшеп ултырыла. Иң мөһиме, бындай үтә яуаплы мәсьәләне сискәндә ғүмер әрнерлек хата яһалмаһын. Бала күңелендә үпкә, асыу, ризаһыҙлыҡ һаҡланмаһын...

– Мин, атай, һин әйткән төбәктә булғаным юҡ. Шуға күрә «Боҙаяҙ» тигәненде күҙ алдына ла килтерә алмайым. Исеме боҙ кеүек паклыҡты, күге аяҙлыҡты аңлатҡан кеүек. Шулай атағандар икән, унда йәшәүселәрҙең дә күңеле сафтыр. Телләгең дөрөҫтөр. Яйын тура килтереп, Аллаһҡа тапшырып, күреп, йөрөп ҡайтҡанда һәйбәт булыр ине. – Ҡәнзәфәр атаһына боролдо. – Тәжрибәң олпат…

***

Урамда ҡапыл ғына тауыш ҡупты. Усаҡты дөрләттеләр шикелле – тәҙрәгә яҡтылыҡ төштө. Ҡысҡырышыуҙан нимәлер аңларға, һүҙ ишетергә теләп, Ҡәнзәфәр тороп ултырҙы. Салауат та уянды.

– Әллә һөжүм итәләрме? – тип һөйләнде. Урынынан күтәрелде.

– Төшөнөрлөк түгел. Йә казактар эсеп иҫергәндер…

– Нисек инде – эсеп? Һуғышта эскән кеше дошманына ҡалай ҡаршы тора алһын? Ундайҙар – тере мәйет. Сығып керәйем әле.

– Һаҡ булайыҡ!

– Ихатаңда шикләнеп йөрөгәс, ниндәй тәртип, ти, ташҡа үлсәйем.

Усаҡ эргәһендәгеләр ҡолаҡсын кейгән берәүҙе уратып алғандар. Тунының сабыуҙары асыҡ. Билғауы муйынына эленгән.

– Лазутчик!

– Тереләй утҡа ташларға шымсыны!.. – кеүек һүҙҙәр ишетелә ине.

Ҡәнзәфәр менән Салауат төркөм эргәһенә килде.

– Кем һин? Ҡайҙан?

– Үҙең кем? – тип әлеге әҙәм еңе менән ауыҙын һыпырҙы. – Йыйын ҡырағай.

– Мин – командир. – Салауат тегене үҙенә тартты. – Әйт дөрөҫөн! Юҡһа үлтерәсәктәр үҙенде.

– Башҡортмон. Ырымбурҙа хеҙмәтем.

– Ә ниңә, нисек ҡамауҙан сыҡтың?

– Задание бар.

– Кемдән?

– Губернаторҙан. Өфөгә, тинеләр. Мин ҡәлғәнән сыҡҡас та Бердаға – Пугачев батшаға барырға уйланым. Халыҡ асҡа интегә.

– Ә ниңә һине ебәрергә булдылар?

– Юлдарҙы, ауылдарҙы беләһең, тинеләр. Минән башҡалар ҙа юлға сығырға тейеш шикелле.

– Ҡағыҙың ҡайҙа?

Әлеге әҙәм Салауатҡа ҡараны. Ут яҡтыһында ялтырап торған усал ҡарашты күргәс, күлдәк иҙеүенә ҡулын тығып, түңәрәкләп төрөлгән ҡағыҙ сығарҙы.

Салауат, кемдеңдер тартып алыуынан шикләнгәндәй, ҡағыҙҙы ҡыҫып тотто.

– Был кешегә теймәгеҙ. Шулай ҙа күҙ уңынан да ысҡындырмағыҙ!

– Бойороҡ бирергә һин кем?

– Салауат ул. Беҙҙе батша Федоровичҡа алып килеүсе, – тип тауышын күтәреп өндәште төркөмдән берәү.

Көн яҡтыра төшкәс, Салауат менән Ҡәнзәфәр Кинйә эргәһенә йүнәлде. Ул хәлде тыңлағас, өсәүләшеп батшаның үҙенә барырға ҡарар иттеләр. Былар барып ингәндә, Пугачев кейеп йоҡлаған күлдәген алмаштырып тора ине. Ҡәнзәфәр тегенең арҡаһындағы арҡырыға һуҙылып уңалған яра эҙҙәрен шәйләне.

– Ул! – тип бышылданы.

Кинйә Ҡәнзәфәргә аптырап, асыуланып ҡараны.

– Ҡаланан ебәрелгән теге бәндәне лә алып килергә булғандыр? Бәлки, батшала һорауҙар тыуыр?

– Үҙе ҡарар.

Ҡағыҙҙы батшаға тапшырҙылар. Уға күҙ һалды ла Ҡәнзәфәргә һуҙҙы.

– Нимә хаҡында? Кем яҙған? – Пугачев затлы кейемдәренә үрелде. – Ҡайҙан алдығыҙ? – Ул уҡый-яҙа белмәгәнлеген оҫта йәшерергә өйрәнгәйне. Шуға күрә батшаның наҙанлығы хаҡында, иң яҡын ярҙамсыларынан башҡаларҙа, шик тә тыуғаны юҡ.

Пугачев, мөһим хәбәр көткәндәй, тәхетенән алғараҡ тартыла бирҙе. Ҡәнзәфәр әлеге ултырғысты тәүге тапҡыр күрә ине. Аяҡтарының бейеклеге бүтән ултырғыстарҙыҡы кимәлендә булһа ла, арҡаһы ифрат бейек. Тулыһынса йәшел бәрхәт менән көпләнгән. Батша ҡиммәтле тиренән тегелгән ҡыҙыл тышлы кафтанын кейгән. Тубыҡтары тирәһенән уҡалы сабыуҙары айырылып, иҙәнгә йәйелгән. Ә инде аттары эргәһендә кейә торған салбарын алмаштырырға онотҡан. «Был хаҡта иҫенә төшөрһәң, йә оҡшатмаҫ, асыуланыр, – тип уйланы Ҡәнзәфәр. – Ҡыҫылғанды яратмай...»

– Әллә йоҡлайһыңмы? Тылмас кәрәкмәйҙер бит? Ваҡыт ҡәҙерле.

– Батша ғәли йәнәптәре, был – Ырымбур губернаторы Иван Рейнсдорптың Өфө провинциаль канцелярияһына яҙған ордеры.

– Ике-өс һүҙ менән генә!

– Башҡорттарға башҡаса ышаныс юҡ. Уларҙың ҡайҙа йыйылғанын, миңә ярҙамға килгәнен яуыз йән, йәғни һин алдан белә лә үҙ яғына ылыҡтыра? Шуға күрә уларҙы өйҙәренә таратыу хәйерле. Йөкмәткеһе шулай.

Пугачев тәхет арҡаһына терәлеп турайып ултырҙы. Оҙаҡ итеп мыйығын, һаҡалын һыпырҙы.

– Был – губернаторҙың сираттағы еңелеүе икән; икенсенән, беҙгә өҫтәлмә көстәр килеүенең туҡталыуы ихтимал. Уйларға кәрәк. – Ул ҡаршыһында тороусыларға ҡараманы, хатта уларҙың барлығын да онотто шикелле. – Әйт, Кинйә, азиаттарға, башҡа халыҡҡа яуап бирәһең. Был мөһим мәсьәләлә былар ҙа уйфекер йөрөтөргә өйрәнһендәр. – Туп-тура итеп был өсәүгә ҡараны. – Бәлки, улар ҙа һүҙ әйтер?

– Минеңсә, – тип һүҙ башланы Кинйә, батшаға табан аҙым яһап. – Һеҙҙең октябрҙең ун дүртенсе көнөндәге Указығыҙҙың күсермәләрен арттырып, башҡорт, мишәр, татар, башҡа халыҡтар йәшәгән тарафтарға кешеләр ебәрергә кәрәк. Күпселек ҡайһы яҡҡа тартылырға белмәй. Беҙҙең күп старшиналар батшабикәне яҡлай. Уның ғәскәрҙәре ҡурҡытыу, талау, язалау эштәре алып бара. Был йәһәттән уларҙан яҡлауыбыҙҙы үтенеп беҙгә мөрәжәғәт итеүселәр бар.

– Тағын? – Пугачев Ҡәнзәфәр менән Салауатҡа эйәген сөйҙө.

– Йыйылған халыҡты кире өйҙәренә таратыу – ыңғай күренеш. Тик уларҙы ҡабаттан йыйып алыу ҡурҡынысы ҡала. Кинйә абыҙ әйткәнсә, кешеләр араһында йөрөү кәрәк. Кинйә абыҙҙың мөрәжәғәт-хатын да башҡорт халҡы белергә тейеш. – Ҡәнзәфәр ҡарашын Пугачевтан ситкә борманы.

– Кәрәк. Тейеш, – тип һөйләнде батша, уйының осон тоторға тырышҡандай. – Салауат, һин? Һин ни, йәш батыр, яу давайларһың.

– Алдан ныҡлап әҙерләнгәндә генә яуға сығыу дөрөҫтөр. Ырымбурҙы алып булмай бит, тимәк, әҙер түгелбеҙ. Батша ғәли йәнәптәре, һинең Уралға барып халыҡҡа күренеүең бик кәрәк. Башҡортостан тағын да нығыраҡ, ойошҡанныраҡ күтәрелер ине.

– Өсөгөҙ ҙә хаҡлы, дөрөҫһөгөҙ кеүек. Ысынлап та, минең Указымдағы һәр һүҙем һәр ябай кешегә барып етергә тейеш. Төрлө телгә тәржемә ителһә икән.

Ырымбурҙы ҡалдырып, Яйыҡ казаҡтарының ғаиләләрен, мөлкәттәрен дошман ҡарамағына тапшырып китеү мөмкин түгел. Өфө, Уралдағы заводтар, ниһайәт, Көңгөр тамағымда таш булып ултыра. – Ул тубыҡтарына шап иттереп һуҡты. Тороп баҫты. – Бөгөнгө бурыс шул: Ырымбурҙы штурмлау! Һин дә, Салауат, һин дә, Ҡәнзәфәр, командалар әҙерләгеҙ, улар менән етәкселек итергә өйрәнегеҙ. Һин, Ҡәнзәфәр, походта ла, сит илдәрҙә һуғышта ла булғанһың шикелле. Күрһәт үҙеңде.

Ҡәнзәфәр Кинйә кәнсәләренә йүнәлде. Ихтилалсыларҙың ҡайҙан, кемлектәрен билдәләү буйынса исемлек төҙөүҙең аҙағына сығырлыҡ түгел. Улустарға бүлергә, ауылдарын да күрһәтергә кәрәк. Сөнки шуларға ҡарап старшиналарҙан нисә кеше ебәрергә талап ителәсәк. Һәр ауылда күпме йорт барлығын белеү ҙә мотлаҡ. Ваҡиғаларҙың ҡатмарлығына ҡарап йә йорт аралаш, йә рәттән тиҫтәләргә һалып разнорядҡа бүләләр.

***

Яйыҡтың түбән өлөшөндә тоҡанып киткән ихтилал иһә һыуға бәргән таштан хасил булған түңәрәктәр кеүек тирә-яҡҡа таралыуын, киңәйеүен, балдаҡтарҙан тулҡынға әүерелеүен хәтерләтте. Тулҡынды туҡтатырлыҡ көс юҡ төҫлө тойолдо. Петербургка тик еңелеү, ярҙам һорау хәбәрҙәре генә килеп торҙо. Донъя алдында оят. Сит ерҙәрҙә еңеүҙәр яулаған рус армияһы үҙ иләндә бер харунжийҙың күҫәктәр менән ҡоралланған крәҫтиән шайкаһын тыя алмай: «Рәсәй эсендәге хәлде аңлатығыҙ?» – тип сит дәүләттәрҙең илселәре батшабикәгә мөрәжәғәт итә. Ә ул: «Яйыҡ казактарының сираттағы баш-баштаҡлығы, шаярыуы. Арырҙар ҙа туҡтарҙар», – тип яуаплай. Ә үҙе енәйәтсене һис кисекмәҫтән юҡ итеүҙе талап итә. Уның башын ун мең һум менән баһалай.

Петербургтағы Яйыҡ казактары төркөмөнән Петр Герасимов менән Афанасий Перфильевты һайлап алып, Ырымбурға ебәрҙеләр. Бурыс шул: ундағы казактарҙы Пугачевты йә ҡулға алырға, йә үлтерергә ҡотортоу. Әммә был хәйлә лә тормошҡа ашманы: Перфильев, Хлопуша кеүек үк, ялған батша яғын һайланы. Сығырынан сыҡҡан Батшабикә Пугачевтың «өйҙән-өйгә кереп хәйер һорашыусы» ҡатынын, балаларын тотоп Ҡазан төрмәһенә бикләргә бойорҙо. Бер казак һатып алған өйөн һүтеп, элекке урынына килтереп, баҡсаһы менән бергә яндырҙылар, тәрән соҡор ҡаҙынылар. Йәнәһе, унда башҡаса бер ваҡытта ла һис кем дә ултырмаһын, йәшәмәһен, эҙҙәре мәңгегә юғалһын.

Яйыҡ йылғаһының юғарыраҡ өлөшөндә урынлашҡан Верхнее Озеро ҡәлғәһендә уға ҡаршы көс тупланыуын, Ильин ҡәлғәһендә күп күләмдә аҙыҡ- түлек барлығын белгәс, Пугачев, Ырымбурҙы ҡаты ҡамауҙа тотоуҙы дауам итергә бойороп, үҙе төп ғәскәре менән шул тарафҡа юлланды. Ул Верхнее Озероны урап үтеп, 20 ноябрҙә Ильинскиға һөжүм яһаны. Ҡәлғәне һаҡлаусы көстәр юҡ дәрәжәһендә булғанлыҡтан, дошман тиҙ бирелде. Шуныһы ҡыуандырҙы: ихтилалсылар ҡулына күп күләмдә аҙыҡ-түлек кенә түгел, Бохаранан каруан килтергән байлыҡ – тауар төштө. Затлы еләндәр, йомшаҡ күндән тегелгән ситектәр, атлас, ебәк халаттар, күлдәктәр, шәлдәр, яулыҡтар, келәмдәр, балаҫтар... өйөлөп ята.

Ҡәнзәфәрҙең был тиклем күп байлыҡты әлегәсә күргәне юҡ ине. Шуларға аптырап та, һоҡланып та ҡарап тороуын күреп, уның эргәһенә Пугачев килде.

– Көнсығыш халҡы ниндәй оҫта, ә! – тигәнгә, Ҡәнзәфәр кем әйтеүен тиҙ үк аңлап, уға боролдо. – Усаев, әсәйеңә, ҡатыныңа бүләк һайла. Рөхсәт итәм.

– Рәхмәт. Тыныс ваҡыт булһа, көстән килгәнсә һис шикһеҙ һатып алыр инем. Былар ябай тауар түгел, мөғжизә.

– Ә шулай ҙа берәй йоҡаҡ ҡына ебәктән туҡылған яулыҡты ал. Кеҫәңдә йөрөтөрлөктө генә. Яу иҫтәлеге булыр. Мин, мәҫәлән, алыр инем, ҡатын төрмәлә. Был байлыҡты һатасаҡбыҙ. Фураж, ҡорал кәрәк. – Ул Ҡәнзәфәрҙе ситкәрәк тартты. Ҡолағына эйелде. – Салауат менән һине халыҡты күтәреү өсөн Пермь провинцияһына ебәрергә ниәт.

– Һинең теләһә ниндәй бойороғоңдо, фарманыңды үтәргә әҙермен.

– Молодец, Усаев, һинән башҡа һүҙ көтмәгәйнем. Ни өсөн Көңгөргә икәнлеген Бердаға ҡайтҡас әйтермен, аңлатырмын. Был хаҡта Дәүләт Хәрби коллегияһында һүҙ булды.

Кинйә абыз һөйләүенсә, бөтә ихтилал Хәрби коллегия етәкселегендә икән. Баш армияны, айырым командаларҙы бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә. Ҡулға төшөрөлгән байлыҡ уның ҡарамағында. Яуҙа батырлыҡ күрһәткәндәрҙе бүләкләй, хәрби званиелар бирә, вазифаларға тәғәйенләй, яҙыу-һыҙыу эштәрен алып бара, манифест, указдарҙы тарата, суд... Мәшәҡәт баштан ашҡан. Ә яуаплылыҡ! Бөтәһе лә «Петр Өсөнсө» – Пугачев күҙәтеүе аҫтында.

Ильин ҡәлғәһендә эштәр тамамланғас, өс көндән һуң ихтилалсылар Верхнее Озероға яҡынлашты. Планда уны ла тиҙ үк ҡулға төшөрөү ине. Әгәр ҙә шулай иткәндә, Ырымбурҙа оборонала тороусыларҙың кикреге шиңәсәк. Ләкин эш алдан уйлағанса барып сыҡманы. Пугачев ҡыҙыл байраҡтар аҫтында ҡәлғә нығытмаларына яҡын уҡ килеп ҡараһа ла, эстәгеләр уйнаҡлап торған ҡара айғыр өҫтөндә батша Петр Федорович ултырғанлығын күреп торһалар ҙа, уны оҙатып йөрөүселәрҙең: «Күрегеҙ батша Петр Өсөнсө, һалдаттар, казактар. Башҡорттар, ҡалмыҡтар, ҡаршығыҙҙа батша үҙе икәнлеген белегеҙ, аңлағыҙ! Ҡәлғәне ташлап сығығыҙ! Кем үҙе теләп бирелә, шул иҫән ҡала», – тип һөрәнләһәләр ҙә, файҙа сыҡманы. Мөрәжәғәткә туптарҙан атып яуапланылар. Шулай икән, бөтә сара – штурмлау. Етмәһә, Орск ҡәлғәһенән ярҙамға килгән секунд-майор Заев командаһы Ильинға ҡабаттан хужа булған.

Верхнее Озеро өсөн аҙна буйы көрәшеү ыңғай һөҙөмтәләр бирмәгәс, Пугачев ноябрҙең һуңғы көнөндә Бердаға ҡайтты.

Кисәге штурмда туптары юҡ урында Ҡәнзәфәр отрядының ҡәлғә эсенә бәреп кереүе, ҡул һуғышы булғанлығы Пугачевҡа билдәле булды. Дошман яғында бер майор, ике йөҙҙән ашыу һалдат үлтерелгән хәбәрҙе ишеткәс, батша көстө шул тармаҡҡа йүнәлтмәүенә үкенде. Шулай иткәндә ғәскәр, бәлки, ҡәлғә һаҡлаусыларҙы тотошо менән тар-мар итер, йөҙәрләгән кешеләрҙе әсир итер, пушкаларҙы, башҡа ҡоралдарҙы, байлыҡты ҡулға төшөрөр ине. «Усаҡ һүнгәс, уға өрөүҙән файҙа юҡ», – тип йыуатырға тырышты командирҙар кәйефе ҡырылған башлыҡты.

Шуға ҡарамаҫтан, Усаевты табып килтереүҙе талап итте. Был саҡ Ҡәнзәфәр Кинйә абызға нимәләр күргәнлеге, нимәләр булып бөткәнлеге хаҡында һөйләп ултыра ине. Верхнее Озерола күп кенә кешенең һәләк булыуына уфтаныштылар. Ихтилал башланыуға ике ай ярым ваҡыт үтһә лә, әллә ни алға китеш юҡлығына, Башҡортостандағы күтәрелеүҙең һүлпәнләнеүенә, дошман старшиналарҙың, карателдәрҙең халыҡтан үс ала башлауына ярҙам итеү мөмкинселегенә борсолдолар.

***

Ҡәнзәфәр барып ингәндә, Пугачев өҫтәле артында ултыра ине. Итәге теҙенә етеп торған аҡ күлдәк кейгән. Йөҙө асыулы булһа ла, күҙҙәрендә йомшаҡлыҡ тойолдо.

– Верхнее Озеро ҡәлғәһенең эсен күргән берҙән-бер командирһың...

– Төпкәрәк тә барырға иҫәп юҡ түгел ине. Арттан нығытып килеүселәр күренмәне. Бүленеп ҡалыу ҡурҡынысы тыуҙы.

– Дөрөҫ уйлайһың. Күрәләтә ниңә әсир төшөргә? Эләктерһәләр, башыңды ҡаҙыҡҡа элерҙәр ине. Эш былай, Усаев: һайлап һигеҙ кеше алаһың да иртәгә үк Пермь провинцияһына юлланаһың. Беҙгә хәрәкәтебеҙҙең сиктәрен киңәйтергә кәрәк. Тәүҙә Өфө өйәҙендә бул. Халыҡты баш күтәрергә ҡоторт, өгөтлә, үҙеңә команда йый. – Күҙен ҡыҫып алды, хәйләкәр генә йылмайҙы, мыйыҡ осон бөтөрөп ҡуйҙы. – Минең ысын Петр Өсөнсө икәнлегемде күреп белеүеңде, бергә һуғышып йөрөүеңде, яңы батшаның халыҡҡа нимәләр бирергә вәғәҙә иткәнлеген аңлат. Ырымбурҙы ҡамауҙа тотоуҙа, ҡәлғәләрҙәге һуғышта батырлыҡ, тапҡырлыҡ күрһәткәнең өсөн бөгөндән полковникһың. Был хаҡта документ алырһың. Һәр ерҙә һиңә ярҙам күрһәтергә тейештәр, мәжбүрҙәр. Кем ҡаршы – аҫаһын. Ильин иҫтәлеге итеп, – кәштәгә үрелеп аҡ ебәк яулыҡты алды, – мә. Әгәр киреләнәһең икән, эш хаҡы өсөн булыр. Кемдәндер һинең, имеш, заманында Пруссияла һуғышыуыңды ишетеп ҡалғайным. Шул хәбәр дөрөҫмө?

– Һуғышта булыуын булдым, тик ҡайһы дәүләттәрҙә йөрөгәнемде хәтерләмәйем. Яу ҙа яу, меңәрләгән кеше. Тағын яу. Үҙ илеңдә лә яу. Баҫҡынсылар ҙа юҡ...

– Беҙгә, Усаев, ҙур ҡалаларҙы мөмкин ҡәҙәр ҡулыбыҙға йәһәтерәк төшөрөргә ине, шулай уҡ заводтар күп кәрәк. Унда эшләүселәр беҙҙең яҡта булырға тейеш. Бурыс – көс туплап Көнгөрҙән Кама буйлап Ҡазанға. Волга буйҙары ла беҙҙең ҡулда булмай тороп Мәскәүгә, Петербурға һөжүм итеү ҡыйынға тура киләсәк. Һиңә ышанып серемде астым. Тимәк, һиңә таянам. Кешене тәү күреүҙә үк кемлеген белеп була. Юғиһә шундай батыр, ағас әтәстәр була: атакаға «Ура!» ҡысҡырып күтәрелә лә, дошманды күргәс, «Караул, ярҙам итегеҙ!» тип аҡыра. Уҫал бул, Усаев, тик ғәҙел бул.

– Салауат?

– Ул да бында ятмаҫ. Батырлығына, саялығына иғтибар иттем. Былай малайка ғына, ҡылған эштәренә ҡараһаң, уға бер шикһеҙ ышанырға мөмкин. Юлыңда бул, Усаев. Ҡайҙа йөрөгәнеңдә, кемдәр менән һуғышыуыңды, кемдәрҙе осратыуыңды хәтереңдә һаҡларға тырыш. Тау менән тау осрашмаһа ла, кеше менән кешенең осрашыуы бик ихтимал. Һиңә ҙур хоҡуҡтар бирәм. Юлыңда бул. – Ҡул ҡыҫып хушлашманы. – Уралда көрәшергә насип ҡылһын Хоҙай.

Ҡәнзәфәр башын эйеп хушлашты. Шул саҡ: «Мин һине, Пугачев Емельян Иванович, Пруссияның Кунерсдорф ауылы эргәһендә күргәйнем. Полковниктың атын юғалтҡаның өсөн ҡамсы менән арҡаңды ҡайыҙлап ташлағайнылар. Хәлең үтә насар ине. Хәтерең шәп икән, һин дә мине танының», – тип әйтеүҙән саҡ-саҡ тыйылып ҡалды. Урамға сығып китте.

– Оҙаҡланың, – тип тирмәһендә ҡаршыланы писарын Кинйә. – Тыуған төбәккә ебәрәме? Регуляр армия менән алышырға тәжрибә, ҡорал, бигерәк тә туптар етешмәй. Улар күп булғанда ваҡ ҡәлғәләрҙе генә түгел, Ырымбурҙың үҙен дә күптән теҙләндерер инек. Алда Өфө, Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары туң саҡта ҡаланы штурмлау, яулап алыу хәйерле. Хәлдәр ябай түгел.

– Кинйә абыз, Пугачевтың батша икәнлегенә мин тәүҙә үк шикләнгәйнем, хәҙер килеп быға...

– Шаулама, – тип һөйләнде Кинйә. – Һүҙҙәрең оло енәйәткә тиң. Ултыр. – Ҡәнзәфәрҙең ауыҙына ҡолағын яҡынайтты һәм Пруссияла булып үткән ваҡиғаны тыңланы. – Был хаҡта, Хоҙай хаҡы өсөн, башҡаса бер кемгә лә ләм-мим. Ишетһен ҡолағың. Уның ҡулдары оҙон. Ул хәҙер, теләйһеңме-теләмәйһеңме, беҙҙең батша. Аллаһ Тәғәлә уны беҙҙең бәхеткә тыуҙырған. Беҙ, башҡорттар, күп

тапҡырҙар баш күтәреп ҡараныҡ. Һәр саҡ тар-мар ителдек. Сөнки яңғыҙ инек. Әле килеп уның етәкселегендә бөтә милләт халыҡтары көрәшкә күтәрелде. Рус та, татар ҙа, сыуаш та, сирмеш тә, ҡалмыҡ та, муҡша ла – бөтәһе лә. Ҡаҙаҡ ханы Нуралиҙың ситләшеүе аяныс. Уға тиклемге Әбелхәйер кеүеге булғанда һөйләшеү икенсе төрлөрәк килеп сығыр ине. Пугач күтәргән янғын эсендә беҙ ҡайнарға тейеш. Рәсәй тарихында бындай ихтилалдың башҡаса күтәрелеүе икеле. Һәр хәлдә һин, мин күрә алмабыҙ. Халыҡ беҙҙең яҡлы. Һатлыҡ йән старшиналарыбыҙ булмағанда еңеүҙәребеҙ ҙур булыр ине. Ҡолағыңа киртеп ҡуй: беруҡ милләттәрҙең үҙ-ара ығы-зығы сығарыуына, аңлашмауына, дошманлашыуына юл бирә күрмә. Ул сағында – упҡын. Батшабыҙ был мөһим мәсьәләне иң алға ҡуя. Күрәҙә ул.

Ҡәнзәфәр Кинйә абыззан ҙур һабаҡ алды. Ҡышҡы һыуыҡта тирмәлә йәшәүенә аптырап:

– Хәҙрәт, ниңә берәй өйгә күсмәйһең? Һин уның уң ҡулы. Һиңә тейеш, – тип һорамай булдыра алманы.

– Әлеге саҡта беҙ кем? Беҙ ҡайҙа?

– Һуғышта.

– Һин батша армияһында һуғышып йөрөгәндә ҡайҙа йәшәнең?

– Яланда, урманда.

– Мөмкинселек булғанда һалдатты йылыла ял иттерергә кәрәк. Уның тамағы һәр саҡ туҡ булырға тейеш. Ас кешенең асыуы яман, тиҙәр. Ҡорһағын тултырыу өсөн уның еңеү юлына түгел, енәйәт юлына баҫасағын көт тә тор. Ауылдарҙы талауҙан һаҡ булырға кәрәк. Ҡиммәтле ике ҡылысым бар: Һаҡмар ҡаласығы казактары бүләк иткәйне. Береһе – һиңә, икенсеһе – Салауатҡа. Ул ҡылыс һине үлемдән һаҡлаһын, еңеү килтерһен. – Кинйә һандыҡ асып ҡылыс алды, ике ҡулына тотоп Ҡәнзәфәргә һуҙҙы.

– Рәхмәт, абыз, Хоҙай Тәғәлә беҙҙе ҡанаты аҫтына, яҡлауына алһын, ярабби. Көрәшебеҙ изге. Бүләк ҡылысыңды ғәйепһеҙ кешегә күтәрмәм.

– Фатихамды бирәм. Мөҡсин Әбдесәләмов, Солтанморат Янышев кеүек яуыздарҙан, ике йөҙлөләрҙән һаҡлан. Таянырға ышаныслы кешеләр тап. Һеләүһен улым менән дуҫлашырға ла өлгөрҙөгөҙ шикелле.

– Эйе, улығыҙ уҡымышлы. Ырымбурҙы ҡамауҙа, Верхнее Озеро һуғышында бергә ҡатнаштыҡ. Ә ниңә ул эргәңдә йәшәмәй, абыҙ?

– Үҫеп өлгөргән ир-егет үҙ аллы көн итергә тейеш. Урыны командаһы янында. Буш ваҡытында килеп, яҙыу-һыҙыу эштәремә булышып китә. Киләсәктә бер-береғеҙҙе күҙҙән юғалтмаҫҡа тырышығыҙ. Үҙ-ара элемтәлә булығыҙ. Һуғыш байрам түгел, ҡыйын хәлдәргә юлығыу йыш килеп сыға, кәрәк саҡта ярҙамға ашығығыҙ. Кәңәшләшеү ҙә бик мөһим. Уның да Урал тарафтарына юлланыуы ихтимал. Олатайҙарҙың «Айырылғанды – айыу, бүленгәнде бүре ашар» тигән аҡыллы һүҙҙәрен иҫегеҙҙә тотоғоҙ...

Ҡәнзәфәр Кинйә тирмәһендә йоҡлап иртә менән юлға әҙерләнергә булды. Үҙенән башҡа тағын һигеҙ кеше булырға тейеш. Алмаш аттарҙың һыртына үҙҙәренә аҙыҡ, малҡайҙарға һоло тейәргә кәрәк. Йылҡы итен юлға бешереп алырға. Атаһы әйтеүенә ҡарағанда, ҡышҡы айҙарҙа юлда һарыҡ ите менән туҡланыу һис кенә лә ярамай. Сөнки ул тиҙ туңа, өшөтә...

***

Ай элек килгән юл. Һирәк-һаяҡ ултырған бәләкәй ауылдар. Уларҙағы ун һигеҙ йәштән ҡырҡ биш йәшкәсә бөтә ир-егеттәр хеҙмәткә алынған. Шуға күрә был тирәнән көс йыйыу мөмкин түгел. Ҡәнзәфәр үҙенә команда туплауҙы Өршәк,

Дим, Сәрмәсән йылғалары буйында көн итеүселәрҙән тупларға күҙаллай. Өсдүрт йөҙ кеше булһа ла ярап торор. Сөнки, ишетеп белеүенсә, бөтә көстәр Өфөнө ҡамауҙа тотоуға, уны баҫып алыуға ылыҡтырылған.

Тирә-йүн ап-аҡ. Ғәжәйеп киңлекте тар ғына ат юлы ярып үткән, яланды төлкө, ҡуян, ниндәйҙер ваҡ йәнлек эҙҙәре сыбарлаған. Улар көндөҙөн һәр ҡайһыһы йәшенеп ял итә. Аҙыҡ эҙләп сығырға төндө көтәләр. Төнөн иһә тамаҡтарын туйҙырырға ваҡыт күп кәрәк: үтер, йүгерер юлдары байтаҡ булыр, өлгөрһөндәр, тигәндәй, йәйгегә ҡарағанда ике ярым тапҡырға оҙонораҡ һуҙыла. Ел әҫәре булмағанлыҡтан, ағастарға ҡунған бәҫ тә, ҡойолмайынса, донъяға аҡлыҡ өҫтәй. Ҡыуып етеүселәр ҙә, ҡаршы осраусылар ҙа юҡ. Ил тыныс булһа, әллә ҡайҙарға илтеп еткерә торған оло юлда йөрөүселәр ҡайнап торор ине.

Таныш Бөгөлсән ауылы. Урамында йән эйәһе күренмәй. Әллә былар күренгәс, бер нисә мөрйәнән бағананы хәтерләтеп күтәрелгән төтөндәр ҙә туҡтағандай тойолдо.

Ҡәнзәфәр ул-был юҡмы икәнлекте белеү өсөн ике һыбайлыны алға ебәрҙе.

– Ауылдың теге осонан уҡ урап килегеҙ, – тине.

Тыныс ине. Ҡапҡа төбөндә таныш сыуаш ҡарты баҫып тора. Һыбайлылар килеп туҡтағас, меҫкен бүреген һалып башын эйҙе. Күтәрелеп ҡарағас, Ҡәнзәфәрҙе танып, һирәк һары тештәрен күрһәтеп йылмайҙы.

– Ҡайтып бараһыңмы, китеп бараһыңмы тигәндәй, ҡайҙа юл тоттоң? – Мыйығына эләккән боҙ киҫәген семетеп тотто. – Былдай йылды хәтерләмәйем. Ғәҙәттәгенән ай элек төшкән ҡар бөтәнсә иремәне. Етмәһә, үҙәк өҙгөс һыуыҡ.

– Кателдәр үттеме? – тип һораны Ҡәнзәфәр, атынан төшөү менән.

– Тегеләй ҙә, былай ҙа күп үттеләр. Әбей батша ғәскәре булғандыр, хәрби кейемдәләр ине. Пушкылары ла бар. Ырымбурға ҡарай юлланғанда урам буйлап һыҙғырып, йырлап үттеләр. Янырал да күренде. Ике аҙна самаһынан һуң кире киттеләр. Йырламанылар. Пушкылары ла күренмәне. Бесәндәрҙе саналарына тейәнеләр, һыйыр, башмаҡтарҙы тағып алдылар. Илаштыҡ та ҡалдыҡ. Көпәкөндөҙ таланылар. Һеҙ улар яҡлы түгелһегеҙҙер бит? Үҙҙәрен ҡыуып етһәгеҙ, малдарыбыҙҙы кире ҡайтарһығыҙ ине? Юғиһә, асҡа үләсәкбеҙ. Эшкә ярарлыҡ йүнле-рәтле ирҙәр ҙә ҡалманы.

– Беҙ аттарҙы ҡапҡылатып, эсереп китер инек.

– Рәхим итегеҙ. Килерегеҙҙе алдан белһәк, ихатаны көрәп, таҙартып ҡуйыр инек. Тирләгән атҡа ҡабат ҡуҙғалыр алдынан ғына эсерергә кәрәклекте беләһегеҙҙер. Йылынып булһа ла сығығыҙ. Теге оятһыҙҙар хатта әҙер утынды ла саналарына тейәргә тартынманылар. – Ихата хужаһы, мыйығына йәбешкән боҙ иреп бөткәс, танауын ҡыҫып һемгерҙе. – Ә бит ҡыштың оҙонлоғо Ағиҙелдәй. – Ғүмере буйы трахома ауырыуынан яфаланған күҙҙәрен тағы ла ҡыҫа төшөп, офоҡтан юғары күтәрелергә теләгән ҡояшҡа ҡараны. – Болотлаһа йылыраҡ булыр ине.

Ҡартты тыңларға ваҡыт тарлыҡтан, юлсылар аттары менән булды. Урамға башҡаса сығыусы, бире килеүсе күренмәне.

– Ат ите ашайһыңмы? – Ҡәнзәфәр йылмайып ҡартҡа ҡараны.

– Әллә атығыҙҙы урланыларма?

– Юҡ, эш унда түгел. Бер киҫәк бешмәгән ит бирмәксе инем.

– Беҙ динһеҙ бит. Суҡындырыуҙан ҡасып ошо төбәккә килеп юлыҡтыҡ. – Эргәлә башҡа берәү ҙә булмаһа ла, сыуаш Ҡәнзәфәргә яҡынайҙы. – Дөрөҫөн әйт әле, һин яңы батшаны үҙ күҙҙәрең менән күрҙеңме?

– Эйе.

– Нисек инде батша тиклем батша теләһә кемгә күренә, ти.

– Бәй, батша кеше түгелме ни?

– Ай-һай, ышанғы килмәй. Яуыз бәндәләрҙе һеңдереп бөтөрһә, ер-һыуҙарҙы, урмандарҙы халыҡҡа бушлай бирмәксе, имеш. Һин нисек ҡарайһың?

– Дөрөҫө шулай.

– Иҫәнлек, сәләмәтлек теләйем. Ҡасанда булһа беҙ ҙә әҙәмсә йәшәргә тейеш тә инде. Итең өсөн оло рәхмәт, изге кеше. Юлың төшһә, инеп йөрө.

Яҙын муйыл сәскәләренә күмелеп, әле инде декабрь башында аҡ бәҫкә төрөнөп ултырған Бөгөлсән туғайҙарын ҡалдырып, һыбайлылар алға – Стәрлетамаҡ пристаненә ҡарай юлланды.

Стәрлетамаҡ фетнәселәр ҡулында булғанлыҡтан, Ҡәнзәфәр унда бер нисә көнгә туҡталырға ҡарар итте. Аттар ҙа ял итер, отряд туплау сараһы ла күрелер. Тағын да мөһим хәл: Боҙаяҙға, ғаиләһенә барып килер. Бындай форсат ҡасан сығыр? Тыуған, йәшәгән тарафтарыңа тиҙ әйләнерһеңме?

Төп иғтибар ҡамауҙағы Өфөгә.

Баш күтәреүселәрҙең бер өлөшө Пугачевтың Бердалағы лагерына киткән булһа, ҡалғаны Өфөгә яҡын ғына ултырған Чесноковка ауылын яулап алды. Унда көн итеүсе дәүләт крәҫтиәндәре шунда уҡ фетнәселәр яғына сыҡты. Ялған батша алдында ике үҙәк: көньяҡта – Ырымбур, төньяҡта – Өфө. Икеһе лә ҡулсаға алынған, икеһе лә теҙ сүкмәй.

«Өфө коменданты журналы»на түбәндәге һүҙҙәрҙе яҙалар: «...Өфө бөтә яҡтан да яуыз башҡорттар, улар эргәһендә йәшәгән яһаҡ түләүсе татарҙар, алпауыттар, крәҫтиәндәр менән уратып алынды һәм ҡамауҙа ҡалды».

Дөрөҫ, Чесноковка лагеры етәкселәре ҡалалағылар менән бәйләнешкә керергә ынтылып ҡарай, үҙ-ара һөйләшергә, аңлашырға теләп ҡала стеналарына яҡын уҡ килә. Өфө коменданты Мясоедовты, воевода Badisты тотоп биреүҙәрен һорай. Әгәрҙә был талап үтәлә икән, ҡаланы алғас, кешеләрҙең ғүмерҙәре һаҡланасаҡ, бер төрлө лә талау булмаясаҡ. Ут асыуға ла юл ҡуйылмаясаҡ. Агитаторҙар, өгөтләүселәр, Пугачевтың рус, татар телдәрендә яҙылған манифестары, указдары, өндәмәләре, хаттары ебәрелә. Тик бушҡа. Ҡаланы меңдән артыҡ һаҡлаусы ун ике-ун биш мең фетнәсегә ҡаршы тора. Өҫтөнлөктәре шунан ғибәрәт: ҡала тау өҫтөндә, тирә-яғы яҡшы нығытылған, туптар күп, дары етерлек, өҫтәүенә халыҡ мылтыҡтар менән ҡоралланған, һуғыш ысулдарын белеүсе һалдаттар ҙа байтаҡ. Быларҙан тыш, ҡорал тота алған ун биш йәштән етмешкәсә һәр кеше ҡаланы һаҡларға тейеш.

– Әгәр яуыз йәндәрҙән аҫылаһығыҙ килмәһә, көрәшселәр сафына баҫығыҙ, – тип киҫәтә, ҡурҡыта воевода. – Байҙарҙың байлығы, мөлкәте, алтын-көмөшө хаҡында һөйләп тораһы ла түгел. Ул ғынамы, ҡаланы фетнәселәр ала икән, ҡаланың илле мең аҡсаһын, өс йөҙ бот дарыны ҡулдарына төшөрәсәктәр.

Өфөнөң ҡамауҙа тотолоуын, тик меңәрләгән кешеләрҙең ҡала тирәһендә файҙа сығармауын ныҡ аңлаған Пугачев ойоштороу эштәрен, тәртипте һаҡлау, ғәскәрҙе хәрби хәлгә килтереү өсөн Чесноковкаға иң ышаныслы, тәүәккәл, яҡын көрәштәштәренең береһе Иван Зарубин-Чиканы ебәрергә ҡарар итте. Сөнки рус, башҡорт, татар отрядтары һәр ҡайһыһы үҙенсә, үҙ белдеге менән батырлыҡ күрһәтергә, еңеүгә ирешергә маташа ине.

Стәрлетамаҡ пристанендә Ҡәнзәфәр старшина Ҡотлоғужа Сафарғоловты осратты. Ул үҙе исеменән аталған ауылдан. Табын ҡәлғәһенән әллә ни алыҫ түгел. Ағиҙелдең уң ҡулында. Яңы батшаның иғлан ителеүен ишеткәс тә, үҙенә ҡараған волостағы йөҙҙә туҡһан бер йорттан кешеләр алып, Стәрлетамаҡҡа юлланған.

Отряды менән ошо тирәлә халыҡты фетнәселәргә ҡушылырға ҡотортоп, өндәп йөрөгән. Пристанде атакалағас, унда командалыҡ ҡылып ятҡан ике майор Маршилов һәм Голов, аттар ғына эләктереп, Өфөгә һыпыртҡандар. Аяныс, үҙҙәрен тота алмағандар. Оло юлда эләгерҙәр ине, тик улар Ағиҙелдең уң яғынан Ҡарағужа, Һаҫыкүл, Ҡарамалы ауылдары аша елдергән. Бөгөнгө төп бурыс – карателдәргә ҡаршы көрәш. Өфөнө быуып тотоу. Ғәскәр йыйыу. Оло юлға хужа булыу...

Ҡәнзәфәр, ниндәй маҡсат менән бында туҡтауына ишара яһап, Пугачевтың беренсе декабрҙә сығарған манифесын бирҙе. Был «Хыянатһыҙ, тоғро хеҙмәт иткәндәре өсөн эшләп көн күреүсе һәм алпауыттарҙы ҡыйратҡан халыҡҡа мәңгелек ирек, бөтә булған биләмәләре менән ер бирәм» тигән Указ ине.

– Бында яҙылған ҡиммәтле, көтөлгән һүҙҙәрҙе һәр ябай әҙәм балаһына аңлатырға кәрәк, – тип өҫтәне Ҡәнзәфәр һәм Ҡотлоғужанан алтмыш кеше биреүен һораны. – Ҡалғандарын үҙем табырмын. Моғайын, ғәскәрҙе Ағиҙелдең уң яғында тупларға тура килер. Бөрө, унан ары биләмәләрҙә.

Әлеге фекер менән Ҡотлоғужа ла килеште. Сөнки был тарафтарҙа кеше йыйып, ауылдарҙы талап карателдәр ҙә халыҡты бик йонсотто. Бәләгә тарыған әҙәм балалары мәхшәрҙән ҡотолоу өсөн башын алып ҡайҙа ҡасырға белмәй.

***

Ҡәнзәфәр һыбай килеш яңғыҙы ғына сәфәр сыҡты. Юл таныш: ул үтәсәк Талбазы, Ишле ауылдары ла, Боҙаяҙы ла Өфө – Ырымбур трактында. Ишлегә саҡлы етмеш саҡрым тирәһе булһа, унан өйгә еткәнсе әллә ни алыҫ та ҡалмай. Стәрленән утыҙ биш саҡрым тирәһендә ултырған, һул яҡта күренеп ҡалған, мордвалар көн иткән Старомакарово ауылына тиклем туры бейәне күберәк атлатып барырға тура килде, сөнки бейек үр байтаҡҡа һуҙыла. Был тирәләге урмандарҙа имән йышыраҡ күренә. Унан ҡала ҡайын, ҡарамалыр, моғайын. Хәҙер инде урмандар араһында – уйҙыҡ-уйҙыҡ асыҡлыҡтар. Тимәк, ағастарҙы киҫеп, төпләп, уларҙы өйөп яндырып сәсеүлек ерҙәр әҙерләйҙәр. Бер ҡараһаң, меңәрләгән йылдар буйы хасил булған, йән эйәләрен йәшәткән урмандарҙы юҡҡа сығарыу йәл, хатта енәйәти хәл кеүек, ә икенсе яҡлап, көндән-көн үрсей барған әҙәм балалары ла тамағын туйҙырырға тейеш. Уйлап ҡараһаң, башҡорт ерҙәрендә илле-йөҙ йылдар элек кенә, ғөмүмән әйткәндә, тәбиғәттең тыныслығын боҙоусы табылмаған. Урмандар шаулап үҫкән, йылғалар кинәнеп аҡҡан. Ҡырағай кейек-хайуандарҙы, йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы аулау түгел, һыҙғырып ҡурҡытыусы ла булмаған. Әле ни был төбәккә кешеләр эркелеп килә. Тәү сиратта йылға, ҙурыраҡ күл буйҙарын һайлайҙар.

Йылға тигәндәй, бер саҡ шулай Ҡәнзәфәр Боҙаяҙҙан ҡайтҡанда Сәрмәсәндең һул яҡ ярында урынлашҡан Ихсан ауылына туҡталып киткәйне. Шунда старшина Ихсан Баязитов менән танышты. Ул Ҡәнзәфәрҙән өс кенә йәшкә өлкән булып сыҡты. Ауыл осондағы соҡорораҡ урында яман бейек бихисап тирәктәр үҫә. Уларҙың береһенең төбөндә еләҫтә һөйләшеп ултырҙылар. Ауылда мишәрҙәр, типтәрҙәр йәшәй. Арьяҡта иһә, аҙашырлыҡ әрәмәләрҙә еләк-емеш күп етешә икән. Йылғаның яман шәп ағыуы, буйҙан-буйға тигәндәй ятыуҙар булғанлыҡтан, ҡаршы яҡҡа ҡатын-ҡыҙға сығыуы мөмкин дә түгел. Балыҡҡа килгәндә инде – мыжғып тора. Һыу ҡомағы, – урыҫтар ондатра ти – сикһеҙ күп. Күҙгә күренеп йөҙәләр. Һунарсылыҡ менән шөғөлләнеүсегә байып бөтөргә мөмкин. Ҡондоҙ, ҡама, һыуһар, төлкө, ҡуян, хатта һеләүһен дә бар. Ҡыҙыҡ өсөн бүрегә сыҡҡылайҙар. Ул яуызды атта ҡыуып бәрәләр.

Яҙғы ташҡында Ағиҙел типкене ошонда тиклем килеп етә. Балыҡ ҡармаҡларға ваҡыт, ә мурҙа һалырға һай урындар юҡ. Топорнино, Ямская ауылдарынан урыҫтар килеп, икешәр ботло йәйендәрҙе тоҡандары бар. Сазан, ҡорбан балыҡтары күпләп үрсей. Әгәр ҡуна ҡалһаң, Баҡай ауылына барып ау алып килә алам. Бер дуҫта бар. Төнгөлөккә һалыр инек. Ауылдар йышая. Ана, Баҡай күренеп тора. Унан өҫтәрәк – Сәйет. Ә инде беҙҙән түбән Ҡупай, Рәсмәкәй, Иҫке Йомран, Яңы Йомран теҙелешкән. Ә ер етерлек түгел. Урмандарҙы ҡоротабыҙ...

Ихсандың һөйләгәндәрен ҙур иғтибар, ҡыҙыҡһыныу менән тыңлап ултырған Ҡәнзәфәр тороп баҫты, ауылға етәрәк ҡырҡа боролоп әкренләп ҡыҙыл ярын ашаған, емергән Сәрмәсәнгә баҡты. Тимәк, йылға был төштә әкренләп һул яғына күсә киләсәк.

Дала даръяһы ул Сәрмәсән. Оҙонлоғо ла йөҙәр саҡрымлап иҫәпләнмәй. Бәләбәй тарафтарында бәреп сыҡҡан шишмәләрҙең береһенән генә башлана. Уң яҡ яры Сәйет, Баҡай ауылдары тирәһендә генә ҡалҡып тора ла шунан тәпәшләнә. Иҫке Йомран ауылының түбән осонан тағын ҡалҡа башлай. Ә инде Яңы Йомран ауылының ҡаршыһында эре ҡомташтарын күрһәтеп тора. Түбән табан инде ҡайын урманы менән ҡапланған һырт Ағиҙелгә тиклем һуҙыла. Яҙын яман ташыған, күҙ күреме етмәҫлек булып йәйелгән йылға аша тик йәйгелектә генә һалынған күперҙәр ҙә юҡ дәрәжәһендә. Булған береһе әлеге Ихсан ауылынан алыҫ түгел. Ул Саҡмағош менән Өфөнө тоташтырыусы оло юлдыҡы итеп иҫәпләнә. Боҙаяҙға тәүге барғанда Сәрмәсәндә туҡталып, арҡалыҡты ғына төшөрөп атты эсереп кителгәйне.

Шул саҡ Ҡәнзәфәрҙең күҙенә ике һылыу ҡыҙ салынды. Береһе ҙур ғына төйөнсөк тотҡан, ә уның эргәһенән атлағанының ҡулдары буш. Аҫылынған оҙон, йыуан, ауыр толомдары киң күлдәген баҫып, билен һығылдырған төҫлө. Яулыҡтарын баш осона урап бәйләгәндәр.

– Кер йыуырға төшәләрҙер, – тип һөйләнде Ихсан үҙ алдына ғына.

Ҡыҙҙар, быларға яҡынлашҡас, урабыраҡ үтеү өсөнмө, ситкәрәк тайпылды. Ҡулына бер нәмә лә тотмағаны күҙенең ҡойороғо менән генә Ҡәнзәфәргә ҡарап ҡуйҙы. Әллә оялды, аҡ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгергәндәй тойолдо.

Кем ул сихри ҡарашлы ҡыҙ? Уның күҙ һирпеүе әллә Сәрмәсәндән эҫе ел күтәрҙе, шул ел бөтә тән буйлап табанға уҡ төшкәндәй тойолдо. Тик кенә торған ерҙән хәл кәмегәндәй булды. Ҡәнзәфәр хатта ҡайҙа баҫып торғанлығын онотто.

– Аҡ күлдәклеһе – күршеләргә килгән ҡунаҡ ҡыҙы. Сибәр бит. Өйлән шуға... – Ҡәнзәфәр Ихсандың һуңғы ике һүҙен генә ишетте. – Ҡунаҡ ҡыҙы. Ҡайһы ауылдыҡы икәнлеген белмәйем...

– Һинең эшең ҡырған да борған. Үҙ аллы тормош ҡороп алғанһың. Дүрт йәшлек улың Мөхәммәт йүгереп йөрөй, – тип зарланғандай һөйләнде Ҡәнзәфәр.

– Борсолма, дуҫҡай, ундай бәхетле көндәрең алда тороуына шатлан. Ана, нindәй сибәрҙәр йөрөп ята. Никах уҡытырға мулла эҙләйһең дә юҡ. – Ихсан тороп баҫты ла йомшаҡ ҡына итеп Ҡәнзәфәрҙең арҡаһына һуҡты. – Иҫәнлек кәрәк. Нисек уйлайһың, анауы өйәнкеләргә, тирәктәргә нисә йәш икән? – Ҡулын әрәмә яғына һуҙҙы. – Ауыл осондағы соҡорҙа ҡартайған ҡайындар ҙа байтаҡ йәшәгәндер. Күптәре ҡороп баҫҡан килеш һынып бөткән. Бер нәмә лә мәңгегә килмәгән. Былары – тәбиғи хәл, инде болалар булмаһын, һуғыштар сыҡмаһын.

– Шулай-й-й, – тип һуҙҙы Ҡәнзәфәр. – Ә тирәктәргә килгәндә инде, улар фани донъяның шаһиты булып кәмендә йөҙ йыл ултыраларҙыр. Йыуанлыҡтары өсдүрт ҡолас барҙыр.

– Анауы, уң ситтәге тирәкте ҡосаҡлап биш ир үлсәне. Һин хәҙрәт кеше, Ҡормаш ауылына тиклем булһа ла оҙаттырайым әле.

– Атайҙы ла борсойһо килмәне. Йөрөп өйрәнелгән инде. Өҫтә һалдат кейеме, һалдат йөгө түгел. Әгәр ҙә Стәрлетамаҡ пристаненә, Ырымбур тарафтарына юлың төшһә, миңә ҡағылмай китмә. Боҙаяҙ әлегә бәләкәй генә, бөтә кеше лә бала-сағаһына ҡәҙәр бер-береһен белә.

– Бигерәк тә мулла кешене, – тип күҙ ҡыҫты Ихсан.

Улар күптәнге таныштар, дуҫтар кеүек хушлашты. Үҫмер малай һыбай көйө Ҡәнзәфәрҙе оҙатты. Ҡормаш ауылына еткәс, ҡунаҡ атын туҡтатып төшөргә уйлағайны. Оҙата килеүсе:

– Ихсан дәдәй Топорнинаға уҡ еткерергә ҡушты, – тине.

– Оло рәхмәтемде еткер дәдәңә, – тип йылмайҙы Ҡәнзәфәр. – Кеҫәһенән көмөш аҡса сығарҙы. – Мә, алпауыт ауылында кибет барҙыр. Күстәнәс алып ҡайт...

«Сәрмәсән буйындағы ҡыҙ. Ул Боҙаяҙҙыҡы икән бит. Нимә эшләп быға тиклем бер генә тапҡыр булһа ла күренмәгән?»

Уйланып ҡайта торғас, тигеҙ ерҙе ярып, борғаланып ағырға ятҡан инешкә килеп еткән икән. Тигеҙ итеп аҡ ҡар менән ҡапланған яланда ул борғаланып барған йыланды хәтерләтә. Исеме лә бик матур – Үҙән.

Тәүәккәләп Боҙаяҙ тарафтарына күҙ һалып ҡайтыу фекерен Усай оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа булды. Бер көндөң кисендә:

– Улым, атты төнгөләккә ауыл осона илтеп тышаула. Иртә менән әҙерәк һоло ҡаптырырбыҙ. Таң һарынан юлға сығырбыҙ. Боҙаяҙға тип әйтеүем. Арбаны майлармын. Әсәһе, юлға аҙыҡ хәстәрлә. Ҡаҙы киҫәген дә онотма.

Эйе, ата-әсәнең төп, иң мөҡәддәс бурысы – балаларын тәрбиәләп, үҫтереп, уларҙы башлы-күҙле итеү. Парлы, бәхетле булһындар, бәпестәр тыуҙырып шатландырһындар. Теләктәр тик изге генә.

Алдағы йәшәүен нисек итеп күҙ алдына килтерә алмағанлыҡтан, Ҡәнзәфәр тәүҙә Мөслим тип, күп тә үтмәҫтән кескәй йылға исеме менән атала башлаған Боҙаяҙ ауылына битараф ине. Теләһә нисек ултырған егермеләп өй. Урманды ла тотошо менән ҡырҡмағандар. Ихаталарҙа ғына түгел, урамдарҙа ла ҡарт имән, ҡайын ағастары үҫеп ултыра. Соҡоп сығарылған ҙур-ҙур төптәр ҙә аунай. Өршәк тарафтарындағы Мерәҫ ауылынан тәүгеләрҙән булып Мөслим, Әбдин Ҡәнбәковтар, Бәкир Бикмәтовтар килгән икән. Шуға ла буласаҡ ауылды тәүҙә Мөслим тип атағандар. Ситтәге урындан мул өлөш алып, ҙур бура күтәреп яталар. Ағасы ҡарағай. Бүрәнәләре ҡәләм кеүек төп-төҙ. Бүтәндәр иһә өйҙәрен тик уҫаҡтан ғына һала. Түбәндә ҙур булмаған көтөү күренә.

Әлеге икәүҙең ашыҡмағанын күрепме, арба эргәһенә егерме йәштәр самаһындағы берәү килеп баҫты. Сәсен кисәле-бөгөнлө генә ҡырҙырып алдырған башына түбәтәй кейгән. Мул итеп тегелгән киндер күлдәгенең билен йүкә еп менән быуып ҡуйған. Быларҙың кемлектәрен һорағайны, әллә ҡыҙыҡһынмаҫтар тип, үҙе хаҡында әйтергә ашыҡты.

– Былай ғына, танышыу өсөн генә, – тине. – Беҙҙең аша үтеп-һүтеп йөрөүселәр етерлек. Ер эҙләп, урын ҡарарға килеүселәр ҙә бихисап. Исемем Әбдин. Ә һеҙ?

– Мин үҙем Усай ағайың булам, был егет – улым Ҡәнзәфәр. Саҡмағош тигән ауылданбыҙ.

Егет, ишеткәне юҡлыҡты, белмәүен аңлатып, башын һелкте.

– Әллә ҡайҙарҙан киләләр. Һөйләнеүҙәренә ҡарағанда, башҡорттар әлеге ерҙәренә ебәрә. Өлгөрөп ҡалығыҙ. Беҙҙең элекке ауылда ер ҡыҫылды. Ә бындағы

тупраҡ бик яҡшы. Үҙебеҙ мишәрбеҙ. Һеҙҙә шулайҙыр. Ә теге ҙур өйҙә ситтән килгән ниндәйҙер старшина һалдыра. Тағын да дуҫы бар, ти. Ул да, имеш, шундай йорт төҙөмәксе.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә егет әллә күпме хәбәр ишеттерергә өлгөрҙө.

Алты арбанан торған ылау килеп туҡтаны. Ашығаларҙыр күрәһең, аттарын туғарып тормай ғына, алдарына юлда сабып алған, еҫе аңҡыуын юғалтмаған үлән һалдылар. Эсереүҙе лә йылға буйына төшөп түгел, ошонда ғына башҡарҙылар. Үҙҙәре иһә сиҙәмгә ултырҙылар ҙа тамаҡтарын туйҙыра башланылар. Тәғәмдәре иһә шунан тора: икмәк, һыу. Яман арығандар. Бер йәшерәге хатта ултырған еренән ауып, хырлап йоҡлап китте. Оҙайлы юлда һөйләшеп һүҙҙәре бөткәндәй, бер-береһенә өндәшмәнеләр. Өлкәнерәге генә: «Батшабикә боланан шөрләгән бит әле, мәсеттәр һалырға рөхсәт биргән», – тип һөйләнеп ҡуйҙы. Тик уға бер кем дә ҡушылманы.

Усай, Ҡәнзәфәр ҡарашып алдылар. Һүҙ Батырша ихтилалынан һуң батша власының мосолман халҡына яһаған ҡайһы бер ташламалары хаҡында икәнлеге аңлашыла ине.

Шул уҡ юлсы: «Элек суҡындырғандарҙы үҙ диненә кире ҡайтырға рөхсәт итһендәр, ҡыуып алып киткәндәрҙе ҡайтарһындар ине»,– тип һөйләнде.

Ҡеүәтләүсе табылманы. «Бәлки, был әҙәм балаһы ла заманында кәмһетелеүгә, хаҡһыҙ язаға тарттырылғандыр», – тип уйлап ҡуйҙы Ҡәнзәфәр.

Улар, ҡамасауламайыҡ тигәндәй, ситкәрәк китте. Әйҙә, арыған юлсылар аҙ ғына булһа ла ял итеп өлгөрһөндәр.

Әлегә тиклем эргәлә торған Боҙаяҙ егете:

– Йомошоғоҙ бар икән, беҙгә инегеҙ. Атайым Мөслим исемле. Өйөбөҙ, ана, ситтән өсөнсө, – тип китеп барҙы.

– Дөрөҫөн генә әйткәндә, атай, был төбәккә аяҡ тартмаған кеүек. – Ҡәнзәфәр ауылдан сығып киткән юлға баҡты.

Атай кеше уйлана ине. Өҙөп кенә нимә әйтмәк кәрәк? Улар әлегә сит ауылдың урам уртаһында баҫып торалар бит. Артабан Саҡмағошта йәшәп тә әллә ни эш ҡырып булмаҫ төҫлө. Сөнки унда ауылдар себен шикелле үрсей. Шулай икән, икеләнеп тороуҙан файҙа юҡтыр, төйөндө сисеү хәйерле, тимергә ҡыҙғанда һуғыу кәрәктер.

– Былай, улым, – тине Усай байтаҡ ваҡыттан һуң, – һиңә нигеҙ ҡорошорға, ярҙамымдан айырмаҫҡа көсөмдән, форсатымдан килә. Уйымса, яҙмышың ошондалыр. Төплән бында. Халыҡ дин серҙәрен аңларға мохтаж. Балаларына белем биреү кәрәк. Һалдат хеҙмәтенә алынмаған булһаң, һине Бохараға – ҙур уҡыу йортона ебәрергә, тигән уйым да бар ине. Ярай, әлеге белемең дә етеп торор. Уға ла күптәр мохтаж. Беҙ теге егет әйткән өйгә инәйек әлегә. Көн итеү шарттарын ҡарайыҡ. Бәлки, ваҡытлыса шунда йәшәп торорһоң...

Ҡәнзәфәр ваҡытлыса йәшәү шарты менән Мөслим Ҡәнбәковтарға урынлашты. Атаһын оҙатҡанда Ҡәнзәфәр, инәһенә эйәргән ҡолон шикелле, ауылды сыҡҡансы арба артынан барҙы. Атаһынан айырылып ҡалыу уға үтә ауыр ине. Эсендә, күңелендә ниндәйҙер бик нескә ҡылдар, ептәр өҙөлә, бүтәнсә ялғанмаҫ төҫлө ине. Таныш арбаға, таныш атҡа, иң ҡәҙерле кешеһе – атаһына күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙо ла юл ситенә ултырҙы. Башы түбән эйелде. Әлбиттә, иламаны ул, тик ҡайнар йәштәре ниңәлер үҙҙәренән-үҙҙәре бите буйлап тәгәрләп, эйәге осона ҡуна, шунан үҙе йәшәйәсәк тупраҡҡа тама ине.

Ҡәнзәфәргә нигеҙ ҡорорға насип булманы, сөнки Мерәҫтән килгән берәү

тыуған ауылына кире ҡайтып китергә ҡарар итте. Усай әлегә шуның хужалығын һатып алырға ҡарар ҡылды.

– Өйлө лә булдыҡ, улым, хәҙер үҙеңә тиң хужабикә кәрәк. – Атай кеше һүҙҙе һуҙманы. Сөнки бер саҡ: «Ҡыҙлы кешеләр бар дуҫтар араһында», – тип һөйләнә башлағас, улы: – Беруҡ, атай, ир кеше өсөн иң мөһим, яҙмышым мәсьәләһен үҙемә ҡалдыр, үпкәләмә,» – тигәйне. Моғайын, дөрөҫтөр.

«Ысынлап та хәләл ефетен үҙе һайлаһын, тормоштоң борма-борма, һикәлтәле юлдарын уға үтергә бит. – Усай шулай уйланы. – Уларға йәшәргә».

Ҡәнзәфәрҙең мәҙрәсә тамамлауы, мулла икәнлеге халыҡ араһында тиҙ таралды. Дөрөҫ, ҡайһы берәүҙәр әле мыйығы ла ҡуйырмаған йәш кешегә шикләнеберәк ҡараны. Тик үҙен тотошо, һәр һүҙен «бисмилләһир-рахмәнир-рахим, тип башлауы, һәр көн биш тапҡыр намаҙ уҡыуы ысынлап та уның ябай бер әҙәм түгеллеген күрһәтә. Уға кәңәшкә килеүселәр, ҡыйырһытылһалар, яҡлашыуын, берәй ергә яҙып ебәреүен үтенеүселәр табыла башланы. Йәш мулла һәр кемде асыҡ йөҙ менән ҡаршыланы, ҡулынан килгән ярҙамды күрһәтергә тырышты.

Көндәрҙең береһендә, һис көтмәгәндә, урам ситендәге һуҡмаҡтан китеп барыусы ҡыҙҙы күреп ҡалды. Ярты йөҙөн яулығы менән ышыҡлаһа ла, күҙҙәренә иғтибар итергә өлгөрҙө. Ташҡа таш һуҡҡанда сәсрәгән осҡон ваҡытылай үтә ҡыҫҡа булһа ла, был ҡараш Ҡәнзәфәрҙе сихырланы, йәшен һуғып ергә беркеткәндәй ҡатты ла ҡалды. «Ул! Теге саҡта Сәрмәсәнгә ҡарай атлаған ҡыҙ, Ихсан ауылына барған ҡунаҡ ҡыҙ. Ә бында нисек килеп сыҡҡан? Әллә Боҙаяҙҙыҡымы?..» Табандарын ерҙән саҡ айырып, ҡапҡанан инде лә күтәрмәгә ултырҙы. Ләкин, хистәрен, йөрәгендә тойғолар ҡабыныуын кемдер һиҙенеүенән шикләнгәндәй, өйөнә ашыҡты.

Толомдары? Улар бар инеме? Күрмәне. Бәлки, Сәрмәсән буйындағыға оҡшаған ғыналыр? Юҡ, ул. Ул ғына! Теге саҡта тыуған, торған ауылын һорашаһы булған. Эргәлә Ихсандан ғәйре кеше юҡ ине лә баһа. Тимәк, шикләнеүсе, ғәйепләүсе, һүҙ таратыусы ла юҡ.

Ул иҙән уртаһына баҫты. Ҡыҙ, бәлки, кире үтеп китер? Ниңә кире? Бәлки, ҡайтып барған сағы булғандыр? Тәҙрәгә яҡынайырға ҡурҡты. Йә ҡыҙ ҡабат үтер ҙә бының ҡарап тороуын күрер. «Мулла минең арттан күҙәтә», – тип хәбәр һалыр. Әгәр ирҙә булһа? Юҡтыр. Үҫмер генә бит әле. Ҡыҙыҡай тыныс ҡына, ашыҡмай ғына атлап үтһә лә, Ҡәнзәфәр уны ни өсөндөр осонсаҡ ҡолонға оҡшатты. Әгәр ҙә ул яңынан көтмәгәндә генә тап булмаһа, уны һорашыу, эҙләү мөмкин түгел. Ундай хәл ғөрөф-ғәҙәттә ҡаралмаған. Әгәр ҙә йәшәп килгән тәртипте боҙаһың икән, һиңә бәддоға ҡыласаҡтар. Һин, бәлки, халыҡ нәфрәтенән ҡасып китеп ҡотолорһоң, ә ҡыҙ бала?..

Ҡәнзәфәр тамам аптыраны. Кеше менән шундай хәл була алыуын күҙ алдына килтерерлек түгел. Ә ниңә аптырарға, ти. Таһир, Зөһрәләр булған да инде. Юҡ, ундайҙар китаптарҙа ғына, әкиәттәрҙә генә. Заятүләк менән Һыуһылыу ҙа уйлап сығарылған. Улаймы? Әгәр ҙә бөгөн килеп шундай сибәр ҡыҙға ғашиҡ икән, ниңә Асылыкүлгә суммаҫҡа...

Ҡәнзәфәр һыҙылып таң атҡансы йоҡлай алмай ятты. Тороп, иҙәнгә намаҙлығын йәйҙе. Ҡиблаға ҡарап баҫты ла Алла хаҡына ниндәй намаҙ уҡыуын белдерҙе. Шунан теҙләнде. Ҡулдарын ҡолағына еткәнсе күтәрҙе: «Аллаһы әкбәр», – тип тәкбир әйтте...

Ике-өс көн үтте, ҡыҙ башҡаса күренмәне. Тик Ҡәнзәфәр сихри туташты һис иҫенән сығарманы. Тотош йөҙөн, ирендәрен күргеһе, әйтелгән берәй һүҙен ишеткеһе, оҙон еңдәренән күренгән бармаҡтарын тотҡоһо, шуларҙы үпкеһе

килде. Рәхәт тә, шул уҡ ваҡыт хафалы хәлгә юлығыуын егет аңламаны, дөрөҫөрәге, аңларға теләмәне. Хур ҡыҙы уны тамам хыялландырҙы. Егерме дүрт йәшкә етеп, бер ҡасан да ҡатын-ҡыҙ күреп һушы киткәне юҡ ине. Әллә донъяға иғтибарһыҙ, битараф булдымы икән?

Ярай әле, ҡыҙҙы күргәндең дүртенсе көнөндә үтеп барыусы Әбдин ҡапҡа төбөндә туҡталды. Төштән һуң бесән йыйырға барасаҡтар икән.

Сеү! Теге ҡыҙ килә! Былай табан килә. Был юлы ла яулыҡ осо менән ярты йөҙөн ҡаплаған. Итәгенән тик ҡаталары ғына күренә. Тигеҙләшкәс, саҡ ишетерлек итеп кенә:

– Һаумыһығыҙ, – тип нескә ҡаштары аҫтынан күҙен һирпене. Нур ғына сәсмәне, ялҡын һипте.

Уҙҙы ла китте. Билен бөгөп һуҙылып төшкән толомдар... Эйе, эйе, теге саҡта Сәрмәсән буйына атлаған гүзәлдекеләр! Әллә кәүҙәһенә иғтибар иттермәҫ өсөнмө, әллә зифа буйына күҙ тейҙермәү ниәтенәнме, сәс үрмесе осона ике сулпы таҡҡан. Ҡәнзәфәр, күлдәк иҙеүен ҡаптырған булып, янған күкрәген ыуып ҡуйҙы.

– Ниндәйҙер бай, старшина ҡыҙы, тиҙәр. Үҙҙәренең өйө төҙөлөп бөткәнсе әсәһе менән Ишмөхәмәт бай йортонда торалар. Атаһы Өфө, Ырымбур юлын тапай, ти. Бикәстең исеме Сүриә икән.

– Сүриә. Ғәрәпсә Етегән йондоҙ тигән һүҙ. – Ҡәнзәфәр ирендәрен ослайтып әкрен генә һыҙғырып ҡуйҙы. – Ҡайһы төбәктән килгәндәр?

– Белмәйем. Уныһы миңә ниңә кәрәк? Килгәндәр икән, килә бирһендәр. Китәләр икән, дүрт яҡтары ҡибла.

Ҡалай ҡыҙыҡ ҡына фекерләй был егет: «Китәләр икән, дүрт яҡтары ҡибла». Атайы китһә, был ҡыҙ ҙа ҡалмаясаҡ бит. Әгәр ҙә улай була икән, Ҡәнзәфәр нимә ҡылыр?

Атаһының исеме Мөҡсин икән. Ҡәнзәфәр ҡыҙ хаҡында башҡаса бер нәмә лә белмәй. Йәше ун ете тирәһендә.

«Сүриә минеке, тик минеке генә булырға тейеш. Башҡа берәүҙең уға өйләнеү түгел, уға тултырып ҡарарға ла хаҡы юҡ. Уфтанып, ҡул ҡаушарып ултырыу файҙа килтермәҫ, нимәлер эшләргә кәрәк. Был осраҡта ярҙамға тик атай ғына килә алыр. Уға йүгерергә. Ашығырға! Һуңға ҡалыуың ихтимал. Алдылар – кителәр. Бәлки, ҡолағын да тешләттергәндәрҙер?..»

Ҡәнзәфәр тыуған йортона ҡайтып, тамаҡ туйҙырғас, атаһы менән бергәләшеп икенде намаҙын уҡыны. Һөйләшеүе хәл-әхүәл һорашыуҙан артманы. Кәйефе юҡ төҫлө. Әллә сирләп тора, әллә юлда йонсоған, әллә бер-бер хәлгә юлығып, шуны йәшерә.

Усай үҙе һүҙ башларға ҡарар ҡылды.

– Улым, күңелең тыныс түгел кеүек. Әллә тормошоңда үҙгәреш бармы? Сит итеүселәр юҡтыр бит?

Ире менән малайы араһында етди һөйләшеү барғанын һиҙенеп, Маһинур ихатаға сығып китте.

Ҡәнзәфәр йөҙөнә ҡан тупланыуын, ҡолаҡтарының янып ҡыҙарыуын тойҙо. Үҫеп буй еткерһә лә, ауыл ҡарттары әйтмешләй, ярты Яуропа илдәрен ҡыҙҙырып ҡайтһа ла, мөхәббәте хаҡында асып һалырға тартына, баҙнат итмәй ине. Ул ғынамы, әлеге һөйләшеү уны тыуған тупрағынан тағын да ситләтер төҫлө, бөгөндән үҙ аллы тормош башланыр кеүек. Атаһы, әсәһе йәл кеүек тойолдо. Хоҙай Тәғәлә айырырға булғас, ниңә яралта икән?

– Юлымда бер ҡыҙға тап булдым, – тип саҡ ишетелерлек итеп әйтте Ҡәнзәфәр башын эйгән килеш.

– Бик яҡшы, улым, ә һин балтаһы һыуға төшкән кеше кеүек күренәһең. Ҡыуанайыҡ быға. Күңелле хәбәрҙе күптән көтәбеҙ.
– Әсәйгә әйтмә.
– Өйләнергә өлгөрмәгәнһеңдер бит ул ҡыҙға?
– Өйләнергә. – Ҡәнзәфәрҙең ауыҙы ситенә йылмайыу ҡунды. – Өйләнеү һөйләйһең, уға ярты һүҙ ҙә ҡушҡаным юҡ. Ярты йөҙөн генә күрҙем.
Усай кеткелдәп көлдө. Улының арҡаһынан һөйҙө.
– Тулы йөҙөн күргәндә тағын да яҡшыраҡ булыр ине лә бит. Дөрөҫмө икән, ай ҙа беҙгә тик бер яғын ғына күрһәтә, ти. Йә, һөйлә?
– Башҡаса белмәйем.
– Улайһа ниңә ҡайттың?
– Кәңәшкә тип. Ҡоҙалап бар.
– Кемгә?
– Ҡыҙҙың исеме Сүриә, атаһыныҡы Мөҡсин.
– Мөҡсин, Мөҡсин. Таныш кеше кеүек. Ниндәй кеше?
– Ситтән килгән кеше, ти. Бай, ти. Теге ҙур өйҙә һалып яталар ине бит, шуныҡы икән.
– Тиң булмағандарға үрелергә ярамай, улым. Ундайҙарҙың һораған ҡалымы ла күтәрерлек түгелдер.
– Шулай ҙа, атай, ятып ҡалғансы атып өлгөрөргә кәрәк. Кем белә, бәлки?.. Әсәйгә әйтмәй торайыҡ. Хафаланмаһын.
– Хафаланмай ғына, борсолмай ғына йәшәп булалыр шул. Хоҙай ҡайғынан һаҡлаһын. Һине кәләшле итеү хаҡында күптән баш ватабыҙ. Ярай ҙа, һин ҡыҙҙы күрҙең дә үлдең дә. Ә беҙ? Ҡалғаны беҙҙең елкәгә төшә бит. Кеше араһында йөҙөбөҙ яҡты булырға тейеш. Яуабымды иртә менән әйтермен. Ял ит. Иртәгә юлғалыр бит?
– Эйе. Уйым шулай.
Атай кеше бер аҙнанан киләсәк. Тотош бер аҙна көтөргә. Ете көндә Ер шары үҙ күсәрендә ете тапҡыр әйләнеп, ете тапҡыр төн яһап, ете тапҡыр көн тыуҙырасаҡ. Ете көндә әллә нимәләр булыуы ихтимал. Хистәрҙе ҡыҙға нисек белдерергә һуң? Бәлки, уның өмөтө башҡа берәүҙәлер? Көтөр әмәл юҡ, уҙып китә ҡалһа, тоторға ла: «Сүриә, һине өҙөлөп һөйәм!» – тип әйтә һалырға. Яуабы ыңғай була ҡалһа, аҙна ғына түгел, ун көн көтөргә лә мөмкин.
Сеү! Ул килә. Йәшел атлас күлдәктә. Йөҙө тулыһынса асыҡ. Ҡапҡа эргәһенән үткәндә башын бороп, йылмая биреп:
– Һаумыһығыҙ, – тип иҫәнләште.
Башы еңелсә генә әйләнгән Ҡәнзәфәр әҙерләп ҡуйған һүҙҙәрен саҡ иҫенә төшөрҙө.
– Сүриә! Һине өҙөлөп һөйәм!
Ҡыҙыҡай күҙен һирпеп ҡарап алды ла юлын дауам итте. Урамда ҡатып торорға ярамағанлығын аңлап, Ҡәнзәфәр өйөнә керҙе. Ҡөрьәнен асып өлгөрөүгә күҙе тағы урамға төштө.
Ул килә! Күрәһең, йомошо тиҙ хәл ителгәндер. Ҡәнзәфәр үҙе лә һиҙмәҫтән ишеккә атылды. Ике-өс һикереүҙә ҡапҡа төбөндә ине. Был юлы яҡынданыраҡ үтте. Оҙон керпектәре ҙур күҙҙәрен яртылаш ҡаплаған. Биттәре ут кеүек яна. Керпектәре күтәрелде. Күҙҙәре нур сәсте. Ал ирендәре:
– Мин дә, – тине.
Башҡа һүҙ юҡ. Ә ниңә бүтән һүҙҙәр кәрәк һуң?
Эх, йүгереп барып ҡосаҡҡа алаһы, күкрәккә ҡыҫып, ғәзиз һүҙе өсөн шул ал ирендәрҙе һурып-һурып үбәһе ине.

Уҫал кеше Мөҡсин – Сүриәнең атаһы. Ул тик шуны ғына ҡабатлай: һәр бәндәнең фани донъяла кем буласағы тыуғанда уҡ Хоҙай тарафынан маңлай һөйәгенә яҙыла. Байҙан бай ярала, хәйерсенән – хәйерсе. Меҫкен бәндә шартлап ярылһа ла, тормошон яҡшырта алмай. Ана, берәҙәктәр, ҡараҡтар, юлбаҫарҙар бола күтәреп ҡарайҙар бит, һөҙөмтә: ауылдары менән көлгә осалар. Батша балаһы – батша, старшина малайы – старшина, көтөүсе маңҡаһы көтөүсе булырға тейеш. Әгәр бының киреһенә китә икән, ахырзаман еткән. Ерҙең аҫты өҫкә киләсәк. Яҙмышына бойһонорға теләмәгән кеше – иблис. Кинйә ҡыҙы Сүриәне һораталар икән, губернатор ярҙамсыларына ла, офицерҙарға ла, хатта генералға ла, дворяндарға ла бирмәйәсәк. Тик ҙур ер биләмәләренә хужа булған, меңәрләгән баш ат, көтөүҙәрендәге малдарының һанын белмәгән берәү генә уның кейәүе исеменә хаҡлы, лайыҡ. Һуңғы туйҙы тирә-яҡты шаҡ ҡатырырлыҡ итеп яһаясаҡ. Был йәһәттән бер нәмәһен дә ҡыҙғанмаясаҡ. Оҙаҡ йылдар һөйләргә исеме ҡалыр...

Ҡәнзәфәрҙең бәхете бар икән: атаһы килгән көндө Мөҡсин дә Боҙаяҙҙа ине. Көймәле арбаһынан туғарылған аттарын урман ситенә илтеп, оҙон-оҙон арҡандарға бәйләгәндәр. Теҙҙәренән уҙып үҫкән үләндә рәхәтләнәләр.

Усай ҡапҡанан инеүгә, бәйҙәге эт бәргеләнеп өрөргә тотондо. Мөҡсин ихаталағы эскәмйәлә ултыра ине. Ул инеүсегә артыҡ иғтибар итмәне, был әҙәмдең йомошо өй хужаларындалыр, тип уйланы. Йоҡа күндән тегелгән ситектәр кейгән, аҡ күлдәгенең иҙеүен ысҡындырып ташлаған. Шул саҡ аҙбар яғынан килеп, өйгә бер ҡыҙ инеп китте. Йөҙөнөң яртыһы ғына асыҡ булһа ла, сибәрлеге аңҡып тора. Әгәр ул икән, Ҡәнзәфәрҙең йоҡонан ҡалыуын аңларлыҡ.

Усай эскәмйәлә ултырыусының Мөҡсин икәнлегенә шунда уҡ төшөндө. Һауалы күренһә лә, төҫө-башы бер ҙә «донъя тотҡаһы»ныҡына оҡшамаған. Ә шулай ҙа алдына таныш түгел кеше килеп баҫҡас, урынынан күтәрелде. Күрешергә ҡулын һуҙҙы. Өҫ кейеменә ҡарағанда, килеүсе лә бик үк төшөп ҡалғандарҙан һаналмайҙыр.

– Хәтеремә төшмәйерәк торам, ҡорҙаш, кем атлы булаһың? – Мөҡсин бәләкәй күҙҙәре менән быраулап ҡараны.

– Усай Сәғәдәтулла улы булам. Торған ерем Саҡмағош ауылы. Дыуанай улусы.

– Йомошоң миндә икән, ултырышайыҡ. – Мөҡсин эскәмйәнең бер осондараҡ урын алды.

– Һүҙем мөһим, Мөҡсин әфәнде. Бында уңайһыҙыраҡ кеүек, әммә ләкин алыҫтан уҡ юл тотҡас, былай ғына китеү ярамаҫ.

– Тыңлайым. – Мөҡсин, мөһим хәбәр ишетәһен һиҙенгәндәй, танауын йыш-йыш тартып алды.

– Бәлки, ишеткәнһеңдер, улым бында, ошо ауылда төпләнмәксе. Мулла ул.

– Ә-ә, ниндәйҙер егет күренә, тигәйнеләр шул, мулла уҡмы ни?

– Мәҙрәсәлә биш йыл һабаҡ алды.

– Алай икән. Ҡайҙа, кемдә уҡыны? Стәрлебаштамы, әллә Ҡарғалыға уҡ барҙымы?

– Уларҙа түгел. Уса юлында. Ҡарыш ауылында.

– Әллә Ғабдулла Ғәли улы Әлиевта?! – Мөҡсиндең йөҙө, шәүлә төшкәндәй, ҡарайҙы, ҡаштары уҫал күҙҙәренә емерелде. Урынынан ҡуҙғала биреп ҡуйҙы.

– Әллә ахун Ғәли улын беләһеңме?

– Ишеткәнем бар шикелле. Төп һүҙең нимәлә ине, ҡорҙаш?

– Төп һүҙ шул: улым тәүҙә, әйткәнемсә, ун етеһенә тиклем уҡып йөрөнө. Ваҡыт тиҙ үтә бит, һалдат хеҙмәтенә лә йәше етте. Пруссия һуғышында ҡатнашырға яҙған икән. Шөкөр, иҫән-аман ҡайтты.

– Хуш. Һәйбәт булған. – Мөҡсин, һүҙҙең ҡайҙа табан йүнәләсәген һиҙенеп, тыныслығын юғалта биреп, яурынын ҡыймылдатты. Артабан ихатала ултырыу килешмәгәнлеген тойҙо. Бер башлағас, кешене аҙағынаса тыңлау кәрәктер. Ишектә күренгән ҡыҙына өндәште.

– Сүриә балам, сәйҙе яңыртып ебәрегеҙсе, – тип урынынан күтәрелде. – Өйгә инәйек. Ошо төбәккә килергә ниәтләнек. Сөнки Уса юлы киңәйеп, кинәнеп йәшәү өсөн бигүк батып бөтмәй. Мал-тыуар аҫрау ғына аҙ, иген игеү шөғөлө киңәйгәндән-киңәйә бара. Киләсәктә ауыл кешеһе өсөн игенселек төп эшкә әүерелергә тейештер, уйымса. Стәрлетамаҡ, Табын, Өфө пристандәренән тоҙ түгел, иген оҙатылыр…

«Алыҫҡа ҡарай белә был әҙәм, мейеһен тик тотмай. Киләсәктә шул юл менән байырға хыялланалыр», – тип уйланы Усай эргәһендә саҡ ишетерлек итеп һөйләнеп торған кеше хаҡында, ҡаштары аҫтынан ғына ҡарап.

Шул саҡ күтәрмәлә һылыу ҡыҙ күренде.

– Атай, сәй әҙер.

Улар ингәнсе, өйҙән өс-дүрт ҡатын-ҡыҙ сыҡты. Яулыҡ сите менән ауыҙҙарын ҡаплап, баш ҡағып ҡына иҫәнләштеләр.

Табынға өрөк, йөҙөм, ике-өс төрлө еләк-емеш ҡағы, сейәле һары май, теленгән икмәк ҡуйылған. Ике буш сынаяҡ. Өй эсен икегә бүлеп торған шаршау артынан өлкәнерәк йәштәге ҡатын сыҡты. Өндәшмәне. Шулай уҡ яулыҡ сите менән ауыҙын ҡаплағайны.

– Ҡана, яһап ебәр әле, бисә.

Ҡатын сынаяҡтарҙы сыжлап ултырған самауырға яҡыныраҡ тартты. Саҡ ишетерлек итеп:

– Һөтләпме? – тип һораны.

– Нисек тә ярай, – тип яуапланы Усай, хужаларҙың яйына торорға теләп.

Бәләкәй сәйгүндән сынаяҡҡа ҡуйы сәй аҡты. Өй эсенә ғәжәп хуш еҫ таралды. Сәйгүн Ҡытайҙан булһа, сәйҙең зәңгәр күккә олғашҡан тауҙар артындағы, океан, диңгеҙҙәр буйындағы Һинд иленән икәнлегенә шик юҡ ине.

– Ҡунаҡты артабан үҙем һыйлармын.

Хужаның әлеге һүҙҙәре: «Бар, сығып тор», – тигәнде аңлата ине, әлбиттә.

– Етешеп ултыр кем, Усай ҡорҙаш. Һеҙҙең тарафтарҙа халыҡ нисек һуң, тыныслыҡ күрһәтәме?

– Әлбиттә, әлбиттә. Тыныс булмай ни, хеҙмәте, тормош мәшәҡәттәре менән мәшғүл. Һүҙем былайыраҡ ине. Бая улымдың һуғыш яланынан иҫән-аман әйләнеп ҡайтыуында туҡталғайным. Үҙ алдына тормош ҡорорға ваҡыты етте.

– Бындамы ни?

– Эйе, шулай уйлашҡайныҡ. Үҙебеҙҙең төбәктә ер наҡыҫ. Ауылдар береһе артынан береһе тыуып ҡына тора. Күп балалы ғаилә кеүек. Ҡыҙ бала ғына тимәгән, ир бала ла атай йортонда ҡартайырға тейеш түгел. Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, ҡыҙығыҙҙы һоратмаҡсыбыҙ.

Мөҡсин турая төштө. Сынаяғын, төшөрөүенән ҡурҡҡандай, ашъяулыҡ өҫтөнә ҡуйҙы. Ирендәрен ҡымтып, уйға ҡалды. Усайға ҡараманы. Ул ниндәй етди мәсьәлә килеп тыуғанын аңлай ине, әлбиттә. Башҡа ваҡытта әллә ниндәй ҡатмарлы, киләсәк булмышынды хәл итә торған хәлдәрҙән дә һыуҙан ҡоро сыҡҡандыр, тик бөгөнгө мәсьәләне сискәндә бер ниндәй хәйлә лә кәрәкмәй. Сүриәһе хаҡында тәүге тапҡыр асыҡтан-асыҡ һүҙ ҡуҙғатылды. Атап әйтелгән кеше бар. Егет яғының хәле билдәле. Уртаса тормоштағы мишәр. Ә Мөҡсин? Тирә-яҡта дан тота. Батша властары алдында абруй ҡаҙанған. Уның һүҙҙәренә, тәҡдимдәренә ҡолаҡ һалалар, кәңәшләшәләр. Төрлө-төрлө заданиелар үтәүен һорайҙар, властарҙың «конфиденты», йәғни йәшерен шымсыһы. Халыҡ араһындағы

хәлдәрҙе – провинция концелярияһына, мөһимерәктәрен – губернаторға, ә инде үтә мөһимдәрен батшабикәнең үҙенә үк еткереп торорға ант итте. Үҙе әйтмешләй, эше лә, ашы ла бар. Уныҡы кеүек байлыҡҡа эйә булыусылар һирәк. Ялан ергә туҡталып, тотош ауыл баҫтырып ҡуйырға форсатынан килә. «Хәйерсегә ярҙам итеүҙән мәғәнә юҡ, сөнки ул ялҡау: иртәгеһен Аллаһ ҡайғыртһын. Сабатаға күнеккән аяғын итек ҡыҫасаҡ. Күренеп тора: Усай ундайҙар рәтенән түгел. Малайы муллалыҡҡа уҡыған, белемле. Ундай егеттәр һирәк. Мулла булып ҡына йәшәһә лә, көнө юҡлыҡта үтмәйәсәк. Ҡатыны ла – оҫтабикә. Былары шулай. Ә юғары ҡатлам араһына инә аламы? Кәрәкле ваҡытта, кәрәкле даирәләргә ришүәт бирергә ҡулынан киләме?.. Һорауҙарҙың береһенә генә лә күңелде тынысландырырлыҡ яуап юҡ. Тик, нисек кенә булмаһын, тәҡдиме менән килгән атай кешенең һүҙен йығырға ярамайҙыр. Кем белә, бәлки, мәсьәләне төрлө яҡлап, ныҡлап тикшереп ҡарарға кәрәктер. «Юҡ» тип өҙөп әйтергә ун көндән дә һуң булмаҫ...»

– Ныҡлап уйланығыҙмы? – Мөҡсиндең һүҙҙәре асыулы түгел, талапсан яңғыраны. Кемдеңдер ишетеүенән шикләнгәндәй, ишеккә күҙ һалды.

– Бәй, уйын эш түгеллеген кем аңламай. Ҡалым өсөн көтөү-көтөү малым юҡ.

– Туйға ат, биш-алты һарыҡ та етеүе ихтимал. Ваҡ мәсьәлә. Улың ҡайҙа йәшәмәксе, бында, Боҙаяҙҙамы, тим?

– Уйы шулайыраҡ.

– Мин дә төпләнеп кенә торам. Боҙаяҙға әле нигеҙ ҡорола. Оло юлда буласағы ла һәйбәт кеүек. Өфө яҡын. Стәрлетамаҡ пристане тирәһе лә ҡыҙыҡһындыра. Уның Ағиҙел буйында икәнлеге шәп. Ҡыҫҡаһы, һайланыр урындар бар. – Мөҡсин һөйләнеп ултырһа ла, эстән генә: «Ул егет менән ҡыҙы араһында бер-бер бәйләнеш юҡмы икән? Күҙҙәрен төшөрөшөргә, мөхәббәт утында янырға өлгөрмәгәндәрме? – тип уйланы. Үҙенә-үҙе ҡаршы төштө: – Булыуы мөмкин түгел! Ә кем белә? Кем һиҙенә?..»

– Ҡатмарлы һорау ҡуйҙың, Усай әфәнде. Бала яҙмышын хәл итеү уйын эш түгел. Уйлайыҡ, ҡабаланмайыҡ.

– Беҙҙең яҡта уйланылған.

«Ныҡыш кешегә оҡшаған, – тип уйлап алды Мөҡсин. – Һәйбәт һыҙат». Ҡайтып-китеп йөрөгәндә яңғыҙы ғына йәшәп ятҡан егет хаҡында имеш-мимештәр ҙә ишеткеләгәйне. Имеш, ауылға нур өҫтәгән. Имеш, ул берҙән-бер уҡымышлы. Имеш, ул ғына кеше күңелен аңлай белә. Имеш, ҡайҙандыр бер һылыуҙы алып киләсәк... Һәр хәбәргә ҡолаҡтарын ҡарпайтырға күнеккән Мөҡсин, һәр ишеткәненә баһа бирергә тырыша. «Кеше күңелен аңлай белә». Нисек, ниңә үҙ күҙлегенән сығып ниндәй уй менән аңлай? «Ҡайҙандыр бер һылыуҙы алып киләсәк? Ҡайҙан? Кем ҡыҙы?..» Ә ниңә һуң әле, сәбәп табып, шул егет менән осрашып һөйләшмәне, уй-фиғелен белмәне? Мулла булып китә икән, аралашырға тура киләсәк бит...

– Әңгәмәне бер аҙнанан дауам итербеҙ. Бөгөнгә хатта йортом да төҙөлөп бөтмәгән. Мөмкинселегең була икән, киләһе аҙнаның ошо көнөндә күрешербеҙ. Иншалла.

Мөҡсин ҡыҙын Ҡәнзәфәргә бирергә күнде. Тик шарты шундай: туй – нәҡ бер йылдан һуң! Һүҙ араһында, килен төшәсәк өй иркен вә матур, йыһазландырылған булырға тейеш, тип тә сирттерҙе.

Алдағы ваҡиға ғәм өсөн, әлбиттә, тәрән сер ине.

– Улым, – тине Усай, – ташты тау түбәһенән ҡуҙғаттыҡ, хәҙер уны тәгәрләүҙән туҡтатыу әмәле юҡ. Былай итербеҙ: яңы урынға һиңә яңы, күркәм йорт төҙөрбөҙ. Бәләбәй яҡтарында етегә һигеҙ аршинлы ҡарағай бура барлығын ишеттем.

Ҡайҙан ҡайҙа, тип тормай ташырбыҙ. Тотонабыҙ, улым, тотонабыҙ. Ыштанһыҙ ҡалынһа ҡалыныр, мах биреү юҡ...

Боҙаяҙ ауылында береһенән-береһе алыҫ түгел ҡояшҡа ҡаратып һалынған, балҡып торған ике йорт ҡалҡып сыҡты. Ҙурыһы – тирә-йүндә ҡурҡытып тотҡан Уса юлынан Нуғай юлына күсеп килгән Дыуан-Табын волосы старшинаһы Әбдесәләмовтыҡы. Ә икенсеһе, бер аҙ ҡайтышырағы, йәш мулла Ҡәнзәфәрҙеке. Тик уныҡы ҡупшыраҡ. Сөнки Ҡазан тарафтарынан ялланған балта оҫталары үҙ бурыстарын ҙур зауыҡ менән башҡарҙылар.

Имеш, хәҙрәт элекке өйөн мәсет итмәксе, шунда уҡ ауыл малайҙарына һабаҡ та бирмәксе.

Былары – имеш, ә инде «имеш»тең иң ҙуры – мулла егет кемгә өйләнер? Шундай ҡупшы ҡапҡаны ниндәй ҡыҙ асып инер? Күпме мәшәҡәт, күпме шау-шыу, күпме теләктәр... Бөтәһе лә, ниһайәт, артта ҡалды.

Әсә кеше Маһинур әйтмешләй, ялан кеүек өйҙөң иҙәненә йәйелгән биҙәкле балаҫ өҫтөндә бәхеттәре сиктән ташҡан ике йәш йөрәк ултыра; Ҡәнзәфәр һәм Сүриә. Уларҙы ҡауыштырғандары, оло мәшәҡәттәр күтәргәндәре өсөн атай-әсәйҙәренә ғүмергә рәхмәтле буласаҡтар. «Мин бит яныңдан өс тапҡыр үттем, һин иғтибар итмәнең. Дүртенсеһендә генә ҡарашыма күҙ һалдың,» – тип Сүриә тәүге үпкәһен белдерҙе. Үпкәме ни был? Был бит ҡәҙерле, мөғжизәүи һүҙҙәр, ғишыҡ һүҙҙәре.

Ҡәнзәфәр Сүриәнең аҡ яулығын шыуылтып төшөрҙө. Тигеҙ итеп айырып, шыма итеп таралған ҡара сәс, ҡыйғас ҡаштар, ап-аҡ йөҙ, әле, бына әле генә бешеп етешкән ирендәр, оҙон аҡ муйындың уң яғында сәйлән ҙурлығындағы миң. Күҙҙәр-р! Төпһөҙ. Зәңгәр күк. Сөм-ҡара сәс, ҡаш, зәңгәр күҙҙәр. Ә ниңә күҙҙәре ҡара йә һоро түгел? Әсәһенең әсәһе, йәғни өләсәһенең күҙҙәре шундай уҡ булған, ти. Боронғо нәҫелдәренең осо Ҙур Иҙел йылғаһының үрге ағымы тирәһендә йәшәгән кемдәргәлер барып тоташа. Быныһы имеш кенә. Сөнки бөгөн уны раҫларлыҡ бер генә шаһит та юҡ. Ҡара сәс, ҡара керпектәр менән зәңгәр күҙҙең бергә тура килеүе һирәк күренеш. Тимәк, шундай гүзәл йән эйәһе Ҡәнзәфәр бәхетенә тыуған.

Улар тәүге төндө йә иҙәндә ултырып, йә ихатаға сығып, тулған айға бағып, нисек бәхетле булыуҙарын юғарылағы Зөһрә ҡыҙға һөйләп үткәрергә булдылар.

Сүриә томанды хәтерләткән аҡ яулығын башына ураны.

– Ҡатын-ҡыҙҙың сәсе күренергә тейеш түгел, – тип һөйләнде. – Бигерәк тә егет эргәһендә. – Кеткелдәп көлгән булды аҙаҡ.

Көлөү тауышын ишеткәс, Ҡәнзәфәр иғтибар итте: өйҙә һөйгәненең булыу харап күңелле икән. Әлегә тиклем яңғыҙы ине бит. Тып-тын өйҙә нисек түҙеп йәшәгән? Ул ҡәҙерлеһенә яҡынайып, арҡаһынан ҡосаҡланы. Тегеһе тәүге тапҡыр башын һөйгәненең күкрәгенә ҡуйҙы. Аҡ күлдәк артында леп-леп йөрәк тибә. Әлегә тиклем борсолоуын, шул арала сирләүен, бөгөн инде тынысланыуы хаҡында хәбәрләй кеүек ине...

Мөҡсин иһә кинйә ҡыҙын Ҡәнзәфәргә биргәс, йоҡоһон юғалтты. Үҙ теленән ғәйре русса ла яҡшы белгән йәш мулла боҙаяҙҙар өсөн генә түгел, тирә-йүндә көн итеүсе кешеләр өсөн дә яҡын кәңәшсегә, уларҙы яҡлаусыға әйләнә, абруйы көндән-көн күтәрелә барҙы. Ҡөрьән, никах уҡытыу өсөн сират торалар. Ундай мәжлестәргә Сүриәне лә үҙенән ҡалдырмай. Килеп алалар, килтереп ҡуялар. Урындары түрҙә. Ике сибәрҙе күреү, хәҙрәттең вәғәздәрен йотлоғоп тыңлау – үҙе бер мөғжизә. Шундай ҙур түрәнең ҡыҙы булыуына ҡарамаҫтан, Сүриәнең үҙен ябай тотоуы, ҡатын-ҡыҙҙың зарын тыңлай белеүе ҡыуандыра ине. Мулла иһә мосолман

ҡанундарын яҡшы үҙләштергән. Ҡөрьәнде лә тотошо менән яттан белә икән. Оҙаҡламай хафиз булыр.

Тик бына старшина Сөләймән Ишмөхәмәтов командаһында йөҙ башы итеп һайланғас, дин әһеленең мәшәҡәттәре ныҡ артты. Уға Өфө провинцияһы канцелярияһы менән генә түгел, Ырымбур губернаторы күрһәтмәләрен, указдарын тормошҡа ашырыу буйынса ла эш итергә тура килә.

Ана, губернатор Путятин Ҡазан юлында көн итеүсе ун мишәрҙең үҙҙәренең йөҙ башы өҫтөнән яҙған шикәйәтен тикшерергә ҡушты.

Бойороҡ ябайҙан һаналмай. Мәсьәләне өйҙә ултырып ҡына хәл итеү мөмкин түгел. Ҡаршын волосына барырға, ҡыйырһытылған әҙәм балалары менән күҙмә-күҙ осрашырға, һөйләшергә, әгәр ҙә килтерелгән дәлилдәр раҫлана икән, юртовой сотник Сиртан Ильясовты утлы табала бейетергә кәрәк. Юғиһә, чиновниктар, ҡайһы бер старшиналар оят, намыҫ, ғәҙеллек тигән төшөнсәләрҙе бөтөнләй белмәй. Тикшерелергә тейешле шикәйәттә береһе: «Бурысымды түләй алмағаным өсөн сотник өйөндә эшләтә, ашарыма юҡ, ҡатыным хәйер һорашырға мәжбүр», – тип яҙған. Икенсеһе лә шундайыраҡ йөкмәткеле: «Бурысҡа ун ике һумлыҡ аҡсалата, тауарлата алып торғайным. Ҡалыпҡа һалып, ҡамсылап тотто. Бер бурысым өсөн йөҙ күбә бесән эшләнем. Йыл буйы бушҡа тир түктерҙе. Шуға ҡарамаҫтан, яҙыуымды (расписка) кире бирмәй. Тимәк, тағы түләтергә уйлай. Аҙым һайын ришүәт алыуҙары тураһында һөйләп тораһы ла түгел...»

Ҡәнзәфәр хәлде бөтә дөрөҫлөгө менән тикшереп, яҙып, эште Ырымбурға оҙатты. Байтаҡ ваҡыт үткәс, йөҙ башының ҡулға алыныуы, уға штраф һалыныуы хаҡындағы хәбәр килде.

Боҙаяҙ оло юлда ултырғанлыҡтан, тәбиғи хәл, үтеп-һүтеп йөрөүсе бихисап. Тик ауыл халҡы юлсы чиновниктарҙан ыҙа сигә. Улар араһында ниндәйҙәре генә юҡ. Берәүҙәре ат менән оҙатырға әмер бирә, икенселәре йөк ташырға бойора, өсөнсөләре ашарға әҙерләүҙе талап итә... Бөтәһе лә бушҡа, бер тинһеҙ. Алдау, талау...

Яфа сиккән, бөлгән боҙаяҙҙар ярҙам һорап Ҡәнзәфәргә килә.

– Ҡотҡар бәләнән!

– Дүрт күҙ менән ҡарап торған һыйырҡайыбыҙҙан мәхрүм иттеләр.

– Стәрлегә тиклем оҙат, һуңынан түләрбеҙ, тип алып киткәйнеләр, Ырымбурға уҡ алып барҙылар. Етмәһә, баструк менән янайҙар...

Сыҙамлығын юғалтҡан үҙе мулла,үҙе йөҙ башы Ҡәнзәфәр яҡлау һорап Өфө провинция канцелярияһына юлланды. Мыҫҡыл ителеүгә, йәберләнеүгә, кәмһетелеүгә нөктә ҡуйылырға тейеш тә инде ахыр сиктә!

Уның һүҙҙәренә, бигерәк тә дәлилдәр теҙеп, аңлатып яҙғандарына ҡолаҡ, күҙ һалдылар. Муллаға ышанмау түгел, шикләнмәнеләр ҙә. Ҡулына «Яҡлау указы» алыуға ирешә. Хәҙер инде дәрәжәләре менән ҡурҡытырға ынтылыусыларға: «Әгәр ҙә юлыңды дауам иткең килһә, ҡулға алынаһың килмәһә, табаныңды ялтырат», – тип кенә ебәрә.

Боҙаяҙҙағы уҫал сотник хаҡындағы хәбәр тиҙ таралды. Шуға күрә халыҡҡа әмер биреүсе, екереүсе, ҡурҡытыусы башҡаса табылманы. Йөҙ башының килбәтенән генә түгел, хатта шәүләһенән дә шөрләйҙәр. Шулай уҡ ялағайланыуҙың, бүләк-маҙар тәҡдим итеүҙең файҙаһыҙлығы ла мәғлүм.

Былары нимә, хатта старшина Ишмөхәмәт Сөләймәновты аҡылға ултыртырға уйлаған. Заманында Себер линияһына хеҙмәт итергә ебәрелгән мең кешенән торған башҡорт-мишәр командаһына баш итеп тәғәйенләгәндәр бит шуны. Атаһы Сөләймән Диваев башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуҙа алдан йөрөүсе булған. Дыуан-

Табын волосынан ошо тарафтарға күсеп килеп, Ауырғазы, Боҙаяҙ, Үҙән йылғалары буйынан биләмәләр алған. Мөҡсин Әбдесәләмов менән Боҙаяҙҙа төпләнергә ҡарар итә. Алма ағасынан алыҫ төшмәй тигәндәй, ҡанһыҙлығы, ҡомһоҙлоғо олатаһы Дивайҙан ғына түгел, олатаһының атаһы Нивайҙан уҡ һуҙыла. Унының ла ябай халыҡҡа тыныслыҡ бирмәгән. Кешеләрҙе туҡмау, ҡурҡытыу, уларҙың малын тартып алыу, бисараларҙы бушҡа эшләтеү төп шөғөлө булған.

Ишмөхәмәт Сөләймәновтың ришүәтсе булыуы, вазифаһын үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыуы хаҡында, дәлилдәр килтереп, 1770 йылда Өфө воеводаһына рәсми ҡағыҙ бирҙе. Кешеләрҙе көпә-көндөҙ аҡыртып талай, бурысҡа аҡса биреп торған була ла бахырҙарҙы егеп эшләтә, ҡатын-ҡыҙҙарға бәйләнеүҙән дә тартынмай...

Кейәүенә һарыуы ҡайнай башлаған Мөҡсин был хаҡта ишеткәс, түҙемлеген юғалтып, күтәрелеп бәрелде. Аттарын аҡ күбеккә батырып Өфөнән саптырып ҡайтты. Үҙ ҡапҡаһына боролманы, тураға Ҡәнзәфәргә уҙҙы. Өс билле ҡайыш сыбыртҡыһын кырандаста ҡалдырырға онотоп, өйгә ашыҡты.

Ҡәнзәфәр менән Сүриә гөрләшеп сәй эсә ине. Ишектән бәреп ингән атай кешене күргәс, ҡот осҡос хәбәр ишетәсәктәрен тойоп, икеһе лә урындарынан күтәрелде.

– Сығып тор, – тип сыбыртҡы һабы менән ишеккә күрһәтте ҡыҙына. Осло һаҡаллы эйәген Ҡәнзәфәр яғына борҙо.

«Башҡа саҡтағыса «ҡыҙым» тип тә торманы, тимәк, ҡыҙыуы сиктән ашҡан», – тип уйлап, Сүриә ихатаға уҡ ашыҡты. Әсәһе эргәһенә барырға ниәтләгәйне, йә бында кәрәк булырын иҫләне. Атай кешене сәй эсермәй ебәреү ҙә гонаһ.

Мөҡсин, асыуын баҫа алмай, һүҙен нимәнән башларға белмәй, урынында тапанып торҙо. Ярҙамға Ҡәнзәфәр үҙе килде.

– Тыңлайым, ҡайным, әллә Өфөлә бер-бер бәләгә тарылдымы?

– Өфө… Бәлә… Бына һин бәләгә әйләнеп бараһың. Бәлә, имеш.

– Төшөнмәйем.

– Башын диуанаға һалмаҡсы. Кем менән ярышмаҡсыһың? Ишмөхәмәттең кем икәнлеген әллә онотоп ебәрҙеңме?

– Старшина итеп ҡуйылған икән, вазифаһын намыҫ менән башҡарһын. Выжданһыҙ ул.

– Себен тулап тәҙрә вата аламы?! Мең кеше, аңлайһыңмы, мең кешегә баш булып Себер сиктәрендә хеҙмәт иткән. Уның кемлеген хатта батшабикә үҙе белә.

– Себерҙәге хәле миңә мәғлүм түгел. Улайға китһә, мин Рәсәй мәнфәғәттәрен яҡлап Пруссияла ҡанҡойошта ҡатнашҡанмын. Ә ул, һинең Сөләймәновың, кеше талай...

– Һүҙ көрәштермәйек. Аңла, йәшә әҙәмсә. Үрелмә буйың етмәгәнгә. Бергәбергә, ҡулға-ҡул тотоношоп эшләрбеҙ, бай тормошта йәшәрбеҙ, тип өмөтләнгәйнем, ә һин? Былай икән, йә һин яңғыҙ ҡаласаҡһың, дуҫтарһыҙ, яҡлаусыларһыҙ көн итәсәкһең, йә һине, Аллаһ һаҡлаһын, дөмөктөрәсәктәр. Ҡыҫылмаҫҡа кәңәш итәм. Ҡатының, балаларың барлығын онотма. Сабыйҙар хаҡына.

– Ултырып һөйләшәйек, ҡайным. Табын әҙер.

– Башҡа ваҡытта! Әгәр килешһәң...

Көтмәгәндә тыуған әлеге ҡыйын хәлгә аптырабыраҡ ҡалған Ҡәнзәфәр тәҙрәгә ҡараны. Кәртә бағанаһына һөйәлеп торған бисәһен күреп тертләп ҡуйҙы. Ябай ғына әйткәндә, уны атаһы ҡыуып сығарҙы бит. Мөҡсин менән ике арала етди һөйләшеү тыуасағын кейәү кеше тойоп йөрөнө. Бәлки, бөгөн өйгә килеп инеүе яҡшыраҡтыр ҙа. Сөнки билдәһеҙлектән дә, икеләнеүҙән дә, күрәҙәлек итеүҙән дә ҡыйыныраҡ хәл юҡ.

– Былай, ҡайным, беҙ ике кеше. Донъяға ҡарашыбыҙ ҙа бер үк төрлө түгелдер. Икебеҙ ике юлдан атлаһаҡ та, үҙ-ара килешеп йәшәүҙе тәҡдим итер инем.

Мөҡсин «тфү» тине, ләкин кипкән ауыҙынан төкөрөгө сыҡманы. Ишекте тибеп асты, әллә артына бороларға теләмәне, мәгәр япманы. Уға ҡарай ҡуҙғалған ҡыҙына ла өндәшмәне.

Сүриә, өйгә инергә ҡыйынһынып, ихатала байтаҡ ваҡыт торҙо. Ул ире менән атаһы араһындағы ҡырҡа һөйләшеү булғанлығын тойһа ла, сәбәбен белмәй ине. Атаһының уҫаллығы, үҙ һүҙлелеге билдәле. Элекке волостан бында күсеп килеүенә лә ер насарлығы ғына сәбәпсе түгел, ул ҡылған яуыҙлыҡтары өсөн үс алыныуҙан шөрләй ине. Әсәһе лә: «Инде иҫән йөрөһөн, бер үк башҡайҙарына етмәһендәр», – тип ирен юҡҡа ғына һәр саҡ бошоноп көтмәгәндер. Атаһының һуңғы ваҡытта: «Эх, хаталанылды. Эх, уйлап етеңкерелмәне», – тип уфтаныуын Ҡәнзәфәргә ҡарата икәнен тоя ине. Ҡатынына ла: «Кәрәкмәгәндә ҡыҫылырға яратаһың, шул саҡта ләм-мим», – тип асыуланғанын ишеткәне бар. Әсәһе иһә: «Ҡатышма, һиңә кем оҡшар ине һуң? Инде хәҙрәт тиклем хәҙрәт тә ярамағас...» – тиеүҙән артмай. «Ул бит, әгәр ҙә башын эшләтә белһә, Өфө, Ырымбурҙа, Питерҙә хеҙмәт итер кеше. Юҡ, үҙ һүҙләнә. Тиҫкәре. Уға кем ойотҡо һалғанын яҡшы аңлайым...»

Атаһы менән әсәһенең үҙ-ара шундай һөйләшеүҙәренә шаһит Сүриә. Тик ниндәй тиҫкәрелек, ниндәй Өфө, Ырымбур, Питер, ниндәй ойотҡо хаҡында әйтеүенә, генә төшөнмәй. Ә бит уның Ҡәнзәфәренә тиң булырлыҡ әҙәм балаһы донъяла юҡ. Әүлиә ул. Хатта күптән түгел атаһының Сүриәне элек Өфөлә писарь булып эшләүсе, мосолман диненә күскән сыуашҡа бирергә уйлағанын белгәс, үҙен боҙло һыуға төшкәндәй хис итте. Тимәк, ҡомағай атаһына, һәйбәт кешенән дә бигерәк, Өфө кәрәк. Кейәүен юғары ҡатлам араһында күрергә теләй.

***

Ишленән һуң Боҙаяҙға боролғас, Ҡәнзәфәр атын үҙ яйына ҡуйҙы. Сөнки яҡты күҙҙә өйөнә ҡайтып кермәҫкә ҡарар итте. Нисә һөйләһәң дә, донъянан ут осоп тора. Кем белә, бәлки, уның ауылына карателдәр килеп тулғандыр. Һаҡһыҙлығың арҡаһында эләкһәң, күп һөйләшеп тормаҫтар, муйыныңа – элмәк. Старшиналар ике яҡҡа айырылды. Шуға күрә ҡайһыһына ышаныуы ла ҡыйын. Икеләнеүселәр, һатлыҡ йәндәр өсләтә ҡурҡыныс. Булған ғәйептәрен аҡлар, әҙме-күпме бүләк эләктереү өсөн каратель башлығына йә воеводаға ат ҡойроғона тағып илтерҙәр. Ваҡытында Рәсәй батшаһына тоғро хеҙмәт итергә ант иткән Ҡәнзәфәргә был осраҡта бер ниндәй ҙә ташлама булмаясаҡ.

Ҡыш башының оҙон төнө. Күк йөҙөн тотошо менән болот ҡаплағанлыҡтан, юғарынан бер ниндәй яҡтылыҡ һирпелмәй, йондоҙҙар ҙа емелдәмәй.

Ауыл тын. Ҡар шығырлатып үтеп-һүтеп йөрөүсе лә, хатта эт өргән тауыш та юҡ. Тәҙрәләрҙә лә ут күренмәй. Кемдә-кемдә, ә Мөҡсин йортонда яҡтылыҡ булырға тейеш, тик уның тәҙрәләрелә ҡараңғы.

Сүриә иһә, яңғыҙы булғас, бикләнеп, малайҙарын ҡосаҡлап йоҡлайҙыр. Утлы кешегә теләһә ниндәй әтрәгәләм, юлсы килеп бәрелеүсән бит.

Ҡәнзәфәр атын аҙбар эргәһенә илтеп бәйләне. Башҡа саҡта эстән һыйыр, һарыҡтар тауыш бирә торғайны, ғәжәп, бөгөн һулыш алған өн дә ишетелмәй. Ишекте дөбөрләтеп, тәҙрәгә лә сиртеп ҡараны, ләкин өндәшеүсе булманы. Тимәк, юҡтар. Ниндәйҙер хәбәр ишетеү теләге менән Мөслим Ҡәнбәковтарға йүнәлде. Атын ҡалдырырға уйлағайны, алып китерҙәр, тип шикләнде. Ишеккә Мөслимдең бисәһе Кәфиә килде. Асмай ғына кемлеген һораны. Ҡәнзәфәр икәнен белгәс, ишекте асып, эскә саҡырҙы.

– Беҙҙекеләр ҡайҙа? Иҫәндәрме? Ҡайтманыларм Ҡайтманылармы? – тип һорауҙар яуҙырырға тотондо.

– Күрмәгәнемә айҙан артты.

Эйе, Мөслим дә улы Әбдин менән ихтилалсылар араһында. Тик бөгөнгө көндә ҡайһы тарафтарҙа йөрөүҙәре Ҡәнзәфәргә мәғлүм түгел.

– Эш былай, хәҙрәт: Мөҡсин Сүриә менән малайҙарыңды, үҙенең бисәһен дә Өфөгә алып китте. Мал-тыуарҙарын да ҡалдырманы. Бында ҡурҡыныс, тигән. Ә һин бөтөнләйгә ҡайттыңмы?

– Юҡ, былай ғына, юл ыңғай күреп-күрешеп сығырға уйлағайным.

– Донъя ҡурҡыныс, хәҙрәт. Ҡулына ҡорал тоторлоҡ ир-атты алып китеп бөттөләр. Һин Яңы батша яғынан тороп һуғыша икән, тип хәбәр тараттылар. Ҡайның һине яуыз ҡараҡ тип атаған. Бөтәһе лә кеше һүҙе генә. Бер кем бер нәмә белмәй, бер нәмә аңламай. Төн килдеме, бикләнәбеҙ.

– Мине күреүегеҙ сер булып ҡалһын.

– Ҡунып кит.

– Юл кешеһенең юлда булыуы хәйерле… Иҫән булып тор. Сирләмә.

– Беҙҙекеләрҙе осратһаң, әйт, ҡайтырға тырышһындар.

– Һүҙҙәреңде еткерермен...

Ҡәнзәфәр атын эсерҙе лә һыбай менде. Ул Стәрлетамаҡ пристаненә кире юлланасаҡ.

Аяныс. Бик аяныс. Һөйгән бисәһен күрергә, ике малайын алдына ултыртып иркәләргә тигән өмөт менән ашҡынып ҡайтҡайны бит. Кем белә, бәлки, һуңғы тапҡыр күрешеү, бәлки, кем белә, мәңгегә хушлашыу ҙа булыр ине.

Һигеҙ йәшлек өлкән улы Батырша ҡул араһына керә башланы, алтылағы Абдулла ла ағаһынан ҡалышмай. Тегенеһе өйгә дүрт киҫәк утын индерһә, быныһы – өстө. Икене генә күтәрергә риза түгел. Йәнәһе, ул да үҫкән, уның да көсө етерлек. Атайҙары йөрөп ҡайтһа, атылып сығып ҡапҡаны асалар, атын етәкләп алалар, уны туғаралар, алдына ашарға һалалар. Йәй көнө һыу буйына алып төшөп йыуындыралар. Өйҙә шундай ике егет үҫәсәгенә Ҡәнзәфәр сикһеҙ шат. Сүриә иһә ҡыҙ көтә. Өсөнсө балалары ҡыҙ буласағына өмөтләнә. Ул сағында инде донъяла унан да бәхетлерәк кеше булмаҫ кеүек.

Саҡмағоштағы олатай, өләсәй ейәндәрен һағынып, шуларҙы килтереп күрһәтегеҙсе, тип зар-интизар булыуҙарын белдерһәләр, «яҡын олатай», йәғни Мөҡсин ейәндәрен яратып бөтмәй: «Эй, ҙуры» йә «Эй, бәләкәйе» тип кенә өндәшә.

Нисек кенә булмаһын, малайҙар шәп. Килгән кешеләр алдында Ҡәнзәфәр улар менән маҡтанып туя алмай. Үҫкәс әллә ҡайҙарға илтеп уҡытырға хыяллана. Ҡазан, Бохара ҡалаларын телгә ала. Имеш, унда бөйөк уҡытыусылар, белем, һабаҡ биреүселәр йәшәй. Әлегә улар хәрефтәр өйрәнә, уларҙы ҡушып һүҙҙәр, һөйләмдәр йыя. Яратҡан атайҙарын уртаға һалалар ҙа йоҡлап киткәнсе әкиәт даулайҙар. Өфө баҙарын күрһәтеүен үтенәләр. Сүриә иһә – фәрештә. Уның бар белгәне – иргә хеҙмәт итеү, балаларын тәрбиәләү, килгән-киткән кешегә яҡты йөҙ күрһәтеү, тәмле ризыҡтар әҙерләү. Бай ғаиләлә үҫеп тә эш яратыуына, ярлы-ябағаға ла хөрмәт менән ҡарауына ғәжәпләнеүселәр аҙ түгел.

***

Ҡәнзәфәр Стәрлетамаҡҡа кире барып, ике генә көн торҙо. Ул тиҙ арала команда йыйырға ла Көңгөргә ашығырға тейеш. Яңы батшаның указын һис кенә лә уйынан сығарманы.

Ҡотлоғужа оҙатырға килгәс, Ҡәнзәфәр һөйләшеү буйынса походҡа тәғәйен алтмыш кешене бында ҡалдырырға ҡарар итте.

– Хәлдәр үтә буталсыҡ, һеҙгә оло юлды һаҡлау йөкмәтелгән. Өфө ҡамауҙа, уны штурмлау күҙ уңында. Бында кешеләр бик кәрәк, күп кәрәк. Карателдәрҙе тар-мар итеү һеҙҙең бурыс. Мин бүтән төбәктәрҙәге халыҡты ла күтәрергә тейеш. Команда тупларыма ышанам.

– Хәйерле юл, хәҙрәт.

– Йөҙ башы, – тип йылмайҙы Ҡәнзәфәр.

– Быға тиклем йөҙ башы инең, хәҙер мең башы булырһың, Аллаһ бойорһа.

– Хуш булып тор, Ҡотлоғужа. Питергә барып, Яңы батшаны тәхеткә бергә ултыртырға Хоҙай насип итһен.

– Амин, шулай булһын.

Һөңгө, киҫтән, суҡмар, уҡ, йәйә, айбалта, ҡылыс менән ҡоралланған һигеҙ яугир алға ҡуҙғалды. Ете кешенең башлығы Ҡәнзәфәрҙә генә мылтыҡ бар ине. Уны, Верхнее Озеро ҡәлғәһенә бәреп ингәс, үлергә ятҡан һалдаттан алғайны. Нисек ҡорорға, тоҫҡап атырға һуғышта өйрәнгәйне инде. Иҫән-аман йөрөп ҡайтҡас, тыуған төйәктә ҡулға мылтыҡ алынып, тип кем уйлаған шул саҡта.

Ул тик Бөрө ҡалаһын уҙғас ҡына команда йыйырға ҡарар ҡылды. Уйлауынса, ундағы ауылдарға бик үк ҡағылырға өлгөрмәгәндәрҙер әлегә, аттар ҙа, уларҙы ашатырға бесән, фураж да халыҡта барҙыр.

Чурай тигән мари ауылынан биш сирмеште үҙенә ҡушты. Ифрат ҡурҡаҡ халыҡ. Суҡындырылыуҙан ҡасып килгән әлеге кешеләрҙе кем иренмәй – шул талаған, кем йыбанмай – шул йәберләгән. Улар хаҡында: «Ҡуянды йүгереп ҡыуып тоталар икән», – тип ишеткәне бар Ҡәнзәфәрҙең. Ысыны шулай икән. Саңғыла шәп йөрөйҙәр. Ҡарыштан ҡайтып килгәндә атаһы менән Чурайҙа хәл алырға туҡтағайнылар. Апай исемле сирмеш: «Ҡыуып тотмағас, ҡуянды нисек ҡулға төшөрмәк кәрәк. Песнең мылтыҡ юҡ бит. Ҡуян ул әллә ҡайҙа ҡасып китмәй, гел бер тирәлә, бер эҙенән әйләнеп йөрөй. Саңғыла шәп йүгермәһәң, ҡуян юҡ», – тип һөйләп торғайны. Әллә шуғамы, ҡуян итенән дә ҡәҙерлерәк ризыҡ юҡ уларҙа. Командаға иһә риза булып яҙылдылар. Сөнки йәберләүселәрҙән үс алыу уйы уларҙа күптән йәшәп килә. Бындай форсатты ҡасан табыр инең. Татарса һөйләшә белгәнлектән, улар менән эш итеүе ҡатмарлы түгел. Тыңлаусан, эшсән халыҡ. Ҡәнзәфәрҙең уйында, әлбиттә, – Ҡарыш ауылында туҡталыу. Һуңғы тапҡыр булғанға ун һигеҙ йыл ваҡыт үтеп киткән. Ҡарттар әйтмешләй, бер кеше ғүмере.

Ҡарыш йылғаһы буйынан ер алыр өсөн Танып төбәгенә килеп ултырыусылар араһында мишәрҙәр боронғоларҙан һанала. Алсаҡ, эшһөйәр кешеләр йәшәй ул тирәлә. Шул тиклем урмандарҙы үртәп ҡыйратып, игенлеккә әүерелдереү ялҡауҙарға хасмы ни!

Ауыл әллә ни ҙураймаған. Батырша ихтилалынан һуң уның бөтөнләй юғалыу ҡурҡынысы тыуған. Сөнки батша властары ахун Абдулла Алиевтың исемен генә онотторо у түгел, ауылының да көлөн күккә осорорға уйлаған. Тик, имеш, халыҡ нәфрәте ҡуйырыуынан шөрләгәндәр.

Хәлдәр Ҡәнзәфәр уйлағанса бик ябайҙан түгел икән, сөнки Әбей батшаға тоғролоҡло старшиналар Ҡолой Балтачев, Солтанморат Янышев, Ишмөхәммәт Сөләймәновтар фетнәселәргә ҡаршы отрядтар туплап йөрөгәндәр.

Батыршаның өйө юҡ ине, әлбиттә. Хәҙрәт тотолоу менән уның мөлкәтен старшина Яныш үҙләштергән, ҡарағайҙан һалынған ҙур йортон кемгәлер һатып ебәргән. Әле шул урында ауылға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Әғи Алмашевтың нәҫелен дауам итеүсе Сәлимйән тигән кеше йәшәп ята. Бик һәйбәт әҙәм булып

сыҡты. Ҡәнзәфәрҙең бер нисә иптәшен ҡуна алды. Ҡаҙан аҫты. Иҫәпләп ҡарағас, Ҡарыштан алты-ете кешенән артыҡ ир-атты ылыҡтырырлыҡ түгел икән.

– Бәлә-ҡазаға тарыныҡ. Бәхетһеҙлектән сығыу юлы юҡтыр? – тип аптырап, ҡайғырып ултырҙы йорт хужаһы. – Иҙелеүҙән, таланыуҙан баш сыҡмай. Ниндәй ҡәһәрле донъялыр. Мәхшәр. Бәлки, бүтән тарафтарҙа тормош икенсерәктер, ә?

– Ҡайҙа ла шул. Тәхеткә яңы батшаны ултыртмай тороп, иркенләп һулыш алыу юҡ. Ул ирек, бушлай ер бирә. Шулай уҡ урмандағы кейектәр ҙә, йылғаларҙағы, күлдәрҙәге балыҡтар ҙа ябай кешеләргә.

– Күңел ышанмай.

– Бына манифесы, указы, – тип Ҡәнзәфәр ҡуйынынан ҡағыҙ тартып сығарҙы.

– Уҡый белмәгәс…

– Үҙем аңлатам. Яңы батша эргәһенән китеүемә ай ҙа юҡ.

– Күрҙеңме?

– Бергә һуғышып йөрөнөк. Бик ябай. Ул бит әлеге батшабикә Кәтринәнән ҡасып, халыҡ араһында йәшәгән.

– Ниңә ҡасҡан?

– Теге ирен үлтереп, тәхеткә ултырырға уйлаған. Быныһы һиҙеп ҡалған да ҡасҡан.

– Әлеге лә баяғы тәхет, урын. Старшиналар ҙа урындарына йәбешеп ята. Ҡоторалар. Шашалар...

Бүтәндәр ҡаты йоҡоға талғас, Ҡәнзәфәр Батырша хаҡында һорашырға булды. Байтаҡ йылдар үтһә лә, бәлки, ауылында хәтерләйҙәрҙер.

– Мин һине төҫмөрләнем, хәҙрәттә һабаҡ алдың даһа. Йәшәгән ереӊ Иҙел аръяғында шикелле. Эйе, эйе, иҫемә төштө. Һиңә булһа кәрәк, нәк һиңә, исемең Ҡәнзәфәр, ахунибыҙҙың күрше ҡыҙы Гөлсөмдөң күҙе төшкән. Ун дүрт йәшлек бала. Яратҡандыр инде, күрәһең. Был хаҡта кемгәлер әйткән. Һүҙ сыҡҡан. Ҡыҙҙар ундай ҡылыҡтары өсөн язаға тартыла шәриғәт ҡанундары буйынса. Был осраҡта егет кеше ундай ҡыҙға өйләнә алмай. Өйләнһә, көләсәктәр. Был осраҡта Гөлсөм тик берәй ҡарт иргә генә кейәүгә бара ала. Уны ниндәйҙер ҡанһыҙ бәндәгә дүртенсе ҡатынлыҡҡа бирҙеләр. Сыҙаманымы икән, түҙмәнеме – Таныпҡа батып үлгән, тинеләр. Шундай тарих. Сибәр бала ине. Урыны йәннәттә булһын. Һөйләүем өсөн, Хоҙай Тәғәлә, кисер. Ә инде Батырша хәҙрәткә килгәндә, ишетеүемсә, эш былай. Ул бер Мостафа исемле шәкерте менән ҡасып, хәйер һорашып йөрөп, кешелектән сыҡҡан бахырым. Һуңынан уны Бөрө юлындағы Әжәк ауылы старшинаһы Сөләймән Диваев Ырымбурға илтеп тапшырған. Хаталанам, үҙе кеүек яуыз старшина Мөҡсин Әбдесәләмов менән Петербургҡа уҡ илткәндәр, ти. Яныш Абдуллин хәҙрәтебеҙҙе ахун итмәҫкә шул тиклем тырышты, хатта отряд йыйып, уны ҡулға алырға маташты. Шашынып шулай йөрөгәндә генә ихтилал күтәрелде. Халыҡ, хаҡлыҡ яҡлы, данлыҡлы, ҙур ғилем эйәһе Батыршаны Яныш кеүек яуыздар нисек яҡын итһен…

Урындыҡ ситенән урын алған Ҡәнзәфәр төнө буйы йоҡлай алманы: йә күҙ алдына Таныпҡа ташланған ҡыҙ, йә Сөләймән Диваев, йә Яныш Абдуллин, уның Ауырғазы тарафтарына күсеп барған, ҡанһыҙлығы яғынан атаһынан да уҙҙырған баш старшина Солтанморат Янышев килеп баҫа. Бөтәһенән дә бигерәк – ҡайныһы Мөҡсин Әбдесәләмов… Бына кем ул Батыршаны һатыусы! Батшабикәнең ҡулын үбеү бәхетенә ирешеүсе, ҡиммәтле бүләктәр алыусы. «Һиңә кем ойотҡо һалғанын беләм», – ти. Тимәк, Батырша шәкерте булыуына төрттөрә, малайҙарының исемен яратмай. Тимәк, мөғәллиме хөрмәтенә Батырша,

Абдулла тип яҙҙырыуын ғәфү итә алмай. Теге саҡта ул да, Солтанморат та Стәрлетамаҡ пристанендә инеләр. Ғәскәр туплашып йүгереп йөрөнөләр. Шул халыҡты батша армияһына ҡушып, Пугачев яҡлыларҙы ҡыйратышырға ине иҫәптәре. Ә инде Ырымбур тарафтарындағы Сермәнәй ауылы тирәһендә торған генерал Кар ғәскәрҙәренә ҡушылыу урынына, башҡорттар, татарҙар подпоручик Ураков бойороҡтарын үтәүҙән баш тартҡас, команда етәксеһе, мең дә ике йөҙ кешене Ырымбурға алып барыу өсөн Солтанморатҡа бойороп, үҙе айғырын тулатып кире һыпыртты. Ҡото осҡан баш старшинаға шул ғына кәрәк ине. Ул Өфөгә Ураковтан алда ҡайтып етте. Һөйләүенә ҡарағанда, имеш, ҡоралһыҙ-ниһеҙ берәҙәктәрҙе генерал ҡабул итергә теләмәгәнлектән, халыҡ таралышырға мәжбүр булған. Күбеһе бергәләшеп далаға ҡарай сапҡан. Уның бутай-бутай һөйләүҙәренән бер нәмә лә аңлашылмаһа, Стәрлетамаҡ пристаненән юлланған команданың Пугачев яғына уңышлы сығыуы мәғлүм булды. Ә инде үҙҙәрен батырға һанап йөрөгән ике старшина ҡулсаға алынған Өфөлә йәшенеп, ғаиләләре менән шунда ҡышларға ҡарар итте.

Борай ауылынан ун ике саҡрым ултырған Әжәк старшинаһы Сөләймән Диваевын әйт әле, торғаны һатлыҡ йән. Атаһы старшина Дивай Диваев та 1735 – 1740 йылдарҙа отряд ойоштороп, баш күтәреүселәрҙе яҙалауҙа алдан йөрөгән. Атаһынан күргән – уҡ юнған, ти, ә Сөләймән олатаһының нисек итеп ғәйепһеҙ кешеләрҙе туҡмауын, яҙалауын, фәҡирҙәрҙе талауын, ҡанға батырыуын күреп үҫкән.

Юлға арҡыры ултырған был ауыл аша Бөрөгә ҡарай үткәндә Ҡәнзәфәрҙең шул Сөләймән өйөнә лә кергәне бар ине. Сөнки уның малайы Батырша мәҙрәсәһендә уҡыны. Шундай ҙур мөдәристән белем алды һәм һуңынан ҡәбәхәттең уҡытыусыһына белдергән рәхмәте. Меҫкен хәленә төшкән ахундың йәнеме, әллә уны тотоусыға бүләккә мең һум аҡсамы ҡиммәтерәк. 1757 йылда Сөләймән Әжәген ҡалдырып, Өршәк-Мин волосына күсенде. Старшиналығын улы Ишмөхәммәткә тапшырҙы. Ҡәнзәфәр ошо бәндә етәкселек иткән командала Ырымбурға барырға тейеш ине лә инде. Бына кемдәр менән йәшәргә, ҡатышырға насип иткән Усай улына.

Өй хужаһы һөйләгән күрше ҡыҙы Гөлсөмдө Ҡәнзәфәр иҫенә лә төшөрә, күҙ алдына ла килтерә алманы, әлбиттә. Сабый ғына булған. Кем иғтибар итһен уға. Ғүмере шулай тамамланыуы аяныс, әлбиттә. Әйе, ундай яҙмышҡа дусар ителгән бер Гөлсөм генә булһа …

Баһадир шах, Батырша. Яҡшылыҡтар ҡылыуы өсөн халыҡ тарафынан шундай маҡтаулы исем менән аталған, ҙурланған Абдулла Алиев. Оло белемгә эйә кеше. Хафиз, йәғни Ҡөрьән-Кәримде яттан белеүсе. Себер юлы ахуны дәрәжәһенә күтәрелеүсе. Башланғыс белемен атаһы Туктарғәлиҙән алған. Һуңыраҡ Бөгөлмә, Әлмәт араһында урынлашҡан Тайһуйған ауылындағы мәҙрәсәгә барып юлыға. Ул Зәй йылғаһы буйында була. Шәкерт йылдарын иҫкә алһа, йәйен тыуған ауылына ҡайтҡанда Саҡмағошҡа һуғылып, Бөрөгә барып сығыуын да иҫләй ине. Бер ҡайтыуындамы, барыуындамы ул шәкерт менән Усай һөйләшеп торған, Ҡарышты, Туҡтарғәле улы икәнлеген иҫендә ҡалдырған. Күп йылдарҙан һуң Ҡарышта шул таныш кешенең һабаҡ биреүен ишетеп ҡалған...

Үтә саф күңелле был мөдәристән белем алыу бәхете әҙәм балаларының бик һирәктәренә генә тәтей торғандыр. Кешеләргә тик яҡшы теләктә генә булған, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған кеше эргәһендә биш йыл йәшәү – үҙе ғорурлыҡ. Мөҡсин әйткән ойоҡоно шундай шәхес һалыуы – шатлыҡ.

Туплаған фекерҙәрен бер ваҡытта ла кемгәлер тағырға ынтылмай ине Батырша. Теләге бар әҙәм тыңлап торһа лә еткән, кәрәген күңеленә һеңдерер. Оҡшатмай икән, дүрт яғы ҡибла.

– Уйлап ҡарағыҙ, – ти торғайны мөдәрис шәкерттәренә, – әгәр ҙә 1744 йыл указы нигеҙендә ауылдағы мәсет емерелгән йә ул бөтөнләй юҡ икән, әгәр ҙә ике, өс йөҙ ир заты бар икән, мәсет һалырға рөхсәт. Әгәр ҙә мосолман ауылында яңы суҡындырылғандар ун өлөш кенә икән, уларҙы киренән ауылына күсерергә. Әгәр ҙә унан күберәк тәшкил итһә, күсермәҫкә, тик мәсет төҙөмәҫкә. Ул ғынамы, бер үк ғаиләлә суҡындырылғандар ҙа, үҙ динендәгеләр ҙә йәшәй. Шул нигеҙҙә төрлөсә ығы-зығы ҡуба. Суҡындырылғандар өсөн һалым түләргә тейештәр. Тоҙ мәсьәләһенә киләйек, уны күлдәрҙән, тауҙарҙан табыу тыйыла, ҡалаларға барып алырға мәжбүрләйҙәр. Ҡаршы килеүселәрҙе туҡмайҙар, ҡарттарҙы һаҡалдарынан һөйрәп йөрөтәләр. Хөкөмгә тарттырыу өсөн властарға мөржәғәт итеп ҡара, йыл буйы йөрөп, ришүәт бирә-бирә ыштанһыҙ ҡалаһың. Ә эсеп иҫергән старшиналар нимә эшләй? Хатта кешеләрҙе ҡылыс менән сабалар. Беҙҙең Янышҡа ҡарағыҙ. Сибәр ҡатын-ҡыҙҙы күреп ҡалһа, өҫтөнә уҫал януарҙай ташлана. Ҡараҡтарҙы хөкөм итмәй. Йөҙ баштар менән һәр йылда сиратлап кешеләрҙе походҡа яҙа – дәрәжәлеләр алдында шулай тәрилкә тота. Бер ғәйепһеҙгә кешеләрҙе туҡмауын әйтегеҙ. Муллаларҙан хөкөм ҡарарын унынса сығарыуҙы талап итә. Торғаны Алланан ваз кискән бәндә. «Нимә ул халыҡ, – ти, – ул һарыҡ көтөүе шикелле: ҡайһы яҡҡа ҡыуаһың, шунда бара». Әлегә тиклем ҡайыш эшкәртергә дегет ҡуллана инек, әле килеп шуны тыялар, ҡалаға барып балыҡ майы алырға мәжбүрләйҙәр. Ике һум урынына егерме һум түлә. Ул тиклем аҡсаны ҡайҙан алырға? Еп ишер инең, йүкә ағасын киҫтермәйҙәр. Яныш менән тыныс йәшәй алмайым. Үҙенә, һин – эсең мәкерле уй менән тулған төлкө, тинем. Ҡойороғоңдо тегеләй-былай болғап тораһың. Миңә сабырланырға, китап һүҙҙәрен халыҡ алдында һөйләмәҫкә кәңәш бирә... – Хәҙрәтте туҡтауһыҙ тыңлайһы, фәһемле һүҙҙәрен хәтерҙә тотаһы килә. Әгәр ҙә Ҡәнзәфәр 1755 йылдың йәйендә остазы эргәһендә булһа, һис шикһеҙ фетнәселәр араһында йөрөр, мөдәрисе ҡайҙа ҡушһа шунда елдерер ине.

– Рәсәйҙәге баш-баштаҡлыҡты, халыҡтың йәберләнеүен, хаҡһыҙға туҡмалыуын, хөкүмәт даирәләренең шашыуын, мосолмандарҙың, бүтән милләт кешеләренең мәжбүри суҡындырылыуын, мәсеттәрҙең емертелеүен, сыҙамлығын юғалтып ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙең урыҫтар йәшәгән өлкәләргә ҡоллоҡҡа һөрөлөүен, язалап үлтерелеүен, ауылдарҙың ер йөҙөнән юҡ ителеүен Петр Беренсенең ҡыҙы Лизавета белмәй, унан йәшерәләр, йомалар. Ошо ҡот осҡос хәлдәрҙе Аҡ батшаға еткермәй, белдермәй тороп тормошто рәткә һалып булмаясаҡ, – тип әсенеп һөйләй торғайны. – Ә уға, Лизаветаға, нисек хәбәр итергә? Петербург ҡалаһына барып етеп тә булыр. Тик Батшабикә эргәһенә индермәҫтәр. Әгәр ҙә индерә ҡалһалар, Петр ҡыҙы башҡорттарҙың, татарҙарҙың шундай хәлгә төшөрөлөүенә ышанырмы? Ялғансы тип, ҡамсы менән һуҡтырмаҫтармы? Аҫһалар ҙа ҡурҡмайым. Әгәр ҙә халыҡты хәлен саҡ ҡына еңеләйтә алһам, йәнемде фиҙа ҡылырға әҙермен...

Ул дүрт-биш шәкертен Ҡарыш йылғаһы буйына алып төшә лә уй-фекерҙәре менән бүлешә торғайны. Күп һүҙҙәре аңлашылып та бөтмәй, тик төп хыялы асыҡ: нисек тә булһа донъяны икенсерәк яҡҡа бороу, үҙгәртә төшөү, халыҡты ҡоллоҡтан ҡотҡарыу. Унынса, былай йәшәүҙән бер мәғәнә лә юҡ. Донъя гиҙеүе, бик күп тарафтарҙа йөрөүе хаҡында ла һөйләй. Тик тормош бөтә төштә лә бер үк. «Әгәр ҙә мин, әйтәйек, ун ғына балаға белем бирәм икән, һеҙҙең дә һәр ҡайһығыҙ һуңынан шунса әҙәмде ғилемле итһә, халыҡтың томаланған зиһенен, һуҡырайған күҙен асырға, аңына килергә ярҙамығыҙ тейер. Наҙанлыҡ – һуҡырлыҡ…»

Хәҙрәттең тәүәккәллегенә, тура һүҙле булыуына, старшиналарҙы фашлауҙан ҡурҡмауына шәкерттәре һоҡланһа, ғорурланһа ла, уның ғүмере өсөн борсолалар, шөбһәләнәләр ҙә ине. Эҙһеҙ юғалыусылар аҙмы ни? Күрше ауылға тип киткән йә Бөрө баҙарына юлланған һәм кире әйләнеп ҡайтмаған… Хатта үле кәүҙәләре лә табылмай.

Күп ваҡыттарҙан һуң үҫмер сағын үткәргән тарафтарға килеп сығыу онотола төшкән ваҡиғаларҙы яңынан иҫкә ҡайтарҙы. Иң ҡиммәтлеһе, әлбиттә, – остазы Батыршаның тыуған еренә ҡабаттан аяҡ баҫыу. Уның ере. Аяныс, уның үҙе лә, Зөләйха исемле ғәжәп һөйкөмлө, алсаҡ, шәкерттәрҙе тәмле ризыҡтар менән һыйлаусы ҡатыны ла, балалары ла юҡ. Уларҙы ла ҡайҙалыр алып киткәндәр, суҡындырып һатҡандар, тигән хәбәр генә бар. Ә инде «Ч» өнөн сатнатып әйтеп һөйләшә торған кешеләр шул килеш ҡалған. Уларҙың өҫ-башында үҙҙәре туҡыған шул уҡ кейем-һалым. Аяҡтарында быйма, тула ойоҡлап кейгән сабата… Урмандар әҙәйгән, ағастар һирәгәйгән.

Эх! Мөғәллиме менән әлеге көндә сыра яҡтыһында оҙон төн буйы һөйләшеп, серләшеп ултырһаңсы. Бөгөн килеп донъяның нисек тетрәүе, Яйыҡ буйҙарында, Уралда ғәрәсәт күтәргән Пугачев, әле бына ғәскәр туплап Көңгөр ҡалаһын, Пермь провинцияһына ҡараған ҡәлғәләрҙе, заводтарҙы яуларға барыуы хаҡында бәйән итер ине. Шәкерте шундай юлға баҫыуына нисек ҡарар ине икән? Хуплар инеме? Бәлки, ҡиммәтле кәңәштәрен әйтер ине. Бәлки, ул үҙе һыбайланып алға әйҙәр ине. Ихтилал күтәргәндә уға ҡырҡ йәш булған. Әлеге Ҡәнзәфәрҙән саҡ өлкән тигән һүҙ...

***

Октябрь аҙаҡтарында төшкән ҡарҙы, әле биш тапҡыр иреп, биш тапҡыр яуыр, тиһәләр ҙә, быйылғыһы ергә йәбеште лә ҡатты. Ноябрь һыуығы ҡышҡы айҙарҙан бер нисек тә айырылманы. Декабрь ҙә селләнән кәм түгел. Ишектән сығыуға өтөп ала. Берәйһенең ҡапҡаһы асылһа, шығырлауы бөтә ауылға яңғырай.

Төндө йоҡоһоҙ үткәргән Ҡәнзәфәр ихатаға сығыу менән урамға үрелеп ҡараны, ул буш ине. Борай тарафтарына сапҡын ебәреп, ҡыуаныслы хәбәр алғайны: Баҙраҡ ауылынан утыҙ кеше килергә тейеш. Улар ҙа ҡушылһа, отряд алтмыштан уҙып китә. Уйы – артабан Тимкә ауылына туҡталыу, унан һуң – Төй йылғаһы буйҙары. Балыҡсы волосындағы Ҡашҡа, Урмияҙ ауылдары. Пермь провинцияһы сиктәренә ҡалын урмандар аша түгел, һулға ҡайырыла биреп, тигеҙерәк урындарҙан барып сығырға мөмкин.

Ишектә Сәлимйән күренде.

– Ҡара әле, абзый, беҙҙең кешеләр туҡтаған өйҙәрҙе йөрөп сыҡ. Ныҡ итеп тамаҡтарын туйҙырһындар. Аттарын да юлға әҙерләһендәр. Йәһәтерәк ҡылан. Ул арала баҙраҡтар ҙа килеп етер.

– Аңланым, хәҙрәт. – Иҫке оҙон билғау менән тунын быуа-быуа, өй хужаһы урамға ашыҡты.

Ул күңеленән һыбайлыларҙың тиҙерәк китеүен теләй. Бер үк батша ғәскәрҙәре килеп сығып, ауылда һуғыш күтәрелмәһен. Ул сағында өйҙәр яндырылып, кешеләрҙең ҡар өҫтөндә ҡалыуы ихтимал.

…Бөтәһе лә йыйылды. Килеп еткән баҙраҡтар тамаҡтары ас түгеллеген белдергәс, команда юлға ҡуҙғалды. Алда иһә ауыр поход, ҡанлы бәрелештәр көтә ине.

Әлегә тиклем урмандарҙа һирәк-һаяҡ ҡына күренеп ҡалған шыршы ағастары

төньяҡ-көнсығышҡа ҡарай барған һайын күбәйә ине. Ҡәнзәфәрҙең һөңгөлө яугирҙары ла шыршыларын күккә ҡаратҡан урманды хәтерләтә. Тимкә тигән ауылда уларға ун ике кеше өҫтәлде.

Ҡаршы килеүсе юҡ. Дөрөҫөрәге, «Петр Өсөнсө»нөң манифесынан шөрләйҙәр. Сөнки унда аҡҡа ҡара менән: «Әгәр ҙә мине кем тыңламай, ундайҙар язаға тарттырыласаҡ», – тип яҙылған.

Тапалған юл – һуҡмаҡ юҡ. Ҡар йырып барыу, һис шикһеҙ, ауырға тура киләсәк. Шуны иҫәпкә алып, Ҡәнзәфәр алда барыусыларҙы бер аҙҙан иң артҡа күсергә, йәғни сиратлашырға бойорҙо. Тын алыу өсөн туҡталғанда атаһының бал ҡорттары хаҡында һөйләгәнен хәтеренә төшөрҙө.

– Бал ҡорттарынан да аҡыллыраҡ йән эйәһе юҡтыр донъяла, – тип һүҙен башланы. – Ни өсөн һалҡын ҡышта туңып үлмәүҙәрен белмәй инем. Улар бергә уҡмаша икән. Шунан урталағылар ситкә сыға, ә өшөгәндәре әкренләп йылыға керә. Яй ғына хәрәкәтләнәләр ҙә хәрәкәтләнәләр. Уларҙың тәжрибәһен урманда, яланда ҡунғанда беҙгә лә ҡулланырға мөмкин. Юл ярыу ҙа шулай. Әгәр ҙә кемдәрҙер гел алдан бара икән, оҙаҡламай ундайҙар хәлдән таясаҡ, тороп ҡаласаҡ. Ял итеү, йоҡлау өсөн шыршы ботаҡтарын түшәһәң, бер ниндәй яҫтығың да кәрәкмәй. Шифалы еҫе хаҡында һөйләйһе лә түгел.

– Бал ҡорто хаҡында әллә нәмәләр һөйләйҙәр, арттыралар шикелле, ябай себен бит, – тип яҡындағылары тағы уны тыңларға теләүен белдерҙе.

– Ысынлап та ышанырлыҡ түгел. Улар күсендә тәртип шаҡ ҡатырлыҡ.

– Белгәнеңде һөйлә, хәҙрәт. Бик һирәктәр генә умарта тота.

– Мин атай эргәһендә генә күҙәтеп торғаным бар. Иң мөһиме, ҡорттарҙан ҡурҡырға ярамай. Сәбәләнденме – бөттөң: һарый ҙа алалар. Саҡһа ла файҙалы. Быуын һыҙлауҙарына шифалы. Күстәге һәр ҡорттоң үҙ шөғөлө бар. Бер нисәһе һаҡта тора – ситтәрҙе индермәй; икенселәре бал йыйырға оса; өсөнсөләре шулар алып ҡайтҡанды эшкәртә; дүртенселәре тыуасаҡтарын ҡәҙерләй; бишенселәре кәрәҙ яһай; алтынсылары берҙән-бер әсәне хөрмәтләй, етенселәре бал йыйырға ҡайҙа осорға кәрәклеген тикшереп, белеп ҡайтып, шунда юл күрһәтә... Миңә мәғлүмдәре шулар. Уларҙың йәшәйеше – үҙе бер серле донъя. Бына кемдәрҙә дөрөҫлөк, тигеҙлек.

– Үҙебеҙҙең батшаны Рәсәй башына ҡуйһаҡ, мин дә ҡортсолоҡ менән шөғөлләнәсәкмен, Алла бойорһа, – тип һөйләнде Тимкәлә ҡушылған ир. – Урман, ялан етерлек буласаҡ.

– Тәүгеһе саҡҡас та, «ҡарауыл!» тип һөрән һалмаҫһыңмы? Суҡмарың менән туҙҙыра башламаҫһыңмы үҙҙәрен?..

Тирә-яҡҡа көлөү яңғыраны.

– Ауылдар һирәк. Ҡашҡала ҡуныу киткәндә яҡшыраҡ булмаҫмы , хәҙрәт?

– Беҙ Ҡашҡанан һуң көнсығышҡа табан китмәксебеҙ. Унан ары үтә алмаҫлыҡ ҡарурмандар башлана. Һулғараҡ тартылырбыҙ.

Балыҡсы, Әй волостарында йәшәүсе башҡорттар элек-электән батша властарына баш эймәүҙәре менән билдәле. 1735 йылда тағын күтәрелеп сыҡҡандар – «йылы» һүҙҙәр ҙә, ҡорал менән ҡурҡытыу ҙа ярҙам итмәгән. Иҙелеп, ҡот осҡос тормошта көн итергә һис кенә лә теләмәгәндәр, ризалашмағандар. Язаға тарттырыласаҡтарынан да ҡурҡмағандар.

Ҡашҡа ауылына бынан йөҙ утыҙ йылдар элек нигеҙ һалғандар. Тәүге ултырыусы Ҡашҡа исемле башҡорт булған. Был төйәктә ғәжәп күркәм урындар бихисап, ә инде көнсығыш төньяҡлап ҡалын урманлы тауҙар ышыҡлап тора. Төй буйы – донъялағы йәннәттәрҙең береһе.

Һөйәнтүҙ ауылы ла заманында нәҡ ошо урында булған. Уның ҡасан барлыҡҡа килеүе тарих биттәрендә ҡалмаһа ла, мәңгелеккә ер йөҙөнән юҡҡа сығыуы мәғлүм.

1735 йылдың ғинуар айы.

Төй, Әй буйҙарында көн итеүселәрҙең батшаға ҡаршы баш күтәргәндәре Ырымбурға ишетелгәс, губернатор Неплюев былдай тыйнаҡһыҙлыҡҡа сик ҡуйыуҙы тик полковник Тевкелев кенә булдыра алырына ышана. Каратель отрядтары башында йөрөмәгән офицерҙар, генералдар ҡалмағандыр, тик береһе генә лә күтәрелгән ялҡынды аҙағынаса һүндерә алманы.

Ҡотләхмәт Тевкелев. Суҡындырылғандан һуң Алексей Ивановичҡа әйләнгән нуғай мырҙаһы, батша ғәли йәнәптәренә күрһәткән хеҙмәтендә утты-һыуҙы кискән кеше. Ул Петр Беренсенең Төркиә, Персия походтарында тылмас булған. Ҡыҫылмаған ере бармы ни, хатта Ҡаҙағстандың көнбайыш өлөшөн, йәғни Кесе Йөҙҙө Рәсәйгә ҡушыу мәшәҡәтендә ҡатнаша. Ә инде халыҡ ихтилалдарын баҫтырыу – уның яратҡан шөғөлө. Кафыр Ҡотләхмәт 1750 йылда бригадир, биш йылдан һуң генерал-майор дәрәжәһен ала. Губернатор Неплюевтың ярҙамсыһы булып китеүгә әҙәм ҡанын түкмәй генә ирешеү мөмкин түгелдер шул.

Язалаусы Тевкелевтың был тарафтарға юл тотоуын ишеткәс, Балыҡсы волосы старшинаһы Чеката үҙенең 700 кешенән торған отряды менән полковникты ҡаршы алырға ҡарар ҡыла.

Ә Өфөнән Бөрө ҡалаһы аша Әйгә ҡарай юлға сыҡҡан Алексей Иванович Тевкелев 1736 йылдың 19 ғинуарында Һөйәнтүҙ ауылына килеп етә һәм ҡуштандары аша бында көн итеүселәрҙең дә күбеһе фетнәселәр араһында икәнлеген белә. Һәм ауыл ҡот осҡос яҙмышҡа дусар ителә. Кем ҡулға эләгә, кем күҙгә салына – бөтәһенә лә үлем! Ҡарттар, балалар, ирҙәр, ҡатындар – һәммәһе лә аҡ ҡар өҫтөндә ҡан эсендә ята. Драгундар ҡул бәпестәрен штыкка элеп, һауаға сөйә. Батшаға «верный» башҡорттар, мишәрҙәр ҙә форсаттан файҙаланып ҡалырға ашыға: улар һөңгө ҡаҙалған бисара бәндәләрҙе күккә күтәрә. Йөҙҙән ашыу кешене бай амбарына йыйып, тереләй яндыралар. Хәйер, башҡарылған мөһим операция өсөн бай аҙбарын йәлләмәүен белдерә... Көн эсендә бәндәләре менән бергә ауыл юҡҡа сыға. Халыҡ хәтерендә ауылдың исеме генә һаҡланып ҡала. Ә бит Тевкелев ошо төбәккә килеүендә генә илле бер ауылды талап, уларҙы көлгә әйләндереп, ике мең кешене язалай, балаларын, ҡатындарын хәрби чиндарға таратып бирә.

Һөйәнтүҙ. Исеме ҡалған, ә бит заманында юҡҡа сығарылған йөҙәрләгән башҡорт ауылдарының исемдәре түгел, хатта ултырған урындары ла билдәһеҙ. Улар билдәһеҙ. Уның ҡарауы, бәхетһеҙ халыҡ ижад иткән «Тәфтиләү» тигән йыр әле лә йырлана.

*Иҙел буйҡайҙары, ай, ҡаялыҡ –*
*Полковник Тәфтиләү яу урыны.*
*Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,*
*Алтынланды уның яурыны.*
*Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,*
*Эйәре лә белмәҫ, ат белер.*
*Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен*
*Үҙе белмәһә лә, ил белер.*
*Ел елләмәй томан, ай, асылмаҫ,*
*Йыр йырламай күңел асылмаҫ.*

*Полковник Тәфтиләү түккән ҡандың*
*Асыуҙары тиҙ үк баҫылмаҫ.*
*Ҡайнап ҡына аҡҡан Иҙел аша*
*Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.*
*Ир-егеткәйҙәрҙең, ай, өмөтөн*
*Тәфтиләүҙәр генә быуа алмаҫ.*
*Ҡара ла ғына урман ҡая бите,*
*Шаулайҙыр ҙа кисен, ел саҡта.*
*Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,*
*Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.*

1736 йыл. Старшина Чеката күтәргән ихтилал.

1755 йыл. Ахун Абдулла Алиев етәкселегендәге ихтилал.

1773 йыл. Декабрь айының һуңғы көндәре. Ошо тарафтарҙағы ҡанлы юлдар буйлап Батыршаның – Абдулла Алиевтың элекке шәкерте Ҡәнзәфәр Усаев командаһындағы отряд Пермь провинцияһына ҡарай ҡар йырып бара. Ҡасанға тиклем көрәш дауам итер? Әлегә бер кемдә, хатта «Петр Өсөнсө» – Пугачев үҙе лә әйтә алмай. Йәшен ташы тоҡандырған урман ялҡынылай, ул таралғандан-тарала, киңәйгәндән-киңәйә бара. Ырымбур, Башҡортостан, Урал, хәҙер инде ялҡын Кама, Волга буйҙарына етте. Урмандар, тауҙар, тағы ла урмандар, тағы ла тауҙар. Уларҙың сиге лә, ҡырыйы ла юҡ төҫлө.

***

Ниһайәт, Богородское ауылы. Был төбәктә күберәк рус ауылдары, ҡәлғәләр, заводтар, тимәк, урыҫтар күп булырға тейеш. Отрядҡа улар нисек ҡарар? Сөнки башҡорт, мишәр – бер яҡтан, рус икенсе яҡтан дошманлашып, үҙ-ара үсләшеп көн иткән бит. Башҡорттарҙың иң яҡшы ерҙәрен тартып алып, заводтар, ҡәлғәләр төҙөгәндәр. Былдай намыҫһыҙлыҡты, алдауҙы, ҡәбәхәтлекте күреп, халыҡ ҡәлғәләргә, заводтарға туҡтауһыҙ һөжүм иткән, ә хәрби чиндар, завод хужалары рустарҙы башҡорттарға, татарҙарға, мишәрҙәргә ҡаршы ҡотортҡан, уларҙан үс алырға өндәгән. Власть кешеләре ыҙғыш-талашҡа, ҡан ҡойошҡа бармаҡ аша ҡараған. Сөнки төрлө диндәге халыҡтарҙың үҙ-ара дошманлыҡта йәшәүе улар файҙаһына. Иң мөһиме, ябай халыҡ түрәләргә ҡаршы ҡул күтәрмәһен, уларҙың мөлкәтенә ынтылмаһын.

Богородское урамы буш ине. Бейек ҡойма, урыҫ ҡапҡалар артында ҡотороп өргән эттәр тауышы ғына ишетелә.

Эйе, кемдер, һыбайлылар килеүен алдан күреп:

– Ҡоралы башҡорттар! – тип һөрән һалырға өлгөргән. Тимәк, инеп бикләнергә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙы, балаларҙы йәшерергә кәрәк. Ҡоралың бар икән, ҡулыңда тот.

Ауыл уртаһына еткәс, ниндәйҙер ир осраны. Ғәмһеҙлеген белгертергә теләпме, ҡулдарын туны кеҫәһенә тыҡҡан, бүреген баҫып кейгәнлектән, күҙҙәре йүнләп күренмәй. Атлыларға юл биреү өсөн ситкә сыҡманы.

Морононан бөркөлөп быу сыҡҡан атын саҡ тыйып, Ҡәнзәфәр килеп туҡтаны.

– Кем булаһың? Халыҡ ҡайҙа?

– Үҙең кем һуң? – Ир эйәген күтәрҙе. Тик шунда ғына уҫал ҡарашы күренде. – Ниәтегеҙ?

– Шикләнмә.

– Ә шулай ҙа? Беҙҙә йомошоң юҡ икән, уҙып кит.

Ҡәнзәфәр атынан төшөргә булды.

– Карателдәр-фәлән юҡмы?

– Каратель боҫоп ятмаҫ.

– Шулай ҙа кемлегеңде әйт, иптәш?

– Белобородов Иван улы. Отставкалағы һалдат. – Ҡәнзәфәргә яҡынығраҡ килде. Бер аяғына аҡһаҡлай.

– Ҡәнзәфәр Усаев. Батша Петр Федоровичтың полковнигы. Указ кеҫәлә. – Ҡулы менән түшенә тығылды.

– Ҡулыңды өшөтмә. Маҡсатыңды әйт.

– Халыҡты аҡ батшаға ҡаршы күтәреү, бындағы заводтарҙы, ҡәлғәләрҙе яулау, Көңгөрҙө алыу. Әлегә шулар. Әйҙә, ҡушыл.

Белобородов аяҡтарына ымланы.

– Борсолма, ат йөрөтөр. Был төбәкте яҡшы беләһеңдер, ярҙамлашырһың.

– Уйларға кәрәк.

– Ваҡыт тар.

– Ат бирәһеңме? Үҙемдеке юҡ. Өйгә саҡырыр инем, һеҙ күп.

– Иргин заводы алыҫмы?

– Килеп етә яҙғанһығыҙ. Ышанһаң, ат ҡалдыр. Ҡыуып етермен. Ҡорал хәстәрләрмен. Йоҙроҡ һуғышы булмаясағын аңлап торам.

Ҡәнзәфәр уйланып торҙо ла Белобородовтан ауылдың йөҙ башын, старшинаһын һәм һиммәтле кешеләрен тиҙ генә йыйыуын һораны.

Хәбәр тиҙ йөрөйҙөр, күрәһең, – ун-ун бишләп ир-ат оҙаҡ көттөрмәй йыйылып та алды.

Өйгә керҙеләр. Ҡәнзәфәр писарына Пугачевтың манифесын уҡырға ҡушты.

– Беҙ был документтың йөкмәткеһен беләбеҙ, – тине Белобородов.

– Шулаймы ни! – Ҡәнзәфәр ғәжәпләнеберәк, ҡыҙыҡһынып өйҙәгеләргә ҡараны.

– Алтынлы ауылынан баҙарға килгән крәҫтиән Данил Бурцов Петр Өсөнсөнөң әлеге манифесын халыҡ алдында уҡыны, – тип яуапланы Змеев фамилиялы әҙәм. – Беҙ биш йөҙ кешенән торған ғәскәр уҙаһын belә инек. Һеҙҙе икмәк, тоҙ менән ҡаршы алырға тап Кузьма Ефимов әҙерләнгәйне.

– Ҡунаҡсыл булыуығыҙға рәхмәт. Ҡыҫҡаса ғына һүҙем бар. Батша Петр Федорович әлеге көндә Ырымбурҙа. Өфөнө алды! Хәҙер үҙегеҙ теләгән кешене йөҙ башы итеп һайлағыҙ.

Өйҙәгеләр үҙ-ара ҡарашып алдылар ҙа ҡунаҡҡа текәлделәр.

– Үҙегеҙ хәл итегеҙ. Кем лайыҡ – шуны. Бер-берегеҙҙе яҡшы беләһегеҙ. – Ҡәнзәфәр был мәсьәләгә битарафлығын белдерҙе. – Намыҫлы кеше булһын.

Змеев Коноп йөҙ башы итеп һайланды.

– Эсеү кибеттәрен ябырға! Белобородов Иван Наумовичҡа йөҙ башы дәрәжәһе бирәм. – Писарына ҡараны. – Документ яҙ. Ауылығыҙҙың егет, ирҙәре бөгөндән казак буласаҡ. Сәстәрен казакса алдырығыҙ.

– Һеҙ әйткәнсә эшләрбеҙ, командир әфәнде, командаңа илле кеше әҙер. Алдан кәңәшләшкәйнек. Ауылыбыҙ бөлгөнлөккә төштө. Шуға күрә шуларҙың яртыһын ҡалдырһағыҙ ине?

Белобородовтың үтенесен ҡәнәғәтләндереү йөҙөнән, Ҡәнзәфәр үҙ командаһына егерме биш кешене алырға ҡарар итте...

Сылваға ҡоя торған Иргә йылғаһы буйында урынлашҡан заводтың хәл-әхүәлен ныҡлап белгәнгә тиклем Ҡәнзәфәр шыршы урманы эргәһендә туҡталырға бойорҙо. Был ауылда аҡһаҡ Белобородовтан завод хаҡында һорашмағанына

үкенеп ҡуйҙы. Бәлки, ат ҡалдырып хаталанғандыр. Атланыр ҙа берәй ергә ҡасыр. Отставкалағы һалдатты күҙ алдына килтерҙе. Юҡ, уның ҙур һаҡалы, ҡарашы, хатта асыулы йөҙө, ҡолаҡсынлы ҡуян бүрке, ҡырт һөйләшеүе лә ышаныс тыуҙыра. Алдамаҫ ул әҙәм.

Ысынлап та арттан – Богородское яғынан саналы күренде. Ҡәнзәфәрҙәр ҡалдырған ат егелгән. Өс кеше ултыра. Берәһе, әлбиттә, Белобородов ине.

Ҡәнзәфәр ҡарға һикерҙе, эргәһенә тегеләрҙең өсәһө лә килде.

– Эш былай, – тип һүҙ башланы элекке һалдат, – һиҙемләүемсә, һин заводты алмаҡсыһың. Бәхетең бар икән, ундағы конторала эшләүсе Алексей Степанович ауылға килгән, үҙе һөйләп бирер. Һикһән кешенән генә торған отрядың менән һөжүм итерҙән алда уйларға кәрәк. Һөйлә, Алексей, был кеше – Яңы батшаның полковнигы. Ә беҙ Петр Федорович хаҡында бер аҙ хәбәрҙарбыҙ. Ябай халыҡҡа ер, һыу, урман, ирек вәғәҙә иткәнлеген ишеттек. Кем, кем, Алексей Степанович завод эсендәге серҙәрҙе беләторғандыр.

– Яҡшы булыр ине. – Ҡәнзәфәр шул иргә бороллдо, – Хәбәрең булһа, файҙа килтерһә, буш ҡалдырмабыҙ.

Әлегәсә йөҙөн асмаған был әҙәм, Ҡәнзәфәрҙең русса һәйбәт һөйләшеүен күреп, йылмайып ҡуйҙы.

– Һеҙҙе нимәләр ҡыҙыҡһындыра һуң? – Контора хеҙмәткәре Алексей бүркен күтәрә төштө. – Завод ни завод инде. Йылына ике мең бот баҡыр, алтмыш мең бот суйын иретә. Ҡырҡ өс йыл элек аталы-уллы Осокиндар эш башланы.

– Күпме кеше бар? Кемдәр?

– Кемдәр икәнлеген хәҙер әйтәм, полковник. – Күҙҙәрен яртылаш йомоп, ирендәрен ослайта биреп урынынан торҙо Алексей. – Әйтәм: ике мең дүрт йөҙ тирәһе кеше ялланып эшләй, өс меңгә яҡыны заводҡа яҙылған, меңдән ашыу крепостной крәҫтиән. Хөкүмәт ғәскәрҙәре юҡ. Ҡарауылсылар, һаҡсылар ғына.

– Пушкалар бармы?

– Бишәү шикелле...

Ҡәнзәфәр уйға ҡалды. Тәүге тапҡыр уның командалағында кескәй сиреү әллә ҡайҙағы бер заводҡа һөжүм итәсәк. Уның эсендә меңәрләгән кеше, хатта туптар ҙа бар. Ә уның отряды? Үҙенән башҡа бер кемдең дә мылтығы юҡ. «Әллә талаптар яҙып, завод хужаларына ебәрергәме? Әгәр бирелмәһәләр?..»

Белобородов терһәге менән Ҡәнзәфәргә ҡағылды.

– Икеләнәһең шикелле. Әлеге көндә бөтә иғтибар – ҡамауҙа ҡалған Көңгөрҙә. Әгәр алдан һиҙенһәләр, белһәләр, бөтә кешеләрҙе заводты һаҡлауға күтәрәсәктәр.

Ҡәнзәфәр тештәрен ҡыҫты. Ҡырылмаған яңаҡ һөйәктәре киңәйә, һаҡал-мыйығы ҡуйыра, ҡарая төшкәндәй тойолдо. Ул Ырымбурҙы, Верхнее Озеро ҡәлғәһен штурмлағанды күҙалланы.

– Заводҡа ҡайһы яҡлап килеү яйлыраҡ?

– Минеңсә, алып барған юлдан. Йылға яҡлап ярҙан ниңә ситкә сығырға? Ҡар тәрән быйыл.

– Белобородовҡа ат бирегеҙ! Ә һин, Алексей Степанович, был иптәш менән санала барырһың. Тегендә юғалма. Кассаны күрһәтерһең. Йәшереп өлгөрмәһендәр. – Отставкалағы сатан һалдатҡа бороллдо. – Ә һин, Иван, минең эргәлә булырға тырыш. Буталыш килеп сыҡһа, бер-беребеҙҙе юғалтмайыҡ.

Белобородов, «ярай»ҙы аңлатып, башын ҡаҡты. Уға яҡшы ат килтереп тоттторҙолар. Егеттәр тиҙлеге менән һыбай менде тегеһе.

Ҡәнзәфәр атына атланғас, үҙенә бағып тороусыларға:

– Ҡоралдарығыҙҙы алығыҙ! Ҡаршылыҡ күрһәтмәүселәргә ҡул күтәрмәгеҙ. Бисмилләһир-рахманир-рахим! Минең арттан – алға!..

Завод үҙ яйына көндәгесә эшләп ята ине. Шуғамы ихатаға килеп тулған һыбайлыларға тәүҙә артыҡ иғтибар итеүсе лә булманы. Мылтыҡтан атыу тауышы яңғырағас ҡына, йүгереп сығыусылар, ҡасырға ынтылыусылар күренде.

Ҡәнзәфәр атыусыны табып килтерергә бойорһа ла, был тиклем халыҡ араһынан ғәйеплене кәбәндән энә эҙләгәнгә тиңләп, ҡулын һелтәне.

– Пушкаларҙы, мылтыҡ-маҙарҙы, ҡаҙнаны һаҡҡа алырға, улъяны күҙ ҡараһылай һаҡларға! – тип бойорҙо. – Конторалағы бөтә ҡағыҙҙарҙы миңә килтерегеҙ! Әлегә һәр кем үҙ урынында ҡала.

Заводты байҡап сыҡҡас, барса кешеләрҙе контора алдына йыйырға ҡушты.

Полковник халыҡтың үҙен тыныс тотоуына ғәжәпләнде. Осокиндар икенсе бер заводтарына киткән, тимәк, әлегә хөкөмдән ҡотолоп ҡалдылар. Кешеләрҙең күплегенә Ҡәнзәфәр хайран булды, сөнки Пруссиялағы һуғыштан һуң бергә йыйылған был тиклем күп халыҡты күргәне юҡ ине.

Меңәрләгән ир-ат уға баҡҡан. Унан хәбәр көтә. Үҙ-ара һөйләшеү, гәпләшеү түгел, һелкенмәйҙәр ҙә.

– Һеҙгә Яңы батша – Петр Өсөнсөнөң манифесын уҡып ишеттерәм, – тип йомарлап төрөлгән ҡағыҙҙы сығарҙы. – Государь үҙе ҡул ҡуйған. Һеҙгә ирек! Ағайэне, бөгөн декабрь айының дүртенсе, йәғни Рамаҙан айының утыҙынсы, ураҙа тотоуҙың һуңғы көнө. Иртәгә – Ураҙа ғәйете. Ҙур байрам. Усаҡ яғығыҙ.

Йыйылған халыҡ, уртала түңәрәк ҡалдырып, тулҡын шикелле артҡа сигенде. Шул төшкә ҡағыҙ тултырылған тоҡтар килтерҙеләр.

Усаҡ ҡабынды. Ялҡын күтәрелде. Ҡәнзәфәр Белобородовҡа ымланы:

– Әйҙә, Иван Наумович, – Икәүләшеп усаҡ эргәһенә килделәр. – Бына! – тип Ҡәнзәфәр тоҡтарға күрһәтте. – Осокиндарға бына күпме бурысығыҙ бар. Бына һеҙҙе күпме алдағандар. – Ул ҡосаҡ- ҡосаҡ ҡағыҙҙы утҡа ташлай башланы. – Һеҙгә бирәсәктәрен үҙҙәренә аласаҡ рәүешендә яҙған ҡағыҙҙарҙы көлгә әйләндерәйек. Кабаланан, ғүмерлек ҡоллоҡтан һеҙҙе батша Петр Федорович ҡотҡара. Ярҙам итегеҙ яндырырға! Ҡурҡмағыҙ. Давай-давай…

Кешеләр уртаға сығырға, ҡағыҙҙарға тотонорға ҡыйманы.

– Йә, Иван Наумович, һин әйт, һинең яҡташтарың.

– Туғандар! Был кеше – государь Петр Өсөнсө тарафынан ебәрелгән полковник Усаев. Ул беҙҙе ҡоллоҡтан ҡотҡарыу өсөн килгән. – Эйелеп ҡағыҙҙар алды ла утҡа бәрҙе. – Күпме түҙергә мөмкин. Осокиндарҙы байытабыҙ, ә үҙебеҙ? Өҫбашығыҙға ҡарағыҙ. Балаларыбыҙҙың тамағын туйҙырырлыҡ та эш хаҡы ала алмайбыҙ бит. Ҡарағыҙ, күрегеҙ: өҫтөгөҙгә күпме бурыс яҙғандар. Яндырығыҙ, үҙегеҙ юҡҡа сығарығыҙ!

Уның һүҙҙәренән һуң ғына кешеләр Ҡәнзәфәр эргәһенә уҡталды. Тоҡтарҙы усаҡҡа бушата башланылар. Ҡарттар, сатлама һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, бүректәрен һалып, Ҡәнзәфәргә баш әйҙе.

– Берүк, – тип киҫәтте Ҡәнзәфәр, – берәй ҡағыҙҙы ҡыҙыҡ өсөн алып кеҫәгеҙгә һала, өйөгөҙгә алып ҡайта күрмәгеҙ. Былар һеҙгә ҡаршы документтар. Бурыслы булып ҡалыуығыҙ ихтимал. Заводты емермәгеҙ. Ул һеҙгә кәрәк...

Кешеләрҙең күбеһе таралырға теләмәне. Ихатала ҙур усаҡтар балҡыны. Домна мейесенә тип әҙерләнгән утын ике йыл тотошлай яндырһаң да бөтөрлөк түгел ине.

Ҡәнзәфәр командаһы Иргә заводында ҡунды. Тәүге еңеүҙән һуң төн байрам төҫө алһа ла, ҡарауыл ҡуйыу хаҡында ла онотолманы, әлбиттә. Аттарҙы һаҡлауға айырыуса иғтибар ителде. Шулай уҡ ҡаҙна аҡсаһынан һәр яугирға илле тин аҡса өләшеп бирелде. Ә инде Осокиндың мөлкәтен һатып, завод кешеләренә эш хаҡы итеп таратырға ҡарар ҡылынды.

Ҡәнзәфәр, күпме ваҡыттар үткәс, тәүге тапҡыр йомшаҡ түшәккә сумды. Шуға оҡшағаныраҡ йоҡо урыны Боҙаяҙҙағы йортонда ине.

Ләкин йоҡоға китергә өлгөрмәне, ниндәйҙер мужик Ҡәнзәфәрҙең ҡабул итеүен ялынып һорауын әйттеләр. Тороп, быймаларын кейҙе, яурынына тунын һалды. Ишекте асты.

– Кем һорай? Инһен, – тине.

Бүркен ҡулына тотоп бер ир инде. Шәм түрҙә янғанлыҡтан, уның бумала шикелле сәсле башын, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йөҙөн генә шәйләргә мөмкин ине.

– Кто такой? – Ҡәнзәфәр ултырғысҡа табан сигенде. – Айда, ближе к столу.

– Юҡ, – тине әлеге әҙәм башҡортса, – мин урыҫ түгел. Хәйер, кем икәнлегемде үҙем дә белмәйем. Әле Трофим, элекке исемем Таһирйән.

– Суҡындыңмы?

– Суҡындырҙылар. Ғаиләмә еңелерәк булмаҫмы тип ризалашҡайным. Ғәйнә волосынанмын. Теге саҡта баш күтәргән өсөн ҡыйраттылар. Ҡатынымды, балаларҙы ҡайҙа илтеп олаҡтырғандарын белмәйем. Үҙ динемә ҡайтҡым килә. Мосолманса ерләнергә теләйем. Кафыр булып тыумағанмын. Урыҫтар үҙҙәренсә эсә, байрам итә, сусҡа ашай. Мәжбүри бында килтерҙеләр. Ауылды үртәгәндәр. Бөгөн «ураҙа», «ғәйет» һүҙҙәрен ишеткәс, иланым. Һағындырған. Үҙ динемә кире ҡайтып буламы?

– Әйҙә, уҙ, ултыр. Бала-саға түгелһең.

– Тыштан урыҫмын, ә эстән барыбер башҡортмон.

– Исемем Ҡәнзәфәр. Мулламын. Походта булғанда ураҙаның бер көнөн дә ҡалдырманым. – Килеүсе ултырғысын Ҡәнзәфәргә яҡыныраҡ тартты. Уға ҡарап ауыҙын йоморға ла онотто. – Былай итәбеҙ: һин иртәгәнән, юҡ, әле үк мулла ҡушҡан исемеңдә: Таһирйән! Ислам динен тотоусы мосолман. Иртәгә ураҙа ғәйете. Тәмле аш бешереп аша. Трофим икәнеңде онот.

Таһирйән ултырғысынан шыуып төштө лә Ҡәнзәфәр алдына теҙләнде. Башы эйелде.

– Белмәйем бит, һиңә әллә ниндәй рәхмәттәр уҡыр инем. – Илап ебәрҙе.

– Тор, Таһирйән, һин миңә ағай кешелер, моғайын. Шундай бәхетһеҙлеккә юлығыусы һин генә түгел. Һиңә, ысын исемеңде ҡуйып, ҡағыҙ бирермен. Быға хаҡым бар.

– Атайҙар элек хәйер бирә торғайны. Аҡсам юҡ. Шул да булдымы йәшәү. Иртәгә ҡайҙалыр китәһегеҙ шикелле, мине алмаҫһығыҙмы?

– Күңелең пак. Беҙ ун һигеҙ йәштән ҡырҡҡа тиклемгеләрҙе генә яугирлыҡҡа саҡырабыҙ.

– Бында йәшәмәҫ инем. Ҡайтыр инем, әйтәм дә, ауылым юҡ. Үлтерһәләр үлтерерҙәр, тыуған тупраҡҡа ҡайтҡым килә. Үҙ диненә кире ҡайтыусыларҙы язалайҙар икән. Язалаһалар ни, былай көн итеү яза түгелме ни?!

– Башҡаса ғаилә ҡорманыңмы?

– Ике балалы мәрйәгә йортҡа кергәйнем, рәте булманы. Үҙемдән тыуғаны ла тегеләр яҡлы булды. Исемем менән өндәшеүсе юҡ – «Түбәтәйкә» тиҙәр. Ҡатын иренә, бала атаһына шулай әйтәме? Ал мине үҙең менән. Бер яуыздың башына

етһәм дә үлергә ризамын. Ачит ҡәлғәһенә бараһығыҙ, ти, шунда ярҙамлашырмын. Ихлас әйтәм.

Ҡәнзәфәр тороп, өҫтәл эргәһенә килде лә ҡалған тәғәмдәрҙе ҡаплаған сепрәкте асты.

– Тамағыңды туйҙыр.

Таһирйән ҡомһоҙланып ҡулына ҙур ғына ит киҫәге алды. Ләкин, нимәнелер иҫенә төшөргәндәй, ауыҙына ҡапмай туҡталып ҡалды. Ауыҙында ике-өс кенә теше барлығы иҫенә төшкәндер, моғайын.

– Әҙерлән, алырмын, – тине Ҡәнзәфәр, уйланып торғандан һуң. – Нығыраҡ кейен.

Таһирйән, йылмайып, үҙен һыйлаусыға ҡараны.

– Минең әҙерләнәһем юҡ, әле үк юлға сыға алам.

– Ҡорал?

– Караулкала һөңгө, балта бар. Ә-ә, иҫемә төштө: шул караулканың бер ҡасанда асылмай торған яғында дары һаҡлана. Мискәләрҙә. Тәгәрләтеп индерешкәйнем. «Быларҙа суйын иреткәндә ҡуша торған мәғдән», – тип алдатҡан булдылар. Йәнәһе, сер. Осокиндарҙың иҙән аҫтарын ныҡлап тикшерергә кәрәк. «Яңы батша», «Пугачев» һүҙҙәре килеп еткәс, байҙарҙың бөтә белгәне – хазиналарын йәшереү, тип һөйләнеләр. Имеш, Ҡазанға, Мәскәүгә, Петр ҡалаһына уҡ ташый башлағандар. Бер ғәйепһеҙ кешене «ҡараҡ» тип яфалайҙар, хәҙер үҙҙәрен дар ағасына элергә кәрәк...

– Таһирйән ағай, һиңә тәүге эш. Бурыс ҡуям: Белобородовты табып әйт, һин әйткән дарыны һаҡ аҫтына алһын.

– Үҙем һаҡлайым.

Ҡәнзәфәр, йылмайып, Таһирйәндең арҡаһына йомшаҡ ҡына итеп һуғып алды.

– Ниңә көләһең? Минең дуҫтар ҙа бар.

– Ҡушҡанды эшлә. Дуҫтарыңдың берәйһе тотто шартлатты.

– Төшөндөм. Ошо итте алайыммы, һурып булһа ла бөтөрөрмөн.

– Ал, ал. Икмәк тә ал...

– Ҡатындың өлкән малайы сирләп ята, тигәйнеләр, икмәк киҫәген индереп сығырмын. Йәл бит. Уларҙан сығып киткәнемә байтаҡ ваҡыт үтте. Ҡайҙа етте шунда йоҡлап йөрөнөм. Белобородовты хәҙер эҙләп табам. Иван Наумович кеселекле кеше. Түрәләрҙән дә бик шөрләп бармай...

Ҡышҡы иртә ҡараңғы булһа ла, отряд кешеләре күптән аяҡта ине. Һәр ҡайһыһы атын ҡарай, эйәрләй. Ихата уртаһында дөрләгән усаҡтан төшкән яҡтылыҡ кешеләргә әйберҙәрен, бер-береһен табырға ярҙамлаша. Ашыҡҡанда ла, тревога булғанда ла буталыш, ығы-зығы тыуҙырмау, ҡысҡырышмау, аҡырышмау, кәүгәсел булмау хаҡында отрядҡа яңы кешеләр өҫтәлгән һайын Ҡәнзәфәр әйтә, киҫәтә килә.

Ҡояш ғинуар башындағы һалҡын күк ситенән телен күрһәтеүгә, отряд шуға ҡарай юлға сыҡты. Ҡәнзәфәргә Иргәнән тағы 130 крәҫтиән ҡушылды. Иң мөһиме, биш туп бар. Санаға тейәлгән дары тултырылған мискәләр өҫтөндә Таһирйән ултыра. Шатлығы сиктән ашҡан. Ғүмерендә тәүге тапҡыр ғәжәп яуаплы эште ышанып тапшырҙылар. Уның дарыһы менән тупты ҡорорҙар ҙа – «бах!» дошманға.

Ачитҡа еткәс, Ҡәнзәфәр, туҡталып тормай, ҡәлғәгә барған ыңғай уҡ иҫкәртмәҫтән, ҡапҡаларынан бәреп керергә ҡарар итте. Көтмәгәндә һөжүм итеү – ярты еңеү, тигәнде һалдатта сағында уҡ ишеткәне бар ине. Пруссияла – бер хәл,

унда генералдар командалыҡ итә, ҡорал да етерлек, нисек һуғышырға ла йәнеңде сығарғансы өйрәтәләр. Ә әле? Ауылдарҙан йыйылған өйөргә белгәнеңде булһа ла нисек төшөндөрөргә һуң? Былар утын бысырға, ерҙе йыртҡылап иген игергә, мал аҫрарға ғына белә. Араларында хатта күрше ауылдарын күрмәгәндәре лә бар. Наҙанлыҡтың сиге юҡ. Күптәре тамға ла ҡуя белмәй. Хәҙер был хаҡта баш ватыуҙан файҙа юҡ, илаһи ҙур ҡуласа әйләндереп ебәрелгән. Уны тик шәбәйтергә генә кәрәк.

Ҡәлғә, завод ауыл түгел, унда мотлаҡ ғәскәр тора. Тимәк, ҡан ҡойош булыуы бик ихтимал.

Атаһы Усай ҡайһысаҡ: «Улым, һиңә яйы сығып ҡына тора. Күңелең пакка күрә шулайҙыр», – тип торғайны. Шулай булмаһа, ауылдары аша ҡасандыр Абдулла Ғәлиев уҙыр инеме ни. Тимәк, һуңынан шул кешенән һабаҡ алырға яҙған. Яу яланында иһә кемгәлер ышанып йөрөү мөмкин түгел, бөтәһе лә үҙеңдән тора.

Шулай ҙа көтөлмәгән хәл ҡупты. Ачит ҡәлғәһе яғынан быларға табан һыбайлы саба. Был әҙәм тиргә батҡан айғырын саҡ туҡтатты ла Ҡәнзәфәргә мөрәжәғәт итте. Бәй, был Белобородов ауылынан санаға ултырып килгән ирҙәрҙең береһе лә инде.

– Яңыраҡ ҡына Екатеринбургтан ниндәйҙер капитан 130 кешенән торған команда менән Ачитҡа килде. Алты пушкалары бар. Әле урынлашып булашалар. Көңгөргә китеп барыштары түгелме икән,тим.

– Ҡиммәтле хәбәрең өсөн рәхмәт белдерәм. – Ҡәнзәфәр Белобородовҡа боролдо. – Һинең эштер, Иван Наумович. – Тегенеһе яуап урынына уң күҙен ҡыҫып алды. – Былай итәйек: бөтә көскә ҡәлғәгә ябырылайыҡ. Юлдан һуң үҙҙәрен тәртипкә килтергеләгәнсе бәреп керһәк, буталыш тыуҙырырбыҙ. – Командаға боролдо. – Ҡәлғәгә инеү менән ундағы аттарҙы, туптарҙы ҡулсаға алырға, һалдаттарҙы ҡоралһыҙландырырға! Алға!

Ысынлап та, былар ҡапҡанан барып ингәндә, отряд аттарының алдына ашарға һалып булаша ине, шуға күрә һалдаттар ҡулдарына мылтыҡтарын алырға өлгөрмәне. Күсәкле крәстиәндәр уларҙы төркөмгә йыйырға ашыҡты. Тыңларға теләмәүселәргә киҫтән, суҡмарҙан өлөш эләкте. Комендант өйөнән ниндәйҙер офицер килеп сыҡты. Күтәрмәгә яҡын торған Таһирйән уның кителенән эләктерҙе. Ҡулында пистолеты булған, теге Таһирйәндең күкрәгенә терәп атты. Сатан Белобородов, алға ырғып, офицерҙың бәкәленә типте, тегенең итеге тайып, әйләнеп барып төштө. Пистолеты осоп китте. Һикереп баҫты ла, ярһып:

– Бандаға, ҡараҡтарға, юлбаҫарҙарға теҙләнергә приказ бирәм! – тип ҡысҡырҙы. – Башлығығыҙҙы тотоп, бәйләп миңә тапшырыусы иҫән ҡаласаҡ.

– Миңә килтерегеҙ! – Ҡәнзәфәр атынан төштө.

Офицерҙы һөйрәп Ҡәнзәфәр ҡаршыһына килтерҙеләр, башына һуғып, теҙләнергә бойорҙолар. Теге бәргеләшеп ҡулдарын ысҡындырҙы. Белобородов тағын бәкәленә типте, теге тайып, арҡаһына йығылды. Ҡәнзәфәрҙең аҡ ҡар өҫтөндә ҡанға батып ятҡан йәнһеҙ Таһирйәнгә ҡарашы төштө. Күҙҙәренән йәш сығыуын тыя алманы. Тороп баҫҡан капитанға ҡараны. Мундирының ҡыҙыл яғаһына Таһирйәндең ҡаны буялғандай тойолдо. Зәңгәр күҙле, оҙон муйынлы, йәше ҡырҡтар тирәһендә булһа ла түбә сәстәре ҡойолған әлеге бәндә Ҡәнзәфәргә ерәнеп, тештәрен ҡыҫып ҡарай ине.

– Зачем? – тине Ҡәнзәфәр, Таһирйән яғына ымлап. – Ниңә үлтерҙең?

– Бөтә бандиттарға ла шундай үлем. Юҡ, уларға пуля әрәм, дар ағасы таман.

– Улаймы? – Артына боролдо. – Арҡан әҙерләгеҙ!

Эштең етди төҫ алыуын аңлаған офицер:

– Хаҡың юҡ. Мин – капитан Воинов. Мин дәүләт бурысын үтәйем. Яуап бирәсәкһең.

– Әле һин яуап бир! Дәүләт бурысы менән ҡайҙа юлланғайның? Әйт дөрөҫөн!

– Бер ҡасан да! Бандиттар.

– Аҫырға!

Офицерҙы ҡапҡаға ҡарай өҫтөрәнеләр. Ҡәнзәфәр төндә яуған ап-аҡ ҡарға ал ҡаны таралған Таһирйән кәүҙәһе эргәһенә килде. Уның рухына доға уҡыны. Баҙраҡ ауылы кешеһен ымлап үҙенә саҡырҙы, уны бер яҡ ситкәрәк алып китеп, ҡолағына әйелә төшөп:

– Был әҙәм балаһының исеме Таһирйән ине. Изге көрәшебеҙҙә тәүгеләрҙән булып йәнен фиҙа ҡылды. Хәҙер үк зыяраттарының бер ситенә мосолманса ерләү ойоштороғоҙ. Кәфенгә төрөп. Комендант йортонда ярарлыҡ әйбер табырһығыҙ. Йәне йәнәттә, ауыр тупрағы еңел булһын.

Ҡәнзәфәр ҡәлғәләге бөтә кешене йыйырға бойорҙо. Тәү сиратта әсирлеккә алынған һалдаттарҙы теҙеп баҫтырҙылар.

Ҡәлғә ҡапҡаһы башына аҫып ҡуйылған капитан кәүҙәһен үҙ күҙҙәре менән күргән, әлеге хәлдең уйын түгеллеген аңлаған халыҡ, бирелгән һәр командаға буйһоноп, комендант йорто эргәһенә тупланды.

Ҡәнзәфәр батша Петр Өсөнсөнөң манифесын уҡыны.

– Кемдәр уға тоғро хеҙмәт итәсәк, улар бөтә яҡлап та государҙың яҡлауын табасаҡ, кем ҡаршы, ундайҙарҙы яза көтә. Ишеттегеҙме? Теҙләнегеҙ!

Бергәләп тә, айырым-айырым да:

– Ант итәбеҙ! Ант итәм! – тигән тауыштар ишетелде.

Ҡәнзәфәр сафта торған һалдаттар ҡаршыһына килде. Уның һүҙен көтөп тормай, берәүһе:

– Беҙ батшабикә Екатеринаға ант иткәйнек, – тине.

– Ул хаҡта онотоғоҙ. Рәсәйҙә хәҙер яңы батша. Екатеринаның ире Петр Өсөнсө. Кемдә кем Петр Федоровичҡа тоғролоҡло хеҙмәт итеүҙән баш тарта, өс аҙым алға сығығыҙ! – Һелкенеүсе табылманы. – Хор менән бөтәгеҙ бергә ҡысҡырып ант итегеҙ!

– Батша Петр Өсөнсөгә тоғролоҡло хеҙмәт итергә ант итәбеҙ! – Көслө күмәк тауыш яңғыраны.

– Анттың нимә икәнен аңлайһығыҙ. Кем боҙа – ул дәүләт дошманы. Ошо минуттан һалдаттар минең командаға алына, миңә буйһона.

Ҡәлғәләге ҡоралдарҙы, байлыҡтарҙы барлау башланды. Туптарҙы тимер табанлы саналарға тейәнеләр. Ҡәнзәфәр отрядына йөҙ утыҙ һалдат, алты туп, биш бот дары, унан да күберәк мылтыҡ өҫтәлде. Иң мөһиме, Екатеринбургтан Көңгөргә капитан Воинов алып китеп барған ике мең һум аҡса ҡулға төштө.

Шунса аҡсаны һәм алты тупты, биш бот дарыны Ҡәнзәфәр Чесноковкаға – Зарубинға илтеп тапшырырға бойорҙо. Сөнки Пугачевтың «Высокографское сиятельство, казацкого войска господин главный предводитель Иван Никифорович» тип исемләнгән иң яҡын әшнәләренең береһе Башҡортостандағы бөтә фетнәселәрҙе бергә тупларға, улар менән командалыҡ итергә, уларҙы һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итергә тейеш. Ырымбур эргәһендә торған «баш армия» күләменә ҡарағанда, Урал тарафтарына йәйелгән хәрәкәттәге ғәскәр һаны артҡандан-арта бара, хәҙер инде «икенсе армия» менән Яйыҡ буйынан етәкселек итеү ауырға тура килә. Зарубин-Чика Пугачевтың уң ҡулына әйләнде. Ҙур власть тупланы. Өфөнө ҡамауҙа тотоу, аҙаҡ уны баҫып алыу – үҙе генә лә иҫ киткес яуаплы бурыс. Өҫтәүенә, Көңгөр ҡалаһы тешге һыҙлата.

***

Көңгөр… Уға 1648 йылда Көңгөр йылғаһы буйында Ирен тамағынан егерме саҡрым юғарыраҡ нигеҙ һалына. Ләкин тамыр йәйеп, үҫеп сәскә атырға насип булмай уға. Ун дүрт йылдан һуң йәш ҡаласыҡты башҡорттар баҫып ала һәм үртәй. Икенсе йылда Сылва йылғаһына Ирен, Шанва ҡушылған урында Көңгөрҙө яңынан һалырға ҡарар итәләр. Бер яҡлап Сылваның текә яры, ҡалған өлөштәрен бейек ағас стеналар, тупраҡтан өйөлгән вал башнялары менән ҡәлғә нығытмалары һаҡлаясаҡ. Һигеҙ йылдан һуң ул Ҡазан губернаһына ҡараған Пермь провинцияһының Көңгөр өйәҙе үҙәгенә әйләнә. Ихтилал алдынан ҡалала меңгә яҡын ағас өйҙә алты меңгә яҡын кеше йәшәй.

Рәсәйҙә буласаҡ буталыштарҙы, ҡан ҡойошто алдан һиҙенгәндәй, 1773 йылдың башында уҡ, артеллерия батареялары ҡуйып, яңы оборона һыҙаты төҙөлә. Иген һатып сауҙа итеү, тире эшкәртеү, күн заводтары менән дан тотҡан Көңгөр арҡылы ҙур Себер юлы үтә. Ә инде 1773 йылдың октябрендә Пугачев ихтилалы хаҡындағы шомло хәбәр килеп етә. Тимәк, Петр Өсөнсө батшаның указын, манифесын халыҡ араһында таратып йөрөүсе шпиондар бар . Улар хатта икәү, өсәү генә лә түгел. Ҡулға эләккәндәрен тотоп язалаһалар, әллә ҡайҙан бүтәндәре үрсеп кенә тора…

Үрге Мулла ауылында, Югово заводында фетнәселәр Ягошихин, Нытвен, Мотовилин, Висим заводтарын эштән туҡтатҡан. Ниндәйҙер ҡараҡ Әбди Абдулов менән Батырҡай Иткининдар Уса тирәләрен пыран-заран килтерәләр,ти.

Уса юлында элек-электән башҡорттар көн иткән. Шул саҡта уҡ ултыраҡ тормошта йәшәгәндәр. Ә инде Яуыз Иван Грозный батшалыҡ иткән осорҙа был тарафтарға рустар үҙ белдектәре менән килеп тула. 1737 йылда Уса ҡәлғәгә әйләнә, һәм гарнизон индерелә. Уны күрше-тирәләге башҡорттарға күҙ-ҡолаҡ булыу посына әйләндерәләр. Тик, нисек кенә күҙәтмәһендәр, 1737 йылда – башҡорт бунты, ә 1755 йылда Батырша етәкселегендәге ихтилал ҡуба. Инде ун һигеҙ йылдан һуң йәнә бола. Шул тарафтағы Ҡыҙылъяр ауылында Пугачев полковнигы Әбди Абдулов отряды пәйҙә була. Әйткәндәй, ундағы халыҡты Ғәйнә ырыуы башҡорттары тип тә йөрөтәләр.

Шул ҡараҡ Абдулов яңынан-яңы отрядтар иҫәбенә көсәйә,нығый бара. Баш күтәреүселәр Уин заводына ла походҡа сығырға тартынмағандар. Ә инде Медянское ауылында Сәғит Юлаев етәкселегендәге 200 татар килеп ҡушылғас, Суксун заводына бәреп кергәндәр. Тимәк, Көңгөрҙөң үҙенә лә алыҫ ҡалмай.

Әбди эргәһендә Усть-Төнтөр ауылы башҡорто, йөҙ башы полковник Батырҡай Иткинин дә була. Ғилем эйәһе русса ла яҡшы белеүе менән айырылып тора. Ғинуарҙың ундарында Ҡәнзәфәргә килеп ҡушыла, һәм ике мең кешегә еткән команда Көңгөрҙө штурмларға әҙерләнә башлай.

Һуңғы бәрелештәрҙә үҙен ысын яугир, ойоштороусы итеп күрһәтергә өлгөргән Белобородовты Ҡәнзәфәр янына саҡыртып алды. Уны күптән күрмәгәндәй, ҡосаҡлап арҡаһынан һөйҙө. Командирҙың был ҡыланышы сатан һалдатты һағайта төштө. Бәй, бая ғына һин дә мин гәпләшеп торғайнылар бит.

– Хөрмәтле Иван Наумович, нисек кенә ҡыйын булмаһын, һинең менән хушлашырға тура килә.

– Нисек хушлашырға? Ғәйебем бармы?

– Ғәйебең юҡҡа күрә хушлашабыҙ ҙа. Һин – ысын яугир. Һинең менән ат урларға мөмкин. Йәғни ышаныслыһың. Ауылыңда беҙҙе һин ҡаршыланың. Оҫта һуғышсы һин. Һуғыш ысулдарын беләһең. Хәйләкәрһең. Тимәк, аҡыллыһың. Һантый хәйләкәр була алмай.

– Ғүмеремдә тәүге тапҡыр маҡтайҙар. Ҡыйын миңә. Төп һүҙеңде әйт, Ҡәнзәфәр.

– Һиңә йөҙ баш чинын бирҙем. Төп һүҙем был түгел. Батшабыҙ Петр Федорович мине лә, башҡаларҙы ла Пермь провинцияһына ихтилалды йәйелдерергә ебәрҙе. Яҙмыш беҙҙе осраштырҙы. Һиңә егерме биш кеше бирәм һәм һин Екатеринбург заводтарына йүнәлергә тейешһең. Ойоштороу һәләтең көслө. Һинең алда Бисерить, Клен, Кирәпшан, Гробов ҡәлғәләре, Белембай, Шайтан заводтары… Йәй ҡоласыңды Уралда!

– Ә үҙең, Усаевич?

– Мин бында ҡалам, дусҡай. Миңә Көңгөрҙө алырға бойоролдо.

– Артабан һуң?

– Ҡазан ҡалаһы. Тик уға тиклем беҙ заводтарҙы, ҡәлғәләрҙе ҡулға алырға, бында нығынырға тейешбеҙ.

– Аңлашыла. Йәл, бергә булырбыҙ, тип уйлағайным.

– Яу яланы ғәжәп ҙур, тотошо менән күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Кем белә, бәлки, осрашырбыҙ. Бәлки, Ҡазанды, бәлки, Мәскәүҙе алғанда. Тау менән тау ғына осрашмай… Егерме биш кешегә етерлек бөтә нәмәне лә алығыҙ. Запасыбыҙ байтаҡ. – Ҡәнзәфәр Белобородовты ҡосаҡланы. Сатан һалдаттың күҙҙәрендә йәш ялтыраны.

Ҡәнзәфәр Батырҡай Иткинин һәм Әбди Абдулов менән дә осрашты. Улар Уса тирәләрен байҡаны, ҡыҙырып көс туплап, шулай уҡ Көңгөр ҡалаһына һөжүм итергә килә яталар ине.

Яңы йыл алдынан Үрге Муллаға һөжүм иткәндә, ауылды фетнәселәрҙән һаҡларға Югов заводынан йөҙ ҡырҡ кеше килеүен Әбди белмәгәнлектән, ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеүселәргә юлыҡты. Ул ғынамы, Төрөк фронтына кешеләр йыйырға килгән секунд-майор Папав командаһында ете йөҙ рекрут та әлеге ауылда ине.

Ике көн рәттән яһалған атака уңышһыҙ тамамланды: Абдулов күҙ ҡараһы кеүек ҡәҙерле бер нисә пушкаһын юғалтты. Был хәл Көңгөрҙө һаҡлаусыларҙың кәйефен күтәрә төштө, сөнки Пермь провинциаль канцелярияһы воеводаһы башлығы, бөтә ярҙамсыларын алып, Чусов ҡаласығына ҡасҡайны. Әбди еңелгәс, Көңгөргә ул кире ҡайтты.

Батырҡай Иткинин иһә, тағы бер нисә ауылды алғас, ҡалаға яҡынайҙы. Ләкин нығытмалар артындағы туптарҙан атылған йәҙрәләр фетнәселәр өҫтөнә яуа башланы.

– Эйе, ҡан ҡойошло алыш көтөлә, – тип ҡысҡырып уҡ әйтте Әбди. Әммә ләкин уның һүҙҙәрен шартлау тауыштары баҫты.

Атака дүртенсе, бишенсе ғинуарҙа ла ҡабатланды. Тик уңышһыҙ. Ул ғынамы, ҡәлғә стеналары тирәһенән пугачевсыларҙы ҡыуған арала Папав һалдаттары, ҡаланан сығып, фетнәселәрҙең бер нисәһен әсирлеккә эләктерҙе. Һәм бисаҙраларҙы ҡала майҙанында ҡабырғаларынан аҫтылар.

Батырҡай һәм Ҡәнзәфәр отрядтары бергә ҡушылды. Тик яман нығытылған, эстән тороп алышыу өсөн һәм Әбей батшаға тоғро ҡалырға ҡабат-ҡабат ант иттерелгән хәрбиҙәр ҙә, ҡалала йәшәүселәр ҙә ғүмерҙәрен аямайса һуғышырға әҙер ине.

Әбди үҙе Дим буйында ултырған Ямаҡ ауылынан. Ул да мулла. Ноябрь айында уҡ Берда биҫтәһенән Уса юлында йәшәүсе халыҡты батша властарына ҡаршы күтәрергә ебәрелгәйне. Яуаплы һәм ҡурҡыныс эште ышанып тапшырғанда, әлбиттә, тәү сиратта Кинйә Арыҫланов тәҡдименә ҡолаҡ һалдылар. Рус булмаған милләттәр менән етәкселек итеүҙе Пугачев уға тикмәгә генә тапшырмаған.

Полковник Әбди кеçәһенә Пугачевтың 1773 йылдың беренсе октябрендә сығарған башҡорт халҡына мәңгелек ирек, ирекле дин тотоу, бөтә биләмәләре менән ер биреү манифесы, шулай уҡ баш полковник Кинйә Арыҫлановтың башҡорт старшиналарын император Петр Федорович яғына күсергә саҡырыуын алып килгән. Халыҡҡа тәүҙә шул мөһим документтарҙы еткереү, алтын һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыу тора ине.

Кешеләр менән уртаҡ тел таба белеүсе, оҫта ойоштороусы Дим башҡорто Уса юлында ышанып тапшырылған бурысты тормошҡа ашырыу эшен йылдам йәйелдереп ебәрҙе. Дин ҡанундарын белеүен дә оҫта файҙаланды. Уның командаһына Тулвин башҡорттары ғына түгел, Уса улусы рустары ла ҡушылды. Ҡәнзәфәрҙән күпкә алдан килгәнлектән, һуғышыу өлкәһендә тәжрибә тупларға ла өлгөргән ул.

Вағыраҡ заводтарҙы, ҡәлғәләрҙе яулап алыуға еңелерәк ирешелһә, хәҙер иһә алда ҙур һынау – Көңгөрҙө штурмлау. Уның ҡапҡаларын шар асыу, ҡәлғә стеналарын емереү ҙур таһыллыҡ, сыҙамлыҡ, батырлыҡ талап итәсәк.

Ҡәнзәфәр Көңгөр тирәһендәге Орда, Сухая речка, Неволино, Шубина, Тихвин, Торицкое, Старый посад ауылдарында, Югов, Суксун, Бавка заводтарында булды, ундағы рустар иҫәбенә отряды һанын арттырҙы, ҡоралдарын күбәйтте, аҙыҡ-түлек, фураж тупланы.

Тик Ҡәнзәфәр Ачит ҡәлғәһенән бик алыҫ ултырмаған Красноуфимск ҡәлғәһенә бәреп инергә өлгөрә алманы, сөнки бөтә иғтибар Көңгөрҙә ине. Уны һаҡларға, ҡала кешеләренә ярҙамға килергә ашыҡҡан Әбей батша ғәскәрҙәрен яҡын ебәрмәү ҙә фетнәселәрҙең төп бурыстарының береһе булып һаналды.

Ниһайәт, 9 ғинуар таңында Ҡәнзәфәр һәм Батырҡай командалары ҡаланы штурмлауға ташланды. Ләкин күҫәктәр, ағас һәнәктәр, балталар менән ҡоралланған крәҫтиәндәрҙе, төрлө завод хеҙмәткәрҙәрен башняларға ултыртылған туптар атҡан йәҙрәләр ҡаршыланы. Көслө шартлауҙарҙы тәүге тапҡыр күргән, ишеткән, төтөн менән таралған дары еҫен тик әле генә еҫкәгән ябай кешеләр хатта аптырап, ҡаушап ҡалды, күптәренең ҡото осто. Ҡала ҡапҡаларынан, мылтыҡтарынан ата-ата, регуляр армия һалдаттарының ажғырып килеп сығыуы – бөтөнләй көтөлмәгән хәл булды. Етмәһә, үҙҙәре менән ике пушка алғандар.

Арттан килгән һыбайлылар тауышҡа өрккән аттарын тыя алмағанлыҡтан, мәхлүҡтәр юлдан ситкә ырғып, тәрән ҡарға сумды. Һөжүм яһаған фетнәселәр артҡа сигенде, күптәре ҡоралдарын ташлап, йүгерергә тотондо.

Хәлдең былайға боролоуын аңлаған Ҡәнзәфәр ҙә, Батырҡай ҙа халыҡты ҡыйратылыуҙан ҡотҡарыу өсөн ҡаланан ситкәрәк китергә ҡарар ҡылдылар һәм элек торған Неволино, Шубина ауылдарына ҡарай сигенергә бойорҙолар.

Ҡәнзәфәр, атын тыйып, тыл яғына сыҡты һәм:

– Туҡтағыҙ! – тип ҡысҡырҙы. – Әгәр ҙә таралышып йүгерешәһегеҙ икән, һеҙҙе ҡыуып етеп, ҡуян урынына дөмөктөрәсәктәр. Дошмандың күҙенә ҡарап, артыбыҙ менән сигенергә тейешбеҙ. – Фетнәселәр тынып ҡалды. Хәйер, уларҙың артабан йүгерергә хәлдәре лә ҡалмағайны. Етмәһә, оҙон сабыулы кейемдә саҡ ҡыймылдайҙар.

– Кемдәр ҡоралдарын ташлаған, кире барып алығыҙ! Иртәгә мылтыҡлы һалдатҡа йоҙроҡ күрһәтерһегеҙме? Кем ҡурҡаҡ, дошман тәүҙә шул бәндәне үлтерәсәк...

*(Дауамы бар.)*

**Рәйлә**
**САБИТОВА**

# АРТЫҠБИКӘ

## ПОВЕСТЬ-МОНОЛОГ

Егерме йылдан артыҡ ваҡыт уҙҙы, Аллаға шөкөр, әсәй шап-шаҡтай. Ул минең ниндәй күңел ғазаптары кисергәнемде белмәй ҙә ҡалды. Ярай, белмәһен. Уйланиһәң, мин уның кисергәндәре менән ҡыҙыҡһынғаным булдымы? Яраттымы ул берәй ҡасан? Ниңә тап атайҙы ире итеп һайлаған? Ниндәй хыялдар менән йәшәгән, тормошонан ҡәнәғәтме? Бер ни ҙә белмәйем. Беҙҙең бер ҡасан да ҡатын-ҡыҙҙарса серләшкәнебеҙ булманы. Мин уны ҡырыҫлыҡта ғәйепләйем, ул – мине. Ҡайһы берҙә ҡылыҡтарын аңлайым кеүек, күпселектә – юҡ. Ул һалҡын мөнәсәбәте менән үҙенән биҙҙереп тора, ә мин һаман уға йылышам. Үҙ эшемде ҡуйып тороп, тәүҙә уныҡын эшләйем. Гел ярай алмайым. Теге ере тегеләй, был ере былай һ.б., һ.б. Үҙемдең әсәй өсөн бер һөйөкһөҙ йән эйәһе булыуыма күнеп тә киттем инде. Күнеү генә түгел, ҡулайһыҙ, шыҡһыҙ, артыҡ баш икәнемә ышанып бөттөм. Шуға күрә бер кемдең дә әйткән яҡшы һүҙҙәренә ышана алмайым. Аҡыллы, матур, булдыҡлы булыуыма ышанмайым. Үҙ көсөмә ышанмайым. Мөхәббәткә, яратыуға, һөҡланыуға лайыҡ икәнемә ышанмайым. Был – минең бәләм һәм төп бәхетһеҙлегем.

Иртәгәһенә, һыйырҙы көтөүгә ҡыуыу менән, Мөнөй әбейгә керҙем. Ул мине көткән. Аҡ кейемдән, дини китап тотоп һикеһендә ултыра. Уныһы – күп уҡыуҙанмы, әллә боронғолоҡтанмы – ылбырап бөткән.

– “Мөхәммәдиә” был. Яҙыуы ғәрәпсә түгел, иҫке төркисә. Түркенемдән алып киткән берҙән-бер монаят. Төҫөм итеп һаҡларһың. Бына быныһы, – ул китап араһынан кескәй генә бер төргәкме-нимәме килтереп сығарҙы, – быныһы һинең йөҙләгөң. Бетеү итеп эшләгәйнем, ғүмерем буйы ошо китап араһында һаҡланым. Бәләкәй сағыңда аңламайынса юғалтып ҡуйырһың, тип ҡурҡҡайным. Ҙурайғас, ышанмаҫһың, һанламаҫһың, тип бирмәнем. Әле биреп ҡуям. Тағып йөрөр булһаң, көмөш сылбырға таҡ. Беҙгә, башҡорт ҡатындарына, көмөш килешә.

Ул тағы ла кисәге әйткән һүҙҙәрен ҡабатланы: “Үҙең бәхет бул”. Сығырға ишек бауын тотҡас-икәс, исемен һораным.

– Миңлекәй, – тине. – Мин дә, һинең һымаҡ, миң менән тыуғанмын. Йөрәк турлығында.

---

*Аҙағы. Башы 4-се һанда.*

Ниндәй үкенестәр тулы донъя был? Мин ғүмерем буйы Мөнөй әбей кеүек кешегә мохтаж инем. Көнләшкәнем – өләсәйле балалар булды. Миңә өләсәйҙе алыштырырлыҡ, миңә кәрәк аҡылдар бирерлек, аңларлыҡ, яратырға өйрәтерлек кешем, баҡтиһәң, эргәмдә йәшәгән. Ул да миңә мохтаж булған! Ул үҙен был донъяла артыҡ итеп иҫәпләгән, ә миңә, минең донъяма ул ныҡ кәрәк ине бит... Ул күптәргә кәрәкле була ала ине, күптәргә! Мөнөй әбейҙең ғүмер юлы үҙе минең сираттағы һабағым түгелме ни? Ул үҙе лә бит асыҡ әйтте: фәһем ал, минең хаталарымды ҡабатлама, тине. Һин кәрәк кешеләр күп, шуларҙы эҙләп тап, тине. Эйе, эйе, үткәнгә үкенеп ултыр, тимәне.

Мөнөй әбей таңға үткәйне. Нәҫел-ырыуы булмағас, ерләү мәшәҡәттәре “силсәүит”кә төшөргә тейеш. Беренсе тапҡыр әсәйем һүҙемде кире ҡаҡманы – өсөн, етеһен үҙебеҙ уҡыттыҡ. Кәфенлек-хәйерлектәрен әбей үҙе әҙерләп һалып ҡуйған булған. Хәйер, беҙҙә бөтә оло кешеләрҙең ундай нәмәләре әҙерләнгән була ул. Йәштәр генә йүнһеҙ, үҙҙәре әле шундай сығымдарҙы уйламаған-хәстәрләмәгән, ә боғалаҡҡа тығылырға баштары еткән...

Кешеләр таралғас, әсәйемә кендек инәйемдең Мөнөй әбей булғанын һөйләнем. Бот сабып аптыраны, байтаҡ ҡына баш сайҡап ултырҙы.

– Ниңә әйтмәне, иҫемә төшөрмәне икән шуны иҫән сағында? Иннәкә бүләге лә бирелмәй ҡалғандыр, эй, Хоҙайым. Бурыслы булып ҡалдыммы ни? Ҡырҡын, йыллығын да уҡытһам, бәхилләр микән әруахы...

Әсәйемдең был мөнәсәбәтенә аптыраным да, һөйөндөм дә. “Булһа ни булған, башты ҡатырма әле, былай ҙа эш муйындан”, – тип илтифат итмәҫ тип ҡурҡҡайным. Юҡ, әсәй кеше балаһын белә-күрә өлөшһөҙ ҡалдырырға тырышмаҫ.

Дөрөҫөн әйткәндә, Мөнөй әбейҙең һөйләгәндәрен ауыр кисерҙем мин. Атайәсәйҙең әле тыуып ҡына килгән балаға, йәғни миңә, шундай ҡаты бәғерле булыуҙарын белеү рәхәт тиһеңме. Үпкәләнем дә, рәнйенем дә. Үҙ ҡанынан яралған сабый өсөн бер ҡульяулыҡ йәлләп торһонсо әле... Баланың киләсәге, бәхете, был донъяла яулаясаҡ урыны менән шаярғандарын аңламанылар микән ни? Нисек үҙ сабыйыңдың бәхетен киҫмәк кәрәк? Шул үпкәләремә тонсоғоп, бер аҙ һөйләшә алмай йонсоном. Әле әсәйемдең ихласлап хафаланыуы, хатаһын төҙәтергә тырышып ятыуы күңелемде бөтәйтте. Мин уларға насар бала булманым, буғай. Имгәк-фәлән түгелмен, саҡырғандарын көтмәй, беренсе башлап эшкә йәбешәм, ҡаршы һүҙ әйткән юҡ. Эйе, серҙәш булманым булыуын. Күңелемдәген асманым, уларҙың бикле йөрәк ишектәрен ҡаҡманым. Ә үҙем ғүмер буйы уларҙан хуплау, яҡлау, саҡ ҡына булһа ла атай-әсәй мөхәббәте көттөм. Әле лә көтәм. Тик был турала әйткәнем генә юҡ.

Баҡсалағы балан да сәскәһен ҡойҙо. Яҙҙың һуңғы аҡ сәскәләре... Тимәк, минең йәйге депрессия башлана. Ап-аҡ ҡышты яратып еткермәһәм дә, яҙҙың ап-аҡ сәскәгә күмелгән мәлен иҫем китеп яратам. Шул сәскәләрҙең ҡойолоуын ауыр кисерәм. Ҡайҙа ҡарама – йәм-йәшел. Ҡыҫҡаһы, “тоска зеленая”. Бызырлап торған шеш-мәҙәрҙе йәм-йәшел итеп буяп ҡуялар бит әле, нәҡ шул...

Атайым да заманында “етте шул хәсрәт айы” тип көйөп йөрөр ине. Хәҙер үҙем шуны уҡ ҡабатлайым: хәсрәт айы етте. Ҡаланыҡыларға рәхәт: уларға – ял, отпуск. Байыраҡтары өсөн – диңгеҙ буйы, яхта, пляж... Ярлыраҡтарына – тәбиғәт, һыу буйы, шашлыҡ-машлыҡ... Ауыл кешеһенә ал да юҡ, ял да юҡ. Таңдан төнгәсә аяҡтан йығылырҙай булып мал аҙығы хәстәрләү. Ирлеләргә, ишле ғаиләләргә еңелерәк, әлбиттә. Гөр килешеп, салғы менән ҡолас ташлап сабалар, тәбиғәттә ҡаҙан аҫып, күмәкләшеп тирләшәләр ҙә эш тә тиҙ бөтә. Ә мин бер йөрөйөм сапҡыслы трактор эҙләп. Икенсегә йыйғыслыһы артынан сығып китәм. Алып ҡайтыуы тағы бер бәлә: был юлы арбалы трактор ғына түгел, тейәшергә

көнләксөләрен дә эҙләргә кәрәк. Мәшәҡәт әҙ саҡта эшселәр табыуы ныҡ ҡыйын түгел, аҡсаң булһын да асыҡ йөҙөң менән һыйынды йәлләмә. Ә бесән ваҡытында, һәр берене үҙ хәстәре менән янғанда, ай-һай, ауырға тура килә. Ҡайһы саҡта, берәй тракторсының һөйәркәһе генә булырға микән әллә, тигән алйот уйҙар ҙа һикерә башҡа, валлаһи...

Бигерәк арытты һәр берене йөҙ һыуҙары түгеп инәлеү. Һөйәркә итеү түгел, өйләнергә теләгәне лә табылыр ине. Тәҡдим менән килгәндәре лә бар. Элек нимә ҡамасаулағанын аңламай торғайным, хәҙер беләм: яҡшымы-насармы, Сашка-Искәндәр образы күңелемде бикләгән. Башҡа бер кемгә лә күңелем төшмәй, ә донъя көтөү өсөн генә сығырға... Күрәһең, әле тормошом тамам көрсөккә терәлмәгән – яңғыҙым да йырып сыға алам, шөкөр. Һәр йылдағыса, быйыл да алда торған сығымдарҙы барлайым, керемдәрҙе самалайым. Бер гектар бесәнде сабыу хаҡы тағы артҡан, тиҙәр. Йөк килтереү ҡышын уҡ ҡиммәтләнде: утын килтергәс, беләм. Көнләксөләрҙең дә эсмәгәнерәге, уңғанырағы хаҡты ҡайыра торған. Көтөүлеккә, бесәнлеккә түләргә кәрәк, малға һалым да бар, көтөүсегә ай һайын хаҡын биреп бараһы... Был ир тигәндәре, үлгәс-үлгәс, өйөн һалып, донъяһын нығытып үлһә ни булған?! Күрше-тирә йорттарын заманса материалдар менән көпләп, кем таш, кем профнастил кеүек нәмәләр менән ихаталарын уратып бөттө. Ә минең ун йыл торған штакетниктарым ҡойолорға әҙер. Нисек яңыртырға? Белгән юҡ. Түкәтмә-фәлән менән өйҙө ҙурайтыу хаҡында хатта хыял да итмәйем. Йәй пенсияһын шулай итеп "һыйыр ялап" бөтөрә. Барлы-юҡлы һөт һатҡан аҡса көндәлек кәрәк-яраҡҡа, тамаҡҡа китәсәк. Уҡыу башланыр алдынан тағы бер мәшәҡәт – балаларҙы мәктәпкә әҙерләү. Кесеһенә ағаһыныҡы ҡалһа ла, олоһона костюмын-башҡаһын алырға... Енем һөймәгән эш булһа ла, зарплатаһы ярап тора ине әле. Былай булғас, теләйһеңме-юҡмы, эшкә кереү хаҡында уйларға тура килә. Хәҡиҡәтте танийым: хәҙер миңә ундай "йылы" урын тәтемәйәсәк. Бюджет өлкәһендәге ниндәй  штатҡа ла ауыл башлығы хужа. Ә мин уның ирлек ғорурлығын етерлек мыҫҡыл иттем. Нәҫелдәре менән эскерле, тәкәббер зат улар. Рәхәтләнеп үс аласағын белә инем, әлбиттә. Үкендермәксе,  теҙ сүктермәксе инде. Ниндәй эшкә керергә ғариза яҙһам да, "Мораль яҡтан тотанаҡлығы шикле, махсус белеме юҡ" тип кире ҡағып ҡына тора. Әйтерһең, ул үҙе хакимиәт башлығы профессияһына уҡыған! Юғары белемле белгес, имеш... Эйе, белгес, тик кешеләр менән идара итеү буйынса түгел, ә зоотехния буйынса. Беренсе ҡулдарын йүгерткеләгәндә: "Һыйырҙы яһалма ҡасырыу методын тормошта ҡулланып ҡарамаҡсы булғайнығыҙ мәллә? Яҡшыраҡ уҡырға булған: минең бит мөгөҙөм юҡ. Туҡал һыйыр менән бутарға ҡойроғом юҡ", – тип ныҡ ҡына ирештергәйнем. Юҡ, түбән тәгәрәмәгәнем өсөн ниңә үкенергә тейешмен мин? Үкенмәйем. Ундай буҡҡорһаҡтарға кәнтәй булғансы, ошолай бар нәмәне яңғыҙ һөйрәүсе йөк аты булыуың хәйерлерәк. Нисауа, әле хәлем йәшәрлек. Ә бына эш-көш табырға кәрәк шулай ҙа.

Шәхси эшҡыуарҙарҙы күңелемдән барлап сығам. Ауылдағы киоскыға һатыусы булып урынлашырға мөмкин, әммә бер нисә йыл элек эшләп киткәнемдә ныҡ ялҡып сыҡҡан инем. Төшкө ял сәғәте лә, ял көнө лә булыуы етмәгән, йомашәмбе-йәкшәмбе төн уртаһынаса эшләтә. Йәш-елкенсәктең аҡсаһын, һыра менән алдап, һура. Ҡарт-коро, бахыр, пенсияһын ашап-эсеп бөтә лә сәғәттәр буйы бурысҡа биреүемде  инәлеп, йәнемде көйҙөрә. Туҡтауһыҙ эсеүҙән һаҫып бөткән була ҡайһыһы. Янында торорлоҡ түгел, күңел болғандырғыс еҫтәр һаңҡытып, меҫкенләнеп теңкәмде ҡоротоп тора. Аҡһаҡал булып, йәштәргә аҡыллы кәңәштөңәш биреп, түр башында намаҙҙан тормай ултырырға тейеш ҡарттар бит ул! Ейән-ейәнсәрҙәренә ҡарыһүҙҙәр һөйләп, гонаһ эштәрҙән тыйып, ҡурсалап

торорға тейеш инәй булаһы әбейҙәр бит ул! Ер емертеп эшләп, донъя тотҡаһы булырға тейеш ирҙәр, ҡарт инәһе кеүек түл йәйеп, матур-матур балалар табаһы ҡатындар бит ул! Кешелектәрен, үҙ-үҙҙәрен юғалтҡан бисараға әйләнеп, бер көтөүгә әйләнеп юҡҡа сыҡҡан улар. Алкаштар көтөүе. Ә магазин хужаһы өсөн – килем килтереүселәр. Көноҙоно эшләүгә рәхмәт әйтеүсе юҡ. Ул ғына ла түгел, ҡаныңды эсә. Хеҙмәт кенәгәһе менән договор төҙөп эшкә ҡушҡанмы ни – барлы-юҡлы аҡсанан “подоходный налог” алып ултыра! Ауыр-ауыр һыра йәшниктәре, тағы әллә нәмәләр ташыта әле, йөк ташыусы ялларға йөҙ тәңкәһен йәлләп. Юҡ, ул тормошҡа үҙем теләп ҡабат барып инәһем юҡ! Күргәнем еткән.

Шулай уйланып ҡайтып килһәм, ни күрәм: ике сабыйым абына-һөрөнә тигәндәй гәрбил һөйрәтеп маташа. Күршенең һәндерәп бөткән атаһы дәртләндереп, һай-һайтлап торған була, ҡулында – сүкеш-ҡаҙаҡ. Бәрәңге баҡсаһы яғынан кәртә һүтелеп төшкәйне шул. Шуны ямап булашалар. Нисә көн инде эргәһенән иште ҡыҫып үтеп йөрөйөм. Көсһөҙлөктән күҙгә йәштәр тығылды. Тиҫтерҙәренең балта тотоу төшөнә лә инмәйҙер, ә минең оло малай утын ярырға өйрәнде. Әҙ булһа ла аҡса ситкә китмәҫ, тип тырыша. “Эшсе”ләремдең күңеле булһын тип, һый әҙерләгән булдым. Маҡтарға ла аптырамайым. Көсө етмәҫтәйҙе күтәреп биртенеп ҡуйыуынан ҡурҡтым. Ыуыҙ ғына бит әле уның һөйәктәре, быуыны ҡатмаған. Уға үҫергә лә үҫергә, уйнарға, хыял итергә кәрәк. Ваҡытынан алда өлкәнәйергә түгел...

– Йонсомаҫҡа ине, бәлки, бабайың килгән сағында йүнәтеп китер ине, – тиеүемә, ҡолонсағым:

– Әҙерәк донъяны нығытырға кәрәк, яңғыҙың ҡалғас ауыр булыр, – тип ололарса фекерләп, һушымды алды.

– Яңғыҙың ҡалғас, тисе?

– Беҙ, әсәй, кадет корпусына уҡырға китәбеҙ. Бабайым әйтә, әсәй ҡуйынында ғына үҫкән малайҙар мәмәй була, ти. Армияла тиҙ һына, ти. Атайымды ла, армияла “һынып” ҡайтты, шуға йәшәй алманы, ти. Минең һынғым килмәй. Алкаш та булғым килмәй. Минең летчик булғым килә. Ә унда, әҙерәк үҫкәс, парашюттан да һикертәләр, ти. Йәй көнө һиңә утын әҙерләшәбеҙ ҙә көҙгә китербеҙ, йәме.

Мин шаңҡыуҙан улыма ни тип тә яуап бирә белмәнем. Бына һиңә мә! Мин нисә йылдар буйы үҙ ҡайғымды ғына уйлап, үҙ кисерештәремә батып, балаларымды иҫкә лә алмағанмын. Миңә ир кәрәкмәһә лә, уларға атай кәрәк, имеш. Үҙемдең тормошҡа ашмаған хыялдарымды уйлап, үҙемде йәлләп һыҡтағанда, эргәмдә генә үҙ улымдың хыялдары яралып, минән айырым шәхес үҫеп килеүен күрмәй ҙә торам түгелме? Шаҡ ҡатҡыс. Балаларҙы ситкә ебәреү ҙә ҡыйын. Сабый ғыналар бит әле! Етмәһә, аҡса еткерергә кәрәк. Ҡала һиңә ауыл түгел, урам буйына алам-һалам кейеп сығып булмай. Аҡсаһыҙ ҙа туҡ йәшәргә баҙ тулы бәрәңге, итең-һөтөң юҡ. Ни эшләргә? Юҡ, бер ҡайҙа ла сығып китмәйһегеҙ, тип ҡырт киҫһәм, теләгебеҙгә ҡаршы төштөң, бәхетебеҙгә ҡамасауланың, тип ғүмер буйы үпкәләмәҫтәрме? Уф, бигерәк ҡыйын йәш булыуҙары!!! Ҡалай эшләһәм – дөрөҫ була, ҡайһылай – юҡ, нисек белергә һуң? Етем бала булараҡ, ниндәйҙер льготалары барҙыр, әлбиттә. Тәртип тә арыу, тип яҙалар. Бәлки, улым хаҡлылыр? Летчик, ти бит әле ул! Осорға, һауаға күтәрелергә тигән теләк минән уға ҡан менән күсте микән әллә? Ҡыҙыҡ... Мөнөй әбей иҫкә төштө. Минең ҡанаттарым үҫмәйәсәкте белеп бәғерем өҙөлөүен һөйләгәндә, йөрәгем ҡыҫып-ҡыҫып ҡуя. Әле улым өсөн йөрәгем өҙөлә. Уның хыялын тормошҡа ашырырға ярҙам итергә маташып та ҡарамаһам, ғүмер ахырынаса үкенәсәкмен.

Эй, ялҡтым да инде ошо фәҡирлектән. Ялҡтым ошо “эконом-кластан”! Уйланып арығас, бер көндө мәтрүшкә йыйырға сығып киттем. “Төпкөл-төпкөл” тип

кәмһетеп һөйләһәләр ҙә, төпкөлдә йәшәүҙең үҙенең яҡшы яҡтары бар. Нисәмә-нисә тиҫтә араларға тиклем бер завод-фабрика һымаҡ экология боҙоусы сәнәғәт предприятиеһы юҡ. Тәбиғәт тап-таҙа, үлән-емешкә бай. Оҙаҡ та йөрөмәнем – бер ҡосаҡ йыйҙым. Ҡайтышлай зыяратҡа һуғылдым, Рәсим янына. Ҡәйнәмдәр онотмай уны, ҡәбере тәрбиәле. Арзанлы ғына ҡәберташ-памятник эшләткәндәр фотолап. Өйләнмәгән сағындағы фотоһүрәтен ҡуйғандар. Тора йылмайып, йәш кенә, ихлас ҡына. Былай матур ғына булған икән төҫкә. Әле тыныс һәм ситтән, бер мөнәсәбәтһеҙ ҡарағас, шулай күренә. Бергә йәшәгәндә ул миңә һылыу, күркәм булып түгел, минең яҙмышыма аҙашып килеп кергән оронсоҡ һымаҡ ине. Вафаты алдынан – бигерәк тә. Эргәһендә сыҙағыһыҙ, ниндәйҙер бөтә донъяға үсегеү бар ине унда. Бөтә яҡшылыҡ та уға яһалма булып тойолдо. Йәғни изгелек битлегенә төрөлгән яуызлыҡ булып. Улымдың һүҙенә тиклем был турала уйлағаным юҡ ине. Ысынлап һынып ҡайтҡандыр Рәсим “ҡайнар нөктә”ләрҙән. Миңә уның уйҙары ла, хистәре лә, кисергәндәре лә ҡыҙыҡ түгел ине. Ҡыҙыҡһынырға башыма ла килмәне. Аңларға ла теләгем юҡ ине. Мин тик үҙемә бикләнеп, үҙ ҡайғым менән генә йәшәнем. Үкенәм, тип тә әйтә алмайым. Уның күңелендәге менән ҡыҙыҡһыныуымдан нимә үҙгәрер ине? Мин, нимә, уны ярата башлар инемме? Юҡ. Әлеге аҡылым булһа, мин уға кейәүгә сыҡмаҫ инем. Үҙемдең бәхетте генә уйлаған өсөн түгел, юҡ. Мин инде уның да бәхетен уйлар инем. Рәсим йәш, матур егет ине, ике бала табып бирерлек булғас, ул тиклем насар бәндә лә булмағандыр. Уның һөйөп-һөйөлөп йәшәргә хоҡуғы юҡ инеме ни? Мин уның тәҡдимен ҡабул итеп, бәхетенә кәртә булып яттым. Ул үҙенең яртыһын, мөхәббәтен эҙләүҙән туҡтаны. Ә, бәлки, тапҡан булыр ине. Яралы йәненә дауа булған булыр ине ул мөхәббәт, йәшәргә көс бирер ине. Ә мин Рәсимгә бер ниндәй йылы ла бирә алманым. Сөнки ул ваҡытта үҙем буп-буш инем. Иргә бирә торған йәнемде Сашка һурып бөткәйне. Математикала ғына минусты минусҡа ҡабатлаһаң плюс була. Ә тормошта – киреһенсә: ике бәхетһеҙҙе бергә ҡушһаң, бәхетһеҙлек нығыраҡ көсәйә...

Мөнөй әбейемдең баш осонда торланым. Уның кәртәһе лә юҡ, памятнигы ла, фотоһы ла... Ҡалдырҙың һин миңә йомаҡтар, ҡалдырҙың. “Үҙең бәхет бул” тинең. Ҡырҡың да етеп килә бит әле. Укытыр микән әсәйем? Үкенеүе ихлас инеме икән? Әллә “бесән ваҡытында нимәгә был өҫтәлмә мәшәҡәт” тиерме? Исемем юҡлығын әйтмәнем дә бит әле мин уға. Бетеү хаҡында ла ләм-мим. Рушаннаға ғына әйттем. Ире гранат ҡашлы алтын алҡалар бүләк иткән икән. Хаҡы апаруҡ ҡына. Ниһайәт, скидка карточкаһын “платиновый”ға алыштырғандар. “Бетеүеңә күндән матур ғына тышлыҡ тек тә минең карточка менән алтынмы, көмөшмө сылбыр алып тағып ҡуйырһың. Исем ҡушыу айҡанлы бүләгем булыр”, – тине.

Мәркәз иҫкә төшкәс, йөрәк леперҙәп китте. Барһаң ине! Теге ваҡыттан бирле барған юҡ. Сашка-Искәндәр менән кабинетында һуңғы осрашыу сәйер генә булды. Документ әҙерләп ҡуйған, имза ҡылды. “Ошо ғына инеме теләгең” тип, күрәләтә битараф тон менән өндәште. Мин уның ғәмһеҙ тауышында үпкә һәм рәнйеү ишеткән һымаҡ булдым. Тик тойғома ышанманым. Ә әле, шул ваҡ-төйәк деталдәрҙе бергә “йәбештереп”, уйлана ҡалдым. Ул “ныҡ ҡыйын ваҡытта – көн тимәй, төн тимәй,– шылтырат” тип телефон номерын бирҙе. Ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Хушлашып һонғанында ҡулы еңелсә ҡалтыранған һымаҡ тойолдо. Әммә мин шул тиклем ныҡ тулҡынлана инем. Ҡулым дерелдәгәнен баҫырға маташып, хистәремә әүрәп, уға иғтибар итмәнем. Әле шуларҙы иҫләп-иҫләп ҡуям да... Бәлки, алданмағанмындыр әле мин? Бәлки, уның да хистәре ихлас булғандыр? Бәлки, һуңғы осрашыуҙа ул минән нимәлер көткәндер? Башлап аҙым яһауымды, мәҫәлән. Башлап был темаға һүҙ бороуымды. Юҡһа, беҙ әллә

ҡайҙағы Американың һауа торошон һәм Австралия урынлашҡан мередиан градусын асыҡлап бөттөк, ә иң кәрәклеһенә ҡағылманыҡ. Кем булдыҡ беҙ бер-беребеҙ өсөн? Кем кемде ташланы? Һәм ни өсөн? Һорауҙар, һорауҙар. Бөтә тормошом һорауҙарҙан торасы, йәнде көйҙөрөп. Хет бер яуап булһасы. Мәҫәлән, фәлән-фәлән көндө был мәсьәләләр сиселәсәк, тигән.

Мәтрүшкәһен ауыл янынданыраҡ йыйып алдым алыуға. Тик бына бесәнлегем ер аяғы ер башы яҡта. Әлеге лә баяғы – яҡлаусы юҡлыҡ. Байҙарҙың, хәлләрҙең сабыны ла ауылға терәлеп торған яландарҙан. Ни тиһәң дә, уларҙың был эште яйларға яйы, майларға майы бар. Сабынлыҡҡа ла бит әлеге лә баяғы теге шайтан таяғы хужа. “Силсәүит”те әйтәм. Минең һымаҡ көсһөҙөрәктәргә иң йыраҡ, үләне ҡойто яландарға ғына күҙ терәп торорға тора килә. Тракторсыһы ла алыҫҡа техника ҡыуғыһы килмәй, инәлтеүсән, алһа, хаҡын да ҡутара ала. Юҡ, бөтә яңғыҙаҡ, тол ҡатындар минең һымаҡ йонсомай, һүҙ юҡ. Хатта донъяның артына тибеп йәшәй ҡайһылары. Иренең ҡырҡын уҡытыр-уҡытмаҫтан йәш егет керетә ҡайһыһы. Кемдер йортло-ерле, унған ғына буйҙаҡҡа барып керә. Ауылда бит ир-ат заттары күберәк, ҡатын-ҡыҙ әҙерәк. Кемдер йортҡа ла керетмәй, кейәүгә лә сыҡмай, ғаиләле арыу ғына ирҙе һыйындыра. Аҡмаһа ла тама, тигән шикелле, тәүҙә ҡатынынан ҡаса-боҫа, аҙаҡ асыҡтан-асыҡ ярҙам итә уныһы. Кемдер иң анһат юл таба – көмөшкә ҡыуырға тотона. Даими аҡса ла тамып тора, ваҡ-төйәк мәшәҡәтеңде атҡарышырға һәр ваҡыт сәрхүш батрактарың бар, шулай уҡ батрачкаларың да. Ҡәйнә яҡтары инде нисә йыл минең ниндәй “юл һайлағаным”ды белә алмай яфалана. Ә минең бер ниндәй ҙә юл һайламағанымды аңларға әллә баштары етмәй, әллә теләктәре. Хәйер, һуңғы йыл-йыл ярымда ниндәйҙер үҙгәреш һиҙә башланым. Элек урам буйындағы һәр ғәйбәт һайын мине һүгеп китеүҙән тәм табалар ине. Әле нисә тапҡырында ул-был һүҙ әйтмәй, ҡушҡан һаулығымды алып үттеләр. Ишетмәй ҡалғандарҙыр, тиһәң, ауылда бер ниҙе лә йәшереп булмай. Күрәһең, тыныслана башлағандарҙыр. Оло кешеләр ҙә инде, бәлки, кемдең кем икәнен, ниһайәт, айырғандарҙыр. Әле ҡәйенбикәнең оло малайы хәбәр килтергән. Бесәнемде һаман саптыра алмағас, “күрше”ләр байтаҡ ҡына өлөшөмә кереп, һелтәп ташлағандар, ти. Асыу-ярһыу менән киттем сабынымды ҡарарға. Бер-ике саҡрым йәйәү, бер нисәһен бесәнселәр техникаһына эләгеп барып еттем. Апаруҡ ҡына йәмһеҙләшеп, һүҙләшеп алыуға, ҡотто осороп, кеҫә телефоным шылтыраны. Кем икәнен аңғармай ҙа ҡалдым, “Өйөң яна, пожар!” тип ҡысҡырыуға быуынһыҙланып төштөм. Иң беренсе уйым: “улдарым!” Шаңҡыуҙан телефонымдың ҡулдан һыпырылып төшкәнен дә аңғармай, ауыл яғына йүгергәнмен. Әле генә минең менән изгәләшкән ирҙәр, хәлде һорап-белеп, артымдан еңел машина менән ҡыуып еткәндәр. Юл буйы нимәлер һөйләп тынысландырырға маташалар. Ҡайҙа ти ул! Бер ни ҙә ишетмәйем дә, аңламайым да. Эсемдән генә тик Хоҙайға ялбарам: “Ниндәй ауырлыҡ бирһәң дә түҙермен, балаларым ғына иҫән-һау булһын!” Эҫе көндә ҡоп-ҡоро бәләкәй генә ағас өйгә күп кәрәкме ни? Етмәһә – бесән өҫтө, йүнле әҙәм яланда. Йортта шул ҡарт-ҡоро ла бала-саға. Ярай әле, ваҡытында пожарниктарға хәбәр иткәндәр. Ҡура-ҡаралтылар ҡалған, күршеләргә күсеп, буйлап китмәгән. Ярай әле, улдарымды фәрештәләре һыу инергә алып киткән булған. Барыбыҙ ҙа һау-сәләмәт, әммә яланғас, документтарһыҙ һәм аҡсаһыҙ килеш урамда тороп ҡалдыҡ. Хәлемдең аяныслығы тәүҙә башыма барып та етмәне. Уттан ҡалған “мөлкәт”те барлап, милиция менән аңлашып, балаларға ятыр-торор урын хәстәрләп мәж килдем. Булдыра алған кеше үҙенән артҡан кейем-маҙарын килтергән була, ҡайғымды уртаҡлашып уфтанған, баш сайҡаған була, әбейҙәр: “Инде ни хәл генә итерһең инде”, – тип бот сабып аптыраша. Уларҙың

аптырағанынан миңә ни файҙа инде? Былай ҙа эсем яна. Аһ, өйкәйем! Ҡәлғәм булғанһың икән һин миңә, ҡәлғәм! Тәнем генә түгел, йәнем өшөгәндә лә һиңә ышыҡландым. Кешеләргә рәнйегәнемдә лә һиңә кереп бикләнә лә йыуана инем. Бәләкәй генә булһаң да, минең өсөн азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡтоң үҙе булғанһың икән!

Ни эшләргә һуң, ни эшләргә? Атай йортонда оҙаҡҡа ҡалып булмай, унынһы көн кеүек асыҡ. Тәүҙә "боролорға ла урын ҡалманы" тип уфтана башларҙар. Унан китә кәпкәкләү. Унан китә һәр телем икмәк менән дә битәрләү... Мин, ярай, өйрәнгән баш. Ә улдарым? Мин бит уларҙы, артыҡ тыңлаусан, йыуаш булмаһындар тип, үҙ көйөмә бейегәнде талап итмәй үҫтерҙем. Әле иһә аптырап ҡалдылар: улар, имеш, дөрөҫ ултырмайҙар, ашай белмәйҙәр, ни эшләһәләр ҙә еренә еткермәйҙәр, боҙалар... Минән яҡлау көтөп мөлдөрәп ҡарағандарында әллә ҡалай булып китә. Ни эшләй беләм инде? Ошо кешене үҙ-үҙен үҙгәртергә маташып саҡырыу – файҙаһыҙ. Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтә, тиҙәр. Үҙең аҡылға ултырмаһаң, яныңдағы бер кемдең дә тәьҫире ярҙам итмәйәсәк.

Ауылда буш торған өйҙәр бар-барын. Ҡайһыһына күсһәң дә, хәтһеҙ генә ремонт кәрәк буласаҡ. Кеше тупһаһы – кеше тупһаһы инде, үҙеңдеке түгел. Бер ҡайҙан килем дә, ярҙам да юҡ икән, үҙ өйөңдө нисек һалырға? Хатта ҡаза күреүселәргә ярҙам йөҙөнән делянканы льготалы шарттарҙа бирһәләр ҙә, мин, ҡатын кеше, нисек урман эшен йырып сыға алам? Күпме ир-атты тыңлатыр кәрәк уның өсөн! Ә минең "тыңлатҡыс"ым тамаҡ аҫрарға саҡ-саҡ. Күпме документ юллайһы бар. Уның өсөн аҡса кәрәк. Ә аҡсамды алыр өсөн... документтарҙы тергеҙергә кәрәк! Минең әле улар артынан район үҙәгенә йөрөр өсөн хатта өҫтөмә, аяғыма кейерлек әҙәмсә кейемем дә юҡ...

Был – тупик. Вәт терәлдем тек терәлдем. Проблемаларымдың осо-ҡырыйы күренмәй. "Юҡтырһың да, Алла, булһаң әгәр..." – тип айға ҡарап олорға ғына ҡалды.

Хәйер, Алла бар ул, бар! "Мөхәммәдиә"мде муллалыҡҡа уҡып йөрөгән бер шәкерт алып торғайны. Бетеүем, көмөш сылбырым булмау сәбәпле, телефонда брелок булып йөрөй. Шулай итеп, ике ғәзиз балам һәм ике ҡәҙерле ҡомартҡым үҙем менән ҡалды. Шуға шөкөр ҡылмай, ни тип әйтәһең?

"Тупик" тип алдараҡ "шатланғанмын", имеш. Баҡтиһәң, әсәй үҙенең иң яҡын әхирәттәре менән минең яҙмышты үҙенсә яҡшы итеп ойошторматҡсы икән.

– Инде йәшең дә апаруҡ. Етмәһә, ике малайың бар. Яңғыҙың барыбер өй һалып булаша алмаҫһың. Бында ла урын тар. Хәшиә әхирәттең күрше ауылда арыу ғына ҡоҙаһы бар икән. Өйө ҙур, ти, хужалығы ла ҡараулы. Йәше ҡырҡтан уҙғанүҙыуға, зато бер тапҡыр ҙа өйләнмәгән, һәләк уңған, ипле, ти. Әсәһе менән генә йәшәй. Оҙаҡламай һоратырға килерҙәр. Йәш ҡыҙ кеүек, ҡуҡырайып, инәлтеп ултырма. Үҙегеҙҙе үҫтергәнмен, хәҙер, ҡартайған көнөмдә, балаларыңды ҡарап ултыра алмайым. Мин Хәшиәгә ризалыҡ бирҙем. Танышып, килешеп китергә тырыш, ҡыш бауыры оҙон, һалҡындарға тиклем урынлашып ҡалғаның хәйерле.

Әсәйгә текләнем дә шаҡ ҡаттым. Ни эшләйһең һин? Бер тапҡыр кейәүгә ҡыуып сығарып, яҙмышымды боҙҙоң бит! Инде тағы шул "тырма"ға баҫтырырға тырышаһыңмы? Асырғанып ҡысҡырғым килде. Ҡысҡырманым. Сыҡтым да киттем. Ҡайҙа киттем? Үҙем дә белмәйем. Уй-һағыштарымды елгә осорайыммы икән, һыуға ағыҙайыммы? Тормош – ормош. Ошолайтып оролғансы, торна булып берәй яҡҡа ғына олаҡһамсы!

Күңелле генә итеп телефон зыңланы. Рушанна икән.

– Минең хәлдәр йырҙағыса. Срочно ғына кил, срочно! Осрашҡас һөйләшербеҙ барыһын да. Автобусҡа аҡса тапһаң, ҡалғаны һинең проблема түгел. Көтәм, кил!

Ялҡауым килеп кенә уйлана ҡуйҙым. Ҡайҙан аҡса таба алам мин? Баҡсамдағы булған еләк-емеште һыпырып йыйып алдым да, бер күршегә – бер силәк

сейә, икенсеһенә ҡурай еләге һатып, юллыҡ аҡса йүнләнем. Иртәгәһенә Рушаннаның квартираһында бер-бер артлы матур-матур кейемдәр ҡарай инем инде. Ул үҙенең буй-һынды ҡыҫып торған иң затлы юбка-салбарҙарын, күн курткаһын, бейек үксәле туфли-ботильондарын килтереп сығарҙы. Ахырҙа түҙмәнем:

– Ниңә улай ҡыланаһың, былар бит үҙеңә кәрәкле әйберҙәр! – тинем.

– Ҡалдыҡ-боҫтоҡто бирергә һин мине кем тип уйлайһың?

– Юҡ, Рушанна, бигерәк ҡиммәтлерәр, үҙең генә кей.

– Мин бит һиңә, хәлдәрем йырҙағыса, тинем.

– Йыр кеүек булғас, һәйбәт инде.

– Ниңә “ниндәй йыр?” тип һорамайһың?

– Ну... Ниндәй йыр?

– “А я беременна, и это временно” тигәнен ишеткәнең бармы?

– Бар... Ой, Рушанна, ҡотлайым. Малаймы?

– Шулайҙыр тип өмөтләнәбеҙ. Шуға күрә был кейемдәр миңә байтаҡ ярамаясаҡ. Ә ярай башлағас, модаһы үткән була. Яҡшы булды әле, гардероб яңыртырға бер сәбәп, исмаһам.

Әлдә яҙмышымда Рушанна бар. Йәнемде ҡыйып, миңә ҡушылып уфтанмай. Юҡбар нәмә һөйләп көлдөрөп, эске көсөргәнешемде йомшартырға, хәсрәтемде таратырға тырыша. Бының өсөн уға шул тиклем рәхмәтлемен. Арығанмын уйланыуҙарҙан. Тағы саҡ ҡына – аҡылдан да яҙырмын, тип ҡурҡам. Нисек һиҙә шуны Рушанна? Ҡасан, нимә менән мине “уятырға”мы, йыуатырғамы – һәр саҡ белә.

– Теге “көйә күбәләге”... әй, “торна ҡаурыйы” күлдәгеңде миндә онотоп ҡалдырғанһың бит. Алып ҡайтаһыңмы?

– Нимәгә, никахымамы ни?

– О-о-о, һинең әле минән йәшерен кавалерың да бармы ни? Ғәфү итмәм бит, малай!

Ҡыҫҡаса ғына хәлде аңлаттым. Рушанна, күҙҙәрен шаҡмаҡ итеп, башын сайҡай. Байтаҡ ҡына өндәшмәй ултырабыҙ. Әхирәтемде көсөргәнешле уйҙарға һалыуыма оят та булып китә. Уға бит хәҙер нервыларын һаҡларға кәрәк.

– Ҡайҙа, бир әле, үҙ күлдәгемде лә кейеп ҡарайым, бер “дефиле” менән шөғөлләнгәндә.

Көҙгөләге үҙемә, танымаған кеүек, бер аҙ аптырап бағып торам. Был күлдәктә бик бәхетле лә булдым бит әле мин. Оҙаҡламай бер йыл да тула. Прическа, макияжһыҙ ябай ғына йәйге күлдәк һымаҡ күренә икән. Рушанна тағы уйҙарымды уҡый:

– Бигерәк килешә. Һин уны никахҡа түгел, туйға кей.

– Ярама һин тоҙ һалма, исмаһам.

– Исем туйыңа, тим бит. Әйҙә, иртәгә мәсеттәрҙең иң матур, күңелеңә оҡшағанын һайлайбыҙ ҙа...

– Мәсеткә кейергә уңайһыҙыраҡтыр ул.

– Бер ҙә уңайһыҙ түгел. Кергәндә жакет кейеп, яулыҡ ябынаһың да – эше лә бөттө. Давай-давай, ҡушабыҙ тигәс ҡушабыҙ. Ике балама ла ауылда атай-әсәй ҡуштырғайны. Өсөнсөһөнә үҙебеҙ исем туйы уҙғарырбыҙ. Һин – “эксперимент ҡуяны” булып тор, беҙгә лә киләсәккә тәжрибә кәрәк. Һинең әле бер документың да юҡ түгелме ни? Бына, исмаһам, беренсеһе булыр – хәҙер мәсеттә исем ҡағыҙы бирәләр.

Ҡайһы бер мәсьәләләрҙә Рушанна менән бәхәсләшеү файҙаһыҙ. Хәйер, ҡаршылашҡым да килмәй...

– Исемең Миңлеғәйшә булһын! – Йөҙөнән нисектер шәфҡәт, миһырбанлыҡ бөркөлөп торған мулла исемемде әйтеп, ҡолағыма өргәндә, күңелемә һиллек

килеүен тойҙом. Мәсет ихатаһынан сыҡҡанда, үҙемдең был ауырлыҡтарҙы ла үткәреп ебәрә алыуымда шикләнмәй инем инде. Бығаса булмағанса үҙ көсөмә ышаныс барлыҡҡа килде. Автобусҡа тиклем байтаҡ ваҡыт бар ине. Килгәс-килгәс, күренеп китәйем, тип галерея яғына боролдом. Шәрифә Ҡәҙимовна, ғәҙәтенсә, бик ихлас ҡаршыланы.

– О-о-о, бик матур күренәһең, аҡыллым, маладис. Ә был ниндәй ҡупшы кулон?

– Иҫке-моҫҡо күн киҫәктәренән әтмәлләп алғайным шунда...

– Кулон бик матур, һинең зауығың барлығында шикләнгәнем дә юҡ. Әммә мөнәсәбәтең дөрөҫ түгел. Хәҙер исемле-аҡсалы байҙар ҙа һендмейдерҙар ижадын хуп күрә. Ҡулың эш белгәндән оялырға ярамай. “Әтмәлләгәйнем иҫке-моҫҡо”, имеш. Үҙ хеҙмәтең менән ғорурланып, башыңды юғары тотоп, тантаналы интонацияла әйтергә кәрәк был турала. Аңланыңмы?

– Мотлаҡ шулай итәсәкмен, Шәрифә ханым!

– Әйткәндәй, гел һорарға уйлайым да, форсаты сыҡмай. Һинең һынлы сәнғәтфәлән буйынса махсус белемең бармы әлеү?

– Ике йыл модельер һөнәренә уҡып маташҡайным. Сәнғәт тарихын өйрәнә торғайныҡ... – Шәрифә апайҙың ҡарашында шелтә тойоп, айнып китәм. – Ой, ғәфү, хәҙер төҙәтәм. Маташманым, ә уҡыным. Төрлө ижади конкурстарҙа ҡатнаша торғайным. Үҙ алдыма күп уҡыным, әле лә төрлө баҫмаларҙы даими күҙәтеп барам. Тик хәҙер ҡулға энә генә тотҡом килмәй. Бөтөнләй.

– Нишләп улай?

– Әллә... Нисектер үҙемде алданған һымаҡ тоям. Әллә ниндәй ялған хыялдар булып сыҡты. Алданылар... Бойомға ашманылар...

– Нишләп ашманы? Һин иң беренсеһенән башла. Кем булырға теләгәйнең?

– Әйтеүе лә көлкө... – Икеләнһәм дә, һөйләргә булдым. Ысынында иһә йәндәй күргән Рушаннам да белмәй был хаҡта. – Балерина булғым килә ине... Бер заман “Сыңрау торна” фильм-балетын күрҙем. Күрҙем дә һушым китте. Минең дә шулай ҡанатһыҙ ҙа көйө осҡом килде. Үҙ алдыма аяҡ остарында бейеп маташам... Был хыялым баштан уҡ өмөтһөҙ ине, әлбиттә. Беренсенән, мин унда балет өсөн “ҡарт” та инем. Икенсенән, балет түгел, ябай бейеү түңәрәге генә лә эшләмәгән төпкөл ауылда тыуғанмын. Шунан... ябайыраҡ хыял тыуҙы. Сәхнәлә осоп йөрөһәм, илаһи заттар өсөн болоттай, күбәләктәй затлы-нәфис күлдәктәр теккем килде. Шул серле донъяға нисек тә яҡынлашҡы килә ине, нисек тә... Аҙаҡ әхирәтем менән уртаҡ хыялға биреләдек. Үҙебеҙҙең театр-студия, тип әйтәйемме... Ҡыҫҡаһы, костюмдар уйлап сығарып, хәрәкәттәр ҡуйып, показдар ойоштороу ине уйҙар. Йәнәһе, ул прическа-макияжға яуап бирә, ә мин – костюмдар һәм хореографияға... Әммә яҙмыш әллә нисек боролоп...

– Ә ниндәй мауығыуҙарың бар ине?

– Мауығыуҙар ни... Төрлөһө булып алды. Бер шулай георгиндар үҫтерергә елкендем. Кешеләрҙән дә йыйҙым, почта аша ла алдырҙым. Ниндәйе генә юҡ ине! Бер егермеләп төргә еткергәнмендер. Өйөм күмелеп тиерлек ултыра ине инде. Тәүге сәскәләрен атҡан ғына мәл... Август урталарында ҡырау килтереп һуҡты. Өйөмдөң ҡап-ҡара үле сатыр-соторҙар араһында ултырыуын күреп, күңелем өшөнө. Шунан бирле сәскә үҫтереүгә ҡул һелтәнем.

– Ул бүлбеләрҙе ҡаҙып алып, икенсе йылына ла үҫтерһәң булмай инеме? Ҡайҙа һиндә сәм тигән нәмә?

– Ул уй башҡа ла инмәне. Теләмәйһегеҙ икән, мин дә һеҙҙе теләмәйем, тинем дә ҡуйҙым.

– Артыҡ көслө “теләйем” һәр саҡ “теләмәйем”гә әйләнә, ивет. Нимәнелер

көсәнеп-көсәнеп үҙеңдеке итергә теләйһең, ә ул шул тиклем ныҕыраҡ килеп сыҡмай. Етә бер көн – һин инде иң көслө хыялыңды күрә алмаҫ дәрәжәгә етәһең...

– Шулай шул, Шәрифә апай... Нишләп улай һуң? Нәфсем артыҡ ҙур ҙа түгел кеүек, ә барыбер... Бер теләгем дә ашмай. Уның ҡарауы, бәхетһеҙлектәр... Улары инде башыма биҙрәләп ҡойола...

– Ой, Тамараҡай... Минең йәшкә еткәс, һин әлеге мәлеңде һағынып, яратып иҫкә аласаҡһың. Сөнки әле һин сәләмәт, матур, көслө һәм иң мөһиме – йәшһең.

Мин иҫәр кеше кеүек йылмаям. Шәрифә ханымдың һүҙҙәренә, әлбиттә, тамсы ла ышанмайым. Ул да был турала белеп тора. Ололар барыһы ла бер иш: йәшлекте ышанмаусылыҡта һәм аҡылһыҙлыҡта ғәйепләй. Шулай уҡ йәштәр ҙә бер иш: һәр ваҡыт ололарҙы бер нәмә лә аңламауҙа ғәйепләй.

– Әйткәндәй, һин теге былтырғы миссияңды үтәнеңме? Таныштыңмы Сагитович иптәш менән?

– Иптәш түгел, әфәнде. Үтәмәй ни... Әле ауылда төҙөлөштөң ҡыҙған мәле. Тағы ярты йылдан цех үҙ эшен башлар, тип көтөлә. Тимәк, ярты силсәүит халыҡҡа эш урындары буласаҡ...

– О-о-о, ниндәй официоз... Күрәһең, һин тағы ярыҡ ялғаш янында. Тағы эшһеҙ ҡалдыңмы?

– Маңлайға яҙылғанмы әллә? Бәлки, ҡалған яҙыуҙарын да уҡып бирерһең мин томанаға?

– Унынһын аҙағыраҡ. Ә Сагитовичты нисек "һындырҙың" һуң? Нисек "зацепила"?

– Ул бит минең тәүге мөхәббәт булып сыҡты! Һөйләмәнемме ни?

Яратам ошо әртистәрҙең эмоциональ йөҙҙәрен. Шәрифә апайҙың ҡаштары матур һикереп китә, күҙҙәре түңәрәкләнеү түгел, хатта "шаҡмаҡлана" ала...

– Туй, өйләнешеү, ғаилә кеүек темаларҙы беренсе ул башланымы, һинме?

– Ул.

– Тимәк, ул һине ҡатыны итеп күҙ алдына килтерә алған. Ир-егет ваҡыт уҙғарырға ғына йөрөгән ҡатын-ҡыҙ менән бер ваҡытта ла был темаға һөйләшмәй.

– Ысынмы? Бына ғәжәп.

– Ысын. Ә һиңә уны ҡойроғонан шаҡара тотоп эләктерергә нимә ҡамасауланы?

– Ҡурҡыу. Йәшлек дыуамаллығы менән миңә өйләнер ҙә, бөтә яҡындары, туғандары кәмһетә, "суҡый" башлаған, һыуыныр, тинем.

– Ә улар һине кәмһетә инеме?

– Этем белһен, танышып өлгөрмәнем. Әммә яҙмышым шундай булғас, ҡайҙа ҡасаһың? Мин бит үҙемде белә-белгәне кәмһенеп үҫтем. Аҙаҡ, кейәүгә сыҡҡас та, шул уҡ хәл ҡабатланды. Сәғитович ғаиләһе менән дә барыбер шулай булыр ине.

– Һинең кәмһенгәнеңде электән һиҙә торғайным, тик сәбәбен аңлай алмайым. Һин – бына тигән кешеһең. Булдыҡлыһың, һәләтлеһең, намыҫлыһың... Төҫөңдө әйтеп тә тормайым – бар яҡтан килгән икәнде үҙең дә белә-күрәһеңдер...

– Күрәм, беләм, әммә тоймайым. Мин бөгөнгө көнгә тиклем үҙемде тик Артыҡбикә исеме аҫтында ғына тойҙом. Ни бары Артыҡбикә итеп... Быйыл килеп ул исемде миңә ата-әсәйем биргән икәнен белдем. Ныҡ ауыр булды кисереүе...

– Кисерҙеңме?

– Әлләсе... Кисерҙем, ғәфү иттем һымаҡ. Тик барыбер асыу килә. Ярай, исем – исем инде. Әллә ниндәй холоҡ, әллә ниндәй темперамент биргәндәр бит. Ваҡытында аҡыллы кәңәш итә белмәгәндәр. Шунда уҡыуыма, артыма тибеп булһа ла, ҡабат ебәрһәләрсе?!

– Һаман шул уйҙар менән йәшәгәс, тимәк, кисермәгәнһең. Шулай ҙа һинең уларға үпкәләрлек урының юҡ. Хәҙер дәлилләйем. Һине иң беренсе күргәс тә тәүҙә бик ҡупшы, һомғол буй-һыныңа иғтибар иттем. Аҙаҡ камил, нәзәкәтле йөҙөң иғтибарҙы тартты. Был бит һиңә – атай-әсәйең бүләге. Үҙ-ара әллә күпме ризаһыҙлыҡтары булһа ла, һине донъяға яралтҡанда улар һөйөү йәлләмәгән. Ә кәмһенеүеңдең сәбәбе – тирә-яҡ мөхиттә, әйтергә яраһа, провинция холҡонда. Юҡ, бүлдермә, һинең ауылың матур, кешеләре һәйбәт икәнен, яҡламаһаң да, аңлап торам. Һинең кеүек бер һоҡланғыс затты биргәндәр икән, әлбиттә, ул – иҫ киткес төбәк, бәхәсһеҙ. Әммә минең мәҙәни кимәл хаҡында һүҙ йөрөткөм килә. Мин, һинең телмәр ҡеүәһә ҡарап, кәм тигәндә аспирантура тамамлағандыр, тигән фекерҙә инем. Һин һәр өлкәлә лә мәғлүмәтле, фекер даирәң киң. Һин меццо-сопрано тауышты колоратураһыҙынан да айыраһың. Линотипия менән линогравюраны бутамайһың. Вольтер менән Вальтерҙы ла, Стендаль менән Сталь айырмаһын да... Һин үҙ мөхитеңдә йәшәһәң, эргәңдәге барыһын да интеллектуаль кимәлең, эрудицияң менән генә түгел, фекер оригиналлеге менән дә һоҡландырыр инең. Ә ауыл-провинцияла аҡыл башҡа үлсәмдәрҙә үлсәнә. Һинең “Онегин”ды ятҡа һөйләүең уларҙа көлкө генә тыуҙыра. Сөнки унда һыйыр тотоу-тотмауың, бесән әҙерләү-әҙерләмәүең, көҙөн ит йыйыусыларға булдыра алған тиклем юғарыраҡ хаҡ менән һата алыуың мөһимерәк. Донъя көтөү, етеш йәшәү кимәлеңә ҡарап, һинең аҡыл ҡеүәң хаҡында фекер йөрөтәләр. Әгәр һин, нәфис буй-һының сәбәпле, салғы, һәнәк-тырма тотмайһың икән, боҙло һыуҙа малдың эсәк-ҡарынын сайҡап йыумайһың икән, һин – йыбытҡы, бер нәмәгә лә эшкинмәйһең. Шулай түгелме ни? Һин, әлбиттә, ауыл ҡатындары өлөшөнә төшкән бар эште лә эшләйһең, шикләнмәйем. Тик һин уға ғына риза түгел. Башҡа бисә-сәсә менән кем нимәне, ни хаҡҡа алған, кем кем менән талашҡан, кем туҡмасты нисә йоморҡаға баҫа, кемдең ҡоймағы йоҡараҡ, кемдең самогоны ҡатыраҡ һ.б. шуның һымаҡ тормоштоң ваҡ-төйәге хаҡында мөһим мәсьәләләр хәл иткәндәй ҡиәфәт менән гәпләшеп ултыра алмайһың. Әлбиттә, улар ҙа быны тоя. Тимәк, һин үҙеңде уларҙан өҫтөн тояһың, тәкәбберһең! Тиҙҙән барыһы ла һине мөрхәтһенмәүен йәшермәй. Эргәләгеләр ситкә типкәс, әлбиттә, һин, аҡыллы кеше булараҡ, сәбәпте үҙеңдән эҙләйһең. Һәм күпселектең фекере өҫтөнгә сыға – шулар күҙлегенән сығып, үҙеңде эшкинмәгән һәм етешмәгән тип уйлай башлайһың. Уй ул шундай көслө, – үҙ-үҙеңде тотошоң уйға буйһона. Башҡалар инде һинең тап шундай йүнһеҙ булыуыңа шикләнмәй. Быны, беләһеңме, нимә менән сағыштырып була? Күҙ алдыңа килтер: мәҫәлән, торнаны. Улар үҙ мөхитендә, тәбиғәттә бейеһен – иҫ киткес гүзәл, һоҡланғыс күренеш! Ә ауылға, һарайға килтереп япһаң, нимә була? Ни ашарға ите юҡ, ни мендәргә йөнө юҡ! Көн һайын йоморҡа һалған тауыҡ ул ғорур ҡоштан мең ҡат артыҡ һәм файҙалы! Бына һин дә шулай – үҙ мөхитеңдә булмағас, үҙеңдең ысын баһаңды аңламайһың. Ябай кешегә көмөш менән алюминийҙың бер айырмаһы ла күренмәй. Ҡиммәтле металдың һиммәтен оҫта ювелир ғына айыра. Ауыл кешеһенә ҡара аҡыл, хәйләкәрлек килешә. Ә һиңә үҙ мәнфәғәтеңде яҡлау хас түгел.

Сәғитович менән булған хәлде генә ал. Һин бит уның менән осрашыуҙан үҙеңә әллә күпме файҙа һыға алыр инең. Уның бер шылтыратыуы етер ине – һине эштән сығарыу түгел, хужаның йомшаҡ креслоһына ҡәҙерләп ултыртып ҡуйырҙар ине. Ә һин бөтә ауылдың киләсәген уйланың да үҙеңде оноттоң. Әгәр һеҙҙе көслө хистәр бәйләмәгән булһа, һин, ике лә уйламай, унан бағымсы яһар инең. Тик был уй һинең башыңа инеп тә сыҡмай. Юҡ, алйот булғаның өсөн түгел. Һин – ныҡ, бөтөн шәхес. Берҙән-бер мөхәббәтеңдең һөйәркәһенә әйләнеү – үҙеңде, үҙ хистәреңде ваҡлау, китекләү булыр ине. Уның тормош юлдашы булып, кисерәсәк шатлыҡтарын ғына түгел, бәлә-ҡазаларын да уртаҡлаша алмағас, һирәк-

мирәк түшәк кенә бүлешеүгә һин бер ҡасан да риза булмаясаҡһың. Ризалашыр булһаң, иреңдең вафатына биш йыл тулғанын көтөп тормаç инең, күптән инде донъя көтөргә аҙ-маҙ файҙаһы тейерҙәй ир-егетте йортҡа керетер инең. Эсеү яғына йомшаҡ, тип берәүһен ҡыуып сығарыр ҙа икенсеһенә, өсөнсөһөнә барыр инең. Ә һин по рукам китмәгәнһең, китмәçһең дә. Сөнки, һәр шәхескә хас булғанса, һин кеше фекеренә түгел, үҙ намыçың тауышына ғына ҡолаҡ һалаһың. Һиңә Хоҙай Тәғәлә ысынлап та күп һынау биргән. Алда тағы ла зәһәрерәктәре булыр. Әммә мин һинең намыçыңа хыянат итмәçеңә ышанам. Ул һынауҙы ла үтһәң, мотлаҡ бәхетең асыласаҡ! Шәрифә апайың күпте күргән, ышан. Һинең өйөң яныуына ҡайғырыу түгел, хатта шатланам да. Белгең килһә, ул һинең ситлегең ине. Өйөм, донъям тип, тирә-яҡҡа күҙ ҙә һалмай башлағайның. Ә хәҙер һин ирекле, бер ни ҙә бәйләп тормай – ос та кит, ҡанаттарыңды йәйеп. Үҙ юлыңды тапҡас, аяҡҡа баçҡас, ҡайтырһың төйәгеңә. Башыңды ғорур тотоп ҡайтырһың!

...Автобустағы ике сәғәт башта ҡайнаған уйҙарҙы рәткә һалырға маташып үтте. “Ирекле”, имеш... Әсәй унда сираттағы тәпене әҙерләп ҡуйҙы бит инде. Тыңламаһаң, дошман булаһың, барыр ер ҙә юҡ. Сығып китһәм, тик мәркәздә генә һайлар инем, ә ул бик ҡиммәтле ҡала. Эш, торлаҡ табыу... Был проблемаларҙы хәл итеү өсөн күпме аҡса кәрәк! Ә минең бит әле тамаҡтарын туйҙырырға, өçтәрен бөтәйтергә ике улым бар. Уларҙы кемгә ышанып ҡалдырайым? Ҡалаға уҡырға биреү хаҡында уйлайһы ла түгел. Исмаһам, фатирлы туғандар булһасы... Шулай ҙа Шәрифә апай бер нәмәлә хаҡлы:  тыуған яҡтан, нәçелдән бөтөнләйгә күңелем ҡайтмаç элек, китергә кәрәк. Беҙҙә талантлы кешеләр күп тыуа. Әммә уларға кәмһетеүле ҡараш йәшәп килә. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: берәү бөтә тапҡан-таянғанын хәмер эсеүгә бөтөрә икән, был нормаль хәл итеп ҡабул ителә. Ауылда ундайҙар аҙым һайын, иç тә китмәй. Ә кемдер бөтә тапҡан аҡсаһын үҙе уйлап тапҡан вертолет өсөн запчастар табыуға бөтөрә икән, уға бөтә ғәләм аптырай һәм “иçәр”ҙән һалдыра... Ҡайҙа ул ғәҙеллек? Бөтә ғүмереңде үҙ-үҙеңде юҡ итеүгә, түбән тәгәрәүгә йүнәлтһәң – ғәҙәти хәл. Ә үҙеңде камиллаштырырға, һәләттәреңде асырға тырышаһың икән, хыялдарыңа хыянат итмәйһең икән – һин ахмаҡ һәм кәмһетелеүгә дусарһың! Минең бер апайым бар. Тауыш мөмкинлектәре иç киткес – дүрт октава! Йырсы юлынан китһә, быға опера примадоннаһы булып, сит илдәрҙә балҡып йөрөр ине. Ҡатлы-ҡатлы регалиялары, дан исемдәре булыр ине. Әммә уны ла патриотизм харап иткән.  Ул ябай ғына балалар баҡсаһы йыйыштырыусыһы  булып эшләй. Ситтә уҙған конкурстарҙа дипломдар яулап ҡайта. Ә үҙебеҙҙә... Ни өсөндөр сәхнәне  “һайт-туйт тәритә, тас-биҙрә-кәритә” көйөнә арлы-бирле һупалаған уртаҡул ғына һәләтле мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре  биләп ала... Бына шулай. Апайым хәҙер ҡайҙалыр ҡатнашырға үҙе лә ынтылмай. Уның ҡанаттарын семтей-семтей, ҡаурыйҙарын берәмләп йолҡоп, осмаçҡа мәжбүр иттеләр. Ул хәҙер ағас башында һандуғас булып һайрамай, моңһоҙ тауыҡтар төнәгенән юғарыраҡ күтәрелмәçкә дусар. Кемгә файҙа? Кеше – барыбер ҡаты бәғерле йән эйәһе. Минең ҡәйнәне генә ал. Әллә ҡайҙағы ҡыш булмаған йылы илдә йәшәгән, оло-ҡара йорт хужабикәһенең берәй йәп-йәш егеткә мөхәббәтенең башҡалар тарафынан аңлап ҡабул ителмәүенә, “бахыр”ҙың кисергән “ауырлыҡтары”на ах та ух килеп ҡайғырып, бөтөнләй таныш түгел бәндәләрҙе йәлләп, бөткөһөҙ сериалдарға текләп илап ултыра. Ә эргәһендә генә үҙ ейәндәре атайһыҙ, йортһоҙ, әйтһәм әйтәйем инде, хатта бала саҡһыҙ (!) тороп ҡалһын –  иçе лә китмәç. Ярҙам итеү түгел, етемдәрҙең ауыҙынан йолҡоп тигәндәй алыуын белә. Йорт өсөн күпме судлашырға тура килде, малды әйтәһе түгел – улының етеһен уҡытыр-уҡытмаç ҡыуып алып ҡайтты.  Ә ауылда бер кем дә уның

битенән алмай, оялтырға маташмай. Сөнки “килен кеше – кәм кеше, алабайға тиң кеше”. Бөгөн ире үлгән икән, ҡырҡын да үткәрмәйенсә икенсегә барасаҡ һәм теттереп йәшәүен дауам итәсәк. Рәсим йыйған донъяны икенсе бирәү итектәре менән тапаясаҡ, мөлкәтенән файҙаланасаҡ. Әсә улын юғалтҡанда, килендең рәхәт йәшәргә ни хаҡы бар? Балаһының донъяһының бер өлөшөн генә булһа ла кире ҡайтарырға маташа икән, кем әсәне хөкөм итә ала? Әсәйҙең улын юғалтыу ҡайғыһы менән бер ни ҙә ярыша алмай! Барыһы ла шул позицияла тора һәм ҡәйнәнең ҡылығын аҡлай, яҡлай. Мин гел отошһоҙ яҡта, гел! Ҡайҙа ул ғәҙеллек?

Әлеге ситуацияны ал. Әсәй, үҙенсә миңә изгелек теләп, арыу ғына кешегә бирмәксе. Бер яҡтан, ул хаҡлы: йортһоҙ-йыһазһыҙ, эшһеҙ-килемһеҙ ике балалы бисәне өс-дүрт бүлмәле йорто, урындағы биле нык эшҡыуарға биреү насармы? Етмәһә, ситкә алимент түләмәгән, башҡа вариҫтары булмаған бәндәгә? Ә мин, үҙемдең бахыр хәлемдә, шул тиклем отошло урындан баш тартам. Әсәһенең изгелегенә рәхмәтһеҙлек менән яуап биреүсе ҡыҙҙы нимә тип әйтәһең? Йәмғәтселек – тәбиғи – әсәне яҡлаясаҡ, мине аш менән атҡанға таш менән бәреүсе тип ҡәһәрләйәсәк. Тағы ла отошһоҙ яҡта ҡалам. Беренсе тапҡыр, кеше һүҙенән ҡурҡып, алйотлоҡ эшләгәндә – Рәсимгә кейәүгә сыҡҡанда мин үҙ бәхетем алдында ғына яуаплы инем. Йәшлегемә барып хата эшләнем. Әммә әле, ун йылдан һуң тырмама ҡабат баҫмаясаҡмын – яратмаған кешегә бармаясаҡмын. Был ғәҙел булмаясаҡ, ул әҙәмгә ҡарата ғәҙел булмаясаҡ. Ниңә ул үҙ көсөн, байлығын, ғүмерен сит балаларға, үҙен бер ҡасан да яратмаҫ ҡатынға арнарға тейеш? Был да ғәҙелһеҙлек тәһә. Ә, икенсе яҡтан, мин ниңә ярыҡ ялғаш янында ҡалырға тейешмен? Ниндәй гонаһтарым өсөн? Рәсимгә хыянат итеп, типтереп йөрөмәнем, ғәйбәт сәйнәп кеше араһын бутаманым, кеше әйберенә ҡул һуҙманым, ыҙа-михнәттәремде хәмергә батырманым... Уф, баштар ҡатты. Алтын башлы ғалим-философтар ҙа был донъяны төшөнмәгәнде, мин генә асыҡлап бөтә алмам. Йәшәргә кәрәк, бары шул ғына.

Оло-оло пакеттар тотоп ҡайтып төшкәс, ишеткән хәбәргә иларға ла, көлөргә лә белмәнем. Бер кемгә әйтмәй-нитмәй ҡапыл сығып киткәс, өйҙә юҡлығымды ла белмәйенсә, кейәүләргә килгәндәр, бәй. Һүҙҙең айышын аңлағас та, ике улым ике яҡтан “кейәү балаҡай”ға ташланғандар: “Беҙҙең әсәй йәш, матур, ә һин ҡарт, уны һиңә бирмәйбеҙ, белдеңме!” Теге бахыр, “уландары бигерәк уҫал, дүрт-биш йылдан үҙеңде туҡмарға ла ҡарап тормаҫтар” тип шикләнепме, ҡойроғон һыртҡа һалған.

Быға са “бәпкәләрем” тип ятаҡан балаларымды хәҙер “бөркөттәрем” тип маҡтаным. Яҡлаусым юҡ, тип юҡҡа көйәм – ана бит, бер түгел, ике яҡлаусым, быуынға ла ултырмайынса, мине бәләнән йолорға эшкингәндәр, вәт, әй! Әсәй, әлбиттә, ниәтенән ҡайтмағандыр, әммә бер нисә ай тыныслыҡ булыр. Шул арала берәй ҡарарға килергә кәрәк.

Яҙмыш тигән нәмә арты менән тороп арып китте, буғай, – миңә йөҙө менән боролдо. Йөҙө, нисек кенә сәйер булмаһын, ҡәйнәм төҫөндә булып сыҡты. Бишалты йыллап аяҡ баҫмаған тупһаны, мәңге булмағанса, күстәнәстәр, бүләктәр тотоп аша атланы. Тәүҙә һөйләшеү көсәнеү аша барҙы. Йүнле һүҙ ишетеп өйрәнмәгәс, мин нык һағайҙым. Ә уға выждан борсоуы тәбиғи һөйләшергә ҡамасаулай ине. Йылдар буйы күтәрелгән нығытманы бер сәғәттә һүтеп бөтөүе мөмкин дә түгел. Шулай ҙа уртаҡ ҡайғыртыу – балаларҙың киләсәген уйлау аңлашыуға юл асты.

– Ҡаҡтым, ҡыйырһыттым, килен, бер һүҙең дә булманы, рәхмәт. Һинең алдағы ғәйептәремде кисер. Бала ҡайғыларын күрһәтмәһен үҙеңә. Зиһенем томаланып, нахаҡҡа ла ҡыйырһыттым. Рәнйегән булһаң да, сал сәстәремде хөрмәтләнең – яуап итеп рәнйетмәнең. Рәсимдең рухын мыҫҡыл итмәнең, балаларҙы

ситтәрҙән ҡаҡтырманың. Барыһы өсөн дә рәхмәт. Инде хәҙер тормошҡа сығырға, урынлашырға уйлаһаң – беҙҙән фатиха. Бәхетле бул, балаларыңдың изгелеген күр, тәүфиғыңдан яҙма. Һинән ризабыҙ, фатихабыҙҙы бирәбеҙ. Хоҙай Тәғәлә тәүфиғыңды биргән, инде килеп бәхетеңде лә бирһен...

Өҫтөмдән тау-тау йөктәр ишелеп төштөмө ни... Ҡәйнәмде ҡосаҡлап иларҙай булдым. Фатиха! Бына нимә етмәгән миңә! Бына нимә етмәүе бәйләп тора ата йортона. Мин уларҙан үҙ тормошом менән йәшәргә фатиха, фатиха көтәм...

Яҡшы хәбәрҙәр быны менән генә бөтмәне әле. Ҡәйнәмдең апаһының улы ҡайтып төшкән. Уны мин белмәйем – ул беҙҙең туйға ла ҡайтмағайны, хәрби кеше. Балаларым менән осрашырға, танышырға теләк белдергән.

– Үҙ ваҡытында Рәсимгә ярҙам итмәнем, исмаһам, балаларына ҡулдан килгәнен эшләйем, – ти.

– Төшөргәндәрме әллә?

– Эйе, хәҙер министрлыкта түгел, ниндәйҙер бер гимназиямы-нәмәме директоры, ти.

Рәсим ағаһына бик рәнйей торғайны. Берәүгә килешкән хәрби тормош икенсегә һәләкәтле булыуы мөмкин. Бер нәҫел балалары шулай айырылыр, тип кем уйлаған. Береһе, ана, полковник, икенсеһе иһә, әрменән алып ҡайтҡан күңел яраларына түҙә алмай, үҙенә ҡул һала... Ярар, ғәйебен юйырға теләгән кешегә мөмкинлек бирергә кәрәк. Осрашһындар әйҙә. Өләсәйҙәре бүләк итеп алып килгән кейемдәрҙе шатланып кейеп сығып йүгерҙе ҡолонсаҡтарым. Атай яҡлап туғандарҙың ситләтеүенә үҙҙәрен бик мәхрүм тоялар ине, һәйбәт булды. Әсәйемдең дә йөҙө бермә-бер асылды. Бер ауылда йәшәп, берен-бере ҡунаҡҡа, сәйгә саҡырышып, гәпләшеп йөрөмәү рәхәт тиһеңме ни ҡоҙағый булған кешеләргә...

Бабайҙары менән танышыуға бик ҡәнәғәт булды балалар.

– Әсәй, уҡырға шунда барабыҙ! – тип ҡайттылар.

Киләһе ай документтар юллап үтте. Малайҙарҙың өлгәшеү күрһәткестәре артынан йөрөйһө, комиссия үткәрәһе һ.б. Ҡайнаға ихлас, шәфҡәтле кешегә оҡшаған. Бәғзе берәүҙәрҙе вазифаһынан төшөрһәң, кешегә оҡшап ҡала…

Әсәй башҡаса кейәүгә сығыу хаҡында һүҙ ҡуҙғатып бәғеремде телмәй. Уҡыу йортон ҡарап, документтар тапшырып ҡайтҡас, хатта:

– Ярай, бәлки, улдарың янына үҙең дә сығып китерһең әле. Ҡалала эш табыла, ите-бәрәңгеһе менән беҙ ҙә, ҡоҙағый ҙа ярҙам итә ала… – тип ысҡындырҙы.

Үҙем дә был турала ныҡлап уйлай башлағайным инде. Тик минең мәркәз тарафына ғына юлланғым килә шул. Яҙмышым мәркәздә селпәрәмә килгәйне, шунда бөтәйһә, ғәҙелерәк булмаҫ инеме ни? Мәшәҡәттәрҙең күплеге менән Рушаннаға ла шылтыратҡан юҡ. Әгәр ул эш белешә торһа, танышлыҡтарын эшкә екһә…

Ҡотто осороп телефон шылтыраны: Рушанна. Тауышы ҡалтырап сыға. Ауыры төштө микән әллә?

– Юҡ, миңә бер ни ҙә булманы… Балалар ҙа имен-аман… Өлкәрем аварияға эләкте… Бер йылһыҙ аяғына ла баҫа алмаҫ, тинеләр. Әллә күпме операция кәрәк. Һөйәге селпәрәмә килгән, ти… Ни генә эшләйем икән, Тамара? Баш ҡатҡан. Ныҡ ҙур кредит алғайныҡ…

– Хужабикәң ярҙам итә алмаймы? Мөнәсәбәтегеҙ яҡшы ине бит.

– Ул бизнесты һатып, Мәскәүгә күсте. Миңә бында эште почти с нуля башлайһы бар. Уныһына түҙер инем… Өлкәрем бәрелгән машина ниндәйҙер крутой шишканыҡы булып сыҡҡан. Армайҙары өҫкә менеп килә, үҙе менән һөйләшеп килешеп булмай… Минең бәйләнештәр ярҙам итерлек түгел. Тамара, ни эшләйем икән? Әллә ауырымды төшөрәйемме икән? Өлкәрҙе лә, балаларҙы ла ҡарарға кәрәк, аҡса табыу минең генә елкәлә була бит хәҙер?..

– Ул турала ауыҙ ҙа асма, Рушанна. Бала үҙ ризығы менән тыуа. Етмәһә, аборт ваҡыты уҙҙы бит һинең. Төшөрәм тип, үҙеңдең зәғифләнеүең бар. Аллам һаҡлаһын. Моғайын, берәй сара табылыр. Туғандарың беләме?

– Уныҡылар белә, ҡәйнә сеңләп-шыңшып нервыны бөтөрҙө инде. Минекеләр белмәй, һин дә әйтмә, йәме. Үҙең беләһең, минекеләр һуңғы һыйырына тиклем һуясаҡ, һуңғы ыштаны ҡалғансы бөтә нәмәне һатып бөтәсәк, әммә миңә ярҙам итмәй ҡалмаясаҡ. Ә минең бурыс ҙур. Уларҙыҡы менән генә йырып сығырлыҡ түгел…

– Уф, Рушанна… Исмаһам, минең дә хәлдәр мөшкөл… Тороп тор… Әле бер нәмә иҫкә төшөп тора, Рушанна, һин, давай, танау төшөрмә. Нисек тә һиңә ярҙам итергә тырышырмын, иҫән булһам.

Үҙем өсөн тигәндә уйҙарҙың осона сыға алмаһам да, Рушанна тигәндә башым компьютер урынына иҫәп-хисапҡа тотондо. Минең дә мал самалы-самалыһын… Килер керем дә күренмәй. Һыйыр менән башмаҡты, берәйһе менән килешеп, һатып ебәргәндә? Әле ит ваҡыты түгел, хаҡы юғары… Туҡта, ә делянка? Өй һала алмаҫым билдәле. Ирҙәр һымаҡ, бура  һатып аҡса эшләй алмайым. Әммә… Әммә ағас эше менән аҡса һуға белгән кешеләрҙе беләм түгелме ни? Бығаса уйлап та бирмәгән диләнкәне юллап алдым. Милицияларҙың иплəп аңлатыуы ярап ҡалды. Тейешле нәмәне ниңә юлламаҫҡа? Етмәһә –  бушлай. Эшҡыуар менән генә оҙаҡ сыйышырға тура килде. Күҙен дә йоммай:

– Илле мең бирәм. – ти.

– Йөҙ илле! – тинем, тыныс һәм ҡаты итеп. Оҙаҡ ҡына бәхәсләшкәндән һуң, уртаҡ фекергә киленде. Әллә ни күп тә аҡса түгел икән ул. Кескәй сумочкама һыйып тора. Исмаһам, тышы ла ҡабармай…

Ҡапыл ғына туғанлыҡ хистәре уянған ҡайнаға ярҙамы менән малайҙарҙы уҡырға урынлаштырғас, шул ыңғайҙан Рушанна янына барырға автобусҡа ултырҙым. Балалар өсөн йөрәк һыҙлай. Ят ер, ят кешеләр, ят мөхит… Ни эшләрҙәр, өйрәнерҙәрме? Йонсоһалар, ни эшләрмен? Кире алып ҡайтырға үҙемдең дә баш тығыр ерем юҡ. Булған аҡсама бәләкәс йорт ала алыр инем, әлбиттә…  Тәҡдим ителгәненә күңелем ятмай, оҡшарҙайына – кеҫә һайыраҡ. Хәйер, иң яҡын әхирәтем ут йотҡанда, минең дә тамағыма аш бармай шул.

– Уф,Тамара, әл дә килдең! – Бәпес йыуатҡандай, Рушаннаның сәсен һыйпап ҡосаҡлап торам. Бөтөнләй төҫө ҡасҡан бисараның. Эсе саҡ ҡына ҡалҡа башлаған. Күҙ төптәре күгелйем. Ни ашай алмай, ни йоҡлай алмай сабауыллап тик йөрөйҙөр инде. Хәлдәрен һорашам.

– Бурысҡа алыр ерҙән алып бөттөм. Ике операция булды. Реабилитация тигәне бик оҙаҡҡа һуҙылыр, тиҙәр. Ҡайнымдар, шыңшый-шыңшый булһа ла, машиналарын һатты. Теге бәндәгә ярты бурысты түләнем. Тик бына кредитты ҡапларға ғына хәлдән килмәй.

– Ниндәй кредит һуң ул? Фатирыңды әйтәһеңме?

– Юҡ, фатирға түләп бөтә яҙғайныҡ инде.  Эй, Тамара, һиңә һөйләмәнемме ни? Хужабикә бит бизнесты… миңә һатты! Әҙерәк йыйған аҡса бар ине. Фатирҙы залогҡа һалып, кредитҡа аҡса алдыҡ банктан. Өлкәрҙе, үҙең беләһең, ике ерҙә аҡсаны ҡайырып эшләне, шуға икеләнмәнем дә. Хәҙер килеп– шундай фажиғә… Фатирһыҙ ҙа, бизнесһыҙ ҙа ҡалам бит. Тамара! Ней Өлкәрем шундай хәлдә…

Бына һиңә мә! Миңә ярҙам итә алған берҙән-бер кешем ни хәлгә тороп ҡалған!

– Бизнесың  таралып төшмәгән, ниңә ҡайғыраһың? Бығаса уңышлы эшләгәндә, дауам итә алмам тиһеңме ни?

– Әйттем бит, теге шишкаға тағы  йөҙ мең түләйһе бар. Йәнә Өлкәрҙе дауалауға буйтым аҡса оса. Зәғиф ҡалдыра алмайым да инде мин уны? Авария

арҡаһында банкка иғәнә түләүҙе кисектергәйнем, хәҙер улары миңә йыртҡыстай ташланды. Ҡыҫҡаһы, бизнестың доходы бинаны арендалауға, хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡына, косметик материалдар алыуға, банкка иғәнә ҡайтарыуға саҡ етә. Теге хайуан көндән-көн сумманы арттыра бара, әйкәйем. Ә миңә ғаиләне аҫырарға кәрәк, мәктәп тә хәҙер ике балаға аҡса һура башлаясаҡ. Әле мин шундай ситуацияла, Тамара, ҡыл өҫтөндә генә торам. Әгәр аренда хаҡын, йә косметик материалдар хаҡын, йә электр хаҡын арттырһалар – бөттөм, тәгәрәйем аҫҡа. Унда инде эш хаҡын тотҡарлаясаҡмын. Оҫталарым конкуренттарға берәм-берәм ҡаса башлаясаҡ. Үҙҙәре артынан клиенттарҙы переманить итәсәктәр. Унда инде банкка процент түләй алмаясаҡмын, улар фатирҙы тартып аласаҡ…

Ҡот осҡос. Рушанна – минең сибәр, аҡыллы, һәйбәт әхирәтем – өс бала, зәғиф ир менән урам буйында тороп ҡаласаҡ! Ҡот осҡос! Дуҫыма түгел, дошманыма ла ундай яҙмыш теләмәҫ инем мин. Был ситуацияла мин килтергән аҡса – батып барған кешегә һалам бөртөгө ырғытҡан һымаҡ ҡына инде. Исмаһам, теге шишкаһына бурыс биреп бөтөрләк булһасы.

– Беләһеңме, Тамара… Һиңә ярҙам кәрәккәндә, булған аҡсаларымды бирмәгән өсөн Хоҙай язаланы микән әллә мине? Өйөң янғас, уйланып та ултырғайным, Өлкәр менән дә кәңәшләштем. Ул: ”Улай ярҙам иткең килгәс, лутсы бизнесыңа компаньон итеп ал. Мохтажлыктан да тартып сығарырһың. Үҙеңә лә, декретҡа киткәс, ышанıслы кеше кәрәк буласаҡ”, – тине. Балыҡ биргәнсе ҡармаҡ бирһәң, арыуыраҡ түгелме ни? Уйлап ҡараным, килештем. Һиңә сюрприз әҙерләй инем, ә ул бына ниндәй сюрприз килеп сыҡты… Мин һине өйлө итә ала инем, ә хәҙер үҙем өйһөҙ ҡалыу ҡурҡынысында. Тамара, йә әйт әле берәй һүҙ, йә тот та әрлә.

– Әрләргә башҡа ла килмәнесе. Ярар, өй алып бирер инең, ти. Һиңә бурысты нисек ҡайтарырға тип, ҡара ҡайғыларға батҡан булыр инем. Ни арыу аҡса килерлек эш юҡ, ни бай ирем юҡ, тигәндәй… Юҡ, Рушанна, Өлкәр шәп кәңәш биргән. Балығы кәрәкмәй, лутсы ҡармаҡ эшләргә өйрәт.

– Тимәк, мин яңылышмағанмын, тип уйлайһың?

– Моғайын. Мин дә хаталанмайымдыр… – Уға пачка-пачка аҡса тотторҙом. – Ғәфү ит, ошонан башҡаһы юҡ.

Хәҙер инде Рушаннаның күҙе шаҡмаҡ.

– Һин нимә, бетеңде һатып байыныңмы әллә, урларға ҡулыңдан килмәй-килеүен…

Ҡыҫҡаса ғына аҡсаның айышын һөйләп бирҙем.

– Тормош килтереп терәһә, һин дә өҙгөс кенә икәнһең, Тамара, маладис. Минең өсөн күҙ терәп торған нәмәңдән дә яҙғас, былай итәбеҙ…

Шулай итеп, уйламағанда-көтмәгәндә, мин матурлыҡ салонының администраторы булып киттем. Башта эш хаҡы хаҡында уйларға ла мөмкин түгел ине, әлбиттә. Нисек тә конкуренция диңгеҙендә батмаҫҡа, “кәмә”не һаҡлап ҡалырға кәрәк. Өлкәрҙе йорт тәрбиәһенә ҡайтарғансы, Рушаннала йәшәп торам, тип хәл иттек. Минең аҡсалар теге “крутой”ҙың кеҫәһенә кереп ятты. Тәгәрмәс эсендәге тейен кеүек йүгергеләп, шау-шыулы ҡала тормошонда әйләнсекләүгә, ауылдан мине таптыра башланылар. Юҡ ваҡытты бар итеп, ауыл яғына ыңғайларға тура килде. Бер ай. Ни бары бер ай, ә минең тормош аҫты өҫкә килде. Өҙөлөп һөйгән тауҙарымдан, урмандарымдан ҡутарылып сыҡтым да киттем. Ҡанатымды йәйеп, ҡурсалап торған улдарымды әллә ҡайҙа ебәрҙем. Дөрөҫ эшләнемме икән? Белмәйем. Ауылда ни, ҡалала ни – барыбер кеше тупһаһында йөрөү, барыбер бурыс ҡапларға аҡса еткерә алмау. Айырма юҡ та һымаҡ, бер яҡтан. Икенсе

яҡтан... Икенсе яҡтан, үҙемде бик кәрәкле кеше итеп тойоуым, бер ни тиклем ҡотҡарыусы ролендә йөрөүем күңелгә рәхәтлек бирә. Ял көндәрен күрелмәһә лә, элекке шикелле бойоғоп, тынғы тапмай йөрәкһеүем юҡ. Рәхәтләнеп йоҡлайым, яҡшы ашайым, кәйефем һәр саҡ күтәренке... Рушаннаға ла төшөнкөлөккә бирелергә ирек ҡуймайым. Ҡайһы саҡ көлөп тә ала: "Беҙ ролдәребеҙҙе алмаштыҡ, буғай. Элек мин һине тартҡылай торғайным. Хәҙер һин – мине..."

Өйҙәгеләр менән бер-бер хәл булдымы икән, тип борсолһам, силсәүит эҙләтә булып сыҡты. Райондағы ниндәйҙер контора таптыра, ти. Ғәжәпләндем, шулай ҙа биргән адрес буйынса эҙләп киттем. Нотариус булып сыҡты. Барлы-юҡлы гонаһтарымды барлап сыҡтым. Мираҫ мәсьәләһе буйынса ҡайны-ҡәйнәләр менән хәлдәр асыҡланып бөткәйне, буғай. Инде янған өйҙөң хаҡын түләтмәксе микән әллә берәй әкрәбәләре, тәүбә-тәүбә... Ләкин ишетәһеләрем уйлағандан да шаҡ ҡатырғыс ине. Баҡтиһәң, мин... апаруҡ ҡына милек хужаһы икәнмен! Миллионерша!

Күктән төшкән байлыҡты миңә... Мөнөй әбейем ҡалдырған булып сыҡты. Юғары пенсия алалыр, тип фараз иткәйнем-итеүен... тик ҡиммәтле ҡағыҙҙарға һалынған булыуын?! Нисек итеп ул төпкөлдә ятҡан әбейҙең илдең байтаҡ өләшөн төп башына ултыртҡан "ваучер" тигән нәмәне ваҡытында дөрөҫ файҙалана белгәненә ышанырға? Ул бит нотариусты ла саҡыртып, кәрәкле документтар эшләтә белгән!!! Миңә инселәнгән конверт эсендә бер генә һөйләм: "Һин үҙең – бәхет!" Башҡа ҡапыл ишелеп төшкән информациянан шаңҡып, ауылға ҡайттым. Әсәй ҡарсыҡ минең бер баҡса бәрәңгемде лә ҡаҙҙырып ҡуйған.

– Сығып китеүең ошомо, әллә ҡайттыңмы? – ти.

– Һин ҡайһыһын теләр инең? – Һорауға һорау менән яуапланым.

*– Кеше булъан кешелә*
*мең кешенең эше бар.*
*Кеше булмаъан кешелә*
*кешенең ни эше бар?*

Әсәйемдең фәлсәфәүи шиғырҙар белеүен бөтөнләй ишеткәнем юҡ ине, хатта аҙап ҡалдым. Шуның һөҙөмтәһендәлерме, үҙемдән дә туҙға яҙмаған һорау сыҡынды:

– Әсәй, ә һин теге ваучер тигән нәмәләрҙе нимә эшләттең ул?

– Эй-й, аны... Шул "Восток" тигәндәре алданы лаһа ярты ауылды... Әй, туҡта... Һинекен бит Мөнөй инәй инәлеп-ялбарып һорап алды, буғай. Әллә, ҙурайғас үҙенә бирәм, тинеме... Нимәлер әйтте, онотҡанмын.

Аһ, Мөнөй әбей!.. Эх, Мөнөй әбей. Баш китерлек эштәр ҡылырлыҡ йөрәк тә булған үҙеңдә! Йөрәк тә булған, баш та! Әрәм генә иткәнһең ғүмереңде... Әллә кем булып, ил инәһе булып йөрөргә лайыҡ кеше булғанһың һин! Тик үҙең генә ваҡытында аңламағанһың... Бәлки, мин дә ҙур-ҙур эштәр атҡарыр өсөн тыуғанмындыр, тик үҙем һаман аңламайымдыр? Нимә тине әле Шәрифә апай: "Ҡанатыңды бар мөмкинлегенә йәйеп ҡағырлыҡ иркенлеккә сыҡмағанһың, шуға үҙеңде килбәтһеҙ өйрәк бәпкәһе кеүек тояһың..."

Шулай ҙа нимә эшләргә миңә? Был күктән төшкән байлыҡ бит бөтә проблемаларымды хәл итә. Янған нигеҙемә яңы йорт күтәреп, акцияларҙың процентына ай һайын зарплата алыусыларҙан күберәк аҡса алып, типтереп йәшәй алам... Улдарыма ялдарын өйгә ҡайтып уҙғарырға мөмкин. Әсәй ҡырына, йорт йылыһына һыйынып... Әлеге кеүек кеше мәрхәмәтенә күҙ төртөп йәшәү түгел инде. Бер туған апаһының улы Рәсимгә ярҙам итмәгән әҙәм уның улдарын ҡанат аҫтына оҙаҡҡа һыйындыра алырмы? Ай-һай, шикле. Яндарына күстәнәстәр тейәп барып килергә кәрәк... Әгәр ҙә етемәктәремде ул-был йәберләүҙәре

тойолһа, алып ҡайтырға! Хәҙер инде әҙәм бахыры булып йәшәргә түгел, мөмкинлектәр бар…

Кесе ҡолонсағым нескәрәк күңелле, хислерәк шулай ҙа. Күҙҙәре шәмәреп тора һымаҡ. Олоһо ҡатҡыл. Ҡустыһына ла ебеп төшөргә ирек бирмәй. “Барыһы ла яҡшы, әсәй,” – тип кенә тора. “Һағынмайһығыҙмы, ҡайтҡығыҙ килмәйме?” – тиеүемә:

– Түҙәбеҙ, түҙәсәкбеҙ. Беҙҙең ҡайтыуҙан үҙебеҙгә лә, ауылыбыҙға ла бер файҙа юҡ. Беҙ үҫкәс, һөнәр алғас ҡына ҡайтабыҙ. Ауылыбыҙҙы матурларға, байытырға ҡайтырбыҙ. Һин, әсәй, беҙҙең өсөн борсолма. Һиңә ҡыйын булһа, беҙгә лә ҡыйын. Һиңә рәхәт булһа, беҙ ҙә шат, – тип яуапланы.

Әсәйҙең һүҙҙәрен фатиха итеп ҡабулларға була, улымдыҡын да. Улдарым эргәһенән туп-тура тағы мәркәзгә юлландым. Мин булмаған өс көн эсендә бында – мәхшәр. Рушаннаны дауаханаға һалып ҡуйғандар. Артыҡ көсөргәнештән ауыры түбәнәйгән. Башланғыста уҡыған ике ҡыҙ бала фатирҙа япа-яңғыҙ ҡалған. Икеһе ике яҡтан ҡосағыма һырылды. Ҡурҡышып бөткәндәр, бисараҡайҙарым. Улар миңә үҙемдеке һымаҡ. Инде нисәнсе тапҡыр Рушаннаға көнләшеп ҡуям. Минең дә ошондай ҡыҙым булһа, наҙларға өйрәнгән булыр инем, моғайын. Ана бит, әхирәтемдекеләр өсөн генә лә борсолоп йөрәгем сығып бара. Хәлемдән килһә бөтә килер бәләләрҙән дә ҡурсалап торор инем.

Әлдә бер көнгә һуңырaҡ килмәгәнмен. Ике оҫтабыҙ эштән сығырға ғариза биргән. Осто-осҡа саҡ ялғаған мәлдән файҙаланып, конкуренттар юғары хаҡҡа әүрәтә башлаған икән. Белгестәрҙең яҡшылары ғына йыйылғайны шул салонда. Урынлашҡан урыны ла уңайлы – үҙәктә. Бина хужалары аренда хаҡын күтәргән, етмәһә. Бер проблема килһә, ҡапҡанды киңерәк ас, әтеү сираттағылары емереп ҡуйыр. Минең алдыма тағы еңел булмаған һайлау килеп баҫты. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ниңә миңә ошо предприятиеға көс һалырға? Уның хужаһы түгелмен, уға мохтажлыҡ та юҡ хәҙер. Ҡулда аҡса бар, әйҙә, йорт һатып ал да үҙең теләгәнсә йәшә. Шәхси тормошто яйға һалыуҙы уйлаһаң да гонаһ түгел. Йәш бит әле мин. Ғүмер буйы үҙ хыялдарымдың боғаҙына баҫып йәшәнем дә һуң? Инде хәҙер теләгәнемдә кейеп, теләгәнемдә ашап, үҙ көйөмә йәшәргә хаҡым юҡмы ни? Әхирәтемә ярҙам ҡулы һуҙҙым, һуҙманым түгел. Әле бизнесы таралып төшмәҫ элек, берәйһенә һатып ебәрһә, ирен дауаларға ла, балаһы тыуғансы йәшәргә лә аҡсаһы була. Тимәк, уның алдында ла йөҙөм яҡты – мохтажлыҡта ташлап китмәйем. Ниңә тызырайырға, борсолорға, нервы бөтөрөргә?

Ә икенсе яҡтан… Рушаннаның ғүмер буйы хыял иткәне ине бит ул – шәхси салон. Уны һатып алыр өсөн ал-ял белмәй эшләне. Ире ике ерҙә тир түкте. Аварианан һуң Өлкәре инвалид булып ҡалһа? Тәүбә-тәүбә! Рушанна тағы сит кеше фирмаһы өсөн бил бөкһөн, ирҙең хәйерсе пенсияһына ике ҡыҙ баланы ҡараһынмы? Ә фатирһыҙ ҡалһалар? Күҙ алдыма Рушаннаның мохтажлыҡтан, хәсрәттән башы сыҡмаған тормошо, арып-талсығыуҙан ҡартайған йөҙө килеп баҫты. Ә ҡанаттары һынған ҡошсоҡтай мәхрүм ҡалған ҡыҙыҡайҙар! Был күренеш шул тиклем ап-асыҡ, ысын һымаҡ һынланды – мин хатта тетрәнеп киттем. Ә бит ике ай элек кенә барыһы ла башҡаса ине. Рушаннаның йөҙөнән бәхет балҡып тора, тыуасаҡ балаһы бер өмөт булып йөрәк аҫтында яралған. Шундай һөйкөмлө, бәхетле…

Теште ҡыҫтым. Нисауа, бирешмәбеҙ! Минең мираҫ был проблеманы хәл итергә генә етә ул. Оҫталарҙы ризалатабыҙ. Бинаны һаҡлап ҡалабыҙ. Эш ҡоралдарын яңыртабыҙ, яңы имидж булдырып, косметик ремонт үткәрәбеҙ. Рекламаға ла йәлләмәҫкә кәрәк. Берәй ярты йылдан әлеге проблемалар онотолоп та бөтөр әле. Клиенттарҙы һаҡларға, “үрсетергә” генә кәрәк… Ә үҙем? Ярай, үҙемә

ни… Эшкә рәхәтләнеп барам, оҡшай, ниһайәт, үҙ урынымды таптым һымаҡ. Ә шәхси тормошҡа килгәндә… Мин барыбер Искәндәрҙе генә уйлап, уны ғына һағынып йәшәйәсәкмен. Ниндәйҙер яңы роман эҙләү файҙаһыҙ. Ниңә юҡҡа тыпырсынырға? Быға тиклем нисек хәтирәләргә бәйле рәхәтлеккә риза булып йәшәнем, шулай йәшәрмен әле. Шәрифә апай юҡты һөйләмәй – бүленә алмайым мин. Яраттым берәүҙе, һәм вәссәләм. Булһа – тик ул, булмаһа – бер кем дә. Мин башҡаға риза түгел.

Был ай миңә һынау айы булды, буғай. Ике баланы мәктәпкә әҙерләп ебәрәм, ике дауаханаға ризыҡ-маҙар, дарыу-фәлән ташыйым. Төшкә лә кермәгән ҙур-ҙур суммалар менән эш итәм. Коллектив эсендәге конфликттарҙы ла, клиенттарҙың дәғүәләрен дә юлға һалам. Юриспруденция, психология, мода буйынса даими уҡып барыуым бына ҡасан кәрәкте. Былар миңә нимәгә инде, тип үҙемде битәрләй торғайным заманында. Баҡтиһәң, алған ғилем бер ҡасан да ҡамасауламай икән. Ашарға һорамай, иҫкермәй, күгәрмәй тигәндәй… Тормоштоң был темпынан сәсәп йығылырға тейеш инем һымаҡ. Юҡ бит әй, йоҡларға ғына йығылам. Бер ниндәй төш күрмәй, баҫлыҡмай иҙерәп йоҡлайым да хәл йыйып уянам. Нисектер, Искәндәр тип тә, улдарым тип тә һыҙланмайым һымаҡ. Үҙ әрнеүҙәрем менән йәшәргә ваҡыт юҡ.

… Рушаннаны ай тигәндә сығарҙылар. Өлкәрҙең шәбәйеүе оҙаҡҡа һуҙылды. Эскән-тартҡан кеше түгел, йәш, сәләмәт организм. Нишләп улай ҡатмарлылыр хәлдәре – аптыраҡ. Дилбегәне Рушанна ҡулына тапшырғас, бер-ике көн ял алдым. Улдарыма ла барып әйләнергә кәрәк, ауылды күргәндә лә яҙыҡ булмаҫ. Килеүемә Рушаннаның ике күҙе дүрт булған:

– Тамара, мин ғәйбәткә ышанмай торған әҙәм, үҙең беләһең. Ләкин эштәрҙең торошо шуға мәжбүр итә…

– Ниндәй ғәйбәт, ниндәй торош?

– Коллектив һинең алда ниңә өлтөрәп тора тиһең?

– Өлтөрәйҙәрме ни әле? Бәлки, профессионаллегем өсөндөр?

– Шаярыуға борма. Ирония ла урынһыҙ. Улар бит тәүҙә һине, провинциалка, томана тип, бик мөрхәтһенмәне. Әле ни ишетәм? “Всемогущая” тип ҡушамат биргәндәр. Бик үрҙә ныҡ йөнтәҫ ҡуллы “папигы” бар, тиҙәр. Килгәс тә ишетеп көлгән булдым. Әммә бөтә эштәрҙең яйға һалыныуын, бурыстарҙың бөткәнен күреп, иҫем-аҡылым китте. Тамара, һин минән әллә бер нәмәңде йәшерҙеңме? Әллә Искәндәрең менән аралар яйлымы? Юҡ, насар тип әйтмәйем, Алла һаҡлаһын, юҡ! Киреһенсә, конкуренттарҙың ниңә ҡойроҡ болғай башлауҙары ла аңлашыла. Быға са ашап баралар ине барыһы ла, бөтә яҡтан да… Әммә… Мин һинең ышанысыңдан сыҡтыммы ни? Ни өсөн сер йәшерә башланың?

Рушаннаны артабан да ҡайғыртмаҫҡа була, мираҫ тарихын ҡыҫҡаса һөйләп бирҙем.

– Ох, Тамараҡай… Һин бит, минең намыҫыма ышанып, үҙеңдең хәсрәтһеҙ киләсәгеңде минең киләсәгем өсөн ҡорбан иткәнһең…

Мин яурын ғына һелктем… Башҡа төрлө була алмайым инде, ни хәл итәһең. Ярым-йорто түгелмен. Яратһам – бар йөрәктән, тамсыһына тиклем һығып бирәм. Яратмаһам – тағы шулай…

Икенсе кереүемә Рушанна тынысланған. Берәй ҡарарға килгәндер. Нимә хәл итһә лә, насарға булмаҫ.

Артабан эштәр һәүетемсә тәгәрәне. Ҡуртымға фатир таптым. Ҡыйбатын ҡыйбат, уның ҡарауы, эшкә йәйәү йөрөйөм, төшкөлөккә лә ҡайтып ашарға мөмкин. Ул мөмкинлек менән һирәк файҙаланам: аралашырға кеше күп. Йә эштәге коллегалар менән сәй эсәбеҙ, йә берәй үҙ иткән клиентка менән кафеға керәбеҙ.

Ниңәлер күптәр мине үҙҙәренең “аһ-зарҙарын һыйҙырыусы” итеп һайлай. Ҡайһы саҡ йүнле кәңәш бирә алмаһам да, рәхмәтле булып китәләр. Ниндәй генә тарихтар ишетелмәне! Хет китап яҙ. Ғәләмәт инде ул кеше тигән зат. Үҙҙәренең эстәрен бушаталар, бушаталар… Ә минең ниҙәр кисергәнемде, исмаһам, берәйһе һораһа, ҡыҙыҡһынһа?! Ә бит күптәренең проблемалары, минеке менән сағыштырғанда, уйын ғына… Ярай, Тамара, кешеләргә артыҡ талапсан булма. Әгәр һәр кем фәрештә булһа, улар ерҙә лә йәшәмәҫ ине.

Ямғырҙар менән башланһа ла, ҡыш – ҡыш инде. Яңы йылға яҡынлашҡан һайын донъя ағара башланы.

Яңы йыл. Бөтә кешеләрҙең дә көткән байрамылыр был. Ниңә икән? Миңә ҡалһа, кеше Яңы йылды түгел, үҙенең уға бағлаған өмөттәрен ярата. Кешегә үҙ хистәрен, үҙ кисерештәрен яратыу хас. Байрамға ҡаршы беҙҙең салондың эше икеләтә, өсләтә артты. Оҫталарыбыҙ алһыҙ-ялһыҙ эшләй. һәр береһенең минутына тиклем клиенттары билдәле. Ҡайһы ҡатын-ҡыҙҙың байрамға матурланғыһы, йәшәргеһе килмәһен? Һис һүҙһеҙ, Яңы йылға – яңыса! Ҡайҙа ҡарама – байрамса күтәренке кәйеф, матурлыҡ, йәнлелек һәм сағыу ялтыр донъя.

Рушанна, хужа булараҡ, декрет ялында түгел. Тулғаҡ башланғансы эшләргә иҫәбе. Өлкәренең хәлендә алға китеш бар. Яңы йылды тулы ғаилә менән ҡаршыларға кәрәк, тип ныҡлы инанғандар. Ваҡыттың тығыҙлығына ҡарамаҫтан, барыһы ла корпоратив кисәне уҙғарыу яҡлы. Йола – йола инде. Быға тиклем билдәләгәс, власть алмашынды тип кенә, байрамдан баш тартып булмай. Ғүмеремдә икенсе тапҡыр киске күлдәк һатып алдым. Был юлы кемделер әүрәтер, оҡшар өсөн түгел – үҙем өсөн. Ниһайәт, ҡупшы туфлиҙар ҙа үҙемдеке, үтескә алынмаған. Яңы йылды кем менән, ҡайҙа ҡаршылау тураһында уйланмайым. Хоҙай яҙғаны булыр.

Ҡабалан ғына Шәрифә апай шылтыратты.

– Матурлыҡ индустрияһында һин – минең иң хөрмәтле блатым, – тигән була. – Ҡауырһындарҙың ҡалған-боҫҡанын булһа ла рәткә килтерергә ине.

– Һеҙҙең өсөн иң оҫталарҙың оҫтаһын да бушатырбыҙ инде, – тим.

– Какая деловая, ой, маладис. Шулай, сублимация энергии – великая вещь. Элек булһа, ултырыр инең шыңшып. Үҙеңде йәлләп, яҙмышыңды әрләп. Әле, ана, деловая дама. Энергияң шыңшыуға түгел, эшкә китә. Гел шулай бул.

Ғәҙәтемсә, мәсеткә хәйер һалырға киттем. Йыш уҡ булмаһа ла, керергә тырышам. Бында бит Хоҙай ҡаршыһында исемле иттеләр. Миңә насип бәхет өлөшөмдө татый башланым да, буғай. Бәлки, берәй заман ишем дә осрар. Яңғыҙлыҡ Хоҙайҙың үҙенә генә килешә, моғайын, миңә кеше яҙмышы яҙылғандыр. Ултырған һындар яғына ҡарамай ғына иҫәнләштем дә хәйеремде һалырға йәшниккә боролдом.

– Эй-й, бынау баланан нурҙар һирпелеп тора лаһа! – Тауышҡа һиҫкәнеп, нурлы баланы күрергә була, тирә-яғымды байҡайым. Бала-сағалы әҙәм заты күренмәйсе. Ғөмүмән, бындағы кеше араһында иң йәштәре – мин үә хәйергә доға ҡылып ултырыусы шәкерт.

– Ҡана, яҡынданыраҡ күрәйем әле үҙен, – тарамыш ҡына ҡулдар ап-аҡ ҡына (Рушаннаның зауығы!) дубленкам еңенән тотоп ала. Бәй-бәй, “нурлы бала” мин булдыммы ни ул? Әбейгә, ниһайәт, боролоп ҡарайым һәм саҡ һуштан яҙмайым.

– Мөнөй әбейем!

– И-и-и, балаҡайым-бәбекәйем, әллә минең ауылданмы һин? – Ул бөтөнләй мин аяҡ баҫмаған районды атай. – Ҡушаматымды беләһең. Миңә бит бында мулла ҡушҡан исемем менән генә Миңниә инәй тип өндәшәләр…

Шулай итеп, үҙемә өләсәй таптым. Миңниә инәй мәрхүмә Мөнөй әбейҙән

апаруҡ йәш. Холҡо ла башҡасараҡ: ихлас, һүҙсән, кеше ярата. Өлкәнәйгәнсе ауылда йәшәгән. Балалары күп. Барыһын да уҡытҡан. Ҡартайған көнөндә балалары мәркәздә фатир алып биреп, күсереп алғандар. Эстән уйлап ултырам: улай фатир алырлыҡ булғас, бик ҙур урындаларҙыр инде. Әбекәй үҙе лә йонсоп йәшәүсегә оҡшамай: өҫтөндә кәттә генә кейем, ҡулдарында алтын да көмөш… “Алтын” һүҙен былай ғына ҡушам инде, балдаҡ-беләҙектәре ҡатлы-ҡатлы, күп булғанға. Былай барыһы ла – буталлы көмөш биҙәүестәр. Яңы танышҡан кешеһен алып ҡайтып сәй эсерергә лә ҡурҡмай икән. Ваҡытым самалы булһа ла, ҡыҙыҡһыныуым көслөрәк – киттем артынан. Ысынлап, яҡын йәшәй. Сүп-сар, төпсөк һибелгән подъезд түгел – таҙа, көҙгө кеүек ялтырап ята, йәм-йәшел ағас, гөлдәр үҫеп ултыра... Мәркәздә лә бындай йорттар бар икән, тип ғәжәп иттем. Консьержка тигән әҙәмде кинола ғына күргән бар ине. Дә-ә, әбейең ысынлап ябай әбей түгел, былай булғас. Ана бит, хатта прихожкаһы Рушаннаның фатиры ҙурлыҡ, ай-бай. Балалары нисек ҡурҡмай, әбейҙе яңғыҙын йәшәтә икән? Улай һәр яңы танышын да сәйгә саҡыра башлаһа…

– Ошо йәшкә етеп, яман уйлы бәндәне изге күңеллеһенән айыра алмаһаң, оҙаҡ йәшәүеңә, күпте күреүеңә ни һан?!

Һорауымды ҡысҡырып әйтмәгән инемсе.

– Балаларҙан айырым йәшәһәм дә, улар тарафынан ташланған түгелмен бит. Теге ишек төбөндә ултырған әҙәм ейәнемә ошаҡлап тора. Әле лә хәбәр иткәндер: оҙаҡламай ейәнем йә үҙе килеп сығыр, йә шылтыратыр. Уныһы мине ныҡ ҡурсып тора. Йәшерәк сағында “һин – минең идеал” ти торғайны, эй-й…

– Идеал эҙләп, өйләнмәне лә ҡуйҙымы?

– Юҡ, өйләнде. Килен бик сибәр, белемле. Яҡшы нәҫелдән. Барыһы ла уҡымышлы, урында ултыралар. Миңә лә мөнәсәбәте әйбәт ине. Һүҙем юҡ. Тик… Тик артыҡ тиң булып сыҡтылар, ахыры…

– Бәй, нисек инде артыҡ тиң? “Тиң түгел“ тигәнде ишеткән бар, тигәндәй…

– Нисек аңлатайым инде… Ейәнем үтә ҡатмарлы кеше. Ҡылыҡтарын да тоҫмаллап булмай. Нимә теләгәнен дә аңламаҫһың. Башҡаларҙан күпте талап итә, ә үҙе тойғоға һаран. Ҡыҫҡаһы, ейәнемде аңламайым, әммә ныҡ яратам. Ә киленгә килгәндә… Уның улыҡайымды яратып, уның тормошо менән генә йәшәргә, уны ғына көйләргә, уны ҡояш һымаҡ күрергә теләге лә, халәте лә юҡ ине. Яратырға, ә бигерәк тә минең ейән кеүекте яратырға, бер нәмәгә ҡарамай унан күңелең ҡайтмаҫҡа бик күп көс кәрәк, бик күп. Ә килен эште һайланы. Эш менән анһатыраҡ.

– Айырылыштылармы?

– Минең ҡарашҡа, улар ысын мәғәнәһендә ҡауышманылар ҙа… Нимә инде ул паспортҡа мисәт баҫтырып, туй эшләү? Ҡыҙҙары бар, шуныһы йәл. Килен эше буйынса сит илгә төпләнде. Бала ейәнемдә ҡалды. Ир кеше – ил кешеһе, эшенән ҡайтып кермәй. Ҡыҙы шул өй ҡараусылар ҡулында. Берәй 15 – 20 йәшкә йәшерәк булһамсы, тип йәнем үртәлә. Үҙем бағыр инем.

– Ә үҙенең өләсәй-олатайҙары?

– Э-эй-й, уларҙы… Улары ла эшкә туймай. Әллә ниндәй исемдәр, дәрәжәләр алып бөттөләр, тағы ни кәрәктер… Фән кешеһенә һүҙ әйтеп булмай. Быуынбыуын уҡыусылар, өйрәнсектәр үҫтерҙеләр, ә бер бәләкәс кенә ейәнсәргә ваҡыттары йәл… Әлләсе, беҙ күмәк бала инек. Береһенән-береһе ыуаҡ. Ата-әсәй эштә, шул өләсәй ҡулында үҫтек инде. Итәктән төштөк тә эшкә йәбештек. Уйланып, буҙлап ултырырға ваҡыт булманы.

Был ниңә ейәнен артыҡ күп сурыта әле? Кәләш эҙләй, тимәк. Мине лә юҡҡа ғына алып ҡайтмағандыр, үҙенсә һынамаҡтыр. Артыҡ ҡабаланмайһыңмы,

әбекәй? Мин бит ейәнең кеүек ҡалын кесәле нәсел балаһы түгел, тыштан оҡшаһам да. Затлы кейемде ошо йәшкә етеп саҡ кейгәнмен, унда ла әхирәтем яурынынан һыпырылып төшкәнен генә... Кеше психологияһы минең өсөн билдәһеҙ нәмә түгел ул. Тәүҙә, улың буйҙаҡ булғанда, ниндәй ҙә булһа килен теләйһең. Аҙаҡ, киленең булғас, күҙ асыла: сибәр булһа – уңған түгел, егәрле булһа – төҫө юҡ. Нәселе затлы түгел йә туйҙа ҡоҙалар бүләкте һаран һалған, быныһы ҡайнә йортона ҡорған элмәгән, таҫтамал ҡуймаған. Бик булмаһа, ашҡа һуғанды ваҡлап торамай, һаламлап турай... Баштан үткән инде. Әле, ауыҙымды йомоп йылмайып ҡына сәй эскәндә, минән дә ҡулайлыһы юҡ һымаҡ күренер ҙә ул... Юҡ инде, әбекәй, үҙеңде өләсәй итергә ризамын, әммә ейәнең менән танышыу – юҡ. Кемдеңдер ҡыҙын үҫтерәм тип кенә, үҙ улдарымды үгәй атайҙан ҡаҡтырайыммы? Димләп-фәлән ауыҙ асһа, шунда уҡ кире ҡағасаҡмын, танышмаясаҡмын. Ирһеҙ йәшәп өйрәнелде. Быны бөгөн үк әйтеп ҡуйырға кәрәк, әле үк. Аслан, килен итергә ине ошоно тип ымһынып, өмөтләнеп ҡуймаһын. Кешенең өмөтөн ҡырыуҙан да ҙурыраҡ гонаһ юҡтыр. Минең өмөттәремде күп киҫтеләр, ауырлығын кисереп беләм. Үҙем ундай юлға бармам, тип үҙ-үҙемә биргән һүҙем дә бар.

Ҡабат килергә һүҙ биреп, сығып ысҡындым. Рәхмәтлемен тәҡдиремә, тигән уй һуҡты ҡапыл. Һуңғы айҙарҙа күпме этелергә-төртөлөргә, һүҙ ишетергә, көсһөҙлөгөмдән ғәжиз булырға тура килгән мәлдәр булды. Мөнөй әбей рухына һығындым, уйҙарымда кәңәш һорап ялбарҙым... Бирҙе бит! Ҡайтарҙы ла бирҙе әбейемде. Миңлекәй, Миңниә... Моғайын, күп һанлы туғандарының береһелер. Үҙенең быуыны ла нығынмаған, кимерсәк кенә кәүҙәһенә ошо Миңниәне лә йөкмәп йөрөгәндер... Ипләп кенә һорашырмын әле, белермен. Теләге булһа, Мөнөй әбейҙең яҙмышын бәйән итермен...

Берәй ярты сәғәткә генә иртәрәк сығаһым булған – тығын. Һүҙ ишетермен, тип ҡурҡҡан юҡ та... Берәй клиент менән аңлашылмаусанлыҡ тыуһа, унда булғаның яҡшы. Рушаннаға артыҡ борсолоу кәрәкмәй. Ярай, тығындар шуныһы менән яҡшы: уйланырға форсат тәтей. Шулай ҙа шикселлегем артҡан. Бынау инәй ейәнен һөйләй, тип әллә ниндәй уйҙар уйлап бөттөм. Уның, бәлки, димләү уйында ла юҡтыр. Былай ғына, эсен бушатыр өсөн генә әйтәләр. Ә мин әллә нәмәләргә барып еттем. Ә ҡыҙыҡай өсөн үҙәгем өҙөлдө – уныһы хаҡ. Уның нимә кисергәнен күрәм, тоям һымаҡ. Ул хатта минең үҙем һымаҡ. Ата-әсәһенә кәрәкмәгән бер оронсоҡ. Артыҡбикә. Иҫәпкә бар – һанға юҡ. Бала тип һаналаһың, ә ғәмәлдә барыһы өсөн дә һин – бушлыҡ. Ул өй йыйыштырыусыһы өсөн иһә – өҫтөн алыштырырға, тамағын туйҙырырға мәжбүр итеүсе өҫтәлмә эш. Артыҡ мәшәҡәт. Биш йәшлек, тинеме? Ә бит минең ҡыҙым шул хәтлем булыр ине... Йөрәгем һыҙып китте. Ҡуй, тыныслан, Тамара, әйтте бит Мөнөй әбейем, эргәндә ҡыҙ бала күрәм, тине. Ниндәй әле? Аҡһыл сәсле, ҡап-ҡара күҙле, тигәйнеме? Мин дә уны күрәм һымаҡ. Бигерәк матур, нурлы, һөйкөмлө ҡыҙсыҡ итеп күрәм. Ул миңә оҡшамаған. Кемгә оҡшаған һуң? Бик таныш йөҙ бит! Эйе, ул... Искәндәргә оҡшаған... Ирекһеҙҙән күҙҙәремдән йәш ҡойолдо. Аһ, был күңел! Ниңә һаман булмаҫтайҙы көҫәй? Ниңә бер ҡасан да тормошҡа ашмаҫ хыялдар өйрөлә был йөрәктә?! Нимә-нимә, ә Искәндәр бисә айыра торған кеше түгел. Ул бит айырым бер ҡатын-ҡыҙға ғына түгел, ә уның бөтә нәҫеленә, был никах килтергән престижға, карьераһына өҫтәләсәк таяуҙарына, тағы әллә ниндәй өҫтөнлөктәренә бергә ҡушып өйләнә! Кәм тигәндә ике вуз бөткән, күркәм холоҡло, үҙ баһаһының юғарылығын бик яҡшы белгән ыҫпай ханым итеп күҙ алдыма килтерәм мин уны. Искәндәр яңылыш помадаға буялып ҡайтһа, тыныс ҡына:

– Ҡәҙерлем, был затлы кейемдән помада эҙен бөтөрөүе ауыр, шуға күрә,

ҡыйын булһа ла, сисенгәнсе түҙһен инде, аңлат, – тип кенә ҡуялыр. Ә минең тәрбиә кимәлем түбән: Искәндәргә берәйһе ҡағылып китһә лә, боғаҙын сәйнәрҙәй булып енләнер инем. Бына шулай. Бүлешә алмайым. Аҡсаны, ана, йөҙәр меңләп тә сығарып "һиптем", ә Искәндәрҙе – юҡ. Бәлки, тап шуның өсөн дә ул минеке түгелдер… Килһен ине бер заман шундай көн! «Һин – бәхетем!» – тип ҡабатлаһын ине! Унда мин үҙемдең бәхет икәнемде аңлар инем. Ә былай… Әйтте, Мөнөй әбей, әйтте… "Һин үҙең – бәхет" тине, ә мин барыбер аңламайым шуны. Минең уйымса, Рушанна барыбер мең тапҡыр бәхетлерәк, сөнки ул яратҡан кешеһенән балалар таба. Ҡатын-ҡыҙлыҡ бурысыңды һөйөклө кешеңә бағышлау – иң ҙур бәхеттер. Балаңды үҙ балаң булған өсөн генә түгел, һөйгәнеңдең ҡаны, уның бер киҫәге булған өсөн тағы ла нығыраҡ яратаһыңдыр… Әллә Искәндәрҙән балаға уҙырға? Иҫәр уйҙарыма көлкө килде. Ҡасандыр тап шунан ҡурҡып, муйынды боғалаҡҡа тыға яҙҙым түгелме? Ә әле тот та яҙмышты кирегә борорға тырай, имеш… Юҡ инде, никахһыҙ баланың бәхете булмай, ә кемде-кемдең, Искәндәр сабыйының бәхетенә ҡул һуҙмаҫ инем барыбер. Үҙ ярама ниңә тоҙ һибәм икән мин? Бығаса бер Искәндәр тип кенә һары һағыштарға бата инем. Ә әле… Ә әле унан тыумаған балаларым өсөн дә йәнем һыҙлай… Нимә ти әле Шәрифә апай: "Уж климакс близится, а Германа все нет"… Ҡатын-ҡыҙ булмышымды онотоп йәшәүемә алты йыл булып килә. Һаулыҡҡа зыян, тиҙәр. Топ-тойоҡтан балауыҙ һығып ултырыуым шул психика ҡаҡшауҙанмы икән әллә?

Ҡуйсы әле, Тамара, үҙ-үҙеңде алдауҙан тыйыл! Башҡалар бер ни һиҙмәһә лә, үҙең бит бик яҡшы беләһең хәҡиҡәтте! Булмай һинең башҡаса үҙ сабыйың, булмай. Ҡыҙ ҙа тыумай, ул да тыумай! Һыу буйына барып та теләктәр теләнем, хәйерҙәр бирҙем, йөккә ҡалғас. Барыбер файҙаһы теймәне. Йән кермәҫ элек үк буйымда сереп йөрөгән. Аптыраным да шул, эсем ерле ҙураймай, тип. Ул акушеркаһын әйтер инем инде… Ҡаралырға барып торам, тикшереләм. Баланың йөрәк тибешен тыңлай. "Тибә" тип яҙып ҡуя картаға. Аҙаҡ беленде: бер айлыҡта уҡ үлгән булған… Мин өс ай буйы ҡыҫыр өмөттәр йөкмәп йөрөгәнмен. Ҡурсаҡтай матур, һөйкөмлө ҡыҙ балам булырға тейешле мәйет киҫәктәрен минән һалҡын, аяуһыҙ тимер-томорҙар менән ҡырып сығарҙылар… Шунда артыҡ тырышып ташлағандарҙырмы, балам менән бергә аналығым да серей башлағанмы, белмәйем. Әммә врачтарҙың хөкөмө: башҡаса әсә булыу яҙмаясаҡ… Ул ваҡытта миңә был мөһим түгел ине. Үҙемдең нимәнән мәхрүм ҡалғанымды уйлап, ҡайғы бәпләп ултыра алмай инем. Өрлөгө һынған нигеҙемде бөтәйтергә, улдарыма ҡалҡан булырға, бөткөһөҙ бурыстарҙан ҡотолорға, яҙмыштың һынауынан бөгөлөп алғанда ла һынмаҫҡа кәрәк ине. Минең яҙмыш китабымдың иң ауыр, иң ҡара биттәре ине ул көндәр. Шөкөр, үтте. Хәҙер бына, ниһайәт, иларға ла мөмкинлек булды, һәм мин илайым. Йәш кенә башым менән тамуҡ ғазаптары аша үткәнем өсөн дә, тыумаған бәләкәсемде һағынып та, әсәй наҙынан мәхрүм ҡалған теге биш йәшлек ҡыҙыҡайҙы йәлләп тә, тағы әллә нәмәләр өсөн дә…

Ә Мөнөй әбей юраған ҡыҙ бала ҡайҙа? Үлем төҫө кергәс, ағинәйҙең яңылыша башлауы ла ихтимал. Юҡ, юҡ… тәне генә бәлйегәйне, ә иҫе ап-асыҡ, зиһене яҡты ине. Минең уның яңылышыу мөмкинлегенә шикләнергә хаҡым юҡ хатта! Ул миңә үҙ-үҙемде эҙләргә мәжбүр итте, хатта арттан этеп тә ебәрҙе. Нәфсем кескәйерәк булһа, ул ҡалдырған аҡсаға өй күтәреп, ауылда тыныс ҡына йәшәп ятыуымды дауам итер инем. Ә Мөнөй әбейем минән күберәкте талап итте, ул рух көсөм барлығына инанды. Һәм әбейем хаҡлы булып сыҡты бит! Кемгәлер йылдар, тиҫтәләрсә йылдар өйрәнеү талап ителгән эшкә төшөнөргә миңә нисәлер ай ғына кәрәк булды. Рәсми рәүештә салон минеке булмаһа ла, барыһы ла миңә хужа, етәксе итеп ҡарай. Шәхсән Рушанна ла. Ә күпме файҙалы

танышлыҡтар, күпме яҡлаусы-таяуҙар булдырҙым? Хәҙерге тәжрибәм, мөмкинлектәрем менән мин юғалмаясаҡмын. Заманында бысраҡҡа иҙергә маташҡандар алдымда ҡойроҡ болғарға рөхсәт һорап инәләсәк әле. Ауылыма ла еңеүсе сүрәтендә ҡайтасаҡмын – эш урыны эҙләп түгел, башҡаларға хеҙмәт итергә һәм эш хаҡы алырға мөмкинлек биргән берәй фирма асырлыҡ булғас. Улдарым да берәҙәк булып йөрөмәҫ. Аталарының нигеҙен улар өсөн һаҡлаясаҡмын. Нисә йыл үтер былар өсөн – белмәйем, әммә барыһы ла минеңсә буласаҡ. Хәҙер инде мин үҙемде әһәмиәтһеҙ генә бер зат – Артыҡбикә итеп тоймайым. Бар көсөм, бар, һиҙәм мин уны. Бының өсөн Мөнөй әбейемә бурыслымын. Тик бына ҡыҙ бала… Юҡ, яҙмышыма Мөнөй әбейгә ике тамсы һыу кеүек оҡшаш кеше юҡҡа ғына килеп кермәгәндер. Барырға, асыҡларға кәрәк – туғанмы улар? Әгәр туған икән, тимәк, Миңниә әбейҙең бүләсәре – Мөнөй әбейемдең дә нәҫеле, ҡаны. “Үҙең бәхет бул!” – тине бит ул ҡат-ҡат. Юҡҡа түгелдер. Минең өсөн биш йәштә иң ҙур бәхет – әсәй үҙе ине. Шул тиклем уны юғалтыуҙан ҡурҡа инем, шул тиклем! Ҡайһы берҙә ул серем итеп алырға уйлаһа ла, минең ҡотом оса ине. Эргәһенән китә алмайым. Саҡ ҡына тын алмай торһа, “үлде“ тигән ҡурҡыштан уға килеп йәбешәм. Керпектәренән тартып, күҙҙәрен астырам. Ул уяна ла туҙҙырып мине әрләй, сәпәп тә ебәрә. Таң атыр-атмаҫтан аяҡ өҫтө бер туҡтауһыҙ эш менән йөрөп арый, саҡ ҡына ял итәм тип ятһа, мин маҙаһыҙлайым. “Ниндәй бала булды был! – тип йәне көйә. – Бер ял бирмәй йонсотоп үлтерергә итәгеҙ мәллә,” – тип ғәйепләргә тотона. Мин, бахыр, әсәйемә әйтергә теләгән бер йылы һүҙемде лә әйтә алмай, ҡатып ҡалам. Һүҙем етмәгәнен ҡосаҡлап булһа ла аңлатмаҡ булам, унда ла, сирҡанған кеүек, мине үҙенән ситкә этеп ебәрә. Бына шулай. Ә хәҙер үҙе улдарымдың мине ҡосаҡлап үбеүҙәренә күҙе ҡыҙа. “Мине яратмайһығыҙ,” – тип барыбыҙҙы ла ғәйепләп, тағы йөрәкте яралай. Һөйөүөмде үҙе ҡабул итмәгәс, ни эшләйем? Улым уллы булмайынса, ҡыҙым ҡыҙлы булмайынса аңламаҫ, ти халыҡ мәҡәле. Ҡыҙлы булырға яҙманы, бәлки, шуға әсәйҙе аңларға ла яҙмағандыр?

Әгәр Яңы йылға тиклем Миңниә инәй мине онотмаһа, ҡыҙсыҡ менән танышам, тип юрап ҡуям. Әгәр ул Мөнөй әбейҙең нәҫеле булып сыға ҡалһа, уға әсәй наҙы бирергә тырышасаҡмын. Бының өсөн кем булырға тура килһә лә. Өй йыйыштырыусымы, бала ҡараусымы, тәрбиәсеме… Ниндәй сифатта ҡыҙсыҡ янында була алам – шул вазифаға риза буласаҡмын. Әлбиттә, әгәр тап шул ҡыҙыҡайҙы Мөнөй әбей минең янда итеп күргән икән… Етен сәсле, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле матурҡай. Уны таныр өсөн был билдәләр етерме? Етмәһә, тағы берәй билдә булыр. Тик бына һүҙемдә тора алырмынмы? Бөтөнләй ят бауырҙы ҡабул итерменме? Ярай, ул тиклем уйламай торайым. Тәүҙә бер шарт тормошҡа ашһын: Миңниә әбей вәғәҙәһендә торһон. Шылтыратам, тине бит. Ҡорьән ашы уҙҙырырға ярҙамлашырһың, тине. Балаларҙың үҙ мәшәҡәттәре баштан ашҡан, борсоғом килмәй, тине. Эш минең дә муйындан, әммә осрашыу тетрәнешенән айнымаған инем, шундуҡ ризалаштым. Ә хәҙер ултырам пландарымды барлап. Бер-ике осрашыуҙы күсерергә кәрәк булыр… Зыян юҡ, күсерербеҙ.

Йөрәгем ҡапыл, сыҙай алмай, ярһый башланы. Былтыр Искәндәр менән осрашыр алдынан кеүек. Унда, әлбиттә, уның менән күрешерҙе белмәй инем, миңә һалынған яуаплылыҡты аңлауҙан күңел ярһый ине. Хәйер, әле лә үҙемә бик оло нәҙер ала түгелме? Тулҡынланмаҫ ерҙән тулҡынланырһың.

Егерме бише етте. Көнө буйы шылтыратыу көтөп йөрөнөм. Кисенә көсөргәнештән ятып иланым. Шылтыратманы әбейем! Әллә ниндәй пландар ҡороп бөткәнемә үҙемә асыуым килә. Кем инде һин ул тиклем? Ул әбей һинһеҙ әллә күпме йәшәгән, һинһеҙ ҙә бына тигән йәшәр! Ул биш йәшлек ҡыҙыҡай ҙа, дөрөҫөн

әйткәндә, балда-майҙа ғына йөҙә. Өшөмәй ҙә, асыҡмай ҙа, бысраҡ-туҙандың хатта ни икәнен дә белмәй. Һинең уларға кәрәккенәң юҡ, бушҡа күңелеңде ярһытма!

Әлдә корпоратив кисә үткәреүҙе үҙ иңемә алғанмын. Сценарий уйлау, ролдәр бүлеү, көлкөлө бейеүҙәр ҡуйыу, залды биҙәү эштәренә күмелеп, ҡайғымды онотоп торҙом. Байрам барыһына ла оҡшаны. Коллектив, ғөмүмән, башлыса ижади, креатив кешеләрҙән торғас, күңел асыуҙы ойоштороу әллә ни ҡыйын булманы. Бүләктәрҙе Рушанна үҙе генә әҙерләгән. Ҡулыма ҡалын ғына ҙур конверт тотторғас, аңланым: минең тулы хоҡуҡлы компаньон икәнем хаҡында документтар. Шәп сюрприз. Хәйер, бөтөнләй көтөлмәгән, тип булмай. Дөрөҫ эшләй Рушанна, киләсәген ҡайғырта. Салондың яртыһы минеке икән, тимәк, мин бер ҡайҙа ла китә алмайым. Килеһенсә, бизнестың киңәйеүенә, тотороҡлоғона бар көсөмдө һаласаҡмын. Эш ышаныслы кеше ҡулында булғас, Рушанна ла рәхәтләнеп бәпесен табып, ялда ята аласаҡ. Сөнки йөктө икебеҙ өсөн дә мин тарта торасаҡмын.

Байрамдан ҡайтҡас, йылға йомғаҡ яһап ултырҙым. Быйыл нимәгә өлгәштем, нимә тороп ҡалды? Ғөмүмән, бәхетле йыл булдымы, уңышһыҙмы? Был һорауҙы хәл итеү бик ҡатмарлы булып сыҡты. Йортһоҙ ҡалдым, балаҡайҙарым үҙемдән йыраҡ. Үҙем иһә тыуған төбәгемдән алыҫайҙым. Ә ҡасандыр унан башҡа ерҙә тормош юҡ һымаҡ ине. Һаман ишем юҡҡа ҡаңғырам. Кеше тупһаларына морон төрткән булдым. Ғүмерлек булмаһа ярар ине. Бына шулай.

Ә ыңғай яҡтары? Үҙем дә, балалар ҙа, әсәйем дә иҫән-һау. Ниһайәт, эш бәхетен дә татып ҡарарға насип булды. Ул ғынамы – ҙур ғына бизнес хужаһымын. Тыуған ерем кеүек ҡәҙерле булған баш ҡалала йәшәп ятҡан булам. Мөнөй әбейҙәр кеүек кешеләргә осрауым өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен. Ҡәйнә яҡтарынан фатиха алдым, улдарымдың яҡындары ике тапҡыр күбәйҙе, ярҙам итә башланылар. Ғөмүмән, фатихалы йыл булды. Атай йортона ҡайтып киткән арала, мөнәсәбәттәрҙең элеккесә түгел, нисектер, байтаҡ йылыраҡ икәнен тоям. Әсәйем менән күберәк һөйләшә, серләшә башланыҡ, ул минең менән ғорурлана, буғай. Был хәл минең һуңғы ун йыл кисергән ғазаптарымдың барыһын да ҡапланы. Үткәндәргә рәнйемәй башланым. Үҙемде хаталарым өсөн ҡәһәрләүҙән туҡтаным. Ғөмүмән, тыуғаныма үкенмәй башлауымды йылдың иң төп ваҡиғаһы тип атарға кәрәктер. Миңниә инәйҙең Ҡөрьән мәжлесенә саҡырмауына ныҡ көйгәнемде иҫәпкә алмаһаң.

Утыҙ беренсе декабрҙә, “Яңы йылды үҙ-үҙем менән генә ҡаршыларға“ тигән ҡарарға килеп, барыһының да саҡырыуҙарын кире ҡаҡтым. Теләгәнде кейеп, үҙеңә оҡшаған ниғмәтте генә әҙерләп, яратҡан көйҙәреңде генә тыңлап, башҡалар түгел, үҙ ыңғайыңа ғына тороуҙан да яҡшыраҡ нимә булыр тиһең?

Пландарҙы телефон боҙҙо. Миңниә инәйем! Ул саҡырғас, барыһын да оноттом. Такси ҡиммәтлеге лә һыуындырманы, төнгә ҡарай сыҡ та кит.

– Онотманым, ҡыҙым, онотманым. Балалар үпкәләнеләр ҙә киттеләр. Беҙ бар саҡта нишләп ете ят кешенән ярҙам һорайһың, тип ғәрләнгән булалар. Бөгөн оҙон көн буйы барыһын да тиерлек урап сыҡтым, кискә саҡ ҡайттым. Ҡал да ҡал, тиҙәр ине, юҡ, мәйтәм. Көн буйы һеҙҙең күңелде күрҙем, хәҙер үҙемдең күңелде күрәйем, тинем. Бына, бүләсәремде генә алып ҡайттым.

Ул һөйләнә-һөйләнә миңә фотоһүрәт һуҙа. Ҡараным да шаҡ ҡаттым. Принцесса кейемендә биш йәштәрҙәге ҡыҙ бала. Сәстәре һарыҡай бөҙрә. Йөҙө аҡ ҡына. Ә ҡаштары ҡыйылып торған ҡап-ҡара. Ә күҙҙәре… Ә ҡап-ҡара күҙҙәренә мөлдөрәмә һағыш тулған. Үҙе бигерәк һөйкөмлө, бигерәк бәләкәй! Йөрәгемде ниҙер телеп үткән кеүек булды. Шундай сабый ғынаға шул хәтле моңһоулыҡ,

шул хәтле һағыш нисек һыймаҡ кәрәк? Ҡыҫып-ҡыҫып яратҡым, наҙҙарым менән бөтә ҡайғыларын иретеп тараттым килде шул баланың!

– Исеме Әйшә, – тип яуапланы әбейем һорауыма. Тетрәнеп киттем. Был нимә, тағы бер билдәме? Үҙемдең Аллаһ ҡаршыһындағы исемем Миңлеғәйшә бит. Әйшә – Миңлеғәйшә… Ҡыҙҙарға исемде әсәһенә оҡшатып ҡушыу бар инде. Яйлап һүҙҙе Мөнөй әбейгә борам. Миңниә инәй башын сайҡап, уйланып тора.

– Төшөмә өләсәйем керҙе. Төҫөн дә онотоп бөткәйнем инде, бер кергәне юҡ ине. Анауы аҡ торна апайыңдан хәбәр килтергән, тот шуны, ысҡындырма, – ти. Уянып киттем дә, хәйерлегә булһын, тип уйланып ятам. Бынауы ҡалала аҡ торна түгел, һоро торна ла юҡ, тим. Өләсәйем минән хәйер теләйҙер тип, мәсеткә киттем. Бәй, бер заман ҡараһам, артымдан ап-аҡ торна килеп керҙе. Өләсәйем ҡушҡас ни, барҙым да тоттом инде, – тип кеткелдәп көлә. Уға ҡушылып мин дә көләм. Ҡыҙыҡ инде был донъя. Берәүҙәр һине ғүмер буйы “торна муйын”, “торна бот” тип үсекләй, кәмһетә. Ә кем өсөндөр һин – изге ҡош, тотем, көтөлгән, көҫәлгән… Кеше – шул тиклем һуҡыр зат. Ул йыш ҡына үҙ-үҙенең ысын йөҙөн дә күрмәй-танымай.

Ә һин һуң, Тамара-Миңлеғәйшә, үҙ-үҙеңде таныйһыңмы? Үҙ-үҙеңә баһаны нимәгә ҡарап ҡуяһың? Был донъяла тотҡан урыныңа ҡарапмы, әллә алда өлгәшәсәк мөмкинлектәреңә, көсөңә ҡарапмы? Ниңә берәүҙәр һине әйләнгән һайын суҡырға, кәмһетергә, рәнйетергә генә тора, икенселәр тәү ҡараштан үҙ итә, баш әйләнерлек һүҙҙәр менән бүләкләй, йылыта, өмөт бағлай?..

Был – минең һуңғы тиҫтә йылдарҙағы иң бәхетле Яңы йылым. Ир тигәндәре, ауыр тупрағы еңел булһын, бөтә байрамдарҙан ваз кистереп бөткәйне инде. Көнө буйы арманһыҙ булып бешереп-төшөрөп әҙерләнәһең дә, бөтөн хеҙмәттәрең өсөн бүләк бер – лаяҡыл иҫереп, хәшәрәт ҡиәфәткә кергән хәләл ефет йәки иҫереп, “хәләл афәт“, кем әйтмешләй. Шәм яҡтыһында табын ҡороп, моңло көйгә талғын ғына парлап бейеп, сөкөрҙәшеп кенә байрам итке килмәгән тиһеңме ни минең дә? Бәхетеңә яҙмағас, киноларға ғына ҡарап булһа ла йыуанаһың.

Төнгө ҡала уттарын йылы, нурлы йортта хөрмәт иткән, яҡын күргән аҡыллы, сабыр, матур инәй менән серләшеп күҙәтеп ултырыуы ниндәй күңелле!

Үҙемдең тормошто ҡыҫҡаса ғына һөйләп ташланым. Искәндәрҙе ҡыҫтырманым. Уны кем тип аңлатайым? Мөхәббәтем типме? Мөхәббәт ул уртаҡ була. Ә Искәндәрҙең миңә ҡарата нимә тойғанын белмәнем һәм әле лә белмәйем. Яҙмышыммы? Улай икән, ниңә ул янымда түгел? Ҡәһәремме? Ә ниңә уның менән бергә булған мәлдәр хаҡында хәтирәләрҙе иң ҡәҙерле нәмәләй кеүек барлайым, һаҡлайым?..

– Зарлана торғандарҙан түгел, тип уйлағайным да мин һине. – Әбейемдең тауышында ҡәнәғәтлек ишетәм. – Һин, кем әйтмешләй, “халява” көтмәйһең тормоштан. Халява ул бушҡа килгән була. Бушҡа килгән, – тимәк, осһоҙло. Ә һиңә арзан нәмә кәрәкмәй, һин иң яҡшыһына лайыҡ. Ябай ғына алмазды иң затлы аҫылташҡа әйләндерер өсөн түҙемле, осҡор оҫта, оҙайлы хеҙмәт кәрәк. Ә һиңә оҫта кәрәкмәй – һин үҙеңде-үҙең шымартаһың, үҙеңде-үҙең камиллаштыраһың. Бер заман мең-мең нурҙар сәсеп ялтырап асылырға һиңә бер генә нәмә етмәй – лайыҡлы тирәс. Көмөш, алтын – барыһы ла арзан. Һиңә тик аҡ алтын ғына бара. Аҡ алтын – ул бик ҡиммәтле нәмә һәм бик ҡаты ла. Уны үҙең теләгәнсә бөгөргә ныҡ ҡайнар йөрәк кәрәк. Ҡайҙа бора, тип аптырайһыңдыр инде. Бәлки, аптырамайһыңдыр ҙа, һиҙәһеңдер. Эйе, ейәнемде һөйләйем. Холҡо ауыр, тигәйнем инде. Ул үҙ-үҙенә, башҡаларға, хатта тормошҡа ла көс еткеһеҙ талаптар ҡуя. Ул буй етмәҫлек камиллыҡҡа ынтыла. Ынтылышының фәтеүәһе булмауын аңлауҙан һыҙлана. Ул һиңә күңелен тиҙ генә асмаясаҡ. Хатта яратҡан осраҡта ла, һине

ете ҡат боҙло мәкегә сумырып, ете ҡат утҡа ташлап һынаясаҡ. Ул аяуһыҙ. Һинең ғазаптарың, кисерештәрең уға барыбер. Әммә уның һынауҙарын үтһәң, һинең һәр ғазап сиккән секундың йөҙләтә бәхет булып кире ҡайтасаҡ. Ул һине алтын тәхеттәргә күтәрәсәк, ел-ямғыр түгел, башҡаларҙың ҡырын күҙенән дә һаҡлаясаҡ. Кәрәк икән, хатта ғүмерен дә һинең аяҡ аҫтыңа ырғытасаҡ. Бына шундай кеше ул. Уның һынауҙарын үтеү миңә нимәгә кәрәк инде, тиһеңме… Яңғыҙ башың – тыныс ҡолағың. Улдарың бар, эш-шөғөлөң бар. Уныһы шулай, эйе, ауыртмаған башына кем үҙе теләп тимер таяҡ алғыһы килһен. Әммә был һынауҙарға һин күнәсәкһең һәм үтеп сығасаҡһың. Беҙ был турала икебеҙ ҙә беләбеҙ, шулай бит. Мин бит бая юҡҡа ғына ҡулыңа фото тотторманым. Ул баланы күреү менән төҫөң дә үҙгәреп китте бит һинең. Шул ҡыҙсыҡтың күҙендәге һағышты юҡ итер өсөн һин минең ейәнем һынауҙарын түгел, тамуҡ ғазаптарын да йырып сығасаҡһың. Һиндә көс бар. Рух көсө. Һинең әле бер нисә айҙа өлгәшкәндәрең, мөмкинлектәрең менән сағыштырғанда, бер ни ҙә тормай. Һиңә улар уйын ғына булды, шулай түгелме ни? Һине алда күпкә юғарыраҡ үрҙәр, ауырыраҡ йөктәр, олораҡ яуаплылыҡтар көтә.

Сәғәт ун икене һуҡты. Тышта бер-бер артлы фейерверктар аттыра башланылар. Миңниә инәйҙең телефоны “шартлай” яҙҙы. Һәр балаһы ҡотлап шылтырата.

– Әйттем инде, төн уртаһында шылтыратып йонсотмағыҙ, йоҡларға ятам, тип, юҡ, тыңламайҙар. – Әбейем балаларын ҡәнәғәт тауыш менән орошоп алды, һәр береһенә Аллаһы Тәғәләнең рәхиме төшөүен теләне. Мин үҙ уйҙарыма “баттым”. Бер аҙна элек Миңниә инәй ейәненә димләп ауыҙ асһа, бында башҡа аяҡ та баҫмаҫ инем. Ә әле… Ә әле тормошома өр-яңы мәғәнә өҫтәлергә тора. Күҙ алдыма ҡыҙҙарының ебәктәй сәстәрен төрлөсә үреп, наҙлыҡайҙарын яратып, иркәләп ултырған Рушанна килә. Матур әсәй, һөйкөмлө балалар, көнләшерлек татыулыҡ һәм аңлау… Уларға һоҡланып ултырғанда нимәлер йөрәгемде сәнсепсәнсеп ала ине. Ул “нимәлер” – һуңғы балам шәүләһе булғандыр. Иң үкенеслеһе. Ни тиһәң дә, иң беренсеһе төшкәндә, миндә әле әсәлек хистәре уянып та өлгөрмәгәйне, үҙем дә бала ғына инем. Ә бынаһында бәпес танһыҡлауҙың ни икәнен яҡшы беләинем. Көтә инем. Һәм мә һиңә – минең иң күп өмөттәр менән көткән йән эйәһе үҙе менән ҡабат әсәй булырға мөмкинлектәремде лә алып китте.

Аллаһы Тәғәләнең рәхиме төшһөн бәләкәсемә. Нишләп һиңә, гонаһһыҙ фәрештәгә, рәнйеп ҡалғанмын икән? Әле ыҫҡындырҙы. Иҫләгәндә беренсе тапҡыр һыҙланыу тоймайым. Уйҙарым тағы Миңниә инәй тауышына өҙөлә.

– Өләсәйем бахыр әйткән булыр ине. Яҡуп пәйғәмбәребеҙҙең улы Ибне Әмин кеүек ҡыландым, балаларыма Көс, Мал, Төҫ, Сәм, Хис тип исем ҡушып, ҡабул иттем, тип. Көс тигәненең көсө күп тә, тик тормошта ауырлыҡ еңергә генә белә, еңеллек килгәндә нишләргә белмәй. Мал тигәне гел маллы-түлле булды, әммә мал кеүек әрпеш, таҙаны бысраҡтан айырмаҫ булды. Төҫ тигәнем аяуһыҙ һылыу, ҡарап туйғыһыҙ ҙа, ташҡурсаҡ кеүек йәнһеҙ. Сәм тигәнем тынғы белмәй донъя артынан ҡыуалай, арттағына ҡарап шөкөр итмәй. Хис тигәнем бигерәк кеше йәнле. Башҡаларҙың зарын тыңлап, донъя көтөүҙән артта ҡала.

Был тарихты тыңлап, өнһөҙ ҡалдым. Байтаҡ шым ултырғас ҡына, Миңниә инәйҙән һорай ҡуйҙым:

– Ә ниңә өләсәйегеҙ һәр балаһына бәхет кенә теләмәне икән?

– Һәр кеше лә балаға бәхет теләй. Тик бәхетте һәр кем үҙенсә аңлай. Өләсәй ҙә һәр балаһы тыуғанда үҙенә бәхет өсөн нимә етмәй торған – шуны балаға һораған. Йәғни хәле етмәй, тормош ауырлығын күтәрә алмай йонсоғанда үҙенә ярҙамға Көс теләгән. Тапҡан-таянғаны тамаҡ аҫырарға етмәгәндә, булғанын ишәйтергә Мал һораған. Төҫкә матурҙарға йәшәүе еңелерәк икән, тип сибәрҙәргә

көнләшкәндә, балаһына төҫ теләгән. Кешенән кәм булмаҫҡа серәшкән сағында, үҙенән-үҙе сәм тыуған. Башҡалар үҫеп, үҙ юлы менән киткәс, үҙенең әрнеүҙәрен, һағыштарын аңларға, сер бүлешергә Хис кәрәк булған. Миңлекәй апайым өсөн ғүмер буйы үртәлде өләсәйем. “Бөтә көсөм шунда киткән”, – тиер ине. Башҡаса кеше дауалау менән шөғөлләнмәне. Көсөм юҡ, тине лә ҡуйҙы. Ә күрәҙәлеге ҡалды. “Һәләтемде Миңлекәйгә ҡалдырыр инем, бәғере ҡаты булып сыҡты. Миңниәгә ҡалдырыр инем, йомшаҡ бәғерле, – тип ҡайғырҙы ла ултырҙы. Инде апайымдың бер ҡайтып күренеренә өмөт өҙгәс: Былай булғас, беҙ көтөп ала алманыҡ. Хоҙай Тәғәләнән Миңлекәйемә оҙон ғүмер теләнем. Оҙаҡ йәшәһә, аҡылына килер, әжәл алдында булһа ла хатаһын таныр, тинем. Шул саҡта һиңә хәбәр ебәрергә илсе табыр. Тере саҡта күрешә алмаһағыҙ, фатихам – Миңлекәйгә. Өлгөрмәһәгеҙ, бар рәхмәт – сәләм килтерәсәк балаға төшөр. Һин, Миңниә, уны яныңдан ебәрмәҫһең, ул нәҫелебеҙгә төҫ бирәсәк”, – тине.

– Ә беҙ осрашмаған булһаҡ? Ярты йыл элек минең мәркәзгә килерем дә билдәһеҙ ине. Унда нимә булыр ине?

– Тәҡдиргә яҙылғас, барыбер килер ине был көн. Әллә минең бөтә йәшлегем, көсөм ҡалған ауылымдан киткем килгән тиһеңме? Һәр ташына тирем тамған үҙем ҡорған нигеҙемдән айырылғым килгәнме? Тәүҙә ҡарыштым балаларға, китмәйем, ошонда үләм, тинем. Улар һаман ныҡышҡас, хафаға төштөм. Хоҙай Тәғәләнең әмере микән әллә был күсеү, тип икеләндем. Яҙмышымды яҙлыҡтырмайым тип, риза булдым. Бына бит, ҡылған доғаларым бушҡа китмәне. Апайымдың хәбәрен алдым. Өләсәйемдең дә рухы тынысланғандыр, шәт. Әгәр шунда, тәки серәшеп, ауылымда ҡалһам, бығаса, бәлки, әхирәткә лә күскән булыр инем, ә бурысым, үтәлмәй, берәй балама йөк булып тороп ҡалыр ине. Ә йөк – ул сир. Тәҡдир ҡушҡанын үтәмәү һәр ваҡыт ауыр сиргә һабыштыра. Сирләгән сағымда гел Аллаһы Тәғәләнән хаҡ юл күрһәтеүен һораным һәм һәр ваҡыт терелдем. Әйшә ҡыҙымдың яҙмышын ышаныслы кешегә тапшырһам, башҡа ғүмер һорамам. Күп йәшәнем, матур йәшәнем, үкенерлек түгел. Балаларым, минән бигерәк, илгә хеҙмәт итте. Ейәндәрем дә ил яҙмышын үҙенекенән өҫтөн ҡуя. Ир кеше шулай булырға тейеш. Ә беҙгә, ҡатын-ҡыҙға, ир яҙмышы тапшырылған. Эйе, иргә бәхет булырға тейеш беҙ. Ирҙәрҙең йүнлеһе самаһыҙ ғорур була. Мин дим-яр иткәне бигерәк тә. Быны нимәгә әйтәм: әгәр әле берәй үкенесең булһа, асыҡлап, хәл ҡылып ҡуй. Аҙаҡ, ейәнем “тырнағы“на эләккәс, башҡаны уйлап йөрөүеңде һиҙһә, ғәфү итмәҫ. Әйшә ҡыҙым һине үҙ итер, шикләнмәйем. Әммә атаһы, ҡыҙыма әсәй кәрәк, тип туҡтап ҡалмаҫ. Үҙенең һинең өсөн донъяла берәү генә түгел икәнен белеү менән, арағыҙҙы өҙәсәк. Иртәгә, тиһәм, бөгөн инде, төштөн һуң, улар икәүләп бында киләсәк. Шуға әйтәм: һүҙ әйтәһе кешең бар икән, әле шылтырат һәм аңлаш. Яңы йыл төнөндә нимә ҡыланһаң да, нимә һөйләһәң дә килешә ул, тартынма. Ҡояш ҡалҡҡанда яңы тормош башларлыҡ булһын!

Буйһондом. Кейендем дә төн уртаһында уттары балҡып торған ҡалаға сығып киттем. Бер нисә тапҡыр телефондан Искәндәрҙең номерын яттан йыйҙым. Әммә сигналға баҫырға йөрәк етмәне. Нимә тота мине? Ҡурҡыу. Мин ныҡ итеп ҡурҡам. Искәндәрҙәнме? Юҡ, унан түгел. Үҙем… үҙемдән ҡурҡам. Уның тауышын ишетеү менән, йөҙөн күреү менән һушһыҙ йығылырмын һымаҡ. Ун йылдан артыҡ ваҡыт буйына Искәндәргә ҡарата булған хисем, һыҙланыуым тәнемә, йөрәгемә, ҡан тамырҙарыма ҡушылып үҫкән бит инде. Уны нисек әрнеүһеҙ генә йолҡоп алырға? Ул бит инде – минең бер өлөшөм, итем… Ул бит тәндәге шешек ҙурлыҡ ҡына нәмә түгел хәҙер, наркоз менәнме-юҡмы ҡырҡып ырғытырлыҡ. Ул – минең йөрәгем, бауырым, үпкәм… Иртәгәнән башлап Искәндәрҙе

тормошомдан һыҙып ташлау… Ул бит минең үҙемде һыҙып ташлау менән бер иш була түгелме ни?! Ни эшләргә миңә, Хоҙайым?! Ни ҡылырға, Мөнөй әбейем?!

Тороп тор, Тамара. Һин хәҙер, бизнес кешеһе булараҡ, рациональ аҡыл менән уйлап ҡара, хискә бирелмәй генә. Киләсәк тормошҡа маҡсаттарҙы билдәләп, үткәндәргә йомғаҡ яһап ултырғанында ниндәй өлкәләрҙе өҫтөнлөклө йүнәлеш тип билдәләгәйнең әле? Эйе, дөрөҫ: ғаилә ҡороу, ҡыҙ бала бағыу. Эш бер ҡайҙа ла ҡасмаҫ, уны йырып сыға алаһың. Ә бына әле, йәш ҡатын сағында, теләгең һәм мөмкинлегең барында ғаилә усағын тоҡандырыу – фарыз ғәмәл. Яңғыҙ ҡалыу – ул тәбиғәтеңә һәм хатта дингә лә ҡаршы төшөү буласаҡ. Һин бер тапҡыр ҡурҡаҡлығың арҡаһында Искәндәрһеҙ ҡалған инең. Ә әле шул уҡ ҡурҡыу арҡаһында үҙ маҡсаттарыңдан баш тартырға уйлайһыңмы? Әгәр Искәндәр һиңә кәрәккәндә бирә алмай икән, ниңә унының үҙенән баш тартмаҫҡа? Ниңә маҡсатыңдан баш тартырға? Миңниә инәй “үткәндә үкенесең булһа” тине… Нимә ул минең үкенесем? Искәндәрме? Дөрөҫөн әйткәндә – юҡ. Ул мине ярата инеме шул ваҡыт, әллә уйнай инеме? Бына шуны асыҡламауым үкенес. Әгәр ятатҡан булһа, “минең тәүге мөхәббәтем” тип хәтерләр инем һәм үкенес ҡалмаҫ ине. Әгәр уйнаған ғына булһа, “минең алданыуым” тип баһалар инем дә, шулай уҡ үкенес ҡалмаҫ ине. Үкенесте ниндәй хәтирәгә әйләндерергә? Был яуапты тик Искәндәр генә бирә ала. Тимәк, Миңниә инәйем тағы хаҡлы: мин ысынлап та шылтыратырға, асыҡларға тейеш. Таң атыуға мин “ниһайәт, Искәндәрҙе ғәфү итергә һәм үҙемдән ысҡындырырға” тейеш. Ун йылдан артыҡ ғазапланыуыма сик ҡуйырға тейешме мин, юҡмы?

Асыу менән телефон төймәһенә баҫам. Төнгө сәғәт бишенсе киткән. Искәндәрҙең йоҡлаған булыуы ла мөмкин, телефонын да һүндереп ҡуя ала. Юҡ, һүндермәгән, гудок китте. Тимәк, аңлашыу – тәҡдиремә яҙылған. Теге оста Искәндәрҙең тауышын ишетәм. Ә телем аңҡауға йәбештереп ҡуйылғанмы ни, бер ни ҙә яуап бирә алмайым. Ул бер нисә тапҡыр “Кем был?” тине лә тымды. Тағы күпмелер ваҡыт үтте. Ныҡ итеп Искәндәрҙең трубканы һалыуынан ҡурҡам, ә үҙем уны туҡтатырға һүҙ әйтә алмай баҙап тик торам.

– Һин ҡайҙа? – Унын шулай тип һорағаны саҡ башыма барып етеп, тирә-яғыма ҡарайым. Уйланып байтаҡ ер киткәнмен икән. Яҡындағы бер бинанан ижекләп тигәндәй урамдың атамаһын, йорт һанын уҡып сығам.

– Шунда ғына тор, ун минуттан барып етәм.

Ун минуттан? Ун минуттан Искәндәр бында буласаҡмы? Ҡасырға! Хет ҡайҙа булһа ла! Миңниә инәйгә кире йүгерергә! Күккә ашырға! Ер тишегенә кереп ятырға! Ҡайҙа булһа ла ҡасырға! Бөтә тәнем дер-дер ҡалтырай башланы. Ҡышҡы төн бит, тәбиғи. Тик беләм: ҡалтырауым өшөүҙән түгел, ҡурҡыштан. Нисек кисерергә был осрашыуҙы? Нисек һөйләшергә? Күрешеүҙе кисерә алһам, айырылышыуҙы кисерергә көсөм булырмы?

Яҡында ғына ҡара “БМВ” туҡтаны. Унан төшкән кеше, шәп-шәп атлап, миңә ҡаршы йүнәлде. Ҡасандан бирле ҡоторған кеүек дөпөлдәгән йөрәгем, ниһайәт, ситлегенән сығып ҡасырға булды, ахырыһы, – өҙөлөп төштө лә Искәндәрҙең аяҡ аҫтына тәгәрәне. Ана, хәҙер иҙгәнсе тапап китәсәк бит, иҙәсәк! Мин иҫтән яҙҙым...



**Евгений**
**ШИШКИН**

# ҒӘЙЕПЛЕМЕ НИ МИН?

**ДРАМА**

**Ике шаршауҙа**

**Ҡатнашалар:**

| | |
|---|---|
| **Раҡаев Сәғит Хәсән улы** | – *адвокат* |
| **Тәслимә** | – *Раҡаевтың ҡатыны* |
| **Нурислам** | – *Тәслимәнең дуҫы* |
| **Зәбихә ҡарсыҡ** | |
| **Сәлихйән ҡарт** | – *Зәбихә ҡарсыҡтың бабайы* |
| **Назаров Харрас Хәким улы** | – *эшҡыуар, йылҡы үрсетеүсе* |
| **Сәлимә** | – *Назаровтың ҡатыны* |
| **Нурия** | – *судта сәркәтип, Тәслимәнең әхирәте* |
| **Антонина Ивановна** | – *судта иҙән йыуыусы* |
| **Ҡасимов Мәрүән Әсләм улы** | – *шахмат клубы етәксеһе* |
| **Вәсилә** | – *шахмат клубының барында эшләй* |

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### 1-се күренеш

**Зәбихә ҡарсыҡ һандыҡтан муйынсаҡтарын, биҙәнгестәрен ала. Уларҙы кейеп, көҙгөгә ҡарай. Икенсе бүлмәнең ярым асыҡ ишегенән Сәлихйән ҡарт уны күҙәтеп тора. Ауыҙын ҡыйшайтып, мыҫҡыллы йылмая. Тышҡы ишекте шаҡыйҙар. Сәлихйән ҡарт йәшенә.**

**Зәбихә ҡарсыҡтың өйө.**

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Кем йөрөй ул был ҡараңғыла? Тышта күҙгә төртһәң күренмәҫлек. (*Биҙәүестәрен сисеп, ишек асырға бара.*) Кем унда?

---

*Евгений Шишкин (1956) Киров ҡалаһында тыуған. Урта мәктәптән һуң заводта эшләй, Киров политехник институтында уҡый, армия сафында хеҙмәт итә. 1981 йылда Горький ҡалаһына күсеп, Н.И. Лобачевский исемендәге Түбәнге Новгород дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙа уҡый. В.М. Шукшин, А.Г. Платонов, И.А. Гончаров исемендәге әҙәби премиялар лауреаты.*

*Мәскәү ҡалаһында йәшәй.*

**Тәслимә.** Мин, Зәбихә әбекәй, мин, Тәслимә. Һуңлаңҡырап киттем, асыуланма инде. Ҡурҡыттыммы әллә?

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Бабайҙы ғына уятып ҡуймайыҡ. Ә минең ҡурҡырлығым бөткән. Урлар байлығыбыҙ ҙа юҡ. Ҡартлыҡ менән сир - сырхауҙы ғына сәлдерәбеҙ тимәһәләр. Йә, һаумы-шәпме? Оноттоң беҙҙе, ҡыҙыҡай, оноттоң. Әллә ҡасандан бирле күренгәнең юҡ. Ай-һай, ҡалай матурайып киткәнһең. Яңылыҡтарың да күпкә оҡшаған.

**Тәслимә.** Бар, әбекәй, бар. Ә быныһы – һиңә күстәнәс. (*Өҫтәлгә бер төргәк кәнфит һала.*) Кейәүгә сыҡтым бит, әбекәй. Күрәһеңме никах балдағымды?

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ҡайһылай яҡшы булған. Ҡотло булһын. Тәмле итеп сәйҙәр эсеп алайыҡ әләйһәң. Күптәнме инде балдаҡ кейгәнеңә?

**Тәслимә.** Дүрт ай ҙа ике көн, әбекәй.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Һанап та сығарҙы. Улай көнө-сәғәте менән һанағас, бик яратаһың, күрәһең, кейәү балаҡайҙы.

**Тәслимә.** Яратам, бик яратам. Көтөп алдым бит, шуға ла сикһеҙ ҡәҙерле. Үҙең белмәгән ни бар, әбекәйем, ҡарт ҡыҙ булып ҡалаһың, тип ҡолаҡ итемде ҡалдырманылар бит. Ә мин никах сәғәтем һуҡҡанын көттөм.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Теге мәлде бер һаҡалтай менән күрә биреп ҡалғайным, әллә шулмы?

**Тәслимә.** Һаҡаллыһы уның – Нурислам. Дуҫ егет. Оҡшатып та йөрөй ине лә бит. Ә мин яратып китә алманым. Ҡайһы берҙә шулай ултырам яңғыҙым иламһырап, унан уйлайым: ярай, мин дә үҙ усағымды яғырмын әле. Үҙемдә шулай тип йыуата торғайным.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Шунан, яҡтыңмы һуң инде усағыңды? Тоҡандымы уты? Ашыҡманыңмы, тиеүем…

**Тәслимә.** Тоҡанды, әбекәй. Ялпылдап яна. Өтөп алып бара. Торам-торам да бәхетем өсөн ҡурҡып ҡуям. Таныштарымдың ирҙәренә ҡарайым да, ғибрәт: береһе эскесе, икенсеһенеке ҡарун, өсөнсөһөн тағы ташҡа үлсәйем.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Һинеке фәрештә мәллә?

**Тәслимә.** Фәрештә генәме һуң, әбекәй. Ир аҫылы. Ул ысынлап көслө, ышаныслы. Мин уға тулыһынса ышанам.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ышаныуын ышан да, ҡыҙый, сос бул. Фәрештә лә бит әле тутыйғош түгел, ситлеккә ултыртып булмай. Тутыйғош ул, ярай, бикләп ҡуйҙыниһәң, ултыра сырҡылдап.

Фәрештә, етмәһә үҙе абышҡа – осто китте барҙы. Күҙең упайып торҙоң ҡалдың булыр.

**Тәслимә.** Абышҡа түгел шул, әбекәйем, ысын ир-егет.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Эй, ҡыҙый, ир-аттың ни барыһы ла бер сыбыҡтан ҡыуылған инде ул. Ә шулай ҙа былай төнләтеп йөрөүең бушҡа түгелдер, ә, ҡыҙый?

**Тәслимә.** Төш күрҙем, әбекәй. Ҡурҡыныс тип тә, шомло тип тә әйтә алмайым. Әллә ниндәй, сәйер. Өсөнсө көн инде эсем бошоп тик тора.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ниндәйерәк инде ул төшөң?

**Тәслимә.** Имеш, сәхнәләмен. Зал

тулы кеше. Ап-аҡтан кейенгәнмен дә йырлайым икән, тим. Ә бит ғүмеремдә лә сәхнәгә сыҡҡан кеше түгелмен. Йырлар инем, моңом юҡ, ҡолағыма айыу баҫҡан. Ә бында, әбекәйем, рәхәтләнеп йырлайым ғына. Ә йыры шул тиклем матур. Һаман да ҡолағымда яңғырап тора. «Ғәйепләме ни мин?» тип атала. Ишеткәнең юҡмы?

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Бәлки, ишеткәнмендер ҙә… Хәҙер бит, моңом юҡ, тип уйлағандар һирәк, ауыҙ күтәргергә тартынмайҙар.

**Тәслимә** *(йырларға маташа).* «Ғәйепләме ни мин, ғәйепләме ни мин һөйгәнгә?» Йәбеште лә ҡуйҙы бит ошо йыр. Гел телемдең осонда ғына тора. Үҙемде әллә нисек тоям. Кешеләр сәйер итеп ҡарай башлаған кеүек, әйтерһең, миңә мөһөр баҫылған. Берәйһененең күҙе тейҙеме икән әллә, әбекәй? Әллә боҙом һалды, сихырланымы берәй хәйерһеҙе? Һин бит табипһың, сихыр ҡайтара беләһең. Ярҙам итһәң ине.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Минең табиплығым инде… Йә, ярай, бынауында ултыр. Кофтаңды сис. Ҡана, әпсен -төпсөн әйтеп өшкөрәйем. Онотолор йырың, иншалла...

**Зәбихә ҡарсыҡ сыға. Тәслимә яңғыҙы.**

**2-се күренеш**

**Ишектә Сәлихйән ҡарт күренә. Тәслимәне күҙәтә. Тәслимә, уны абайлап, ҡысҡырып ҡуя һәм кофтаһы менән ҡаплана**.

**Сәлихйән ҡарт.** Хи-хи-хи… Был нимә – стриптиз тиҙәрме хәҙерге заманда?

**Тәслимә.** Ҡалай ҡурҡыттың, Сәлихйән бабай. Улай аҫтыртын ғына күҙәтеп йөрөү килешмәй ҙә инде. Гонаһ.

**Сәлихйән ҡарт.** Нишләп гонаһ булһын? Шундай сибәр ҡыҙға һоҡланып ҡарап тороу гонаһ буламы ни? Ана, ожмахта беҙҙе хур ҡыҙҙары көтөп тора, ти бит. Ҡарсыҡ менән сөкөрҙәшкәнегеҙҙе ишетеп яттым да… Кейәүгә сыҡҡанһың икән. Балдағың ҡайһылай ялтырап тора. Кейәү балаҡай байҙыр инде. Хәҙер бит ҡыҙ-ҡырҡынға мотлаҡ бай кәрәк.

**Тәслимә.** Ниңә?

**Сәлихйән ҡарт.** Аҡыллы булып тыуғанға. Ҡыҙҙарҙың әле яңылышыуҙары ла ихтимал. Ә кейәүгә сығып алдымы – уйында тик аҡса. Аҡсаһы бар ир аҫылының – мөхәббәт тә бар, аҡсаң юҡ икән – мөхәббәт тю-тю.

**Тәслимә.** Мөхәббәткә аҡсаның ни ҡыҫылышы булһын?

**Сәлихйән ҡарт.** Элек ул, бөтәбеҙ ҙә ярлы саҡта, бисәләрҙең мөхәббәт тип һушы китә торғайны. Хәҙер иһә аҡсаң булмаһа, яратам тип ауыҙыңды ла асма, фәтеүәһеҙ. Шар кеүек хәҙер аҡсаһыҙ мөхәббәт, төрттөң – шартланы.

**Тәслимә.** Бушты ғына һөйләйһең дә инде, Сәлихйән бабай. Һөйөү аҡсанан өҫтөн. Ул юғарынан килә.

**Сәлихйән ҡарт.** Ә минеңсә, аҫтан. Эйе, түбәндән. Билдән түбән килеп ҡыҫтымы, ир-ат башын юғалта. Бына шул саҡта инде аңшайып торма, бисә, ҡороҡла егетте. Тимәк, бисәләргә ысынлап та һөйөү юғарынан, аҡылын юйған ирҙең башынан килә, ә ир-атты ул аҫтан ҡыҫтай. Кем инде ул кейәү балаҡай? Хе-хе-хе. Һөнәре буйынса, тим?

**Тәслимә.** Адвокат.

**Сәлихйән ҡарт.** Адвокат! Беҙҙең

заман өсөн хәтәр һөнәр. Бурҙарҙың, ришүәтселәрҙең барыһына ла һыуҙан ҡоро сығыр өсөн яҡлаусы кәрәк. Ҡайҙа эләктерҙең?

**Тәслимә.** Судта. Унда минең әхирәтем эшләй. Уның янына ингәйнем, таныштыҡ – Раҡаев.

**Сәлихйән ҡарт.** Үәт һин уны. Йоҡларға ятҡанда ла шулай фамилиялап ҡына еппәрәһеңме?

**Тәслимә.** Ҡуйсәле, бабай!

### 3-сө күренеш

**Зәбихә ҡарсыҡ һыулы стакан, яндырылған май шәм, ҡыҙыл еп тотоп инә.**

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Уф, ҡарт шайтан! Һин генә етмәгәйнең бында. Бар-бар, сыҡ.

**Сәлихйән ҡарт.** Һаман сихырсылығыңды ҡуймайһың, ә, мәсекәй ҡарсыҡ.

**Зәбихә ҡарсыҡ** *(Сәлихйән ҡартты төрткөләп сығара).* Шайтан ҡотортҡандыр мине ошо ҡарт пәрейгә кейәүгә сығырға! *(Тәслимәгә.)* Баҫ әле ошонда, ҡыҙыкай. *(Май шәм, ҡыҙыл еп менән йөрөтөп Тәслимәне имләй, һыу бөркә, өшкөрә.)* Боҙом, күҙ тейеү кеүек нәмә күрмәйем. Күңелең тыныс түгел, төшөң шуға болара. Иреңде артыҡ ныҡ ярataһың, шуға борсолаһың. Баштараҡ шулай була инде ул. Үтә дөрләп барма, һүрәнерәк ярат. Шунда йоҡоң тыныс булыр.

**Тәслимә.** Нисек инде һүрәнерәк, әбекәй? Яратыуҙы сикләп буламы ни? Кәрәкмәй ҙә… Үҙ-үҙеңде мәхрүм итеп…

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Үҙең беләһең. Һәр кем көсө етерлекте артмаҡлай. Күп күтәреп күтәртеп ятыуың да бар.

**Тәслимә.** Ҡурҡма, әбекәй, көсөм етер…

*Зәбихә ҡарсыҡты ҡосаҡлап хушлаша ла сығып китә.*

### 4-се күренеш

**Сәлихйән ҡарт инә.**

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ҡайһылай ҡанатланып йөрөй, бисараҡай. Бәхетемде көтөп алдым, эҙләгәнемде таптым, ти.

**Сәлихйән ҡарт.** Эләктергән тоҙаҡҡа адвокатты.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Һинең өсөн, ҡарт шайтан, бөтә бисәләр ҙә алдаҡсы, аусы.

**Сәлихйән ҡарт.** Ысыны шул булғас. Ир-ат бит, бахыр, шаран-яран: «мә, ал» тип тора. Ә бисәләр «бир»ҙән башҡаны белмәй. *(Йоҙрогон асыпябып, эләктергәнде ишаралай.)* Шуға күрә лә ирҙәрҙең ғүмере ҡыҫҡа.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Уның байы, күп эсәләр, күп уйнаш итәләр. Кит әле, йәнде көйҙөрөп торма. (*Ҡапыл ҡулындағы муйынсағы өҙөлөп китә.*) Аһ-аһ, быныһы ни булды тағы? Тигенгә түгел был. *(Тәслимә киткән яҡҡа ҡарай.)* Артыҡ ныҡ ярата. Уныҡылай саф күңел, ихлас йөрәк күтәрә алырмы шундайын бәхетте? Сыҙай алырмы? (*Муйынсаҡтарҙы суплай.*) Ә аҙғын күңеллегә шундай кейәү тәтеһә, был саҡлы бәхет тә булмаҫ ине.

**Сәлихйән ҡарт.** Ысын бәхет сафлыҡты ярата, быныһы раҫ. Ялған менән бысраҡты бар тип тә белмәй. Нимә, ҡарсыҡ, билеңдән алдымы? Сихыр-михырың кәкрәйтә һине.

### 5-се күренеш

**Раҡаевтарҙың фатиры. Йоҡо бүлмәһе. Ҡунаҡ бүлмәһе.**

**Тәслимә менән Раҡаев. Тәслимә батмус менән иртәнге сәй алып инә.**

**Рәкаев.** Эй, шәпһең дә инде, йән киҫәк. Сәйең дә тәмле, ҡоймағың да телде йоторлоҡ. *(Ҡоймаҡлап сәй эсә.)*

**Тәслимә.** Һиңә оҡшай икән, мин бәхетле.

**Рәкаев.** Йән киҫәк тип атағаныма ҡаршы түгелһеңме?

**Тәслимә.** Юҡ, һиңә оҡшай икән, мин риза.

**Рәкаев.** Ирҙәргә нимә оҡшағанын белгең киләме?

**Тәслимә.** Минең һиңә нимә оҡшағанын белгем килә.

**Рәкаев.** Улай икән, мин һиңә ғаилә бәхетенең серен асам. Ышанаһыңмы миңә, йән киҫәк?

**Тәслимә.** Донъялағы иң яҡшы табипҡа ышанған кеүек ышанам. Һин – аҡыллы. Һин – тәжрибәле. Һин – минән өлкәнерәк. Һин – күренекле адвокат. «Адвокат» «профессор» тигән кеүек үк – шундай ғорур яңғырай. (*Рәкаевты ҡосаҡлай.*) Мин һинең һәр һүҙеңә, һәр ҡарашыңа ышанам.

**Рәкаев.** Шулай итеп, тыңла: әгәр ҡатын кеше ғаиләһендә бәхетле булырға теләй икән, иң беренсе һәм иң мөһим ҡағиҙәне ҡолағына ғына түгел, йөрәгенә киртеп ҡуйырға тейеш. Ишетәһеңме, йән киҫәк, иң төп ҡағиҙәне: бер ваҡытта ла иреңә һорау бирмәҫкә… Аңланыңмы?

**Тәслимә** *(гәжәпләнеп)*. Һмм, аңланым кеүек, тик ныҡлап түгел. Нисек инде? Бер ваҡытта ла, бер ваҡытта ла?

**Рәкаев.** Тап шулай. Был ҡағиҙәне мәңгелеккә хәтереңә һалып ҡуй. Ирҙәрҙең ҡатынының бәйләнсек һорауҙарынан да нығыраҡ йәненә тейгән бер нәмә лә юҡ. Һөйләргә кәрәк таба икән, ул һорамаһаң да һөйләр. Ҡыҫтау, эҙәрләү тоймаһа, ирҙәр ихласыраҡ була.

**Тәслимә.** Ә икенсе ҡағиҙә?

**Рәкаев.** Бер ваҡытта ла ир кешегә үҙеңде көсләп таҡма. Бына, мәҫәлән, урман буйлап китеп бараһың икән, ти. Ҡояш көлә, ҡоштар һайрай. Гөлйемеш сәскәһендә бал ҡорто һут йыйып ултыра. Иҫ киткес матур күренеш, шулаймы? Әммә шул саҡ бал ҡорто, эшен ташлап, һинең баш осоңда безелдәп урата башланы. Нимә эшләйһең? Сәбәләнеп тиҙерәк ҡасырға ашығаһың. Бына шулай. *(Мәғәнәле итеп бармағын һелкә.)* Кем ҡатынын ярата, уны былай ҙа онотмай. Бәхетте көсләп таҡмайҙар, йән киҫәк. Аңланыңмы?

**Тәслимә** *(ҡаушап)*. Аңланым. Өсөнсө ҡағиҙә лә бармы?

**Рәкаев.** Кешенең шәхси азатлығына ҡул һуҙмаҫҡа. Ғаилә тормошо өсөн ошонан да ҡурҡынысы юҡ. Ир кеше үҙенең азат икәнен тойорға тейеш. Үҙенең бәләкәй генә серҙәре, әйтәйек, һис кемдең аяғы баҫмаған, асылмаған утрауы булырға тейеш.

**Тәслимә.** Ниндәй серҙәре?

**Рәкаев.** Беҙҙең адвокат конторанында Петр Ильич эшләй. Бик аҡыллы, һөйкөмлө кеше. Тик бер бәләкәс кенә етешһеҙлеге бар: ат сабышы ярата. Ҡарарға ғына түгел, аҡсаға уйнарға. Аҙнаһына ике тапҡыр тотализаторҙа уйнай. Уйнай ҙа отола. Һәр ваҡыт тип әйтерлек отола. Ә бер мәл артыҡ күп юғалтҡан. Ә ҡатыны һиҙеп ҡалған да боғаҙынан алған – һөйләттергән. Моғайын, Петр Ильич берәй әмәлен табып түләп бөтөр ине. Әммә бисәһе, уның шәхси азатлығына ҡул һуҙып, бөтөн

эште боҙған. Нишләһен Петр Ильич, бөтәһен дә асыҡтан-асыҡ һөйләп биргән.

**Тәслимә** *(түҙемһеҙләнеп).* Шунан, нимә менән барып бөттө?

**Раҡаев.** Айырылыштылар. Ҡатыны һәр ваҡыт унан йолҡоп-бынан йолҡоп дачаға аҡса йыйған булған, ә бында шундай аҡса туҙҙырыу… Кисерә алмаған инде.

**Тәслимә.** Кит әле, шуның өсөн генә айырылышырға. Көлкө лә инде.

**Раҡаев.** Улар өсөн бер ҙә көлкө түгел. Тәүҙә боғаҙынан алып дөрөҫлөктө талап ит тә аҙаҡтан кисерә алма… Шул да булған ҡылыҡ!

**Тәслимә.** Тағы ла ҡағиҙәләр бармы?

**Раҡаев.** Бар: әрләшмәҫкә, кенә тотмаҫҡа, әхирәттәреңде тыңламаҫҡа…

**Тәслимә.** Ә мөхәббәт?

**Раҡаев.** Мөхәббәт ул, йән киҫәк, көн һайын уйнатырға бесәй балаһы түгел. Мөхәббәт ул уҫал эт кеүек. Уға ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә генә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Мөхәббәт ул – ғаилә тормошонда тыныс ҡына йоҡлап ятырға тейеш. Уны һәр саҡ һөсләтеп торһаң, бер көн килеп умыра тешләп алыуы мөмкин. Әммә ғаиләгә ысын хәүеф янай икән, ҡабатлап әйтәм, етди хәүеф, ә берәй ялбыр баш йәки хыялый секретарша түгел – бары шул саҡта ғына мөхәббәт тигән уҫал этте уятырға мөмкин. Ундай мәлдә инде мөхәббәт мөғжизәләргә һәләтле. Ишеттеңме, йән киҫәк?

**Тәслимә.** Ишеттем, ҡәҙерлем, бөтәһен дә ишеттем.

**6-сы күренеш**

**Суд залы.**
**Нурия, Раҡаев, Сәлимә.**

**Нурия** *(шаяртып судья өҫтәленә сүкеш менән һуға).* Суд ултырышы ябыҡ тип иғлан ителә. Әфәнделәр, барығыҙға ла китергә мөмкин. *(Өҫтәлдән ҡағыҙҙарын йыйып алып, Раҡаевҡа мөрәжәғәт итә.)* Һау булығыҙ, Сәғит Хәсәнович! Минән Тәслимәгә күптин-күп, сыҡтин-сыҡ сәләм!

**Раҡаев**. Һау бул, Нурияҡай. *(Ул бер ҡайҙа ла ашыҡмай.)*

**Сәлимә** *(Нурияның сығып киткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп алып, Раҡаевҡа ташлана).* Ниһайәт, Сәғит! Ултырыш бөткәнсе үлә яҙҙым. Мин бит бөгөн генә килдем, шунда уҡ бында йүгерҙем.

**Раҡаев** *(Сәлимәне ҡосаҡлап).* Ҡайҙа, ҡайҙа, күрәйек әле һине, ҡәҙерлем… Бына бит ул чиновник бисәһе булыу ҡайһылай килешә. Тағы ла күркәмерәк булып киткәнһең. Шундай нәзәкәтле ханым.

**Сәлимә**. Ул чиновник түгел, ә эшҡыуар – ат үрсетә.

**Раҡаев**. Ат үрсетеүсе лә булһын, ти. Уныһы мөһим түгел, Сәлимәкәй. Һин уның эргәһендә тағы ла сағыуыраҡ, ылыҡтырғысыраҡ булып киткәнһең: сәсең-башың, кейемең, үҙ-үҙеңде тотошоң – барыһы ла үҙгәргән. Ҡулыңдағы сумкаңа тиклем.

**Сәлимә.** Хатта сумкамды ла хәтерләйһең! Һин һаман да шундай иғтибарлы. Өйләнеүең дә боҙмаған. Йә, һөйләп ебәр, кем ул һинең ҡатының булыу бәхетенә ирешкән зат?

**Раҡаев.** Көнсөлләшмә инде, Сәлимәкәй. Һиңә һис кенә лә килешмәй. Миңә вариҫ кәрәк, аңлайһыңмы? Ундай хыялдан баш тартырға мин бит әле бәлтерәп бөткән ҡарт түгел.

**Сәлимә.** Һин миңә уның тураһында һөйләмәгәйнең. Кемдән көнләшеп янырға инде миңә хәҙер?

**Раҡаев.** Минән көнләш. Ҡатыным иҫ киткес минең!

**Сәлимә.** Ниməһе менән иҫ киткес инде ул?

**Раҡаев.** Тормоштан ҡыуаныс табып, ләззәтләнеп йәшәй белә ул. Донъя ҡыуған, аҡса ғына ҡайғыртҡан кеше бит шул һөйөнөс тигәнде онотоп ташлай. Ярай, Сәлимәкәй, дөрөҫөн әйткәндә, һинең менән ҡатынымды тикшереп торғом килмәй. Тағы бер генә нәмә әйтәм: минең йәштә етди уйлап өйләнергә кәрәк. Бер һәм берәгәйле булырлыҡ итеп.

**Сәлимә** *(ҡыланып).* Тимәк, беҙ бүтән осраша алмайбыҙмы инде? Миңә һине күреү, һөйләшеп ултырыу ҙа тыйыламы? *(Судьяның креслоһына барып ултыра.)*

**Раҡаев.** Минең бер ваҡытта ла ҡатын-ҡыҙҙың күңелен күрәм тип кенә алдашҡаным юҡ. Әгәр ҙә алдымда, ҡатынымды, әллә, Сәлимәкәй, һинме, тигән һорау торһа, һине ҡосаҡлап, танауыңдан үпәс итер инем дә, ҡыҙғаныс, әлбиттә, ҡәҙерлем, әммә мин ғаиләмде һайлайым, тип әйтер инем. Арабыҙҙа булғандар арабыҙҙа ғына ҡалһын, үпкәләшмәйек, үкенмәйек, дуҫ булып ҡалайыҡ һәм биғәйбә. Әгәр ҙә мәгәр һайларға тура килһә, тиеүем.

**Сәлимә** *(хәйләкәр йылмайып).* Әммә беҙҙең алда ундай һорау тормай шикелле, эйеме?

**Раҡаев.** Мин дә шулай тип уйлайым.

**Сәлимә.** Эх, Сәғит! Һинең менән ярты йыл көрәшкәнебеҙ юҡ. Судта һин минең эшемде шаҡ ҡатырғыс итеп еңеп сыҡҡан көндән алып.

**Улар судья өҫтәле эргәһендә ҡосаҡлашып үбешәләр.**

**7-се күренеш**

**Суд залы эргәһендәге коридор.**

**Антонина Ивановна биҙрә күтәреп инә. Тәслимә йүгереп килеп керә.**

**Тәслимә.** Суд ултырышы тамамландымы?

**Антонина Ивановна.** Бөттө, күптән бөттө.

**Тәслимә.** Адвокат Раҡаев киттеме икән, белмәйһегеҙме?

**Антонина Ивановна.** Кем килгән дә кем киткән, уны ҡайҙан белеп бөтәһең?! Көн оҙонона көтөүе менән йөрөйҙәр. Ана тағы күпме бысраҡ ташығандар.

**Тәслимә** *(суд секретарының бүлмәһе янына барып).* Ә Нурия киттеме?

**Антонина Ивановна.** Ул китте. Бүлмәһен йыуып та сыҡтым инде.

**Тәслимә.** Их, өлгөрмәй ҡалдым. Икеһе лә киткән. *(Ҡолаҡ һала.)* Ә залда кемдер бар. Ана, көлөшәләр.

**Антонина Ивановна.** Кемдәрҙер хихылдаша шул.

**Тәслимә суд залының ишеген аса ла унда Сәлимә менән Раҡаевты күрә. Һиҫкәнеп, шунда уҡ башын кире ала. Уның артынан Антонина Ивановна ла башын тыға.**

**Антонина Ивановна** *(Сәлимә менән Раҡаевҡа).* Эй, пар күгәрсендәр. Гөрләшер өсөн башҡа урын эҙләргә тура килер. Миңә иҙән йыуырға кәрәк.

**Сәлимә.** Хәҙер китәбеҙ.

**Раҡаев** *(көлөп).* Бер ниндәй ҙә криминал юҡ, был бары дуҫтарса осрашыу ғына.

**Сәлимә менән Рәҡаев көләшә-көләшә сыға. Ишек артында йәшенеп торған Тәслимә Антонина Ивановна артынан ултырыш-тар залына инә.**

**Тәслимә.** Ысынлап та булдымы был хәл, әллә күҙемә генә күрендеме? *(Антонина Ивановнаға.)* Һеҙ ысынмы? Тереһегеҙме? Исемегеҙ нисек?

**Антонина Ивановна.** Мин Алевтина… Әй, юҡ та. Антонина Ивановна мин. Алевтина – һеңлемдең исеме. Ҡалай ҡурҡыттыңсы… Нимә булды?

**Тәслимә.** Төшөмдә генә күрмәнемме мин быны? Ысынлап та йоҡламайыммы? Семтегеҙ әле мине!

**Антонина Ивановна.** Һеҙ нимә, гражданка? Нимә һөйләгәнегеҙҙе аңлайһығыҙмы?

**Тәслимә.** Был ул ине. Ә теге ҡатын бында ултыра ине. Әгәр ҙә был дөрөҫ икән, ул хатта әҙәм аҡтығы ғына ла түгел, күпкә насарыраҡ. *(Сығып йүгерә.)*

**Антонина Ивановна** *(яңғыҙы)*. Тереһеңме, тип һорайсы. Әллә аҡылынан яҙған инде. Ҡайһылай ҡурҡытты, хатта исемемде онота яҙҙым. *(Үҙ-үҙен семетә лә сырылдап ҡуя.)* Бөтә бисәләр ҙә тиле. Эй, бисара! Барыһы ла шул ирҙәр арҡаһында инде. Сәсрәп киткерҙәре. *(Судьяның креслоһына ултыра ла тиктомалдан илап ебәрә.)* Бөтә ирҙәр ҙә бер, хәрәм ҡатҡырҙар!

### 8-се күренеш

**Шахмат клубы. Бер яҡтан – бар, икенсе яҡтан – стенала шахмат таҡтаһы һәм уйын залына инә торған ишек.**

**Ҡасимов таҡта янында йөрөй һәм үҙ алдына ниҙер һөйләнә. Вәсилә бар эргәһендә тора. Рәҡаев менән Сәлимә инә.**

**Вәсилә.** Һаумыһығыҙ, Сәғит Хәсәнович! Рәхим итегеҙ!

**Рәҡаев**. Ҡасимов әфәнде бындамы?

**Ҡасимов.** О! Кемде күрәм! Әйҙүк, әйҙүк, һағындырып ҡына киләһең. *(Ҡулын ҡыҫа.)*

**Рәҡаев.** Тышта ел, һыуыҡ. Бына, һеҙгә инергә булдыҡ.

**Ҡасимов.** Бик дөрөҫ эшләгәнһегеҙ. *(Вәсиләгә.)* Вәсиләкәй! Беҙгә ҡәһүә менән тағы ла ҡатырағын ҡой әле. Ошондайын ҡәҙерле ҡунаҡтарҙың хөрмәтенә.

**Вәсилә.** Хәҙер, хәҙер, Мәрүән Әсләмович, баш өҫтө.

**Ҡасимов.** Күптән күренгәнегеҙ юҡ. Эш тә эш, тиһегеҙ инде. Өйләнгәнһегеҙ, тип ишеткәйнем. Шундайын да күркәм хәләл ефетегеҙ менән таныштыра һалығыҙ инде беҙҙе.

**Сәлимә.** Һеҙҙең менән танышыуыма шатмын. Һеҙҙең шахмат клубы тураһында, был боронғо уйынға мөкиббән киткәнлегегеҙ хаҡында Сәғит Хәсәновичтың күп һөйләгәне бар.

**Рәҡаев.** Икегеҙҙең дә танышыуға шат булыуығыҙ бик һәйбәт. Әйткәндәй, Сәлимә минең ҡатыным түгел. Ул минең… Минең клиент. Хәйер, минең дуҫ, тип әйтһәң, яҡшыраҡ булыр.

**Ҡасимов** *(Сәлимә көҙгө янында өҫбашын рәтләгән арала Рәҡаев ҡына ишетерлек итеп)*. Әһә, хәҙер был шулай аталамы инде?

**Рәҡаев.** Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, Мәрүән Әсләмович, нисек ошо сибәркәйгә битараф ҡалып була?

**Ҡасимов.** Ә кәләшегеҙ?

**Раҡаев.** Кәләшем ғәжәйеп минең. Сәлимә кеүек бәҫле ҡатындар улар күпте талап итә. Улар менән артыҡ мәшәҡәтле. Ә минең Тәслимәм ихлас, ябай, уның эргәһендә миңә рәхәт. Уның кеүектәр ирҙәрен һәр ваҡыт ярата.

**Вәсилә** *(батмус тотоп өҫтәл эргәһенә килә).* Ҡыҫылғаным өсөн ғәфү үтенәм, әммә һеҙ үҙ-үҙегеҙгә үтә ныҡ ышанып китәһегеҙ, шикелле. Әгәр шулай уйлайһығыҙ икән, һеҙ ҡатын-ҡыҙ халҡын насар беләһегеҙ.

**Ҡасимов.** Шулай ҙа миңә һеҙҙең ҡатынығыҙ аҙыраҡ йәл. Ә һеҙҙең өсөн ҡурҡыныс.

**Сәлимә** *(өҫтәл янына килеп).* Нишләп Сәғит Хәсәнович өсөн ҡурҡыныс?

**Раҡаев.** Мәрүән Әсләмович минең ғаилә тормошом өсөн борсола.

**Ҡасимов.** Эйе, ысынлап та борсолам.

**Сәлимә.** Ҡуйығыҙ әле, Мәрүән Әсләмович, мин Сәғит Хәсәновичты йәш кәләшенән һалдырып алырға йыйынмайым. Киреһенсә, ирен нығыраҡ яратыуын, уяуыраҡ һаҡлауын теләйем… Минең үҙ ирем бар. Унан мин тулыһынса ҡәнәғәтмен.

**Ҡасимов.** Ғәфү итегеҙ, мин, моғайын, аңлап етмәйемдер, әммә…

**Сәлимә.** Нимә тип әйтергә теләүегеҙ аңлашыла. Ярай, асыҡтан-асыҡ икән, асыҡтан-асыҡ… Өләсәйем үлер алдынан миңә бер үкенесе хаҡында һөйләне. Ғүмере буйы ул олатайыма тоғролоҡ һаҡлаған. Ә бит заманында уға бер илсе үлеп ғашиҡ булған, үҙе менән Парижға китергә әйҙәгән. «Шунда бармағаныма үкенәм, яҡты донъялағы көндәремде, исмаһам, бер тапҡыр ҙа йәшерен мауығыуға ирек бирмәй, бушҡа үткәргәнмен. Һәр бер ҡатын-ҡыҙҙың барыһынан да сер итеп тотҡан ғишыҡҡа, йәшерен теләккә хоҡуғы бар», – тигәйне.

**Ҡасимов.** Ҡалай йәтеш, ир ҙә бар, сер ҙә бар. Бигерәк уңайлы. Ә бына мин – яңғыҙ. Кешеләрҙең бәләкәс кенә иғтибары өсөн дә рәхмәтлемен. Ә һеҙ артыҡ ҡомһоҙланаһығыҙ, шикелле. Бөтә ҡоҙоҡтарҙың да һыуын татып ҡарағығыҙ килә…

**Сәлимә.** Һеҙ ике төшөнсәне бутайһығыҙ: ҡомһоҙлоҡ менән тулы ҡанлы йәшәү бер түгел. Бер тапҡыр йәшәйбеҙ. Минең үлем түшәгендә өләсәйем кеүек үкенеп ятҡым килмәй.

**Вәсилә.** Һөйөү, хатта ҡыҫҡа ғынаһы ла, ҡатын-ҡыҙҙың тормошонда бөтәһенән дә ҡәҙерлерәк.

**Ҡасимов.** Яҡшы, бик яҡшы. Һеҙҙең һөйөүҙәрегеҙгә минең башым етеңкерәмәйҙер, моғайын. Ярай, исмаһам, шахматта аҙыраҡ һупалайым. Әйткәндәй, Сәғит Хәсәнович, һеҙгә бик ҡыҙыҡ бер этюд күрһәткем килә. Әйҙәгеҙ уйын залына, таҡтаға барайыҡ әле. *(Сәлимәгә.)* Һеҙгә лә ҡыҙыҡ булыр тип уйлайым, әйҙәгеҙ.

**Ҡасимов, Раҡаев, Сәлимә сығалар.**

### 9-сы күренеш

**Шахмат клубына Тәслимә килеп инә, ҡурҡып тирә-яғына ҡарана, бар эргәһенә килә.**

**Вәсилә.** Ни теләйһегеҙ?

**Тәслимә.** Бер стакан һут… Юҡ, сәй… Йәки ҡәһүә…

**Вәсилә.** Ғәфү итегеҙ, аңламаным: сәйме, һутмы, ҡәһүәме?

**Тәслимә.** Барыбер түгелме ни?

Ҡойоғоҙ шунда берәй нәмә. Һыу, бер стакан һыу.

**Вәсилә.** Юҡ, әйҙәгеҙ, шулай ҙа сәйҙә туҡталайыҡ. Йылынырһығыҙ. Беҙҙең шул тиклем тәмле йәшел сәйебеҙ бар. Йәшел сәй эсәһегеҙме?

**Тәслимә.** Ниндәй йәшел?

**Вәсилә.** Ҡытай сәйе. Йәшел ҡытай сәйе.

**Тәслимә** *(борсолоп тирә-яғына ҡарана).* Ә, һеҙ ул хаҡтамы? Ярай, ҡойоғоҙ ниндәйен булһа ла…

**Вәсилә.** Рәхим итеп эсегеҙ. (*Тәслимә алдына сынаяҡ ҡуя.*)

**Вәсилә өҫтәл янына бара, батмусҡа һауыт-һабалар йыя. Шул ваҡытта һөйләшкән тауыштар ишетелә.**

**Ҡасимов тауышы.** Күрәһегеҙме, был этюдҡа хатта һеҙҙең дә тешегеҙ үтмәне.

**Раҡаев тауышы.** Ысынлап та бик ҡыҙыҡ. Әйтер инем, мауыҡтырғыс. Бер фигура артыҡ бында, һис һүҙһеҙ.

**Вәсилә** *(бар янына кире килеп).* Аһа, ҡайҙа киткән ул? Сәйенә теймәгән дә. Аҡса ҡалдырған… Сәйер ҡатын… Әйтерһең дә, иҫерек…

**10-сы күренеш**

**Ҡасимов, Раҡаев, Сәлимә кире инәләр.**

**Ҡасимов.** Бына бит ул нисек: былай йөрөһәң дә, тегеләй йөрөһәң дә – пат. Бер нисек тә ҡотолормон тимә.

**Раҡаев.** Ҡайһы ваҡыт тормошта ла шулай килеп сыға. Бөтә фигураларҙың да мәнфәғәтен күҙ уңында тотоу мөмкин түгел.

**Сәлимә.** Беҙгә китергә ваҡыт *(Раҡаевка.)* Мине ҡунаҡханаға тиклем оҙатаһыңмы?

**Раҡаев.** Мин һине бүлмәңә тиклем оҙатам…

**Ҡасимов.** Ә мин был этюд өҫтөндә баш ватмаҡсымын әле. Ә, бәлки, был уйында еңеүгә ваҡытлыса сигенеү юлы менән өлгәшергә мөмкиндер…

**Раҡаев.** Мин һеҙгә ысын күңелемдән уңыштар теләйем, ҡәҙерле Мәрүән Әсләмович.

**Сәлимә.** Мин дә ул теләккә ҡушылам. *(Вәсиләгә.)* Һыйығыҙ өсөн рәхмәт.

**Раҡаев.** Һау булығыҙ!

**Вәсилә.** Тағы килегеҙ!

**Раҡаев менән Сәлимә китә.**

**11-се күренеш**

**Вәсилә.** Шундай ыҫпай, аҡыллы, кеше шаяртҡанды ла аңлай, үҙе лә шаярта белә. Ғашиҡ булмаҫлыҡ та түгел шул… Һеҙ уны күптән беләһегеҙме, Мәрүән Әсләмович?

**Ҡасимов.** Бәләкәй сағынан уҡ. Мәктәптә уҡығанда мин етәкселек иткән шахмат студияһына йөрөй торғайны… Тәбиғәт ундай кешеләргә күркәм төҫ-баш, яҙмыш үҙүҙенә ышаныс бирә. Бындай кешеләр тормошта, тап-таҡыр юлдан йөрөгәндәй, туп-тура атлай. Мәктәптә уҡытыусылар «аҡыллым» тип уларҙың башынан һыйпай. Вуҙҙа улар һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә. Шул уҡ ваҡытта уларҙы «үҙебеҙҙең егет» тип йөрөтәләр. Уларҙы ҡыҙҙар ярата, эштәре лә ал да гөл бара. Ҡатындары һөйкөмлө, балалары махсус мәктәптәрҙә уҡый. Ә һирәк-һаяҡ аш төрләндереп алыр өсөн ситтә сибәр генә һөйәркә!

**Вәсилә.** Һеҙ унан көнләшәһегеҙ!

**Ҡасимов.** Юҡ, баштараҡ ундай кешеләргә көнләшә инем. Аҙаҡтан ул тойғомдоң боғаҙына баҫтым.

Был уңыш өсөн улар артыҡ ҙур хаҡ түләйҙәр кеүек тойола миңә.

**Артҡы бүлмәлә нимәнеңдер гөрһөлдәп ҡолағаны ишетелә. Унан буш ҡумта тотоп Тәслимә килеп сыға. Ҡасимов менән Вәсилә аптырап һәм ҡурҡа төшөп уға ҡарай.**

**Ҡасимов.** Һеҙ кем? Унда нисек барып керҙегеҙ?

**Тәслимә.** Мин? Аҙаштым… Унда нисек барып ингәнемде лә белмәйем. Миңә ҡыйын булып китте… Үҙемде насар тойҙом…

**Вәсилә.** Иҫерек бит ул! Милиция саҡырырға кәрәк!

**Тәслимә.** Юҡ, мин иҫерек түгел. Миңә милиция кәрәкмәй… Бына, кеҫәләремде ҡарағыҙ (*кеҫәләрен әйләндереп күрһәтә.*) Келәтегеҙҙән бер нәмә лә алманым.

**Ҡасимов.** Тынысланығыҙ. Бына һыу эсеп ебәрегеҙ. Ә шулай ҙа бында нимә эшләп йөрөйһөгөҙ? Уйлап ҡарағыҙ әле, аптырарлыҡ түгелме ни, йәш кенә ҡатын келәткә инеп боҫҡан.

**Тәслимә.** Аптырарлыҡ? Тимәк, мин әҙәм аптыратырлыҡ? Шулайҙыр, моғайын. Ысынлап та, кемде эҙләйем мин? Нимә тип эҙләйем? Иң мөһиме, нимә тип эҙләйем? Ғәфү итегеҙ мине… *(Китергә уҡтала.)*

**Вәсилә.** Ишек теге яҡта, һеңлекәш.

**Ҡасимов.** Хәлегеҙ шәптән түгел шикелле, һеңлем. Бәлки, врач саҡыртырғалыр?

**Тәслимә.** Минме – ғәжәп, кеше аптыратырлыҡ? Миңәме врач кәрәк? Нимә һөйләйһегеҙ һеҙ? Ана улар башҡа һыймаҫлыҡ! Мине түгел, уларҙы дауаларға кәрәк. Аңлайһығыҙмы?

**Тәслимә йүгереп сығып китә. Ҡасимов менән Вәсилә аптырап ҡарап ҡала.**

### 12-се күренеш

**Раҡаевтар фатиры.**
**Тәслимә, һуңыраҡ Раҡаев.**

**Тәслимә** *(яңғыҙ).* Нимә булды был? Һаташыуыммы әллә… *(Башын тота.)* Ҡалай алйотмын мин. Шулай ҙа була икәне башыма ла инеп сыҡмаған. Ә улар өсөн был ябай ғына. Бик тә еңел, рәхәт. Әйтерһең дә, мин бөтөнләй юҡ. Ғүмүмән юҡ. Ни ғәйебем бар минең? Нимә эшләргә миңә? *(Унда-бында һуғыла.)* Ҡасырға кәрәк миңә бынан. Ул – ҡурҡыныс кеше. Ул ҡот осҡос… Үлтерә һуғам мин уны хәҙер. *(Бүлмә буйлап йөрөй, әле бер, әле икенсе нәмәгә тотона. Ниһайәт, шкафтан ҡорамалдар һалынған йәшник һөйрәп сығара, унан сүкеш ала.)* Ошо сүкеш менән башын яра һуғам да ҡуйым…

**Раҡаев инә.**

**Раҡаев.** Йән киҫәк! Эй, йән киҫәк! Мин ҡайттым. Һин ҡайҙа? Әһә, бына һин ҡайҙа! Ҡалай тынғыһыҙ һин, йән киҫәк. Әйттем бит һуң, үҙем ҡағып ҡуям, тип. Мин барында һиңә нимәгә ҡаҙау ҡағып йонсорға. Бир сүкеште. Иртәгә үҙем ҡағып ҡуйырмын. Туҡылдап маташырға хәҙер һуң инде. *(Тәслимәнең ҡулынан сүкеште ала.)* Нишләп улай шымтайғанһың? Әллә берәйһе үпкәләттеме? *(Ҡосаҡларға ынтыла, әммә Тәслимә ситкә тайпыла.)*

**Тәслимә.** Юҡ, юҡ, бер кем дә үпкәләтмәне. Әйҙә, тамағыңа аша ла йоҡларға ят… Миңә әле кер йыуырға кәрәк… Мине көтмә. Мин һуңыраҡ ятам.

**Рәкаев өҫтәлдә ятҡан ҡаласты алып тешләй ҙә кире һала. Йоҡо бүлмәһенә инеп сисенә, ята ла тәмле итеп иҫнәй. Тәслимә шым ғына йоҡо бүлмәһенә инә. Рәкаев йоҡлай. Тәслимә тубыҡтарын ҡосаҡлап, ултырғыста ултыра.**

**Тәслимә** *(үҙ алдына).* Ҡалай оят! Үҙем өсөн түгел, уның өсөн. Күҙҙәрен дә күтәреп ҡарай алмаҫ, уңайһыҙланыр, тип уйлағайным… Мин эстән ҡалтырап баҫып торам, ә ул, исмаһам, бер сытайһасы. Тауышында ла үкенеү әҫәре юҡ… Әлбиттә, ул мине бер нәмә лә белмәй тип уйлай. Әммә ул бит үҙе белә! Ә мин – ҡурҡаҡ… Сүкеш, сүкеш ҡайҙа? *(Сүкеш эҙләй.)* Ҡалай еңел генә еңде мине. Ни өсөн? Сөнки мин уны яратам… Ә мин уны барыбер яратам… (*Рәкаевтың пинжәген ала, кеҫәләрен тикшерә, унан пинжәкте еҫкәп ҡарай. Унан Рәкаевты, түшәкте еҫкәй).* Ә, бәлки, мин уның хәлен аңлап етмәйемдер… Нурия бер әйткәйне бит, ул яҡлаған ҡатындар күрһәткән хеҙмәте өсөн уға аҡса менән генә түгел, башҡа менән дә түләргә әҙерҙәр, тигәйне. Ә был етен сәсле ҡатын… Ул бит торғаны бер фәхишә… Рәкаев, бахырсыҡҡынам минең, ҡайҙан барып тарының һин ул әшәкегә? *(Рәкаевҡа ынтыла, әммә уятырға ҡыймай.)* Бәлки, уны уятырға, һөйләп бирергә кәрәктер? Юҡ! Уны үпкәнен, сәстәрен рәтләгәнен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем дә инде. Кит, хәшәрәт! Хыянатсы. «Әгәр ҡатын кеше ғаилә бәхетен теләй икән, ул иренә артыҡ һорауҙар биреп бимазаларға тейеш түгел... *(Илай.)* Рәкаев... Һуң һин шул тиклем аҡыллы ла инде… Нисек баҙнат иттең? Ни ғәйебем бар минең? Мин бит һине күпме көттөм. Бәхетемде көттөм. Үҙемдекен көттөм. Кешенекен тартып алманым да инде.

### 13-сө күренеш

**Нурияның кабинеты.**

**Нурия** *(яңғыҙы. Тәмәке тоҡандыра).* Ағыу икәнен дә белеп торам. Ә бына үҙемә «етте» тип әйтә алмайым. *(Йүткерә.)* Иртәнсәк торам да ирҙәр шикелле ғыжылдайым. Тире боҙола, кейемгә тәмәке төтөнө һеңә, ә мин һаман ташлай алмайым. Ал-ма-йым! Тәм-том янынан да һис үтеп китә алмайым. Инмәйем тием. Ат-киҫ, башҡа инмәйем тәмтом магазинына. Юҡ бит, инәм, бәләкәс кенә булһа ла бер торт тотоп сығам… Көн һайын торт ашап нисек ябығаһың?

**Тәслимә инә.**

**Тәслимә.** Нурия, ваҡытыңды алмайыммы?

**Нурия.** Һин һәр саҡ ваҡытлы йөрөйһөң, Тәслимәкәй! Үҙ-үҙемә йәнем көйөп ултырыуым. Был медицина нишләп һаман бер нәмә лә уйлап таба алмай һуң ул? Никотинға ҡаршы һағыҙ, тигән булалар. Ҡайҙа ҡарама – реклама. Ә уны сәйнәһәң, тағы ла нығыраҡ тартҡы килә. *(Өҫтәлгә бер ҡап һағыҙ ташлай.)* Ә был диеталар… Ул диеталарҙан һуң, аслыҡтан айыу башын ашарҙай булаһың…

**Тәслимә.** Ә һин экстрасенсҡа барып ҡара.

**Нурия.** Ҡуй, мин ул экстрасенстарҙан ғәләмәт ҡурҡам да ул. Ә күрәҙәсе әбей-һәбейҙәргә ышанмайым. Уларға тик аҡса ғына булһын. Ә экстрасенс ирҙәрҙең уйында бер генә нәмә кеүек тойола миңә: ярҙам һорап килгән ҡатын ҡыҙҙы үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыу.

Меҫкен ҡатын-ҡыҙ уларға ышана, ә ул нимә теләй, шуны ҡыла.

**Тәслимә.** Улай булғас, ихтыяр көсөндө йыйырға тура килә инде.

**Нурия.** Был хаҡта үҙем дә беләм. Хатта бер китапта «тәүәккәл минут» теорияһын да уҡыным.

**Тәслимә.** «Тәүәккәл минут» теорияһы?

**Нурия.** Эйе. Ул китапта Грета тигән бер ярлы ҡыҙыҡай тураһында яҙылған. Ул бер егетте ярата һәм уға кейәүгә сығырға өмөтләнә. Ә тегенеһе бер ҙә ашыҡмай. Ә Грета һөйгәне өсөн йәнен бирергә әҙер, ҡасан саҡырһа ла йүгереп бара, уға ярарға тырыша. Тик бер көндө үҙ-үҙенә: «Туҡта әле, ҡыҙыҡай! – тип әмер бирә. – Етте һиңә!» Ихтыярын йыя ла осрашыуға бармай ҙа ҡуя.

**Тәслимә.** Артабан нимә була?

**Нурия.** Бер нисә тәүәккәл минутын кисергәндән һуң, ул үҙендә әйтеп-аңлатып биргеһеҙ көс барлығын аса. Хатта үҙен әллә кемгә ҡуйып, ҡыланып торған егетенең сикәһенә ҡундырырға ла баҙнаты етә.

**Тәслимә.** Бер нисә минут эсендә үҙеңде үҙгәртеп буламы ни?

**Нурия.** Була икән шул. Теорияның әтнәкәһе лә шунда. Шул мәлдә үҙеңә хас ҡылыҡҡа ҡапмы-ҡаршыны эшләргә кәрәк. Шул саҡта тормошоң ҡырҡа үҙгәрә. Грета үҙен ғазаплаусынан башҡа ла йәшәй аласағын аңлай. Быға тиклем күҙен ҡаплап торған ҡорған асылған кеүек. *(Тәүәккәллек менән көл һауытында тәмәкеһен һүндерә.)* Берәй ваҡыт мин дә ул теорияны ҡулланасаҡмын.

**Тәслимә** *(ирен ситтәре менән генә йылмайып).* Ә мин әхирәтем өсөн бик тә шат булырмын. Ә хәҙер әйт әле миңә: Раҡаевтың Сәлимә тигән клиентын хәтерләмәйһеңме? Тик бына фамилияһын белмәйем.

**Нурия.** Назарова. Һалам сәсле бер сибәркәй. Беләм, бик һәйбәт беләм. Ярты йыл элек Раҡаев суд аша уны ҡабаттан университетҡа уҡыуға алдырҙы. Дәрес ҡалдырған, өлгәшмәгән өсөн күптән ҡыуылған булған. Ә Раҡаев уның адвокаты булды һәм процеста еңеп сыҡты. Нимәгә ул һиңә Назарова? Мин уны яңыраҡ ҡына күреп ҡалғайным. Юрфакта ситтән тороп уҡый. Әле университетҡа сессияға килгән.

**Тәслимә.** Ҡайҙан килгән?

**Нурия.** Дүртимән ҡасабаһынан. Хатта адресын да хәтерләйем: Дуҫлыҡ урамы, 1-се йорт, 2-се фатир. Мин ул суд ултырышында секретарь булғайным. Ире бай, эшҡыуар. Йылҡы үрсетә.

**Тәслимә.** Йылҡы үрсетә? Ире лә бармы ни?

**Нурия.** Нимәгә ул һиңә? Әллә Раҡаевыңды ҡыҙғанаһыңмы? Улайтып маташҡансы, башыңды элмәккә тыҡһаң, яҡшыраҡ булыр.

**Тәслимә.** Нишләп улай тиһең?

**Нурия.** Әйтмәй ни. Ул бит гел кеше араһында. Көн һайын тиҫтәләгән ҡатын-ҡыҙ менән аралашырға тура килә. Уның бит эше шундай, әхирәт.

**Тәслимә.** Дөрөҫ әйтәһең, Нурия. Нисек тигәйнең әле теге китапта: һөйгәненән башҡа бер генә көн йәшәп ҡараған да ғүмер буйы ла йәшәй аласағын аңлағанмы?

**Нурия.** Кем тураһында әйтәһең?

**Тәслимә.** Теге китаптағы ҡыҙ.

**Нурия.** Эйе, шулай тип яҙылған. Тик китапта нимә генә яҙмаҫтар. Гел яҙылғанса ғына йәшәп булһа

икән ул. Ҡара әле, мин ниндәй беләҙек алдым. Юғары ҡан баҫымын рәтләй. *(Ҡулындағы беләҙекте күрһәтә.)*

**Тәслимә.** Ҡан баҫымыңа зарланғаның юҡ ине лә инде.

**Нурия.** Зарланмаһа ни. Сирҙе алдан иҫкәртергә кәрәк, ти бит заман медицинаһы. Инде ҡан баҫымым да юғары булһа, мин нисек йәшәргә тейеш, әхирәт.

**Тәслимә.** Һиңә тәмәке еҫен тере биреһе килмәгән, ит ашамаған, йәшелсә менән генә туҡланған, иртәле-кисле йән һөйгәне менән паркта йүгерергә яратҡан кешегә ғашиҡ булырға кәрәк.

**Нурия.** Кит инде, әхирәт, ҡалай күңелең ҡаты.

### 14-се күренеш

**Урам. Раҡаевтарҙың өйө алды.**

**Тәслимә менән Нурислам.**

**Тәслимә** *(яңғыҙы).* Ире бар… Бәлки, был яҡшыраҡтыр ҙа. Нимәһе яҡшы булһын инде?! *(Ҡапыл Нурисламды күреп ҡала.)* Һин бында нимә эшләп йөрөйһөң?

**Нурислам.** Һине көтәм.

**Тәслимә.** Ниңә?

**Нурислам.** Һиндостанға барып ҡайттым. Һине ҡунаҡҡа саҡырғым килә. Эзотерик сәйгә, йәғни-мәҫәлән. Көнсығыш табиптарының төрлө шифалы эсемлектәрен ауыҙ итерһең.

**Тәслимә** *(ҡаушап.)* Ә нишләп тышта тораһың? Өйгә инһәңсе.

**Нурислам.** Ирең менән осрашҡым килмәй. Унан, тышта миңә рәхәтерәк. Ҡасандыр ошонда һинең сыҡҡаныңды көтөп тора торғайным.

**Тәслимә.** Эйе, ҡасандыр… *(Битараф.)* Йә, нисек унда көнсығыш табиптары, ҡыҙыҡмы?

**Нурислам.** Унда кешеләр «оҙаҡ һәм сәләмәт йәшәргә» тигән маҡсат менән ғүмер итә. Шул турала фильм төшөрөргә йыйынам.

**Тәслимә.** Әгәр бөтәһе лә оҙаҡ һәм сәләмәт тормош менән йәшәргә теләһә, Ер йөҙөндә ялған да аҙыраҡ булыр ине, моғайын…

**Нурислам.** Ни булды һиңә? Элек фәлсәфәгә ынтылышың барлығы һиҙелмәй торғайны. Нимә, ғаилә тормошо шундай көнгә төшөрҙөмө? Нишләп һөмһөрөң ҡойолған, эй, фәйләсуф? Ниңә йөҙөң һытыҡ?

**Тәслимә.** Башым ауырта.

**Нурислам.** Йөҙөң һытыҡ булғанға күрә ауырта ла. Кешенең бөтә мускулдары ла көсөргәнешһеҙ, ирекле булырға тейеш. Йөҙөңдө йыйырып, йәмрәйеп йөрөнөңмө, башың ауыртасаҡ, тип раҫлай көнсығыш медицинаһы.

**Тәслимә.** Башымдың көнсығыш медицинаһына бер генә ҡыҫылышы ла юҡ. Әйткәндәй, баш бер ваҡытта ла ауыртмаһын өсөн нимә эшләргә кәрәк? Бер ваҡытта ла…

**Нурислам.** Кеше үҙен сыныҡтырырға тейеш.

**Тәслимә.** Тәндән башҡа йән дә бар бит әле.

**Нурислам.** Тәүҙә тәнде тәрбиәләргә кәрәк. Мускулдар көслө, үпкә таҙа, йөрәк сәләмәт, мейе ял иткән булһа, кеше үҙенең теләһә ниндәй насар тойғоларына ла баш була ала: асыу-нәфрәт булһынмы ул, рәнйеүме. Шул рәүешле тән күңелде тәрбиәләй.

**Тәслимә.** Хатта һөйөүеңә лә баш булып буламы?

**Нурислам.** Хатта һөйөүгә лә…

**Тәслимә.** Ҡайһылай ябай ғына. Башыңда тороп кишер сәйнәһәң, йөрәгең көнсөллөктән дә, һөйөүҙән

дә азат булыр. Ә миңә ҡасандыр һин мине яратаһың кеүек тойола ине.

**Нурислам.** Мин һине әле лә яратам. Һәм миңә үҙемдең был тойғома ҡаршы көрәшеүҙең кәрәге юҡ. Йә, шунан, сәй эсергә бараһыңмы?

**Тәслимә.** Барырмын, моғайын.

**Нурислам.** Ирең ебәрер, тип уйлайым. Отелло кеүек көнсөл түгелдер?

**Тәслимә.** Отелло түгел. Ғөмүмән, бөтәһен дә уға әйтеп тороуҙы кәрәк тапмайым.

**Нурислам.** Улай булһа, тағы ла яҡшыраҡ. *(Китә).*

**Тәслимә**. Раҡаев теге бисә менән бутала икән, ниңә миңә Нурислам менән осрашмаҫҡа? Ниңә, мин үс ала алмайыммы ни? *(Тауышы үҙгәрә.)* Үс алырға? Кемдән үс алырға? Раҡаевтанмы, үҙемдәнме? Ә, бәлки, Нурисламдың ҡосағында мин үҙемдең Раҡаевҡа мохтаж түгеллегемде төшөнөрмөн? Бәлки, «тәүәккәл минут» теорияһының тәьҫирен тойормон? *(Борсолоп.)* Ә Раҡаев бөгөн кис тағы теге албаҫтыһы менән осрашыр, моғайын. Ҡәһәр генә төшкөрө!

### 15-се күренеш

**Тәслимә менән Зәбихә ҡарсыҡ.**

**Тәслимә** *(теҙләнеп, Зәбихә ҡарсыҡтың тубыҡтарын ҡосаҡлай).* Ярҙам итә күр, әбекәйем. Ялынып һорайым. Минең өсөн был донъяла унан да ҡәҙерлерәк бер кеше лә юҡ. Ул бисәнең, беҙҙең бәхетебеҙгә ҡул һуҙған ул албаҫтының, үҙ ире бар. Ул тик ҡыҙыҡ өсөн, уйнаш өсөн йөрөй. Ярҙам ит, әбекәйем.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Нишләп һин ул йөрөмтәл абышҡаңды аҙыраҡ аҡылға ултыртып алмайһың? Бер тапҡыр ғына донъяның аҫтын-өҫкә әйләндеререлек итеп дауыл ҡуптарып ал. Тик иҫеңдә тот: туҙыныуың бер һәм берәгәйле булһын. Ҡабат - ҡабат тылҡый башлаһаң, фәтеүәһе юҡ. Ә аҡыл белеп ҡулланһаң, бик һыналған сара.

**Тәслимә.** Кемгәлер һыналған саралыр ҙа, әммә Раҡаевты туҙынып ҡына еңеп булмаҫ шул. Йөҙөн йыртам тип, үҙеңә зыян ғына эшләүең ихтимал.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Һынап та ҡарамайынса кире ҡағаһыңмы?

**Тәслимә.** Тулап тәртә һындырыр кешеһе мин түгел шул, әбекәй. Артынан күҙәтеп йөрөгәнемде генә белеп ҡалһа ла асыуланасаҡ. Эште бөтөнләй боҙоп ҡуйырмын, тип ҡурҡам. *(Күҙ йәшен һөртә.)*

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Күҙеңде шәмәртмәй тор әле, ҡыҙый. Абышҡа – абышҡа инде, ҡалайтаһың. Бауыр аҫтына ел үткәрмәй түҙәме ни улар. Етмәһә, күренекле, гел кеше араһында, тиһең. Быға тиклем яңғыҙ йәшәгән. Бушаҡ юртып өйрәнгән буйҙаҡҡа нуҡтаға өйрәнеп китеү еңелме? Ташлай ул ялбыр башын, бына күреп торорһоң. Ҡапыл-ғара арҡанламай тор, сыҙа.

**Тәслимә.** Арҡанлау ҡайҙа инде. Ауыҙ асып ҡаршы һүҙ әйткәнем дә юҡ.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ә быныһы юҡҡа. Ир тигәнең иркенләп тә китмәһен. Үҙең дә шашма. Ете түгел, етмеш тапҡыр уйлап эшләһәң дә яңлышаһың ҡайһы берҙә. Үҙең әллә нәмәләр уйлап сығарғанһыңдыр әле. Әйтеп тораһың бит: минән йөҙ сөйөргәне юҡ, тиһең. Тимәк, ярата. Ә тегеһе уйнаш ҡына.

**Тәслимә.** Уйнаш – уйнаш ҡына буламы һуң, әбекәй? Түҙер әмәлем

ҡалманы. Икеһен бергә күрһәм, йөрәгемә бысаҡ ҡаҙаған кеүек. Ҡасып-боҫоп шымсылағаным өсөн үҙемде үҙем күрә алмай башланым. Телефондан һөйләшә башлаһа, ҡолағым ҡарпая. Кисә портфеленә инеп киттем. Ирен буяғыс килеп сыҡҡайны, ҡаным ҡарайып, үләләр яҙҙым. Ныҡлабыраҡ ҡараһам – үҙемдеке. Ни тиклем ныҕыраҡ яратаһың, шул тиклем көсһөҙөрәкһең. Әйтерһең дә, һөйгәнең алдында яланғас ҡалаһың. *(Серле итеп.)* Ярҙам ит, әбекәй. Беҙҙер Раҡаевты һөйәркәһенән. Ҡулыңдан килә бит. Мин беләм.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Артыҡ күп беләһең. Тел һөйәкһеҙ, кеше нимә генә һөйләмәҫ. Мин дә, аҡылымды юйып, бәхет артынан сапкан булғайным бер мәл, муйынымды ғына һындырҙым. Яратам-яраттырам тип, бер тилегә барып ҡаптым. Ғүмерлеккә. Күҙем аҡайып артынан ташландым, ҡатынынан һалдырып алдым. Аҙаҡ үкендем дә бит, һуң ине. Ғүмерем буйы бер ауыҙ йылы һүҙен ишетмәнем. Үҙәктәремә үткәс, башымды ташҡа һуғырҙай булдым да… Ғаиләһенә кире ҡайтарайым тип тырышҡайным, унда ла кәрәге бөткән булып сыҡты. Аяғыма тағылған гер кеүек гонаһым менән, ул ҡарт алйотто ғүмерем барына өҫтөрәп йөрөйөм.

**Тәслимә** *(үҙенекен ҡабатлай).* Ярҙам итә күр, зинһар. Башҡа ярҙам һорар бер кемем дә юҡ.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ярар, маташтырып ҡарармын. Теге ваҡытта сихыр менән ғаиләне боҙған инем, әле сатнағанын ҡоршарға кәрәк. Тик телеңде тый. Бына *(комодтан гәзиткә төрөлгән төргәк ала.)* Өшкөрөлгән тоҙ. Өс көн рәттән иреңдең риҙығына һал. Шунан ишек тотҡаларына һөртөп сыҡ. Һөйәркәһе йәшәгән өйҙөң ишек тотҡаларын әйтәм. Уларға үҙе лә, ире лә тотона. Тупһаларына ла һип, аяҡтарына эйәртеп өйҙәренә алып инһендәр. Аңланыңмы?

**Тәслимә.** Аңланым, әбекәй, аңланым.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Бер кем бер нәмә белмәһен. Тоҙҙоң көсө ете көнгә тиклем була. Оҙаҡҡа һуҙма.

**Тәслимә.** Һуҙмайым, әбекәй. Нисек кәрәк шулай эшләрмен. Рәхмәт. Һинең алда мәңге бурыслымын. Онотмам.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ярар, ярар. Һинең рәхмәтең кәрәкмәй миңә, ҡыҙый. Үҙеңде ҡайғырт. Тоҙ – тоҙ инде ул. Ә ир-ат менән абай булырға кәрәк. Нимә тип сыҡтың кейәүгә, май эсендәге бөйөр кеүек йәшәрмен типме? Көтөп тор. Ирҙе ҡасан наҙлап, ҡасан ҡайыҙлап, кәрәк икән, юхалап, алдап-йолдап йәшәтәһең уны. Ғүмер буйы тынғы күрермен тимә. Ир – баш, ҡатын – муйын, тигән булалар. Әйтеүе генә еңел.

**Тәслимә.** Рәхмәт, әбекәй. *(Тоҙло төргәкте һаҡ ҡына тотоп сығып китә.)*

**Зәбихә ҡарсыҡ** *(яңғыҙы).* Их, бисараҡай! Шул абышҡаһы тип бәғеркәйҙәрен телгеләп кенә бөтә инде. Нишләп кенә барып юлыҡҡан ундай аҙғын күңеллегә? *(Башын сайҡай.)* Йәш саҡта кем менән уңырың, кем менән туңырыңды беләһеңме ни ул! Аҡыл бит ул арттан ҡыуып килә, эш уҙғастын.

### 16-сы күренеш

**Сәлихйән ҡарт инә.**

**Сәлихйән ҡарт.** Нимә, мәсекәй

ҡарсыҡ, Тәслимәгә ирен ҡабаттан ғашиҡ иттерергә йөрөйһөңмө?

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ә һинең шул шымсылауҙан башың сыҡмай, ҡарт шайтан!

**Сәлихйән ҡарт.** Ҡыҙыҡ та инде бисәләрҙең ир-ат тип элмәккә баштарын тығырға әҙер булғандарын күҙәтеү. Ә Тәслимәне әйтәм, «әбекәй, һөйҙөргөсөңдө кире ал, биҙҙергес бир» тип ялынып килмәҫ тимә. Бисә-сәсә бит йәш ваҡытта ғына ҡыҙыу була. Һөйөү китһә, урынына нәфрәт оялаусан. Үс, үс алғыһы килә башлай бисәнең. Бахыр ирҙе ҡоро ғына ебәреү ҡайҙа ул, хе-хе-хе. Мөхәббәттән нәфрәткә бер аҙым, тиҙәрме әле?

**Зәбихә ҡарсыҡ** *(биленә йәбешә).* Уф, билем! Тағы ла килеп тотто. Йәнә Алла теләмәгән эшкә барып буталдым, буғай. Шуға һыҙланамдыр әле мин иҫәр.

**Сәлихйән ҡарт.** Шулай булмайса… Гонаһтарың өсөн яза был. Шуға һыҙланыуҙан башың сыҡмай.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ә һин үсәмә, ҡарт шайтан.

**Сәлихйән ҡарт.** Һине үсәп миңә ни файҙа? Өй яландай, хужалыҡ ҙур. Һинһеҙ ҡайҙа китәйем? Хужабикәһеҙ нисек йәшәмәк кәрәк? *(Зәбихә ҡарсыҡты күтәреп, карауатҡа алып барып һала.)* Ҡана, йылан ағыулы дарыуың менән ышҡыйым. Йыланды йылан ғына дауаламаһа…

### 17-се күренеш

**Раҡаевтар фатиры.**

**Раҡаев менән Тәслимә. Раҡаев өҫтәл артында эшләп ултыра: ҡағыҙҙар аҡтара, иҫкәрмәләр яһай. Тәслимә батмуста сынаяҡ менән сәй тотоп инә. Шым ғына туҡтап, Раҡаевты күҙәтә.**

**Раҡаев** *(уны абайлап).* Йән киҫәк, әллә шым ғына мине күҙәтәһең инде?

**Тәслимә** *(үҙ-үҙенә).* Ғәҙәткә инеп тә киткән. *(Раҡаевҡа.)* Сәй алып ингәйнем.

**Раҡаев.** Бик һәйбәт. Дөрөҫөн генә әйткәндә, йән киҫәк, аш тоҙлораҡ булды. Шуға һыуһаттырып тик тора.

**Тәслимә.** Тоҙлораҡ?

**Раҡаев.** Эйе, йән киҫәк, тоҙҙо бөгөн мулыраҡ тондорғанһың.

**Тәслимә.** Ғәфү ит, Зәбихә әбекәй был рецебында тоҙҙо күпме һалырға әйтмәгән ине шул. Аҙ булмаһын, тип күберәк һалып ташлағанмын.

**Раҡаев.** Һалып ташлағанһың? Ниңә көләһең, йән киҫәк? Үҙең көләһең, ә күҙҙәрең бойоҡ. *(Тәслимәне алдына ултырта.)* Әҙәм балаһы ҡыҙыҡ инде. Көйөнөргә сәбәп табып ҡына тора. Хатта һул аяҡтан торһа ла, көйһөҙләнергә сәбәп була. Әһә, бына саҡ күҙҙәрең көлә башланы. Бына, исмаһам, һин тағы минең яратҡан йән киҫәгем.

**Тәслимә.** Һин дә бөгөн элеккесә, яғымлы, йылыһың. *(Баҙнатһыҙ.)* Күптән һинән һорағым килә.

**Раҡаев** *(игтибарһыҙ, ҡағыҙҙарын аҡтарып).* Нимә һорағың килә, йән киҫәк?

**Тәслимә.** Әйт әле, Раҡаев, һин мине йыш алдайһыңмы?

**Раҡаев.** Һин нимә, йән киҫәк? Минең һине ғөмүмән алдағаным юҡ. Йән киҫәктең аҡтан-аҡ, пактан-пак күңелен ниндәйҙер ҡап-ҡара уйҙар боросоймо әллә?

**Тәслимә.** Тимәк, һин миңә һәр ваҡытта ла дөрөҫөн һөйләйһең?

**Раҡаев.** Ниндәй дөрөҫлөк ҡыҙыҡһындыра һине? Һин кем:

тәфтишсеме, прокурормы? Ә мин әллә енәйәтсеме? Мин һиңә һәр ваҡыт дөрөҫөн һөйләйем, бәлки, тырнаҡ осо ҡәҙәрлеһен генә йәшереп ҡалдырһам ҡалдырамдыр. Ирҙәрҙең бәхетле ғаилә тормошо тураһында үҙ ҡанундары бар.

**Тәслимә.** Нимәнән ғибәрәт инде ул ҡанундар?

**Раҡаев.** Ҡатын-ҡыҙға был турала белеү мотлаҡ түгел.

**Тәслимә.** Ярай инде, Раҡаев, исмаһам, береһен генә әйт.

**Раҡаев**. Ҡатыныңды ярат, әммә уға эс-бауырыңды асма. *(Сәй уртлай.)* Тьфу, был ни ғәләмәт, нимә ҡапһам да, тоҙ тәм итә. Хатта сәй ҙә тоҙло кеүек.

**Тәслимә** *(Раҡаевҡа иркәләнеп).* Юҡ, сәйгә бер семтем генә һалдым. Теләһәң, яңынан яһап алып киләм. Был юлы тәмле итеп. *(Китергә боролған еренән туҡтай.)* Әйт әле, Раҡаев, һин мине әле һаман яратаһыңмы? Тик дөрөҫөн әйт, ысын күңелдән...

**Раҡаев.** Ни тигән һүҙ ул: «әле һаман»? Яратам, әлбиттә. Һин бит минең тормошҡа ашҡан хыялым.

**Тәслимә.** Шулай ҙа мин һиңә яңынан сәй яһап алып киләйем әле. Йоҡо бүлмәһенә. Мин килгәнсе йоҡлап китмәҫһеңме?

**Раҡаев.** Нисек йоҡлап китәйем ти, инде, йән киҫәк…

**Тәслимә** *(яңғыҙы. Бәхетле.)* Көтөп тор, албаҫты, бирермен, ти, мин һиңә иремде. Бер ҡарашы, бер һулышы, бер һүҙе лә тәтемәйәсәк һиңә. Көтөп торһон, ер тырнап илаһын, юха йылан! *(Раҡаевтың сынаяғынан сәй уртлай, сырыла, Шунан сынаяҡты үбеп ала. Телефон алып, номер йыя.)* Әйтегеҙ әле, Дүртимәнгә тәүге автобус нисәлә була? Шул тиклем иртәме?

**Раҡаев** *(йоҡо бүлмәһенән).* Һин ҡайҙа, йән киҫәк? Кем менән һөйләшәһең унда?

**Тәслимә.** Хәҙер, ҡәҙерлем, хәҙер. *(Үҙ-үҙенә.)* Шунан, барабыҙмы иртәгә Дүртимәнгә?

### 18-се күренеш

**Дүртимән ҡасабаһы. Дуҫлыҡ урамы. Назаровтарҙың йорто һәм фатиры.**

**Тәслимә менән Назаров.**

**Тәслимә** *(урамда Назаровты осратып).* Дуҫлыҡ урамы ҡайҙа икән, әйтә алмаҫһығыҙмы?

**Назаров.** Дуҫлыҡ урамында баҫып тораһығыҙ.

**Тәслимә.** Ә 1-се йорт теге иң ситтәгеһеме?

**Назаров.** Эйе, ә һеҙгә ниндәй фатир кәрәк?

**Тәслимә.** Ҙур рәхмәт һеҙгә. Фатирын үҙем табырмын.

**Һәр береһе үҙ юлына китә, әммә Назаров бер нисә тапҡыр артына боролоп ҡарай.**

**Тәслимә** *(яңғыҙы. Беренсе һанлы фатирҙың ишеге төбөнә килә. Ҡыңғырауға баҫырға уйлай ҙа туҡтала.)* Ҡуй, берәйһе өйҙә булып ҡуйыуы ихтимал. *(Иләп кенә ишек тотҡаһына тоҙ һөртә).* Нишләп мин генә ғазапланырға тейеш әле? Уның үҙ ире бар, әйҙә, уны ятһын. *(Хәүефләнеп яҡ-яғына ҡарана.)* Ошолай ҡараҡ кеүек ҡасып-боҫоп йөрөрмөн тип кем уйлаған. Ҡайһылай ғәрлек. Ә бит мин түгел, минекен урланылар. Ә миңә үҙемдекен кире ҡайтарырға кәрәк. Белһен әле нисек башҡаларҙың ирен албырғатырға…

**Назаров килеп, Тәслимәне көтеп тора.**

**Назаров.** Нимә эшләйһегеҙ бында?

**Тәслимә** *(тоҙло төргәкте йәшерергә маташа, әммә тоҙ түгелеп китә).* Бер нәмә лә эшләмәйем.

**Назаров.** Һеҙ кем? Шикле икәнегеҙ бер ҡараштан уҡ күренеп тора. Беҙҙең өйҙә бары дүрт кенә фатир. Күршеләрҙең барыһын да таныйым. Ә һеҙҙе бер ваҡытта ла күргәнем юҡ. Кем кәрәк һеҙгә?

**Тәслимә.** Бер кем дә кәрәкмәй. Ҡыңғырауға баҫып ҡарағайным, яуап биреүсе булманы. Әле записка ҡалдырырға тип тора инем.

**Назаров.** Алдашып маташмағыҙ. Бында мин йәшәйем. Нимә һиптегеҙ унда? Ағыу түгелдер бит?

**Тәслимә** *(тағы ла ныҡыраҡ ҡаушап).* Тимәк, һеҙ Назаров булаһығыҙ. *(Үҙ-үҙенә.)* Ә бит тормош беҙ уйлағанға ҡарағанда аҡыллыраҡ һәм уҫалыраҡ. Хыянаттың төбөнә тоҙ ҡойорға уйлағайным, ә бында тағы ла ышаныслыраҡ сара – ире үҙе…

**Назаров.** Шунан, мин көтәм.

**Тәслимә** *(тәүәккәлләп).* Әгәр ҙә һеҙ Назаров икән, мин һеҙгә килдем.

**Назаров** *(фатир ишеген асып).* Инегеҙ, килгән кешене ишек төбөндә ҡабул итеп өйрәнмәгәнмен.

**Фатирға инәләр.**

**Назаров.** Нишләп ишек төбөндә тораһығыҙ? Үтегеҙ, ултырығыҙ! Йә, нимә һибеп тора инегеҙ унда?

**Тәслимә.** Борсолмағыҙ, тоҙ ғына ул.

**Назаров.** Өйҙә сүпләп маташмаҫһығыҙ тип ышанам. *(Телефондан һөйләшә.)* Ғүмәров, мин аҙыраҡ һуңлайым. Кәңәшмәне минһеҙ генә башлағыҙ. Төҙөлөш бүлексәһе мөдиренә әйт: тағы ла бер тапҡыр эште боҙһа, ҡыуам. Атаһы депутат тип ҡарап тормайым.

**Тәслимә** *(үҙ-үҙенә).* Былай килеп сығыуы яҡшыраҡтыр ҙа әле. Улар уйнаш итһен, ә мин йәш түгәйем. Бөтәһен дә һөйләйем дә бирәм. Сихырҙан да көслөрәк булыр.

**Назаров** *(телефондан).* Ҡыскә тиклем генә ваҡыт бирәм. Төкөрәм мин уларҙың проблемаларына. Транспорт етмәй, имеш. Шуны ғына ла хәл итә алмағас, беҙҙең ат һарайына ҡарауылсы булып килһен. Ярты сәғәттән шылтыратып миңә бөтә яңылыҡтарҙы ла еткер. *(Трубканы һала ла Тәслимәгә шик менән ҡарап тора.)* Әгәр ҙә һеҙ кисә мин эштән бушатҡан шофер Хөснөтдиновтың ҡатыны икәнһегеҙ, бушҡа йөрөйһөгөҙ. Ирегеҙ эшкә ашмаған, выжданһыҙ, өҫтәүенә ата ялҡау. Минән һеҙгә бер генә кәңәш: ишек төбөндә сихырсылап йөрөгәнсе, үҙегеҙгә икенсе ир эҙләгеҙ.

**Тәслимә.** Юҡ, мин эштән ҡыуылған шофер ҡатыны түгелмен. Үҙемә икенсе ир эҙләргә лә йыйынмайым.

**Назаров.** Улай булғас, һеҙгә нимә кәрәк?

**Тәслимә.** Мин бында һеҙҙең ҡатынығыҙ арҡаһында килдем.

**Назаров.** Уға нимә булған? Ул әле Өфөлә, сессияла.

**Тәслимә.** Беләм. Уның тураһында барыһын да беләм. Ҡайҙа уҡый, ниндәй ҡунаҡханала туҡталған…

**Назаров.** Бер-бер хәл булғанмы әллә?

**Тәслимә.** Бер нәмә лә булмаған. Уның барыһы ла ал да гөл. Ә бына һеҙҙең менән беҙҙеке ҡыуанырлыҡ

түгел. Минең ирем менән һеҙҙең ҡатынығыҙҙың – роман…

**Назаров.** Нимә? Минең ҡатын менән һеҙҙең ир? Һеҙ нимә һөйләгәнегеҙҙе беләһегеҙме?

**Тәслимә.** Беләм. Улар күптән инде осраша. Һәм дә бик йыш. Шуныһын ғына аныҡ белмәйем: улар бер-береһен яратамы, әллә был ябай уйнаш ҡынамы? Дөрөҫ аңлағыҙ, мин иремде аҡламайым. Тик һеҙҙең ҡатынығыҙ ҙа… һеҙҙең дә бит үҙ ғаиләгеҙ.

**Назаров төшөнкө ҡиәфәт менән креслоға барып ултыра. Тынлыҡ.**

**Тәслимә.** Ғәфү итегеҙ мине, зинһар. Миңә, моғайын, әйтмәҫкә кәрәк булғандыр. Тик бит минең дә йәнем бар. Иремдән башҡа бер кемем дә юҡ. Үтенеп һорайым: ҡатынығыҙға килгәнемде әйтә күрмәгеҙ. Өшкөрөлгән тоҙ менән иремдән биҙҙерергә йөрөгәнем тураһында бигерәк тә… Әгәр ҙә ирем менән ҡатынығыҙ был хаҡта белеп ҡалһа, тағы ла насарыраҡ буласаҡ. Ишетәһегеҙме?

**Назаров** *(һәлендергән башын күтәрә биреп ҡаға).* Ишетәм.

**Тәслимә.** Ғәфү итегеҙ. *(Сығып китә. Яңғыҙы.)* Әле генә ҡайһылай ҡыҫыр ине. Ата күркә кеүек… Уҡаһы ҡалай тиҙ ҡойолдо… Ҡойолһон да… Бисәһенә баш булырға кәрәк ине. *(Шәп-шәп атлап сығып китә.)*

**Назаров башын эйеп ултыра бирә. Телефон шылтырай ҙа шылтырай.**

## Икенсе шаршау

### 1-се күренеш

**Шахмат клубы.**

**Бәләкәс кенә мәжлес бара. Раҡаев, Сәлимә, Ҡасимов, Вәсилә.**

**Раҡаев.** Был ҡоймаҡты ла майланыҡ. Минең уңыш өсөн күтәрәйек.

**Сәлимә.** Йәшәһен ғәҙел хөкөм! Һәм беҙҙең аҡыллыларҙан-аҡыллы Сәғит Хәсән улы. Әйтерһең дә, суд залында түгел, ә театрҙа тамаша ҡылдыҡ. Ул шул тиклем оҫта, ышандырырлыҡ итеп һөйләне. Һушының китер!

**Раҡаев.** Залда күҙҙәре янып шундай гүзәл тамашысым ултырмаһа, белмәйем, еңеп булыр инеме икән, юҡмы? Прокурорҙың дәлилдәре бик етди ине.

**Ҡасимов.** Кешенең еңергә мөмкинлеге булыуы үҙе генә лә һәйбәт. Еңеү тантанаһын кисереп ҡарау өсөн мин ғүмер буйы шахмат менән мауыҡтым.

**Вәсилә** *(Раҡаевка).* Ҡотлайым, һеҙгә һәр саҡ уңыш юлдаш булһын. Эшегеҙҙә генә түгел, һәр даирәлә лә.

*Шампань шарабы эсәләр.*

**Ҡасимов** *(шахмат таҡтаһы яғына ишаралап, Раҡаевка.)* Һеҙҙең йөрөш, ҡәҙерле Сәғит Хәсәнович.

**Раҡаев.** Рәхмәт.

**Раҡаев менән Ҡасимов стенаһағы шахмат таҡтаһына йүнәлә.**

**Вәсилә** *(Сәлимәгә).* Ошондай кешенән һуң *(Раҡаев яғына ымлай.)* нисек ирегеҙ менән йәшәй алаһығыҙ? Күҙ алдына ла килтерә алмайым.

**Сәлимә.** Иремде мин ыңғайына һыпырырға тырышам. Ирҙәрҙең бөтәһе лә шуны ярата. Бесәйҙе, ана, кирегә һыйпап ҡара, хәҙер сапсып алыр. Әйткәндәй, ирем ат үрсетеү менән шөғөлләнә.

**Вәсилә.** Йылҡы үрсетә? Ысынлапмы? Ҡайһылай мауыҡтырғыс.

**Сәлимә.** Әллә, мине бер генә лә

мауыҡтырмай. Бәлки, уның ҡулы аҫтында эшләгем килмәгәнгәлер.

**Вәсилә.** Көнсөлмө? Көнсөл ирҙәргә аптырайым мин. Матур ҡатынға өйләнәләр ҙә аҙаҡтан ҡыҙғанып йонсоталар. Үҙҙәре лә ғазаплана, ҡатындарына ла тынғы юҡ. Холоҡтарына күрә, әҙәм ҡарамаҫ ямаҡайға йәки сөрөшөп бөткән ҡарсыҡҡа өйләнһәләр ни була инде?

**Сәлимә.** Ирем көнсөл түгел. Ул тәкәббер, мин-мин, мин кем… Кемдеңдер уны алдау ихтималы башына ла инеп сыҡмай. Шуға күрә унан ситтәрәк тороу хәйерле.

**Вәсилә.** Ә мин егерме йылға яҡын иремдең ҡулы аҫтында эшләнем. Ул шеф-повар ине. Гел мыжып, әрләшеп йонсота торғайны. Ә ҡапыл үлеп киткәйне, үҙемә урын таба алмай ыҙаландым. Шул тиклем ҡыйын булды, хатта аҫылыныр сиккә еттем.

**Сәлимә.** Аҫылынырға? Ир өсөнмө?

**Вәсилә.** Эйе, ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа миңә яратам тип әйтмәгән, бер бөртөк сәскә бүләк итмәгән ҡарун өсөн. Ә йоҡлағанда ҡайһылай хырылдап йәнгә тейҙе. Өҫтәлдәге стакан эсендәге балғалаҡ зыңғылдап тора торғайны *(Стакан эсендә ҡалаҡ зыңғылдата.)*

**Сәлимә.** Һөйөү күҙ йәшһеҙ генә булмай шул.

**Ҡасимов менән Раҡаев инә.**

**Раҡаев.** Һеҙ һаман да шул һөйөү хаҡындамы?

**Ҡасимов.** Кемдең ҡайһы ере ауырта бит.

**Сәлимә.** Ә һеҙҙең ауыртмаймы ни, Мәрүән Әсләмович? Бер ваҡытта ла ауыртҡаны булманымы?

**Ҡасимов.** Нишләп булмаһын? Минең дә алһыу томандарға сорналған мәлдәрем бар ине.

**Раҡаев.** Һеҙҙең?

**Вәсилә.** Һөйләгеҙ әле, Мәрүән Әсләмович.

**Ҡасимов.** Студент сағымда уҡ бик мөһим бер шахмат ярышында еңеп сыҡтым. Фотоларым гәзит битенән төшмәне, уңға-һулға интервьюлар өләшәм. Даным үҙемдең генә түгел, буласаҡ, ә хәҙер инде элекке, ҡатынымдың да башын әйләндерҙе. Әммә тиҙҙән минән бөйөк шахматсы сыҡмаясағы асыҡланды. Яратҡан ҡатыным миңә быны ғәфү итә алманы. Мине алдаҡсы тип иҫәпләне, бахырлыҡта ғәйепләне. Ә шахматты шул тиклем күрә алмай башланы, хатта шаҡмаҡ биҙәкле кейемдәрен дә сығарып бырғаны. Данһыҙ мин уның өсөн бер бисараға әйләндем. Ә бит хатта, кәрәк булһа, артымдан, декабрист ҡатындары кеүек, Себергә лә барырға һәләтле, тигән ышанысым бар ине.

**Сәлимә.** Ниндәй моңһоу тарих. Тормош юлдашыңда алданмаҫ өсөн мотлаҡ ҡартайырға кәрәкме икән ни?

**Ҡасимов.** Әҙәм балаһының булмышы шул. Ул хаталана, алйотлоҡтар эшләй, тормошҡа ашмаҫ хыялдар тоҙағына эләгә.

**Раҡаев.** Улай булғас, аҡыллы алйотлоҡтар өсөн эсеп ебәрәйек.

**Сәлимә.** Хаталанырға юл ҡуймаған хаталар өсөн!

**Вәсилә.** Тормошҡа ашыр хыялдар өсөн!

**Ҡасимов.** Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа.

**Музыка яңғырай. Ҡасимов менән Вәсилә, Раҡаев менән Сәлимә бейей башлай.**

**Сәлимә** *(Рәкаевка).* Бында шундай рәхәт. Дуҫтарың да һөйкөмлө. Ә мин иҫерек…

**Рәҡаев.** Бер бокал шарап кешене йәмһеҙләмәй, киреһенсә, матурыраҡ, ихласыраҡ итә.

**Сәлимә.** Миңә һинең менән шундай рәхәт, Сәғит. Ҡыҙғаныс, сессия бөттө. Иртәгә мин ҡайтып китәм. Шунан тағы һине һағына башлаясаҡмын.

**Рәҡаев.** Айырылышыу – бер-берендән туйып китмәҫ өсөн иң шәп сара. Оҙаҡламай мин үҙем дә Питерға семинарға китәм. Әммә бөгөн бындамын бит әле.

**Рәҡаев менән Сәлимә ҡосаҡлашып үбешәләр. Тауыш ишетелә.**

**Вәсилә.** Ваҡыт һуң икән дә… Ҡарауылсы тәҙрә ҡапҡастарын, ишекте яба башланы.

**Рәҡаев.** Беҙгә лә китергә ваҡыт.

**Ҡасимов.** Ҡарауылсыны борсомайыҡ. Әйҙәгеҙ, мин һеҙҙе арҡы ишектән оҙатып ҡуям.

**Сәлимә.** Шундай матур кис булды. Ҙур рәхмәт һеҙгә.

**Вәсилә.** Үҙегеҙгә лә рәхмәт. Тағы килегеҙ.

**Ҡасимов, Рәҡаев, Сәлимә китәләр.**

**2-се күренеш**

**Ишек шаҡыйҙар.**

**Назаров тауышы.** Асығыҙ әле, мин бур ҙа, кеше талаусы ла түгел. Бер генә минутҡа асығыҙ!

**Назаров инә.**

**Назаров.** Был ни ғәләмәт? Уларҙың ошонда инеп киткәнен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем дә баһа.

**Вәсилә.** Кемде эҙләйһегеҙ?

**Назаров.** Һеҙгә бер йылмаяҡ ир менән ҡатын ингәйне. Һары сәсле ҡатын менән… Ҡайҙа йәшенделәр?

**Вәсилә.** Ниндәй йылмаяҡ? Был ниндәй һүҙ?

**Назаров.** Мин һеҙгә түләйем, тик һөйләгеҙ генә: кем ул, был ҡатын менән бында йыш киләләрме?

**Вәсилә.** Миңә һеҙҙең аҡсағыҙ кәрәкмәй. *(Ҡасимовка ҡаршы йүгереп бара.)* Мәрүән Әсләмович, бында бер кеше… Ул… Мәрүән Әсләмович, һеҙ ҡайҙа?!

**Назаров йәшенә. Ҡасимов менән Вәсилә йүгереп килеп инә.**

**Вәсилә.** Ҡайҙа һуң ул? Яңы ғына ошонда ине… Ул Сәғит Хәсәнович тураһында һораша ине шикелле.

**Ҡасимов.** Сәғит Хәсәнович менән Сәлимә килеп киткәндән һуң беҙҙә мажаралар башлана. Әллә ниндәй сәйер кешеләр килә. Был да, теге ҡыҙ кеүек, келәткә инеп боҫманымы икән?

**Вәсилә.** Мин ҡурҡам. Ҡарауылсыны саҡырмайыҡмы?

**Ҡасимов.** Ә минең йәштә бер нимәнән дә ҡурҡмай башлайһың икән ул. *(Келәт ишеген ҡапыл аса. Унан сысҡан килеп сыға.)*

**Вәсилә** (*сәрелдәп ҡысҡыра).* Сысҡан!

**Ҡасимов та йөрәгенә йәбешә.**

**3-сө күренеш**

**Урам.**

**Тәслимә менән Назаров. Назаров яғаһын күтәргән, уҫал мығырҙай. Мөйөштән Тәслимә килеп сыға.**

**Тәслимә.** Аһ, был һеҙме? Ҡайһылай ҡурҡыттығыҙ? Бында нишләйһегеҙ? Һеҙ ҙә арттарынан күҙәтеп йөрөйһөгөҙмө?

**Назаров.** Кәрәген бирәм мин ул йылмаяҡтың. Иҙмәһен иҙәм.

**Тәслимә.** Кемдең, Раҡаевтыңмы?

**Назаров.** Эйе, һеҙҙең Раҡаевы-ғыҙҙы ҡоторған эт кеүек ялпаштыра һуғам.

**Тәслимә.** Һеҙ нимә? Нисек инде «ялпаштыра һуғам»?

**Назаров.** Ул бәндә минең тормошомдо емерҙе!

**Тәслимә.** Улайһа мине үлтерегеҙ. Һеҙҙең тормошто мин емерҙем бит. Һеҙгә мин ғазап килтерҙем. Юҡ, юҡ, һеҙҙең Раҡаевҡа тейергә бер ниндәй хоҡуғығыҙ юҡ. Ҡоторған эт кеүек итеп мине ялпаштыра һуғығыҙ.

**Назаров.** Минең һеҙгә бер асыуым да юҡ. Һеҙ – намыҫлы ҡатын. Ә алйотланып йөрөйһөгөҙ икән, был аҡылһыҙлыҡтан түгел, ә үтә ныҡ яратҡандан. Мин дә ҡатынымдың һеҙҙең кеүек тоғро булғанын бик теләр инем. Ярай, мин ул иҙән сепрәгенең дә кәрәген бирәсәкмен.

**Тәслимә.** Нишләп уны мыҫҡыл итәһегеҙ. Улай ярамай!

**Назаров.** Ниңә мыҫҡыл итә, ти. Уға хәҙер тап-таман.

**Тәслимә.** Һеҙ бит миңә бер кемгә лә әйтмәҫкә вәғәҙә биргәйнегеҙ.

**Назаров.** Борсолмағыҙ. Әйтмәм. Һеҙҙән белгәнемде әйтмәм. Ҡатынымдың уйнаш иткәнен теләһә кемдең еткереүе мөмкин ине.

**Тәслимә.** Үтенеп һорайым һеҙҙән. Әйҙә, ашыҡмайыҡ. Бәлки, барыһы ла яйланыр.

**Назаров.** Яйланмаҫ. Нимә, миңә мөгөҙлө булып йәшәргә һәм бер нәмә лә белмәгән булып ҡыланырғамы?

**Тәслимә.** Харрас Хәкимович, бөтәһенә лә мин генә ғәйепле. Сүпте өйҙән сығармаҫ өсөн миңә нимә эшләргә?

**Назаров.** Һеҙҙең – үҙ өйөгөҙ, минең – үҙемдеке. Түҙә алаһығыҙ икән, һеҙ, моғайын, бик көслө ҡатындыр. Ә минең иһә хыянатты кисерерлек күңел көсөм юҡ. Ярай, һау булығыҙ. Бәлки, тағы осрашырбыҙ әле.

**Тәслимә.** Һау булығыҙ.

**Назаров китә.**

**Тәслимә** *(яңғыҙы).* Ниндәй көслө булайым, ти, инде мин, күңелемдә шундай буталсыҡ хөкөм һөргәндә. Үҙем дә әллә ниндәй булып киттем. Үҙ-үҙемде юғалттым шикелле. Ҡайҙа минең бәхетем, ҡайҙа ышығым? Ә Раҡаевҡа нисек ҡарарға тейешмен мин хәҙер? Үҙ-үҙемә? Етмәһә, хәҙер был Назаров. Ул бит әллә нәмәләр эшләп ташларға һәләтле. *(Тирә-ягына ҡарана.)* Ә мин ҡайҙа китеп бара инем һуң әле? Нурисламға бит әле. Ә нишләп? Ниңә, ярамаймы ни? Дуҫым мине шифалы сәй эсергә саҡырған икән…

## 4-се күренеш

**Нурисламдың фатиры.**

**Нурислам өҫтәл әҙерләй. Май шәм яндыра. Нурислам менән Тәслимә.**

**Нурислам.** Тәбиғәт кешегә иҫ киткес ҡеүәт биргән. Әммә кеше үҙендәге ул көскә юл таба белмәй. Ауырыу тән арҡаһында йән дә ауырыуға дусар була. *(Тәслимәнең сынаягына эсемлек ҡоя.)* Был шифалы эсемлекте Тибеттың аҡыл эйәләре эсә. Ул кешегә тынысლыҡ һәм үҙ-үҙенә ышаныс бирә.

**Тәслимә.** Әгәр ҙә кеше бары тик үҙ-үҙенеке генә булһа икән. Ул бит яратҡан кешеһенеке лә.

**Нурислам.** Әхлаҡи ихтыярһыҙлыҡ та – ауырыу организмдың күрһәткесе.

**Тәслимә** *(көлөп).* Их, һеҙ ирҙәр,

ҡайҙан шундай һүҙҙәр табаһығыҙ һеҙ?! Шундай матур, юғары һүҙҙәр, ә ысынбарлыҡта барыһы ла ялған һәм буш.

**Нурислам.** Һине кемдер рәнйеткән. Онот, тыныслан. Тәнең йылылыҡ һәм тыныслыҡ тойһон. Ул ваҡытта йәнеңә лә тыныслыҡ килер. Был элексир һәр бер күҙәнәккә еңеллек бирә… Тыныслан, көсөргәнмә. Үҙ-үҙеңде ысҡындыр…

**Тәслимә.** Нисек-нисек? Үҙ-үҙеңде ысҡындыр…

**Нурислам.** Тәбиғәттә бөтөн йән эйәләре лә шулай эшләй. Тәбиғилек һәм ҡотолғоһоҙ хәлдәргә күнеү, буйһоноу. Буйһоноу һәм осоу. Бәпембә орлоғо кеүек. Ел уны эләктереп ала ла осороп алып китә. Ә ул оса ла оса, ҡасан да булһа ергә төшөрөн белеп.

**Тәслимә.** Әгәр был бәпембә ҡайҙалыр һәләкәтле бер урынға барып төшһә?

**Нурислам.** Тәбиғәт барыһын да үҙ урынына ҡуя. Ҡайҙалыр бәпембә орлоғо һәләк була икән, тимәк, шулай кәрәк. Ул көсһөҙ булған, йәшәрлек булмаған. Уны йәлләп тороуҙан фәтеүә юҡ. Тәбиғәткә ышанырға кәрәк.

**Тәслимә.** Нишләп миңә шул тиклем итеп ҡарайһың?

**Нурислам.** Һине ҡыҫып ҡосаҡлар инем дә бер кемгә лә бирмәҫ инем.

**Тәслимә.** Бик һуң түгелме был теләгең? Мин бит хәҙер ир ҡатыны.

**Нурислам.** Булһаң ни. Һин барыбер миңә донъяла иң һөйкөмлө, иң яҡын кешем булып ҡаласаҡһың. Мин – тәбиғәт балаһы. Минең өсөн бер ниндәй шартлылыҡ та әһәмиәтле түгел. Һинең миңә әле бер ваҡытта ла әлеге кеүек оҡшағаның юҡ ине. *(Тәслимәнең ҡулдарын үбә.)*

**Тәслимә** *(һүҙҙе ситкә борорға тырышып).* Сәй һыуынған. Һиңә элексирыңды эҫетергә кәрәк.

**Нурислам.** Шулай шул. Хәҙер киләм. *(Сығып китә.)*

**Тәслимә.** Алдаймы, әллә ысынды һөйләйме? Ул ҡасан дөрөҫөн һөйләгәнен, ҡасан мине лә, үҙен дә алдарға тырышҡанын үҙе лә аңламай шикелле. Кешегә ниҙер була ла, ул, бәпембә орлоғо кеүек, бәләкәс кенә парашют булып оса ла китә, ҡайҙа барғанын да белмәй. Ел ыңғайына. Ә елдә осоу рәхәт. *(Эске бер әрнеү тойғоһо менән кофтаһын сисә.)* Ә нишләп ярамай? Нимә туҡтата ала мине? Һөйөүме? Эйе, Раҡаевты яратыуыммы? Әллә Раҡаевтың мине яратыуымы? Тик тағы ла Раҡаевтың Сәлимәне яратыуы ла бар бит әле. Ха-ха-ха! *(Әрнеүле көлә лә ниндәйҙер бер ярһыу менән Нурисламды көтә.)*

**Нурислам инә.**

**Нурислам.** Һин нимә? Нишләйһең?

**Тәслимә.** Ниңә ҡурҡаһың? Һин бит – шартлылыҡты бар тип тә белмәгән тәбиғәт балаһы.

**Нурислам.** Эйе, әммә бында иң мөһиме – шартлылыҡҡа һинең нисек ҡарауың.

**Тәслимә.** Ә ниңә, аңлашылмаймы ни?

**Нурислам.** Аңлашыла.

**Тәслимә.** Тимәк, минән баш тартаһың…

**Нурислам.** Юҡ, әлбиттә, тик һинең өсөн борсолам.

**Тәслимә.** Йә, ҡосаҡлайһыңмы мине, әллә аҡыл һатып тора бирәһеңме?

**Нурислам Тәслимәгә ташлана, уны шашып үбә башлай. Ут һүнә.**

**5-се күренеш**

**Тәслимәнең төшө.**

**Тәслимә яңғыҙы. Уяна. Уртаға сығып баҫа, һәм сәхнәлә торған кеүек, аккомпанементһыҙ йырлай.**

**Тәслимә.**

*Ғәйепләме ни мин,*
*Ғәйепләме ни мин,*
*Ғәйепләме ни мин һөйгәнгә?*

**6-сы күренеш**

**Нурислам инә.**

**Нурислам** *(Тәслимәне уята).* Тәслимә, Тәслимәкәй, уян.

**Тәслимә.** Әллә йоҡлап киткәнмен инде.

**Нурислам.** Эйе, һиңә ҡайтырға ваҡыт, Тәслимәкәй. Ирең юғалтҡандыр.

**Тәслимә.** Ирем? Ниндәй ирем?

**Нурислам.** Ирең эҙләп сыҡмаһын, тип борсолам. Һуң инде, бик һуң.

**Тәслимә.** Ә, эйе. Ирем эҙләп сығып ҡуйһа… Ә һин?

**Нурислам.** Әйҙә, мин һине оҙатып ҡуям. Минең арҡала боҙолошоп ҡуймағыҙ. Һин минең өсөн үтә ныҡ ҡәҙерлеһең.

**Тәслимә.** Үтә ныҡ була тиме ни?! *(Тиҙ генә йыйынып, кейемдәрен эләктерә лә сығып йүгерә.)* Оҙатырға кәрәкмәй. Юлды табам мин, үҙем табырмын. Һин борсолма. Барыбер берәй юлын табам мин…

**7-се күренеш**

**Тәслимә менән Раҡаев.**

**Тәслимә.** Был мин – бер кескәй бәпембә, осоп ҡайттым!

**Раҡаев.** Ҡыҙыҡ, белергә ине был бәпембәнең ҡайҙарҙан осоп ҡайтҡанын?

**Тәслимә.** Экзотика, шифалы эсемлектәр бихисап булған ғәжәйеп бер азат донъянан.

**Раҡаев.** Ниндәй азат донъянан? Ҡайҙа булдың?

**Тәслимә.** Ҡайҙа ғына булһам да, мин хәҙер унда юҡ инде.

**Раҡаев.** Дөрөҫ, әммә мин – һинең ирең һәм ҡатынымдың ҡайҙа һәм кем менән ваҡыт үткәргәнен белергә тулы хоҡуғым бар.

**Тәслимә.** Был ниндәй тәфтиш, Раҡаев? Мин бит һинең ҡайҙа һәм кем менән ваҡыт үткәргәнең тураһында һорамайым.

**Раҡаев.** Эйе, әммә ҡайһы ваҡыт һорарға ла кәрәк булып ҡуя. Сама кәрәк бит.

**Тәслимә.** Әллә мине көнләшәһең инде? Кит әле, Раҡаев. Был һиңә һис кенә лә килешмәй. Шәхес азатлығы тураһында һөйләп ҡолағымды тондороп бөтөргән кешегә… Көнләшеү – шәхес азатлығына йоғоноу ул. Көнләшеү – бығау. Көнсөл кеше үҙе ултырған ботаҡты ҡырҡа. Шулай тип әйтәһең бит һин. Эйе, тигән.

**Раҡаев.** Эйе. Көнсөллөк бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән, йүгәнһеҙ бер тойғолар дауылына әйләнеп киткәндә шулай. Әммә ҡайһы ваҡыт көнләшеү – партнерыңды хата аҙым яһауҙан ҡурсалап алып ҡалыу ҙа…

**Тәслимә.** Тимәк, әле һин партнерыңды ҡурсалап алып ҡалырға тырышаһың?

**Раҡаев.** Эйе. Был – ғәҙәти, teләһә кем шулай эшләр ине.

**Тәслимә.** Теләһә кем? Ә минең теләһә кем булғым килмәһә? Әгәр ҙә мин ғәҙәти кеше түгелмен икән?

Ул саҡта нисек? Ни өсөн минең өсөн һин уйлайһың? Ниңә һин минең бөтөн хоҡуҡ һәм бурыстарымды билдәләп, мине ҡамалап ҡуйҙың?

**Раҡаев.** Был нимә, беҙҙең ғаиләләге тәүге талашмы?

**Тәслимә.** Ғәжәпме? Бисә тауыш күтәрәме? Эйе, йән киҫәк башын ҡалҡыттымы? Юғиһә ҡайһылай йәтеш ине: ни хәл, йән киҫәк? Яҡшы, бик һәйбәт? Эйе лә баһа, йән киҫәктең ни хәстәре булырға мөмкин. Барыһы ла иҫ киткес! Һинең өсөн бары тик бик уңайлы, әле генә нисек әйттең әле, «партнер» икәнемде күптән түгел генә аңланым.

**Раҡаев.** Быларың менән нимә тип әйтергә уйлайһың?

**Тәслимә.** Ах, һин аңламайһыңмы? Ҡайһылай бер ҡатлыбыҙ беҙ, төшөнөп етмәйбеҙ, шулаймы? Һис кенә лә башҡа барып етмәй ҡатыныңдың... *(Кинәт кенә туҡтай. Раҡаевҡа ташлана.)* Юҡ, Сәғит! Тыңлама мине. Бер генә һүҙемә лә ышанма... Мин башҡа бер ваҡытта ла тауыш күтәрмәйәсәкмен! *(Тубыҡлана, ҡысҡырып илай.)* Ғәфү ит мине, зинһар, ғәфү ит... Мин һине шул тиклем яратам, Сәғит, шул тиклем яратам. Бөтәһе лә шуның арҡаһында... Мин тиле. Үҙемдең нимә эшләгәнемде үҙем белмәйем...

**Раҡаев.** Тынысла. Һин нимә? Һин бер ниндәй ҙә насар һүҙ әйтмәнең. Тынысла. Хәҙер мин һиңә һыу алып киләм. *(Сыға.)*

**Тәслимә** *(яңғыҙы).* Йә Хоҙа! Ни тиклем ярата инем мин һине, Раҡаев! Шул арҡала мин үҙемде үҙем юғалттым, ахыры. Мин бит һиңә хыянат иттем. Мин һинән үс алдым! Ҡалай еңел генә һәм ҡайһылай бысраҡ... Ә бит, беҙҙең барыһы ла саф, тапланмаған буласаҡ, тип хыялланы инем. Их, иҫәр мин, нишләп был Назаровҡа ҡатынының хыянаты тураһында һөйләнем икән? Мин уны фашланым, ә үҙем уның көнөнә төштөм. *(Башын сайҡай.)*

**Раҡаев инә.**

**Раҡаев** *(һыу бирә).* Һин арығанһың. Ял ит. Әйҙә, шым ғына ултырып торайыҡ, яраймы?

**Тәслимә.** Ярай.

**Раҡаев.** Беҙҙең иң беренсе кисте иҫләйһеңме? Туйҙан һуң һөйләшергә күпме тәьҫорат йыйылғайны, ә беҙ шым ғына йәнәш ултырҙыҡ. Беҙгә һөйләшеүҙең дә кәрәге юҡ ине. Икебеҙгә генә шундай рәхәт ине.

**Тәслимә.** Эйе. Ул ғәжәйеп кис, гүйә, булмаған да кеүек. Йәки күптән, минең бөтөнләй икенсе тормошомда булған.

**Тәслимә менән Раҡаев шым ғына ултыра.**

**Раҡаев.** Бер-ике көндән мин Питерға семинарға китәм.

**Тәслимә.** Оҙаҡҡамы?

**Раҡаев.** Оҙаҡҡа. Бер ай тирәһе.

**Тәслимә** *(күңелһеҙ генә баш сайҡай).*

### 8-се күренеш

**Назаровтар фатиры.**

**Назаров менән Сәлимә.**

**Назаров** *(ҡулына ҡамсы тотҡан).* Мин һиңә уйларға бер көн ваҡыт бирҙем. Бер көн үтте. Хәҙер һин миңә бөтәһен дә һөйләп бирәһең. Шунан мин ни эшләргә хәл итәм. Яҡшылыҡ менән аңлашырға теләйһең икән, һөйлә. Яҡшылыҡ менән теләмәйһең икән, мин икенсе юлды һайлармын. Йә, көтәм!

**Сәлимә.** Нимә һөйләргә? Минең бер ниндәй ҙә насарлыҡ эшләгәнем юҡ. Әгәр ҙә кемделер оҡшатҡанмын икән…

**Назаров.** Әһә, һин кемделер оҡшатҡанһың… Бары оҡшатҡанһың ғына… *(Ҡамсы менән иҙәнгә һуға.)* Нимә, мине алйотҡа һанайһыңмы әллә? Мин һиңә нимә теләйһең шуны бирҙем. Белем, аҡса, ҡайҙа теләйһең шунда бараһың, ни теләһәң шуны һатып алаһың…

**Сәлимә.** Туҡта. Нимә бушты һөйләйһең?

**Назаров.** Бушты? Шулар барыһы ла бушмы? Аҡса, йәнең теләгәнде эшләү мөмкинлеге бушмы? Һәр бер ҡатын-ҡыҙ хыялланған нәмәләрҙе һин сүп урынына ла күрмәйһеңме? *(Ҡамсы менән һелтәнә лә, Сәлимәгә тейеп ҡала.)*

**Сәлимә.** Аҡылдан шаштыңмы әллә? Ауырта ла инде.

**Назаров.** Ә миңә ауыртмаймы? Минең хәләл ҡатыным, белем алыу урынына, ниндәйҙер бер елғыуар адвокат менән өҫтөрәлеп йөрөгәнен белеү миңә рәхәт тип уйлайһыңмы әллә?

**Сәлимә.** Был ғәйбәтте ниндәй әшәкеһе килтереп еткергәндер һиңә, белмәйем. Әммә һин уға ышанырға тейеш түгелһең. Был – ялған. Төптө дөрөҫ түгел.

**Назаров.** Алдайһың. Күҙгә ҡарап алдап тораһың. Мине шул тиклем иҫәр тип уйлайһыңмы әллә? Юҡ инде, дөрөҫлөктө йәшерә алмаҫһың!

**Сәлимә.** Сәсрәп кит әйҙә үҙеңдең дөрөҫлөгөң менән!

**Назаров.** Һин шулаймы әле, кәнтәй! *(Ҡамсы менән һуға.)*

**Сәлимә.** Һин үҙеңдең нимә һөйләгәнеңде беләһеңме ул, юҡмы?

**Назаров.** Кәнтәй булмайынса, кем һин? Тоғро ҡатын булһаң, ғаилә тураһында уйлар инең. Ә бер елғыуар адвокатҡа түшәлеп ятмаҫ инең. *(Ҡамсы менән һуға.)*

**Сәлимә.** Туҡта, тием! Өнөңдө тыҡ!

**Назаров.** Үҙең туҡта! Сисен хәҙер! Сыр яланғас сисен!

**Сәлимә.** Аҡылдан шаштыңмы әллә?

**Назаров.** Хәҙер һин аҡылдан шашырһың! *(Ҡамсы менән һуға.)*

**Сәлимә** *(ҡотолорға тырыша, әммә ҡайһы берҙә ҡамсы килеп тейә).* Туҡта! Теймә! Ауырта бит!

**Назаров.** Сисен! *(Тағы ла асырғаныбыраҡ һуға.)*

**Сәлимә** *(ашыға-ашыға сисенә. Алҡаларын, башҡа биҙәнгестәрен сисеп быраға).* Мә, тығын! Ал!

**Назаров** *(уҫал көләп, һелтәнеүен дауам итә).* Бөтәһен дә сис, кәнтәй! Һуңғы ебенә тиклем, бер нәмә лә ҡалмаһын!

**Сәлимә** *(эске кейемдән генә ҡала).* Мә, бер нәмәң дә кәрәкмәй, ал, тығын!

**Назаров.** Ә хәҙер тай бынан! *(Сәлимәгә ҡамсы менән һыҙыра.)*

**Сәлимә ҡысҡырып илай-илай өйҙән сығып йүгерә.**

**Назаров** *(яңғыҙы).* Бына шулай була ул. Мин һеҙгә күрмәгәнегеҙҙе күрһәтермен әле. Ә ул адвокат йораты миңең алда үрле-ҡырлы һикерәсәк! *(Ҡамсыһы менән уңлы-һуллы һелтәнә.)*

### 9-сы күренеш

**Суд залы.**

**Тәслимә менән Антонина Ивановна.**

**Тәслимә.** Һеҙгә тотош асылдым

да ҡуйҙым, Антонина Ивановна. Әхирәтемә һөйләмәгәнде, һеҙгә бөтәһен дә һөйләп бирҙем.

**Антонина Ивановна.** Ишкәнһең ишәк сумарын! Өшкөрөлгән тоҙ, имеш… Аҙғын ирҙе бер ниндәй им дә туҡтата алмай. Мин дә йөрөнөм бер күрәҙәсегә заманында. Эскесе ирҙәрҙе фотоларына ҡарап та дауалай торғайны. Иремдең фотоһын алып барған булдым, йә шунан?

**Тәслимә.** Шунан ни булды?

**Антонина Ивановна.** Уның имләүенән фотография үҙе икенсе көндө һарғайып сыҡты. Ә ир тигәнең тағы ла ныҡыраҡ эсә башланы. Юҡ, үҙәге серек икән, бер нәмә лә ҡылып булмай. Ир-аттың булмышы шул: бөтәһе лә аҙғын. Тик эскесе ирҙәр генә тоғро була, башҡалары бөтәһе лә йөрөй. Бына минең ирем һөйрәлеп эсә эсеүен дә, бисәләрҙе бар тип тә белмәй. Айыҡ сағында ла шөрләп кенә тора ул беҙҙең халыҡтан, ә инде эсеп алды ниһә, ҡойроғон бөтөнләй бото араһына тыға. Ул яғынан мин – тыныс. Аҙғын ирҙе уйнаштан биҙҙереп булмай уны. Һөйәркәһен биҙҙереүе еңелерәк.

**Тәслимә.** Ә нисек биҙҙерәһең?

**Антонина Ивановна.** Кеше алдында йөҙөн йырт. Башҡа бер ваҡытта ла яҡын килмәҫ.

**Тәслимә.** Мотлаҡ кеше алдындамы?

**Антонина Ивановна.** Иң мөһиме шул да. Кейәүгә сыҡҡансы минең бер уҡытыусы менән мөхәббәт булып алғайны. Ул саҡта мәктәптә завхоз булып эшләй инем. Ә тегенең бисәһе – завуч. Шул тиклем үткер, сатнап тора. Белеп ҡалған был, саҡырып алды мине уҡытыусылар бүлмәһенә. Шунда ғәм халыҡ алдында ошондай тырнаҡтары менән битте сапсып алды, әйкәйем. Шунан ни булды, тиһеңме?

**Тәслимә.** Нимә булды?

**Антонина Ивановна.** Минең бөтә мөхәббәт күҙ асып йомғансы осто ла юҡ булды. Хатта күтәрелеп ҡарарға ла теләгем бөттө теге уҡытыусыға. Унан килеп, тырналған битең менән нисек ҡарайһың? Ояты ни тора. Бына шулай ул, әйкәйем.

**Тәслимә** *(ҡул һелтәп).* Минең осраҡта был бармай, Антонина Ивановна. Раҡаевтан бер клиентын биҙҙерермен, икенсеһе табылыр. Шулай итеп ғүмер буйы артынан йүгереп йөрөргәме? Тоғролоҡ юҡ икән, ниндәй яратыу була инде? Тимәк, был ысын мөхәббәт түгел, ялған.

**Антонина Ивановна.** Ҡайһы берҙә минең дә шул тиклем йәнем көйөп китә. Бөтә тоғро бисәләр өсөн… Ысын. Берәү намыҫ һаҡлап, тоғро йәшәй, һис бер рәхәт күрмәй. Икенсе берәү теләһә ҡалай йөрөй, һаман ауыҙы ҡолаҡта. *(Шарап шешәһенә күрһәтә.)* Эскең киләме?

**Тәслимә.** Саҡ ҡына мөмкин. *(Шешәне ҡарап.)* Татлы шарап… Бер ваҡыт беҙ Раҡаев менән татлы шарап эскәйнек…

**Антонина Ивановна.** Минең шарап татлы түгел, әсе…

**Тәслимә.** Әйҙә, әсе булһын. Хәҙер миңә барыбер. *(Шешәнән эсә.)*

### 10-сы күренеш

**Урам.**

**Антонина Ивановна менән Тәслимә иҫерешеп килә.**

**Антонина Ивановна, Тәслимә** *(икәүләшеп йырлайҙар).*

*Ғәйепләме ни мин,*
*гәйепләме ни мин һөйгәнгә?*

**Антонина Ивановна.** Ярай, Тәслимәкәй, миңә ошонда борологорға кәрәк. Ана минең өйөм. Ир тигән бәндә көтә торғандыр. Әле уның менән әрләшеп алырға тура киләсәк.

**Тәслимә.** Ә минең әрләшер кешем дә юҡ. Раҡаев семинарға китте. Ашығып ҡайтыр кешем дә юҡ. Бер үҙем… Хуш булығыҙ, Антонина Ивановна.

**Тәслимә башын эйеп китә, ауыҙ эсенән генә йырлай.**

**11-се күренеш**

**Раҡаевтарҙың өйө эргәһендә. Тәслимә менән Назаров.**

**Тәслимә.** Һеҙ бында нишләп йөрөйһөгөҙ?

**Назаров.** Һеҙҙе көтәм.

**Тәслимә.** Ниңә? Ҡатынығыҙ тураһында һорашырғамы?

**Назаров.** Минең ҡатыным юҡ инде. Ҡыуып сығарҙым ҡамсы менән һыҙырып. Шул ваҡиғаны бергәләп йыуайыҡ тип, һеҙгә килдем. Унда бит һеҙҙең дә ҡатнашлығығыҙ бар.

**Тәслимә.** Һеҙҙең ҡатынығыҙҙы ҡыуып сығарыуығыҙға минең дә ҡатнашлығым бар… *(Башын артҡа ташлап, иҫерек көлә.)*

**Назаров.** Нишләп мине ҡунаҡҡа саҡырмайһығыҙ? Ирегеҙ өйҙә юҡ бит.

**Тәслимә.** Ҡайҙан беләһегеҙ?

**Назаров.** Мин дә һеҙҙең хәләл ефет хаҡында бер ни тиклем мәғлүмәт йыйҙым.

**Тәслимә.** Улай икән. Әйҙәгеҙ һуң, рәхим итегеҙ.

**Фатирға инәләр. Назаров сумкаһынан шарап, емеш ала. Тәслимә бокалдар алып килә. Назаров шарап ҡоя. Эсәләр.**

**Тәслимә.** Ярай инде, мин – бер ихтыярһыҙ, тиле бисә. Ә һеҙ бит – ир кеше. Ҡатынығыҙҙың саҡ ҡына быйтаңлап алыуы шул тиклем сығырығыҙҙан сығарғанына аптырайым.

**Назаров.** Ә һеҙ беләһегеҙме, ихтыярһыҙ тиле бисә, ир кешегә хыянат әсеһенең ни тиклем әрнеткеслеген? Ир кешенең яратыу тойғоһо менән шаярып, көнләштереп маташыуҙан Хоҙай һаҡлаһын. Уны ҡыҙҙырырға ярамай. Хыянат арҡаһында барлыҡҡа килгән бушлыҡты шунда уҡ асыу менән ярһыу биләп аласаҡ. Икһеҙ-сикһеҙ нәфрәт, аңлайһығыҙмы? Унан инде кеше үҙенең ни ҡыланғанын үҙе лә белештермәй башлай. Ә мин хатта һеҙгә рәхмәтлемен дә. Быңдай нәмәне ни тиклем иртәрәк белһәң, шул тиклем яҡшыраҡ. Ғүмер буйы ышанып йәшәп, ҡартайған көнөңдә үҙеңдең тишек кәмәлә ултырғаныңды белеүҙән дә ҡыҙғаныстыраҡ нимә булыуы мөмкин.

**Тәслимә.** Һеҙ бит үҙегеҙ ғәйепле. Һеҙ уны ысынтылап яратмағанһығыҙ.

**Назаров.** Ә нисек яратырға тейеш булғанмын инде?

**Тәслимә.** Ҡатын-ҡыҙ бит өй йәнлеге түгел. Хатта ул йәнлекте ни тиклем ятатһағыҙ, тәрбиәләһәгеҙ ҙә… Ул – шәхес. Ҡойоғоҙ, беҙ барыбер ҡатын-ҡыҙ өсөн эсәсәкбеҙ.

**Назаров.** Бик яҡшы. Күпме теләйһегеҙ, шул тиклем… Тик бит һеҙ ҙә ирегеҙҙе, тыңлаусан эт кеүек, эргәгеҙҙә генә тоторға теләр инегеҙ. Артынан күҙәтеп, эҙәрләп йөрөнөгөҙ. Тимәк, һеҙ ҙә уны шәхес булараҡ ихтирам итмәйһегеҙ булып сыға. Тыйып торғоһоҙ, ҡырағайҙарса яратыу, көнләшеү, эҙәрләүҙең

ихтирам менән бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ.

**Тәслимә.** Ҡуйығыҙсәле, мин ҡырағайға оҡшағанмы ни?

**Назаров.** Тәүҙә мин һеҙҙе бер ябай ғына көнсөл бисә тип уйлағайным. Бер сәбәпһеҙ көнсөллөгөгөҙ менән минең дә башымды ҡатыраһығыҙҙыр, тип өмөтләндем. Һеҙгә ни тиклем ҡыйын булғанын хәҙер генә аңлайым. Минең ҡатын менән һеҙҙең ир – был ике уйнашсы…

**Тәслимә.** Мин үҙемде һеҙҙең ҡатынығыҙҙан тамсы ла яҡшыраҡ тип уйламайым. Әгәр ҙә Раҡаевты арбай алған икән, тимәк, ул бик һөйкөмлө ҡатын.

**Назаров.** Һеҙҙең Раҡаев аҙғын бер әҙәм, минең бисә лә унан ҡалышмай. Ярай, әйҙә, үҙебеҙҙең аҙғындар өсөн күтәрәйек.

**Тағы ла эсәләр. Тәслимә ныҡ иҫерә, башын өҫтәлгә һала. Назаров уны күтәреп ала. Тәслимә, үҙе лә белмәҫтән, уның муйынынан ҡосаҡлай. Назаров уны карауатҡа алып барып һала.**

**12-се күренеш**

**Раҡаевтарҙың йоҡо бүлмәһе. Иртә.**

**Тәслимә менән Назаров.**

**Тәслимә** *(уянып, башын сайҡай. Унан ҡапыл урынынан һикереп тора).* Кем ул бында?

**Назаров.** Был мин.

**Тәслимә.** Һеҙ бында нимә эшләйһегеҙ?

**Назаров.** Нишләп шул тиклем аптырайһың? Беҙ бит инде күптәнге таныштар.

**Тәслимә.** Йә Хоҙа! Был ни булды? Һеҙ мине иҫерттегеҙ ҙә унан…

**Назаров.** Күрәһең, яҙмышҡа шулай беҙҙе осраштырыу кәрәк булған.

**Тәслимә.** Нишләп кенә эстем икән? Ә һеҙ оятһыҙ рәүештә минең иҫереклегем менән файҙаланғанһығыҙ!

**Назаров.** Яңлышаһың. Үҙең бит ҡосаҡлап алдың. Ысын, тамсы ла фәстермәйем.

**Тәслимә.** Мин бит иҫерек булғанмын.

**Назаров.** Иҫеректән дә ихласыраҡ кеше булмай. Үҙеңде иркен тоя башлайһың, бәйҙәр ысҡына, бектәр асыла. Кисә һинең көслө ир кешенең күкрәгенә һыйынғың килде, бары шул.

**Тәслимә.** Бары шул? Их, ни эшләнек беҙ? Нимә ҡылдыҡ? Нишләп кенә килдегеҙ инде?!

**Назаров.** Мин дә һиңә шул уҡ һорауҙы бирә алам. Нишләп килгәйнең? Һин бит миңә күстәнәс тотоп килмәнең, сихырланған тоҙ килтерҙең. Яман хәбәреңде еткерҙең дә йәрәхәтккә тоҙ һибеп киттең.

**Тәслимә.** Үҙ-үҙемде тыя алманым шул.

**Назаров.** Мин дә шулай – тыйыла алманым. Бер яман ҡылыҡ үҙе артынан икенсеһен һөйрәй.

**Тәслимә.** Ҡылыҡ ҡына түгел шул, был – енәйәт. *(Йүгереп сығып китә.)*

**Назаров** *(яңғыҙ).* Бына шулай. Бисәне ҡыуып сығарҙым. Адвокат йоратының маңлайына мөгөҙ үҫтерҙем. Тик ниңәлер күңелгә һис кенә лә рәхәт түгел. Ярар, азатлыҡ шулай әрнеүҙәр аша яулана торғандыр. *(Тәслимә артынан йүгерә.)* Тәслимә, туҡта әле, туҡта, тим. Тыңла мине!

**13-сө күренеш**

**Нурияның кабинеты.**

**Нурия, Тәслимә, унан Сәлимә, Антонина Ивановна.**

**Тәслимә** *(кабинетҡа инә).* Тағы килдем һиңә, Нурияҡай. Өйҙә ултырып сыҙай алмайым. Шул тиклем эсем боша.

**Нурия.** Ни булды, әхирәт? Ҡалай ябығып киткәнһең?

**Тәслимә.** Насар йоҡлайым. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтөнләй йоҡлай алмайым.

**Нурия.** Күптән әйткән булһаңсы, әхирәт. Миндә хәтәр шәп йоҡо дарыуы бар. *(Өҫтәлдә эҙләнә.)* Бына.

**Тәслимә.** Ярҙамы тейер микән?

**Нурия.** Тейә, әхирәт. Бер мәл мин дә йонсоном бит. Көнө буйы ауыҙым асылып, иҫеннәп йөрөйөм, ә кис башым мендәргә тейеү менән, йоҡом оса ла китә. Ятам да ятам, әйләнәм дә тулғанам. Үләм икән тип торам, әхирәт. Шунан бер врач танышлыҡ буйынса ғына ошо дарыуҙы бирҙе. Икене эстеңме – ләззәт. Күҙ томалана, уйҙар тырым-тыраҡай таралыша, үҙем күккә осам. Шул тиклем еңел, рәхәт булып китә. Ауранда ирееп юғалаһың… Әкиәт кеүек!

**Тәслимә.** Ҡалай матур итеп һөйләйһең. Аура…

**Нурия.** Матурлығын матур ҙа, шул уҡ доктор эсеүҙән тыйып ҡуйҙы.

**Тәслимә.** Ниңә?

**Нурия.** Токсикоманка булып китәһең, тип ҡурҡытты. Йоҡо дарыуы тигәнең бигерәк мәкерле нәмә икән. Шуға күрә һин артыҡ мауығып китмә. Ике таблетканан башла, шунан берәү ҙә етә. Аҙна тигәндә йоҡоң рәтләнер. Уғаса Раҡаевың да ҡайтып етер. Унда инде эсең бошорға ваҡытың ҡалмаҫ.

**Тәслимә**. Кем белә… Ә дарыу өсөн рәхмәт.

**Ишек шаҡыйҙар. Сәлимә инә.**

**Сәлимә.** Әйтә алмаҫһығыҙмы икән, Раҡаев Сәғит командировканан ҡайтмағанмы икән? Ҡасан бында булырға тейеш? Яҡын арала берәй суд ултырышында ҡатнашмаймы?

**Нурия** *(ҡурҡып Тәслимәгә ҡарай).* Бер аҙнанан ҡайтырға тейеш. Ә бында ҡасан килерен белмәйем.

**Тәслимә** (*мыҫҡыллы).* Ҡайһылай ҙа тупһыҙ икән был Сәғит Раҡаев. Нишләп һөйәркәһен үҙенең киләсәккә пландары, көн тәртибе менән таныштырмай йөрөй?

**Сәлимә.** Нимә бушты һөйләйһегеҙ! Һеҙ кем?

**Тәслимә.** Әлегә ҡатынымын.

**Сәлимә.** Ә, бына нимә! Ә мине Раҡаевтың һөйәркәһе тип һеҙгә кем әйтте?

**Тәслимә.** Үҙем белдем. Нимә йәшереп маташырға? Мин барыһын да беләм, шахмат клубын да, ҡунаҡхананы ла.

**Сәлимә** *(тупаҫ итеп).* Нимә, арттан шымсылап йөрөнөңмө? *(Ҡапыл төшөнөп.)* Иремә лә һин ошаҡлағанһыңдыр әле, ҡара йылан?

**Тәслимә.** Мин булмай кем булһын? Мин астым ireңдең күҙен. Бисәм шәп тип алданып йөрөмәһен.

**Сәлимә.** Әҙәм аҡтығы икәнһең. Шыр тиле.

**Тәслимә.** Һине ҡарт алашаны ҡайыҙлағандай ҡамсы менән туҡмап ҡыуып сығарғанына тиклем беләм. *(Үсләшеп көлә.)*

**Сәлимә.** Ҡалай әҙәм аҡтығы һин, ҡара йылан.

**Тәслимә.** Ирең бит һине ҡыуып сығарғас, йыуатыу эҙләп миңә килде, бик тә белгең килһә.

**Сәлимә.** Ә һин йыуаттың инде!

**Тәслимә.** Йыуаттым, әлбиттә.

**Сәлимә.** Ҡара йылан.

**Нурия** *(ҡурҡып һәм борсолоп әле беренһенә, әле икенсеһенә ҡарай).* Эй, эй, гражданкалар, һеҙ абайлабыраҡ. Ҡайҙа торғанығыҙҙы онотоп ебәрмәгеҙ. Шымыраҡ ҡыланығыҙ.

**Сәлимә.** Нимә, Раҡаевыңдың берәй ере өҙөлөп ҡалғайнымы ни? Нимә кәрәк ине һиңә? Нишләп минең ғаиләмде боҙҙоң?

**Тәслимә.** Минме ғаилә боҙҙом? Һин нимә? Мин аҙҙырҙыммы һинең иреңде, мин уға ҡул һуҙҙыммы?

**Сәлимә.** Ғәйбәт сәсеп йөрөгәнсе, аҙҙырһаң һәйбәтерәк булыр ине. Тауыҡ мейеһе эскән бер шыр тиле. Иҫәр! *(Тәслимәнең сәсенә йәбешә.)*

**Сапсыш, ҡысҡырыш, ойпалашыу китә.**

**Нурия.** Туҡтағыҙ, нимә ҡыланаһығыҙ? Етте тием!

**Сәлимә.** Сәсеңде йолҡҡолап бөтәм хәҙер, бисура!

**Тәслимә.** Теймә миңә! Ебәр. Мин үҙем һинең сәсеңде йолҡам.

**Нурия.** Антонина Ивановна, ярҙамға! Үлешәләр хәҙер бында.

**Антонина Ивановна швабра тотоп йүгереп килеп инә. Тәслимә менән Сәлимәне айырырға ташлана.**

**Антонина Ивановна.** Битенән ал һин ул оятһыҙҙың, Тәслимә. Тырна. Их, үҙем ярҙам итер инем дә бит, тырнағым юҡ. *(Сәлимәгә.)* Ә һин юғал күҙ алдынан, уйнашсы! *(Сәлимәгә швабра менән янай.)* Кеше ирен аҙҙырғанда яҡшы инеме?!

**Сәлимә.** Шыр тилеләр. Аҡылдан шашҡандар бөтәһе лә.

**Нурия.** Ысын әле. Бөтәһе лә аҡылдан шашҡан шул.

**Тәслимә** *(күҙ йәштәре аша).* Нурия, Антонина Ивановна, кисерегеҙ мине, зинһар. *(Йүгереп сығып китә.)*

**Антонина Ивановна.** Бахырсыҡ ҡынаны! Ниндәй көнгә төшөрҙөләр. Шундай саф, яҡшы күңелле, ихлас бала ине. Бөтә ирҙәр ҙә әҙәм аҡтығы!

**Нурия.** Бына һиңә мә! Ә мин үҙемә, кейәү табырға кәрәк, ваҡыт, тормошҡа сығырға ваҡыт, тип тылҡыйым. Хоҙай һаҡлаһын! Сәс йолҡа, бит сапсый башларҙар. Йөрөрһөң шунда күҙ йәшеңә төйөлөп. Юҡ инде. Кискеһен арып ҡайтып, берәй киҫәк торт ашайһың да, телевизор алдына диванға ятып, сигаретыңды һураһың! Был ләззәтте һиңә бер кем бирә алмай. Ә әхирәт, күрәһең, тәүәккәллек минуттары теорияһын ҡулланған да, бөтөн нәмәгә күҙе асылған.

**Антонина Ивановна.** Шулайтҡан шул. Тик асылыуы яҡшығамы? Аҙыраҡ белһәң, тынысраҡ йоҡлайһың. Шуныһы ла бар бит әле.

**14-се күренеш**

**Нурисламдың фатиры.**

**Тәслимә менән Нурислам.**

**Тәслимә.** Һин бит, тағы Һиндостанға барам, фильм төшөрәм, тигән инең. Мине лә үҙең менән ал әле, үтенеп һорайым. Ер сигенә лә китергә әҙермен. Нимә кәрәк, барыһын да эшләрмен. Яҡтыртыусы булып та эшләй алам, артыңдан сумкаңды күтәреп булһа ла йөрөтөрмөн.

**Нурислам.** Ысынды һөйләүеңме был, буштымы?

**Тәслимә.** Ысын.

**Нурислам.** Тап минең менән китергә теләйһеңме?

**Тәслимә.** Һинең менән генә рәхәт булыр ине кеүек миңә.

**Нурислам.** Бәлки, был тойола ғыналыр?

**Тәслимә.** Тойолһон да икән, ти. *(Нурисламга.)* Ҡотҡар мине, Нурислам! Ошо тормошомдан әрсәләп ал мине. Исмаһам, ваҡытлыса ғына булһа ла. Мин бит һинеке инем. Алып кит мине алыҫҡа-алыҫҡа! Сүллеккәме, урман шырлығынамы, тау аръяғынмы – миңә барыбер. *(Нурисламга ташлана.)*

**Нурислам.** Тағы ирең менән асыуланышҡанһың да, унан йәшенеп торорға уйлайһың инде. Теге юлы ла уның йәненә тейгең килгәнгә генә булдың бит һин минең менән.

**Тәслимә.** Эгоист һин! Үҙеңде генә ҡайғыртаһың. Башы ҡатҡан, үҙенә урын таба алмаған бисара ҡатынға ярҙам ҡулы һуҙыу ҡыйынмы ни һиңә?!

**Нурислам.** Һиңә ярҙам итеүҙән баш тартҡаным юҡ. Тик һин, Тәслимәкәй, нимә теләгәнеңде тәүҙә үҙең ныҡлап аңла. Юғиһә, бер көн килеп, берәйһе менән минән дә ҡасып киткең килер. Ә эгоист тиеүеңә килгәндә… Бары эгоистар ғына кешене ысынтылап ихтирам итергә һәләтле. Һин иң элек үҙеңде ныҡлап яратырға өйрән. Шундай итеп ярат: бүтән бер кем өсөн дә башыңды юғалтмаҫлыҡ, артынан йүгереп, һөйөүен ялынып йөрөмәҫлек булһын.

**Тәслимә артҡа сигенә-сигенә бара ла сығып йүгерә.**

### 15-се күренеш

**Раҡаевтар фатиры. Йоҡо бүлмәһе.**

**Тәслимә** *(яңғыҙы).* Таң аттымы, ниһайәт, әллә һаман төнмө? Тиҙҙән Раҡаев та ҡайтып инер. Назаров, Сәлимә тураһында бөтәһен дә белер. Нурислам менән булғанды ла йәшереп тормам. Бөтәһенең дә яҙмышын боҙа торған ниндәй һөйөү һуң ул минең? Әрләшә башлаһам, арабыҙ боҙолоп ҡуйыр, тип ҡурҡтым. Бөтәһен дә яңғыҙ ғына хәл итәйем, уны бысратмайым, тинем. Уны һаҡлайым тип, үҙемде емерҙем. *(Башын сайҡай.)* Инде нисәнсе төн йүнләп йоҡлаған юҡ. Баш ярылып килә. Ай, иҫәр. Миңә Нурия йоҡо дарыуы биргәйне лә инде. *(Сумкаһын аҡтарырға тотона.)* Бына бит. Нурия, икене эс, тигәйне. Икәү генә етерлек түгел миңә. *(Ярты устай ала.)* Хәҙер ошоно эсәм дә ныҡ итеп, оҙаҡ йоҡлайым. Нимә тигәйне әле Нурия? Аурала иреп юҡҡа сығаһың, тигәйнеме? Шул тиклем тыныс, рәхәт булып китер. Бер кем хөкөм итмәҫ, рәнйетмәҫ. Мин бөтөнләй икенсе булып, башҡа донъяла уянырмын. Мин аңланым инде. Моғайын, был һөйөү ҙә булмағандыр. Мин бары тик яратырға ғына теләгәнмендер. Ысынлап, онотолоп, йәнем-тәнем менән, матур итеп яратырға һәм яратылырға… Тик ундай һөйөү был донъяла юҡ һәм уның булыуы ла мөмкин түгелдер. Ә теге донъяла ул бар. Булмауы мөмкин түгел. Ул булырға тейеш. Кисерегеҙ мине бөтәгеҙ ҙә. Мин бары тик бәхетле булырға ғына теләгәйнем. Иң бәхетле, бик-бик бәхетле. Кисерегеҙ, зинһар. Һеҙ мине аңларға тейешһегеҙ. Һәр кем дә бит бәхет тураһында хыяллана. Раҡаев та, Сәлимә лә, Назаров та, Нурислам да. Тимәк, улар барыһы ла мине аңларға тейеш. *(Дарыуҙы эсергә йыйына.)* Етерлекме һуң бында? Аурала иреп юҡҡа сығырлыҡмы? Ә шулай ҙа ваҡыт күпме икән? Һаман төнмө, әллә таң атҡанмы?

*(Тәҙрә пәрҙәләрен аса.)* Күптән таң атҡан. Ә нисәһе һуң ул әле бөгөн? Бер нисә көн үтеп киткән. Ә бит миңә врачҡа барырға кәрәк. *(Йәһәт кенә йыйына ла сығып йүгерә.)*

**16-сы күренеш**

**Зәбихә ҡарсыҡтың өйө.**

**Зәбихә ҡарсыҡ, Тәслимә һәм Сәлихйән ҡарт.**

**Зәбихә ҡарсыҡ** *(биҙәнгестәрен аҡтарып).* Ҡартлыҡты бер ниндәй алтын менән дә ҡаплап булмай. Ә йәшлек ялтырауыҡһыҙ ҙа матур.

**Ишек шаҡыйҙар. Зәбихә ҡарсыҡ асырға бара.**

**Тәслимә** *(сумаҙан тотоп инә).* Бына, Зәбихә әбекәй, хушлашырға килдем. Китергә булдым мин.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ҡайҙа?

**Тәслимә.** Ҡайҙа булһа ла барыбер. Мөмкин тиклем алыҫҡараҡ. Үҙебеҙҙең ауылға ҡайтыр кешем юҡ. Үҙең беләһең, атам-әсәмдән күптән етем ҡалғанмын. Ике туған апайымдарға барырға уйлайым.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ә мөхәббәт? Мөхәббәтеңә ни булды? Ҡайһылай янып йөрөй инең. Фәрештәңде ташлап китәһеңме ни?

**Тәслимә.** Фәрештә фәрештә булып ҡала. Ә мин ауырлымын, әбекәй. Фәрештәнән түгелдер, тип ҡурҡам.

**Сәлихйән ҡарт йәшенеп тыңлап тора һәм ҡыуанып устарын ышҡый.**

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Бына һиңә мә! Йөрөмтәл ҡыҙыҡай түгелһең дә баһа!

**Тәслимә.** Бөтә бәлә лә шунда шул. Ғәҙеллек теләнем, үҙем дә ғәҙел булырға тырыштым. Ә нимә килеп сыҡты?! Үҙем генә бысрандым. Әммә баланан баш тартырға йыйынмайым.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Дөрөҫ. Ир менән бала араһында һайлай белергә тейеш әсә булырға теләгән кеше.

**Сәлихйән ҡарт килеп инә.**

**Сәлихйән ҡарт.** Ауырлы килеш кемгә кәрәк булырмын тиһең? Ниндәй туғаның һине көтөп торор икән? Беҙҙә ҡал. Йортобоҙ иркен. Урын етерлек.

**Тәслимә.** Һин, Сәлихйән бабай, йәнә йәшенеп тыңлап торғанһың.

**Сәлихйән ҡарт.** Ауыҙ йырырға тип тыңламаным бит. Ярҙам иткем килә.

**Тәслимә.** Раҡаев менән бер ҡалала ҡалырға ҡурҡам мин. Ҡайҙа йәшенгәнемде белеп ҡалһа,.. эҙләп килеп етер. Уға күтәрелеп ҡарарға ла ҡурҡам хәҙер.

**Сәлихйән ҡарт.** Юҡты һөйләйһең. Теләһә, ул һине Ҡытайҙа ла таба ала.

**Зәбихә ҡарсыҡ.** Ҡарт дөрөҫ һөйләй. Алйот булһа ла, күңеле йомшаҡ уның. Ҡал. Беҙгә лә күңеллерәк булыр. Һиңә лә һыйыныр урын. Бәпәйең дә беҙҙең өсөн бер йыуаныс булыр.

**Тәслимә.** Әллә ысынлап та ҡалайыммы икән? Мин Раҡаевҡа шундай хат яҙып ҡалдырҙым. Уны уҡығас, мине Ҡытайҙа ғына түгел, күрше бүлмәнән дә эҙләгеһе килмәүе ихтимал.

**Сәлихйән ҡарт.** Бына яҡшы. *(Зәбихә ҡарсыҡҡа.)* Күрҙеңме, әбей, ейәнсәребеҙ булһа ине, тип күпме хыялландыҡ. Бәлки, Хоҙай ҡушып, бүләсәребеҙ ҙә булыр әле. *(Тәслимәгә.)* Әйҙә, бүлмәңде күрһәтәм. Һин минән ҡурҡма. Шунан тағы ҡолағыңа киртеп ҡуй: кем

кем, ә мин һине хөкөм итмәйем. Үҙе туҡмалған кеше генә туҡмалғандың хәлен аңлай ул.

**Сәлихйән ҡарт менән Тәслимә сыға.**

**Зәбихә ҡарсыҡ** *(яңғыҙы).* Эх, ҡыҙый! Башын юғалтҡан. Һөйөүҙе күктәргә күтәргән булғайны, үҙе шул бейеклектән ҡолап төштө.

**Сәлихйән ҡарт** *(кире инә).* Ярар, бәпәйен табып алһа, тынысланыр. Бисәләргә тағы нимә кәрәк? Балаһы булһа, донъяһы түңәрәкләнә. Ә ирҙәр, мөхәббәт… Улары булып тора, үтеп тора. Уға ла табылыр. Хи-хи-хи!

### 17-се күренеш

**Нурияның кабинеты.**

**Нурия, Нурислам, унан Раҡаев, артабан Назаров.**

**Нурислам.** Иренән нишләп киткән һуң?

**Нурия.** Ирҙән ниңә китәләр һуң? Үҙең уйлап ҡара?

**Нурислам.** Яратмағанғалыр.

**Нурия.** Һәр кем яратмайым тип иренән китә башлаһа, ирҙәр, ғөмүмән, бисәһеҙ ҡалыр ине. Тағы уйла.

**Нурислам.** Моғайын, башҡа кешене яраталыр.

**Нурия.** Икенсене яратҡан өсөн генә ирҙән китәләр тиме ни? Тағы уйла.

**Нурислам.** Белмәйем.

**Нурия** *(бышылдап).* Һиңә генә, сер итеп кенә әйтәм, Тәслимәнең иң тоғро дуҫы булғанға күрә генә. Ул ауырлы, тик иренән түгел.

**Нурислам.** Ауырлы? Иренән түгел? Әле ул ҡайҙа?

**Нурия.** Белмәйем. Хушлашырға ғына ингәйне, ҡайҙа киткәнен әйтмәне. Маҙаһыҙлауҙарын теләмәгәндер. Ә һинең бында ни ҡыҫылышың бар?

**Нурислам.** Бар шул.

**Нурия төшөнә башлай. Раҡаев инә.**

**Раҡаев.** Нурия, һин Тәслимәне яҡшы беләһең. Нимә булған ул, аңлат әле. Ҡайҙа киткән ул? Әллә ниндәй хат ҡалдырған. *(Кеҫәһенән сығарып уҡый.)* «Мин һине шул тиклем яратырға теләнем. Тик көсөм етмәне. Мин китәм. Башҡа кешенән ауырлымын. Сәлимә менән бәхетле булыуыңды теләйем. Мине эҙләмә. Мине тағы ла нығыраҡ әрнеүҙәргә һалмаһаң ине».

**Нурия.** Тимәк, эҙләргә кәрәкмәй. Тағы ла нығыраҡ әрнеүҙәргә һалырға ла кәрәкмәй.

**Раҡаев.** Кем уға Сәлимә тураһында һөйләгән? Ниндәй башҡа кеше? Уның кемдән ауырлы булыуы мөмкин? Бер кеме лә юҡ ине лә баһа!

**Нурия** *(мөйөшкәрәк барып баҫҡан Нурисламға күҙ ҡырыйы менән генә ҡарап).* Юҡ ине… Һеҙ бик үк иғтибарлы түгелһегеҙ икән, Сәғит Хәсәнович. *(Артығын әйтеп ташлағанын аңлап, шыма).*

**Раҡаев Нурисламға шик менән ҡарай. Назаров инә.**

**Назаров.** Һеҙ Тәслимәнең әхирәтеме? Уны ҡайҙан табырға мөмкин? Әйтегеҙ әле, зинһар.

**Нурия.** Ғәфү итегеҙ, ә һеҙ кем булаһығыҙ?

**Назаров.** Назаров Харрас Хәким улы.

**Нурия** *(ҡурҡып ҡына Раҡаевҡа күҙ ташлай).* Нимәгә ул һеҙгә? Назаровтар ғаиләһе бисара ауырлы ҡатынды тыныслыҡта ҡалдырһа, хәйерлерәк булыр ине.

**Назаров.** Ауырлы? Ҡасандан бирле?

**Раҡаев** (*һүҙгә ҡыҫылып).* Унда һеҙҙең ни эшегеҙ бар?

**Назаров** *(бер аҙ икеләнеп торғандан һуң).* Ә, һеҙ ҙә бындамы ни, адвокат әфәнде? Ә, бәлки, ул минең баламдыр? Ә һеҙгә һәм минең бисә менән уйнашығыҙға төкөрәм мин!

**Нурислам.** Нисек инде? Баланың һеҙҙеке булыуы ла ихтималмы?

**Раҡаев.** Һеҙ нимә, уның һөйәрҙәреме әллә?

**Нурия** *(хәлдәрҙең ҡыҙа барғанын абайлап).* Антонина Ивановна! Ҡотҡарығыҙ! Хәҙер бында мәшхәр башлана! *(Сығып ҡаса.)*

**18-се күренеш**

**Шахмат клубы.**

**Вәсилә, Ҡасимов, Сәлимә, унан Раҡаев.**

**Вәсилә.** Ышана алмайым. Сәғит Хәсәнович бит кешеләр менән эшләй. Психологияны яҡшы белергә тейеш. Шул кеше ҡатынын күҙ уңынан ыскындырһынсәле! Башҡа һыйырлыҡ түгел!

**Ҡасимов.** Беҙ ғүмер буйы баш ватҡыстарҙың серен сисергә маташабыҙ. Шул уҡ ваҡытта ябай ғына нәмәләрҙе аңлай алмайбыҙ. Ә бит аптырарлыҡ урын юҡ. Иҫегеҙҙәме, яңыраҡ ҡына Раҡаев теге сибәр ҡатын менән бында күңел асырға килә торғайны.

**Ишек ҡыңғырауы шылтырай. Яурынына сумка аҫҡан Сәлимә инә.**

**Сәлимә.** Сәғит Хәсәновичтың килгәне юҡмы?

**Вәсилә.** Юҡ, ингәне юҡ.

**Сәлимә.** Ниңә миңә шулай ҡарайһығыҙ? Бөтәһен дә беләһегеҙме? Минең аңлатыуымды көтәһегеҙме?

**Ҡасимов.** Эйе.

**Сәлимә.** Нимә тиһең инде. Барыһына ла беҙҙең ҡомһоҙлоғобоҙ ғәйепле. Тәслимә лә, мин дә бәхеткә артыҡ ҡомһоҙ булып сыҡтыҡ.

**Ҡасимов.** Ҡомһоҙ?

**Сәлимә.** Хәтерләйһегеҙме, Мәрүән Әсләмович, һеҙ үҙегеҙ мине бөтә ҡоҙоҡтарҙан да уртларға теләгән өсөн битәрләгәйнегеҙ? Тәслимә лә минең кеүек үк булып сыҡты.

**Ҡасимов.** Тәслимә бит үҙ ҡоҙоғонан ғына эсергә ашҡына ине.

**Сәлимә.** Булһа ни, үҙ ҡоҙоғондан эскәндә лә ҡомһоҙланырға ярамай. Нимәлер етмәй, доньяңдың ҡайһылыр яғы саҡ ҡына китек икән – күн. Ә бит, юҡ, һуғышырға, тиләнергә, башҡаларға ла, үҙеңә лә зыян килтерергә керешәһең, әммә күнмәйһең, буйһонмайһың. Ә Сәғит Хәсәнович, моғайын, килмәҫ тә инде. Бәлки, был яҡшыраҡтыр ҙа… Миңә шул кәрәк. Ярай, китәйем, хушлашырға ғына ингәйнем.

**Ҡасимов.** Ҡайҙа китәһегеҙ? Йыраҡҡамы?

**Сәлимә.** Әлегә әсәйем янына ҡайтам. Унан күҙ күрер. Ярай, хуш булығыҙ. Поезға өлгөрөргә кәрәк. *(Вәсиләгә.)* Сәғиткә сәләм әйтегеҙ.

**Сәлимә китә.**

**Раҡаев.** Һаумыһығыҙ? Сәлимә инмәнеме?

**Вәсилә**. Ингәйне…

**Ҡасимов**. Тик көтөп тора алманы. Поезға ашыҡты.

**Вәсилә.** Һеҙгә сәләм әйтергә ҡушты.

**Раҡаев** *(уйсан).* Бәлки, шулай булыуы яҡшыраҡтыр ҙа. Гонаһлы

һөйөү менән оҙон-оҙаҡҡа һуҙмайынса, еңелерәк хушлашыу хәйерле.

**Вәсилә.** Әгәр ҙә башҡаһы булмаһа нимә эшләргә?

**Раҡаев.** Ул саҡта булғандан булмауы яҡшыраҡ. Һөйөү бит ул сама белмәй, ҡомһоҙ. Ни тиклем нығыраҡ яратаһың, шул тиклем нығыраҡ ғазапланаһың. Ғөмүмән, кешенең ғүмере иң тәү ғашиҡ булғандан алып ҡыҫҡара башлай.

**Ҡасимов.** Әллә берәй партия шахмат уйнап алайыҡмы?

**Раҡаев.** Әйҙәгеҙ!

**Ҡасимов менән Раҡаев икенсе бүлмәгә сыға.**

**Вәсилә** *(яңғыҙы).* Был ир-атты бер нәмә менән дә аптыратып булмай, ахыры. Улар теләһә ниндәй һөйөүҙе лә еңел генә шахмат, һуғыш, бер шешә һыраға алмаштыра ала. Их, ирҙәр, ирҙәр…

**19-сы күренеш**

**Суд залы.**

**Раҡаев, Нурислам, Назаров (барыһы ла судья мантияһы кейгән.) Антонина Ивановна, Нурия, Вәсилә, Зәбихә ҡарсыҡ, Ҡасимов, Сәлихйән ҡарт, унан Тәслимә.**

**Раҡаев.** Әфәнделәр! Нисек кенә булмаһын, беҙ барыбыҙ ҙа әҙәм балалары, аҡыллы кешеләр. Шулай булғас, барыһын да уртаға һалып, асыҡтан-асыҡ һөйләшәйек. Беҙ барыбыҙ ҙа бында зыян күреүселәр…

**Нурислам** *(судья ултырғыстарының береһенән урын алып).* Бөтәһе лә әллә нисек килеп сыҡты. Беҙ бит Тәслимә менән дуҫтар инек. Ә ул мине, минең дуҫлыҡ тойғоларымды иренән үс алыр өсөн файҙаланды. Мин уның үс алыу ҡоралына әйләндем.

**Назаров** *(судья ултырғыстарының икенсеһенә ултырып).* Миңә ул ғазап менән яңғыҙлыҡ килтерҙе. Ул минең ғаиләмде емерҙе. Үс алыр өсөн ул минең йөрәгемә бысаҡ ҡаҙаны… Һис ҡыҙғаныуһыҙ…

**Раҡаев** *(урталағы судья урынын алып).* Ул мине ташланы. Алданы. Мин бит уға бер ниндәй насарлыҡ та эшләмәнем. Бер тапҡыр ҙа рәнйетмәнем, ауыр һүҙ әйтмәнем. Әммә ул беҙҙең тормошобоҙҙо селпәрәмә ватты…

**Антонина Ивановна.** Ә миңә ҡалһа, һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә бынау һепертке менән һепереп ырғытырыға кәрәк. Табылғандар икән дә хөкөм ҡылыусылар! *(Һепертке менән судья кафедраһына туҡылдата.)*

**Тәслимә инә. Ул ап-аҡтан кейенгән. Ауырлы икәне күренә.**

**Тәслимә** *(йырлай).*

*Ғәйепләме ни мин,*
*Ғәйепләме ни мин,*
*Ғәйепләме ни мин*
*Һөйгәнгә?*

**Раҡаев, Нурислам, Назаров урындарынан тора һәм судья мантияһын сисә. Бөтәһе лә Тәслимәне уратып ала.**

**Антонина Ивановна** *(һепертке менән һелтәнеп).* Йә, тағы кемдең судья урынында ултырып ҡарағыһы килә?

**Шаршау.**

**Руссанан**
**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА**
**тәржемәһе.**

# ӘҘӘБИӘТКӘ – ЙӘШТӘР КҮҘЛЕГЕНӘН

*Заманында юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары шиғриәттә, прозала ғына түгел, әҙәби тәнҡиттә лә ярайһы ғына әүҙемлек күрһәтә ине. Йәш тәнҡитселәрҙең сығыштары айырым рубрикаға ла ойоша башлағайны. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был һәйбәт башланғыстар һүнеп ҡуйҙы. Уны яңынан тергеҙеү маҡсатынан Башҡортостан Яҙыусылар союзының әҙәби тәнҡит секцияһы рәйесе Зәки Әлибаев М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башҡорт филологияһы факультеты студенттарының ҡулъяҙмаларын алып килде. Был һанда уларҙың бер нисәүһен уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итәбеҙ.*

## Аҫылташтар шаһын юлдаш итеп

Кешелек донъяһы башланғандан бирле Ер йөҙөнә күпме сәсәндәр, аҡындар, шағир, яҙыусылар – һүҙ оҫталары тыуған! Улар милләттең аҡыл осошон, рухи бейеклеген билдәләгән. Тора-бара исемдәре халыҡтың ғорурлығы ғына булып ҡалмай, әҙәбиәттең символына әүерелә: рустарҙа – Пушкин, инглиздәрҙә – Шекспир, немецтарҙа – Гете, итальяндарҙа – Данте, татарҙарҙа – Туҡай.

Донъя күләменән күренер оло таланттар башҡорт улдары һәм ҡыҙҙары араһында ла булған, барҙар һәм буласаҡ! Ябай тупраҡтан йондоҙ бейеклегенә күтәрелгән, ҡабынасаҡ ҡаһарман ижадсыларыбыҙҙың тиңһеҙ талант серҙәренә төшөнәһе, уларҙың илаһилығын асаһы, был мөғжизәгә һоҡланаһы көндәр ҙә, моғайын, алдалыр әле.

Шундайҙарҙың береһе – Әнисә Таһирова. Ул – беҙҙең баш особоҙҙа ғына түгел, ә бөтә әҙәбиәт күгенән күренгән, бығаса ҡабатланмаҫ балҡыш менән янған серле йондоҙ.

Шағирәнең Ер киңлеген, күк бейеклеген, диңгеҙ тәрәнлеген, Рәсәйҙе, тыуған Башҡортостаныбыҙҙы уй-хыял осошонда һүрәтләгән кисерештәре, йөрәк түрендә һибелгән сағыу йондоҙҙар кеүек, беҙҙең күңелдәргә онотолмаҫлыҡ инеп урынлашты. Бер шиғырында уның ошондай юлдары бар:

*Ерҙәр күрҙем,*
*Диңгеҙҙәргә сумдым,*
*Һоҡландым мин алыҫ яҡтарға.*
*Ләкин беләм*
*Сихри моң һеңгәнен*
*Хатта һинең ябай таштарға.*

Әнисә Абдулла ҡыҙы ижадының яңы бөрөләнгән сағы 60-сы йылдар уртаһына тура килә. Уның илһамланыу осорона уҡытыусылыҡ эше лә йоғонтоһоҙ ҡалмағандыр. «Әгәр ҙә яҙмыш әҙәбиәт һуҡмағына илтмәһә, мин, һис шикһеҙ, ғүмер буйына уҡытыусы хеҙмәтен атҡарыр инем, беҙҙең нәҫелебеҙҙә уҡытыусылар династияһы әле лә дауам

итә», – тине үҙе лә. Эйе, әҙибәнең күңел түрендә яралған ижад емештәре, хистойғолары һәм кисерештәре менән сорналып, кеше психологияһына, уйҙарына, фантазияһына ҡағылып үтә.

Уның ижадына ныҡлабыраҡ байҡау яһаһаң, бөтә шағир, яҙыусыларға ла хас булмаған бер күренешкә тап булаһың: әҙибә, традицион шиғырҙан тыш, үҙен сонет һәм поэма жанрҙарында ла һынай, үҙен осҫта тәржемәсе итеп таныта.

Миңә ҡалһа, уның шиғри йыйынтыҡтары сонеттар менән байытылыуы яғынан отошло, сөнки фәлсәфәүи фекер һалынған һәм ҡәтғи классик ҡанундарға бойһондоролған был жанр – шиғриәттең иң аһәңле, шул уҡ ваҡытта ҡатмарлы һәм серле төрө. Уның тыуған иле – Италия. XIII быуатта йәшәгән итальян шағирҙары Данте Алигьери һәм Франческо Петрарка – донъя әҙәбиәтенә сонеттың аҫыл өлгөләрен бүләк итеүсе маһир әҙиптәр. Артабан был жанр Европаның башҡа илдәрендә лә киң танылыу ала. Рәсәйҙә сонетты тәүге тапҡыр 1735 йылда В. Тредиаковский яҙа. А. Дельвиг, А. Пушкин, М. Лермонтов кеүек күренекле шағирҙар Рәсәй сонет мәктәбенең нигеҙ таштарын һала, ә XX быуатта ул яңы күтәрелеш осорон кисерә: В. Иванов, К. Бальмонт, А. Ахматовалар үҙҙәренең һоҡландырғыс өлгөләре менән Рәсәй һәм донъя әҙәбиәтен тағы ла байыта.

Башҡорт поэзияһында М. Хәй үҙенең «Өлгөрөү», «Өфө мотивтары» тигән сонет шәлкемдәре менән яңы жанрҙы башлап ебәрә, 1960 йылдарҙа был йүнәлештә Я. Ҡолмой әүҙем ижад итә.

Әнисә Таһированы ла үрҙә атап үтелгән күренекле исемдәр араһына һис шикһеҙ индерер инем, ни өсөн тигәндә, һәр ижадсы сонет менән мауыға алмай һәм һәр шағир был жанр төрөнә бигүк тотоноп та бармай. Уның өсөн шиғриәтте һәм шиғыр формаларын нескә тойоу, түҙемлерәк эшләү һәләте кәрәктер. Жанр күп һүҙлелекте ҡабул итмәй, төп шарт – фекер тығыҙлығы. Уңышлы сонеттар аһәңле булыуы, образдарҙың, һүрәтләмәләрҙең сағылышы, уның ҡанунлаштырылған ун дүрт юлы үҙе үк шуны талап итә. Ә башҡорт сонеты башҡортса яңғырарға, телдең нескәлектәренә, моңона буйһонорға тейеш. Әнисә Таһирова сонеттарын ошо нескәлектәрҙән тайпылмай ижад итә. Ниндәй генә сонетын алып ҡарама, һәр береһенең композицияһында һәм уй-фекер үҫешендә эҙмә-эҙлелекте күрергә мөмкин: экспозиция, инеш өлөшө, теманың асылышы, кульминацияһы һәм сиселеше, йомғағы. Мәҫәлән:

*Өндә яҙмаһам да, күңелемдән*
*Һиңә һаман хаттар яҙа инем.*
*Хыялымдан шатлыҡ таба инем,*
*Күпһендеме яҙмыш шуны минән?*
*Инде осмаҫ ул хыялый хаттар,*
*Өмөттәрем, ауған ҡош шикелле,*
*Һары һағыш сүлдәрендә һүнде,*
*Хыял-хатты йәшел үлән ҡаплар.*
*Үҫеп сығыр сүлдә бер яңғыҙ гөл,*
*Ҡомдар ҡосағында ул һулымаҫ,*
*Ҡыуан елдәрҙә лә ул ҡоромаҫ,*
*Ысыҡ-йәше кипмәҫ тажында гел.*
*Яңғыҙ гөлдө бары ҡояш күрер,*
*Таждарында ай нурҙарын элер.*

Был сонетта өс юллығы принцибы тотолмаһа ла, сонетты сонет иткән буйҙан-буйға рифмалашыу тәртибе ныҡлы урын алған: а-б-б-а-а-б-б-а-а-б -б-а-в-в. Бындай рифмалар сонетты йырлап торор яңғырашлы итә – шуныһы менән отошло.

Әйтергә кәрәк, шағирә рәдифле рифмалар менән дә уңышлы эш итә. Киләһе юлдар шуға үрнәк:

*Хистәреңдең аҡ ебәге инем,*
*Күңелемде нурлар нағыш булдың.*
*Хыялыңдың аҡ биләне инем,*
*Мине йырға сорнар балҡыш булдың.*

Әнисә апай ижады бик үҙенсәлекле. Ул сонеттың ҡәтғи классик типтарына механик рәүештә эйәрмәйенсә, уны башҡорт шиғыры, рифмалар системаһына ярашлы формаларында ижад итә. Сонеттар уй-хистәрҙе тулы һәм

иркен итеп биреүгә ҡамасаулай, тиһәләр ҙә, Әнисә апайҙың ижад бөрөләрен уҡып, был фекерҙе кире ҡағырға мәжбүр булаһың. Бәләкәй генә шиғри шәлкемдәре менән танышып, шул хәтлем дә һүҙ менән оҫта идара итеп булмы икән, тигән аптыраш ҡатыш һоҡланыуҙа ҡалаһың. Уның ике юллыҡ фекерҙәре бөтә милләтте күтәрерҙәй, уйландырырҙай мәғәнәгә эйә. Түбәндәге юлдарға иғтибар итәйек:

*Ер-һыу һатҡан илдең уты янмаҫ,*
*Йыр-моң һатҡан илдең ҡото ҡалмаҫ.*

Әнисә Таһирова – һис шикһеҙ сонет жанрында поэтик традицияларҙы ижади үҫтереүсе һәм үҙенсәлекле яңғыратыу хәстәрлеген күреүсе. Сөнки автор был жанрҙа тибрәлеүҙең ауырлыҡтарын, уны еңер маһирлыҡтарын яҡшы белеп, илһамланып ижад итә. Ул был ижад төрөнә мәҙхиә-маҡтау йырлай.

*Шиғыр – моңдоң аҫылташы,*
*Сонет – аҫылташтар шаһы, –*

тип дәлилләп тә ҡуя үҙе.

**Ҡарлуғас ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА,**
**3-сө курс студенты.**

## Илме, әллә зинданмы?..

Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә Әмир Әминев уҡыусыларға үткер ҡәләмле оҫта прозаик булараҡ таныш. Уның “Танкист”, “Кытай-город”, “Бер кәмәлә”, “Йондоҙ сәскә” повестары күптәрҙең күңеленә хуш килде. Яҙыусының был әҫәрҙәре хәҙерге заманда көнүҙәк мәсьәләләрҙе хакимлыҡ вәкилдәренең халыҡты һаман да наҙан “һоро масса” тип күреүен, һүҙ һәм фекер иркенең тик ҡағыҙҙа ғына ҡала килеүен, сәйәсәттә халыҡтың көсһеҙләгән, һәм ошо хәлгә битарафлылығын уңышлы сағылдыра алыуы менән әҙәбиәт һөйөүселәрҙе үҙенә ылыҡтыра.

“Йондоҙ сәскә” повесында бөгөнгө тормоштоң ысынбарлығы, хәҡиҡәте ниндәйҙер кимәлдә сағылыш таба. Әмир Әминев был әҫәрендә хәҙерге донъя ҡоролошоноң сәйәсмәндәр ҡулында булыуын, ябай халыҡтың быға ҡаршы бер нәмә эшләй алмауын һәм ошо шарттарҙа кешенең психологияһын асыҡ һүрәтләй. Кемдең ҡулында – шуның ауыҙында, тигәндәй, дәүләт власы органдары халыҡты балсыҡ кеүек үҙенә кәрәккәнсә әүәләүҙе, бөтәһе лә ил менән идара иткән сәйәсмәндәрҙең мәнфәғәтендә булыуын автор бөтә әҫәре буйынса «ҡыҙыл еп» итеп үткәрә.

Әмир Әминев был повесында ла шартлылыҡ алымын бик оҫта файҙалана. Композицион яҡтан ошо шартлылыҡ барлыҡ ваҡиғаларҙы бер епкә теҙә лә. Әҫәрҙә ваҡиғалар бөгөнгө заманда, асыҡлап әйткәндә, 2012 йылдың август, 2013 йылдың март айҙарында бара. Повеста төп герой – ауыл мәктәбенең ябай уҡытыусыһы Рәүеф Юламанов. Тәү ҡарашҡа ул башҡаларҙан бер нәмәһе менән дә айырылмай: ғаиләле, эшләп йөрөгән, һөйләгән һүҙҙәре лә башҡаларҙыҡы һымаҡ... Ләкин үҙенең шәхси фекере булыуы һәм уларҙы башҡаларға еткерә алыуы менән ҡайһы берҙәрҙән айырылып тора.

Әҫәрҙең сюжеты ҡатмарлы түгел, уның нигеҙендә бер ваҡиға ята. Шулай һәүетемсә йәшәп ятҡанда, Рәүефтең тормошонда хәҙерге заманда башҡа һыймаған хәл булып үтә:уны ят кешеләр – “ҡара ҡарғалар” төн уртаһында алып китә. Был уның ғына тәҡдире булмаған, мәктәп директоры, физкультура уҡытыусыһы Ғәлимгә лә быны күрергә яҙған. Артабан уларҙы билдәһеҙ йүнәлештә алып китеп, һәр ҡулға алыныусыны айырым өйҙә тотоуҙары һүрәтләнә. Мең төрлө һорауҙар һәм уйҙар ябырыла Рәүефтең башына. Кемдәр? Ни өсөн? Ҡасанға тиклем?.. Роботҡа оҡшаған һаҡсылар, уларҙың йүнләп һөйләшмәүе, яңғыҙаҡ һәм алдан әҙерләнгән өйҙәр, телефон бәйләнешенең һәр ваҡыт тыңланып тороуы геройҙы оло хәүефкә һала. Үҙенең был ерҙән берәй ҡасан ҡотолоуына шикләнә биреп ҡуя.

Повесҡа исем биргән художестволы деталь ярайһы уҡ уйланылған, киң

мәғәнәгә эйә. Был бигерәк тә тәүге көндән үк Рәүефтең иғтибарын, көндәрҙең һыуыҡ тороуына ҡарамай, өй тирәһендә ут кеүек янып ултырған йондоҙ сәскә йәлеп итә. Шунан башлап сәскәнең йәшәүе менән үҙенең бынан ҡотолоуын, артабанғы тормошон күҙаллай. Ләкин өмөт ҡапыл һүнә – бәшмәк йыйырға килгән түрәләрҙең малайы йондоҙ сәскәне иҙә тапап китә. Был күренештә бөгөнгө заманда түрә-ҡара балаларының әхлаҡи яҡтан тәрбиәһеҙлеге, ябай матурлыҡты күрә белмәүе ярылып ята.

Әҫәрҙең конфликтын төп геройҙың кисерештәрендә барлыҡҡа килгән бихисап һорауҙар, мәсьәләләр биләй. Рәүеф артабан да үҙенең яңғыҙ йортҡа килеп ябылыуының сәбәптәрен эҙләүҙән туҡтамай. Төрлө-төрлө ваҡиғаларҙы, хәлдәрҙе башынан үткәрә һәм, аҙаҡтан килеп, уйҙарының осона сыҡҡандай була.

Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдынан район мәғариф бүлеге мөдире Хәбибуллин тигән кеше мәктәпкә килеп осрашыу үткәрә. Шунда тыуған бәхәстә ҡатнашлығының һөҙөмтәһе был, тигән фекергә килә беҙҙең герой. Осрашыуҙа үҙ фекерен әйткән өсөн Хәбибуллин аҙаҡтан "Күрһәтермен әле" тигән һүҙҙәрен иҫбатлай килеп сыға. Рәүефтең уйҙары илдә демократик принциптарҙың боҙолоуын, халыҡты һарыҡ итеп күреүҙе, власть органдарының ябай кешене сүп итеп ҡарауын дәлилләй. Халыҡтың фекере менән иҫәпләшмәйенсә, дәүләт органдарының үҙҙәренең сәйәсәтен үткәреү бөгөнгө көндә ғәҙәтигә әйләнгән. Рәүеф өсөн халыҡты "Берҙәм ил" фирҡәһе өсөн тауыш бирергә өгөтләү тик күҙ буяу ғына.

Рәүефтең фекере менән бер юҫыҡта булған мәктәп директоры һәм Ғәлимдең дә уйҙары халыҡтың мәнфәғәтен яҡлауға, уларҙың фекере менән иҫәпләшеүгә ҡайтып ҡала. Уларҙың һүҙҙәре буйынса мәктәпкә ҡығылышлы ябай көнкүреш мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә лә дәүләт органдарының ябай халыҡҡа ҡарата мөнәсәбәте асыҡ күренә. Был осраҡта "аҫтағылар"ҙың йүгереп йөрөүенән, "өҫтәгеләр" ҡыбырламаһа, фәтүә юҡ һымаҡ тойола. Һәр осрашыу һайын биргән вәғәҙәләр теге йәки был сараның үтеүе менән үк онотола. Был күренеш ғәҙәткә ингән. Һәм ошоға ҡаршы сығыусы, халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы кешеләр бик аҙ, ләкин, уларҙың аҙ булыуына ҡарамаҫтан, уларҙы тыйырға, эштәренә аяҡ салырға тырышыусылар бихисап. Бындай күренештәр әҫәрҙә йыш осрай. Дәүләт органдарының сәйәсәтенә ҡаршы уйҙа булғандарҙы алып ташлап, тейешле маҡсатҡа ирешеү юлында "ҡара ҡарғалар" бик әүҙем эшләй.

Рәүефтең ҡулға алыныуына бер ай тирәһе ваҡыт үткәс, уның янына бер ҡатынды алып киләләр. Тәүҙә махсус индерелгән шымсы тип шикләнеберәк ҡараһа ла, бер аҙҙан уның да үҙе һымаҡ тотҡон икәнен аңлай. Шулай Рәүеф менән Рәүфә донъя көтөп алып китә. Ошо осорҙарҙа Рәүеф "Башҡорт халҡы бер-береһенең тормошона битараф ҡарай" тигән фекеренә тағы бер тапҡыр инана. Бәшмәк йыйырға килгән түрәнең малайының һүҙҙәренә иғтибар бирмәй, яңғыҙ йортто килеп ҡарамауы был һүҙҙәрҙе дәлилләй. Шулай уҡ Рәүфәнең, телевизорҙан концерт булһа, йомолоп шуны ҡарауы, бының тураһында уның "Сәйәсәте лә, башҡаһы ла кәрәкмәй, миңә концерт ҡына бир" тигән һүҙҙәре Рәүефте уйға һала. Ә уның фекере буйынса, телевизор, радио, гәзиттәрҙә "илдә барыһы да ал да гөл, бер ниндәй хәүеф-хәтәр юҡ, аяҡ һуҙып "шоу" ҡарарға ғына ҡала" тип, дәүләт органдары "халыҡты тамам йоҡлаталар, алдайҙар, киҫкен сәйәси, социаль, ижтимағи темаларҙан ситкә тайпылталар". Халыҡтың битарафлығын, күндәмлеген файҙаланып, власть органдары үҙҙәренең сәйәсәтен үткәреүе повеста асыҡ сағылыш таба.

Бер көндө, Рәүфәнең үтенесе буйынса, Рәүеф баҙға төшөп, ер аҫтынан ҡотолоу юлдарын ҡарарға була һәм тәүәккәлләп эшкә тотона. Башта эш

ырамлы һәм тыныс бара, ләкин аҙаҡҡараҡ ҡаҙған һайын кеше һөйәктәренең күпләп сыға башлауы геройҙы хафаға һала. Ләкин эшен дауам итә, тик бушҡа ғына: өй тик кеше һөйәктәренән торған нигеҙ өҫтөндә ултыра булып сыға. Барыһы ла хәҙер аңлашылған кеүек: власть органдары үҙенең теләктәренә ҡаршы сыҡҡан кешеләрҙең һәр береһен айырым өйҙәрҙә тотоу электән килгән. Ҡотолоу юлдарын эҙләп баҙ ҡаҙған кешеләрҙең күпселеге үлемгә дусар булған. Шуның өсөн дә уларҙың һөйәктәре бөгөнгө көндә өйҙөң нигеҙен тәшкил итә.

Повестың композицияһы ла үҙенсәлекле: төйөнләнеүҙән башланып китеп, ваҡиғалар бер-бер артлы урын ала. Сылбыр рәүешендә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар яйлап ҡына сюжеттың сиселешенә алып килә.

Ким Әхмәтйәновтың һүҙҙәре буйынса, характер – хәл-ваҡиғаларҙың тыуыуына сәбәпсе булған, әҫәрҙәге ваҡиғаларға битараф ҡалмаған әҙәби образ. Беҙҙең осраҡта Рәүеф Юламанов характер бейеклегенә күтәрелеп етә, ләкин ошо кимәлде тота алмай. Әҫәрҙә үҙенең һүҙҙәре киләсәктә ул тарыясаҡ хәл-ваҡиғаларға сәбәпсе була, илдәге сәйәсәткә шәхси мөнәсәбәтен белдерә. Ваҡиғалар үҫешендә холоҡ-фиғелдең айырым үҙенсәлектәре асыла бара – повестың һәр юлы менән Рәүефтең үҙенә хас сифаттары менән танышабыҙ. “Көрәш” барышында, үҙенең шәхси фекерҙәренең булыуына ҡарамаҫтан, Рәүеф халыҡтың типик вәкиленә әйләнә, күндәм, өмөтләнмәгән, битараф ябай кеше булып сыға. Кешенең «кешелеге» тик көрәш аша ғына асылырға мөмкин, һәм ошо көрәштә геройҙың рухи яҡтан еңелеүе уны бейеклектән кинәт аҫҡа тәгәрәтә. Автор Рәүефтең холҡон тулыһынса асыу өсөн Рәүфә образын оҫта файҙалана. Был образ типиклашҡан, ғәҙәти булғанға күрә, ул персонаж кимәлендә генә ҡала.

Әмир Әминев әҫәрҙә Рәүеф менән ҙур ҡара себен араһында «параллель» үткәрә. Өйҙә өсөнсө йән эйәһе булған себен тәҙрә аша сығырға ынтыла. Ләкин һәр ынтылыш һайын тәҙрәнең быялаһына килеп бәрелеп, лап итеп ҡолап төшә. Рәүефтең хәле лә шул сама: һаҡсы аша «хужа»ларҙан яуап алыу теләге бойомға ашмай. Повесть аҙағында себендең үрмәксе ауына эләгеүе – Рәүефтең власть органдары алдында көсһөҙлөгөн дәлилләй.

Әҫәр өй ишегенең бер нисә көн асыҡ тороуы, Рәүеф менән Рәүфәнең был турала башта белмәүҙәре, шунан сығып китеүҙәре, ләкин алыҫ китә алмауҙары һәм кире өйгә әйләнеп ҡайтыуҙары менән тамамлана. Ир менән ҡатындың өйгә кире ҡайтыуы – уларҙың еңелеүен, битарафлыҡтың йәшәү көсөнә ҡарата баҫымлыраҡ булыуын аңлата. Эйе, илде зинданға әйләндерәләр, һәм быға ҡаршы тороуы мөмкин түгел...

**Айгөл АЛТЫНБАЕВА,**<br>
**3-сө курс студенты.**

## Уҡыусы күңеленә юл

“Һәм мин һиңә ҡайтырмын...” китабы шағирә Светлана Дегтяреваның “И я вернусь к тебе” йыйынтығына ингән әҫәрҙәрҙең башҡортсаға тәржемәһен туплаған. Тәржемә авторы, Ш. Бабич исемендәге премия лауреаты, шағирә, журналист Лариса Абдуллина хис-тойғоларға, образдарға бай шиғырҙарҙы башҡорт телендә тулыһынса яҡтыртып, уҡыусыға был әҫәрҙең барлыҡ матурлығын еткерә алған.

Светлана Дегтярева – ике бала әсәһе, егерме һигеҙ йәшендә яҡты донъяларҙан китеп бара. Әҙибәнең аяныслы яҙмышы уның әҫәрҙәрендә лә сағылыш тапҡан. “Һәм мин һиңә ҡайтырмын...” формаһы яғынан үҙенсәлекле шиғри көндәлек булып тора. Ошо шиғырҙар аша уҡыусы автор ғүмеренең һуңғы миҙгелдәрендә кисергән хис-тойғолары, уйҙары менән таныша ала. Йәш әҙибәнең аяныслы яҙмышы, йәшәү менән үлем араһында үҙ бәхете

өсөн көрәше уҡыусыны битараф ҡалдыра алмай. Йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙар ҡатын-ҡыҙ бәхете, ғаилә, мөхәббәт темаларын күтәреп сыға. Китаптың атамаһынан уҡ күренеүенсә, лирик героиня ғаиләһенән ситтә, яҙмыш уны бәхетенән айырған. Шуға ла һәр бер әҫәр айырыуса һағыш менән һуғарылған. Шиғырҙарҙың күбеһен Светлана Дегтярева ғаиләһенән айырылып, ауыр хәлдә Австрияның Вена больницаһында ятҡанда ижад иткән. Улар китапта "Вена дәфтәре" исеме аҫтында бирелә. Лариса Абдуллина ауыр хәлдә ҡалған ҡатын-ҡыҙҙың, әсә кешенең барлыҡ әрнеү-һағыштарын үҙе аша үткәреп, уҡыусыға тәьҫир көсөн юғалтыуһыҙ еткерә алған.

Тәржемәнең юғары сифатын шиғри юлдарҙың образдарға бай булыуы ла күрһәтеп тора. Был образдарҙы дөрөҫ һәм урынлы ҡулланыу айырыуса оҫталыҡ талап итә. Мәҫәлән, матурлыҡ, бәхет символы булып торған Һомай образы:

*Һәм мин беләм кемдә көс барлығын:*
*Һомай ҡоштай булыр терелеп.*

[Һәм мин һиңә ҡайтырмын..., 16 б.]

Был юлдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә, халыҡ ижадында күренекле урын алып торған Һомай образы һынланыш тапҡан. Йәғни автор әйтергә теләгән идеяны тәржемәсе шул уҡ йөкмәткегә эйә булған башҡа, башҡорт әҙәбиәтенә генә хас образ менән алыштыра. Бындай алым шиғырҙа күтәрелгән көнүҙәк мәсьәләләрҙе, хис-тойғоларҙы башҡорт уҡыусыһына яҡынырaҡ итә.

Үрҙә һаналып киткән үҙенсәлектәрҙән сығып, был әҫәрҙәрҙең тәржемәһе юғары кимәлдә башҡарылған, тип әйтергә була. Лариса Абдуллина "Һәм мин һиңә ҡайтырмын..." йыйынтығында Светлана Дегтярева ижадын, уның идея-тематик йөкмәткеһен, поэтикаһын тулы кимәлдә яҡтыртҡан.

**Илһөйәр СӘЛИХОВА,**
**3-сө курс студенты.**

## "Рәми" романын уҡып

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың шиғри әҫәрҙәрен беҙ күпләп беләбеҙ. Мәктәп программаһына үҙенсәлекле төрлө-төрлө поэтик әҫәрҙәре индерелгән. Шулай уҡ Рауил Бикбаевтың ғилми эшмәкәрлеге лә ҙур даирәне алып тора. Ә бына роман жанрындағы тәүге әҫәре бөгөнгө уҡыусыла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Романдың исеме үк башҡорт һүҙ сәнғәтендә ҙур урынды алып торған шәхесте күҙалларға ярҙам итә.

Роман тарихи ысынбарлыҡҡа ҡоролған, алтмышынсы, етмешенсе йылдарҙағы башҡорт зыялыларының тормошо менән һуғарылған. Күтәрелгән көнүҙәк мәсьәләләр буйынса башҡа тарихи романдар менән ауаздаш, ни өсөн тигәндә, унда билдәле шәхес яҙмышы – шағир Рәми Ғариповтың тормошо, ғүмер юлы. Милли проблематика халҡының үткәне менән бергә һүрәтләнә. Ошолар тураһындағы фәлсәфәүи уйланыуҙар романды традицион башҡорт тарихи прозаһына яҡынайта. Романда шәхес яҙмышынан төрлө яңылыҡтар асыҡлана һәм шул йәһәттән уҡыусыға бәхәскә урын ҡала, теге йәки был ҡиммәттәр системаһы тикшерелеүгә дусар ителә, һорауҙар ҡуйыла, донъяға, тормошҡа ҡараштар тыуа. Был ҡараштар милли, фәлсәфәүи йүнәлештәге яуаптар менән тулылана. Эҙләнеүҙәргә, кешелектең мәңгелек һорауҙарына яуап алынып, дөрөҫлөккә юл табыла.

Романда документаль дөрөҫлөк, хронологик эҙмә-эҙлелек, яҙыусының үҙ художество маҡсаты өҫтөнлөк итә, шуға ла яҙыусы ысынбарлыҡтағы таныш (биографик) мөхиттән барыһын да түгел, ижади маҡсатҡа ярашлыларын ғына, "сәйерерәк", "саярaҡ", көндәлек тормоштан (тимәк, документтан да) күпкә ҡалҡыуыраҡтарын йәлеп итә.

Рәми Ғариповтың исеме һикһәненсе йылдар аҙағында мәңгеләштерелде, уға халыҡ шағиры исеме бирелде. Әммә халыҡ яҙмышы йөҙөндә Рәми

Ғарипов тормошо әлегәсә билгеһеҙ булып ҡала килә. Ул ваҡыттағы башҡорт зыялыларының идеалдары тулыһынса коммунизмдың идеологик ҡалыптарына һыйып бөтмәүе, ара-тирә ирекле тауыштар ишетелеүе көн кеүек асыҡ. Милли һулыштың был осорҙағы хәле әллә күпме һорауҙар уята. Р. Бикбаевтың романы уға күп яҡлап асыҡлыҡ индерә. Прогрессив идеялар һәм иле тормошон үҙгәртеү менән янып йәшәгән йәш шағирҙың Мәскәүҙә уҡыған осорҙағы тормошон һүрәтләгәндә, Рәми көндәлектәрен күҙәткәндә автор уның ынтылыштарын, ижади йөҙөн билдәләй.

Рауил Бикбаевтың романы, тарихи документаль характерҙа булыуына ҡарамаҫтан, ошоғаса тыйылып килгән темаға – быуат башы һәм Граждандар һуғышы осоронда милли хәрәкәтте, уның күтәрелеш сәбәптәрен һәм маҡсаттарын художестволы күҙаллай, был авторҙың фәлсәфәүи фекерҙәрендә лә асыҡ сағыла.

Рәми Ғариповтың бергә ижад иткән күп кенә башҡа фекерҙәштәренең, ижадташтарының тормошо өйрәнелгән. Рауил Бикбаевтың был романы шағир тормошон яҡтырта, уның ижади һәм йәмәғәтселек эшмәкәрлеген күҙаллай. Талантлы шағир, «халҡым» тип йөрәге ярһып типкән ысын гражданин, азатлыҡ һөйөүсе, һәр төрлө сикләүҙәрҙе, тыйыуҙарҙы кире ҡаҡҡан демократ, милләтен, телен, илен һөйгән. Тыуған төйәген иң алдынғы сафта күргеһе килгән ысын ил улы булараҡ тулы, бай, төрлө яҡлы ижади портретын тыуҙыра. Рәми тураһындағы роман – жанр үҙенсәлектәре буйынса бик ҡатмарлы әҫәр, ул тарихи-библиографик прозаның публицистика, шиғриәт, документаль формаларҙың синтезы һөҙөмтәһендә тыуа. Рауил Бикбаев үҙ әҫәрендә, замана йүнәлешенә эйәреп, синтетик, йәғни ҡатнаш жанрҙар системаһын файҙалана.

Әҫәрҙе уҡыған саҡта минең күңелемдә шул тиклем ҙур тойғолар уянды, тулҡынланыу хисе барлыҡҡа килде. Бөйөк шағирҙың бөтә ғүмер юлын, кисерештәрен үҙ иңемдә татығандай булдым. Рауил Бикбаев романы уйланыуҙар уята, донъяға ҡарашты ҡырҡа үҙгәртә. Шағир көндәлектәрен барлағанда, Рәми Ғариповтың тормош ауырлыҡтарына осрап, уларҙан юл эҙләп интеккәнен, насар кешеләр тәнҡитенә дусар булған саҡтарын, һынауҙар алдында баҫып торған ваҡыттарын уҡығанда күҙҙәренән йәш сығармаған уҡыусыны күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгелдер. Арҙаҡлы шәхестең һәр осраҡта ла ихлас һәм тыныс булып ҡала белеүе һоҡландырҙы. Рәми Ғариповты кәмһетергә, меҫкен итергә тырышҡан кешеләр ҙә була, ләкин ул барыбер ундай хәлгә ҡалмай. Әммә был «тырыштар» күпме уның йәнен ҡыйған, күпме көсөн алып киткән. Ҡайһы бер шағирҙар уйҙырмалар донъяһында йәшәп, ғибрәтле хәлдәрҙе уйлап сығарып яҙа. Ләкин Рәми Ғариповтың ғүмер юлын роман аша күргәс, уның шиғырҙарында тормош юлының күп яҡтары сағылыуын күрәбеҙ. Рәми Ғарипов һымаҡ лириктың күңеле уның ижадында бигерәк тә тулы асыла. Быларҙан тыш, уның көндәлектәре – бик һирәктәрҙә була торған бай мираҫ. Ошо документтарға замандаштарының иҫтәлектәре өҫтәлә. Быларҙың барыһын да бер-береһе менән тоташтырып «шағир яҙмышы» тигән ҡатмарлы донъяны тулыраҡ аңлай алдыҡ.

Рауил Бикбаевтың «Рәми» романы башҡорт әҙәбиәтендә сағыу күренеш булды. Беренсенән, халыҡ шағиры образы тулыһынса заман кешеләре менән берлектә күрһәтелгән. Икенсенән, оло шәхестең холоҡ-фиғеленең формалашыу юлдары әҫәрҙең художестволы туҡымаһында асыҡ сағылыш тапҡан. Өсөнсөнән, Рәми Ғариповтың исеме, йәшәү рәүеше, донъяға ҡарашы ҡәтғи биләүҙәрҙә түгел, ә уҡыусы фекеренең оло даирәһендә сағыла.

**Айнур ФӘХРЕТДИНОВ,**
**5-се курс студенты.**

# *«Ағиҙел» архивынан*



*Сәйфи ҠУДАШ, Мөхәмәт БИКБУЛАТОВ, Ғәлә ХОҘАЯРОВ,*
*Ғариф ҒҮМӘР, Фатима ХОҘАЯРОВА.*

*1959 йыл.*



*Л. СОБОЛЕВ, Ғ. КАШШАФ, З. НУРИ, Ғ. РАМАЗАНОВ, Х. ТУФАН, Ғ. ӘПСӘЛӘМОВ*
*Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит ҒАФУРИ ҡәбере янында.*



*Ғилемдар РАМАЗАНОВ, Шакир НАСИРОВ, Ғәйнан ӘМИРИ, Сәғит АГИШ,*
*Әхнәф ХАРИСОВ, Муса ҒӘЛИ.*

*Үткән быуаттың 50-се йылдары.*



*Яҡташыбыҙ, авиация маршалы Иван ПСТЫГО менән осрашыуҙа.*
*Динис БУЛӘКОВ, Кәтибә КИНЙӘБУЛАТОВА, Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ.*



*Һулдан уңға: Ибраһим АБДУЛЛИН, (?), Ғәйнан ӘМИРИ, Әхнәф ХАРИСОВ, Ғилемдар РАМАЗАНОВ, Сәләх КҮЛИБАЙ.*



*Зәйнәб БИИШЕВА.*



*Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ, Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ, Ғәлим ДӘҮЛӘТОВ.*



*Фәүзиә РӘХИМҒОЛОВА.*

## *Бөйөк Еңеүгә – 68 йыл*




# СНАЙПЕР

### *Батырлығы тиңдәшһеҙ булыуға ҡарамаҫтан, уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелмәгән*



«Снайпер Әхәт Әхмәтйәнов Ленинград фронтында 502 фашисты юҡ иткән, ә уның өйрәнсектәре – 2300». Республика Хәрби дан музейында яҡташыбыҙ тураһында аҙмы-күпме мәғлүмәт һаҡлана. Үкенескә ҡаршы, Башҡортостанда был шәхес тураһында ишетеп белгән кешене табыуы ҡыйын, исеме хатта байрамдарҙа ла телгә алынмай, гәзит биттәрендә лә осрамай. Был, әлбиттә, ғәфү ителмәҫлек хәл, ләкин халыҡ хәтере – компьютер түгел, бөтәһен дә иҫендә тота алмай. Тарихи хәтер генә бөтәһен дә үҙ эсенә һыйҙыра, түкмәйсәсмәй һаҡларға һәләтле.

Һуғыш яланында өлкән сержант Әхәт Әхмәтйәнов, үҙ эшенең оҫтаһы булараҡ, бик юғары баһаланған, уны «Ленинград фронтының иң оҫта һәм уңышлы снайперы» тип атағандар. Һүрәте гәзит биттәрендә йыш донъя күргән, мәргәнлек тәжрибәһен үрнәк итеп ҡуйғандар. Төрлө милләт вәкилдәре яугирҙы «үҙенеке» итеү өсөн төрлө юлдар эҙләп ҡараған. Ғәжәпкә күрә, үҙ илендә быңдай тырышлыҡ һалыусылар күренмәй. Һәр снайпер кеүек, өлкән сержант Әхәт Әхмәтйәнов та «шәхси үс алыу иҫәбе» тип аталған журналды тултырып барған. Ике йыл теркәлгән яҙмаларҙың аҙағы «502» иҫәбендә туҡтаған. Был – бик ҙур ҡаҙаныш! Башҡа коллегалары менән сағыштырғанда, яҡташыбыҙ уларҙы күпкә уҙып киткән, немец фашистарын еңеүгә тиңдәшһеҙ өлөш индергән. Хатта «Гиннестар китабы»на кандидат!

Фронтта уларҙы хөрмәтләп һәм ололап «һунарсы» тип йөрөтәләр. Снайперҙарға ихтирам ҙур, һәр ҡайһыһы көндөҙмө, төндәме «һунар»ға сыға һәм нәтижәһеҙ ҡайтмай. Әхмәтйәнов, мәҫәлән, тәүге көндө үк журналына «1+1» тип яҙып ҡуя.

«Һунарсы»ның эш көнө, уңышы ла, уңышһыҙлығы ла, хәрби етәкселектең күҙ уңынан төшмәй. Шәхси иҫәбе 150-нән ашып киткәс, мәргән яҡташыбыҙ «Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә. Артабан Ватан һуғышы орденының II һәм I дәрәжәлеләренә лайыҡ була, миҙалдары ла аҙ түгел. Хәйер, ысын яугир орден өсөн һуғыша буламы һуң? Иң мөһиме – дошманды ҡыйратыу, илгә, халыҡҡа тыныс тормош ҡайтарып биреү. Һуғыш яланында Әхмәтйәновты ошо уй һәм теләк кенә йөрөтә.

Әхәт Әбделхаҡ улы Әхмәтйәновтың тормош юлын өйрәнгәндә шуға иғтибар итмәй булдыра алманым: ул, ысынлап та, иң юғары исемгә тәҡдим ителергә

хоҡуҡлы булған, әммә, ни сәбәптәндер, ситтә ҡалдырылған. Ни өсөн? Һуғыш йылдарынан ҡалған материалдарҙың күсермәһен дә тикшереп ҡараным, ләкин яуап табылманы. Ябай тарих түгел бит был, снайпер Әхмәтйәновтың 502 фашисты дөмөктөрөүе шәхси үс алыу иҫәбенең һуңғы битендә теркәлеп, штаб хеҙмәткәрҙәре тарафынан мисәт менән нығытылып ҡуйылған. Ҡултамғалары ла бар.

Батыр яҡташыбыҙ тураһындағы мәғлүмәттәрҙең бер өлөшөн музейға һәүәҫкәр тарихсы Владимир Игнатьев килтерҙе. Апаруҡ танылған шәхес ул, мәҫәлән, «Ишембай» исемле 500 битлек китаптың авторы. Владимир Леонидович – үҙе көн иткән төбәкте өйрәнеүгә күп көс һалған шәхес. Уның аша миңә Әхәт Әхмәтйәновтың хәҙерге Ишембай районының Маҡар ауылында уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләгәне асыҡланды. 1918 йылдың 10 августында Әбделхаҡ Әхмәтйәновтың ғаиләһендә донъяға килә ул. Ауыл мәктәбен тамамлап, 1935 йылда Бөрйән районы Әтек тулы булмаған урта мәктәбендә уҡыта. 1938 йылда Сермән педагогия училищеһын яҡшы билдәләр менән тамамлағас, бер йыл Маҡар урта мәктәбендә эшләй. 1939 йылда Һайран урта мәктәбенә уҡытыусы булып урынлаша һәм ситтән тороп Одесса ҡалаһындағы химик-технологик университетта белем ала.

1942 йылдың 19 июнендә Ҡыҙыл Армия сафына алынып, 1944 йылдың 1 майында госпиталдә дауаланып сыҡҡандан һуң, демобилизациялана. Икенсе группа инвалиды. 1944 йылдың 1 июленән Маҡар урта мәктәбе директоры һәм бер үк ваҡытта Маҡар район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире вазифаларын алып бара. 1947 йылдың 23 мартынан 1949 йылдың 5 июленә саҡлы ошо уҡ райондың – Һайран һәм артабан бер йыл Аҙнай урта мәктәптәренең директоры була. 1950 йылда элекке мәргән снайпер Бишбүләк районының Яңы Бикташ мәктәбенә етәкселек итә. Был мәғлүмәттәр – кадрҙарҙы иҫәпкә алыу буйынса шәхси листоктан. 1980 йылдың ноябрендә тултырылған, машинкала баҫылып, тейешле ҡултамғалар, мисәт ҡуйылған.

Ленинград фронтына етәкселек итеүсе генерал-лейтенант Говоровтың СССР Юғары Советы Президиумы исеменән Әхәт Әбделхаҡ улы Әхмәтйәновҡа немец баҫҡынсыларына ҡаршы көрәштә ҡуйылған бурыстарҙы үрнәкле үтәп, батырлыҡ һәм тәүәккәллек күрһәткәне өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләү тураһында 1942 йылдың 11 ноябрендә ҡул ҡуйылған документтың тулы тексы ла бар.

## Атанан күргән – уҡ юнған

Булдыҡлы улы ҡул араһына инә башлау менән, Әбделхаҡ Ҡарамышев уны, үҙе менән эйәртеп, һунарға йөрөтә башлай. Йыртҡысты эҙәрләкләп, ҡулға төшөрөү серҙәрен өйрәтә. Үҫә төшкәс, Әхәт атаһының Рус-япон, империалистик һуғыштарҙа күргәндәрен һөйләгәнен ишетә. Әбделхаҡ мәргән атыусы була, дошман һалдатын бер пуля менән йығып һалыуы арҡаһында дан ҡаҙана. Һуғыштар туҡтап торған мәлдәрҙә ярыштарҙа ҡатнаша. Мәргәнлеккә көс һынашыуҙарҙың береһендә был тамашаны юғары дәрәжәле генерал күҙәтеп торған, имеш. Әбделхаҡ, мәжбүри программаны үтәп, беренселекте алғас, генерал, ҡыҙышып китеп, уға яңынан-яңы заданиелар бирә: хәрәкәттәге мишенгә, бик алыҫтағыһына тейҙерергә, осоп барған ҡошто атып төшөрөргә һ.б. Һәр ҡайһыһы үтәлә торғас, генерал шундағы берәүгә биш тинлек аҡса һона ла, йырағырак китеп, күккә сөйөргә бойора. Әбделхаҡ был сәпкә лә атып тейҙерә. Һоҡланыуын йәшермәгән генерал мәргән һалдатты үҙенә саҡырып рәхмәт белдерә һәм алтын сәғәт бүләк итә.

Атанан күргән – уҡ юнған, тигәндәй, Әхәт һунарсы шөғөлөн яҡшы үҙләштерә. Тик табыштарын, атаһы һымаҡ, Стәрле байҙарына илтмәй, сөнки ул уҡытыу эшенә бирелгән, ә шулай ҙа велосипед һатып алырлыҡ аҡса йүнәтә. Хаҡ юлда йөрөүсе ир иртәгәһе лә салт аяҡ булыр тип өмөтләнә, ләкин йыш ҡына уның кеүектәрҙе хөсөтлө берәү һағалап тора. Йылан һиҙҙермәҫтән саҡҡандай, йәнендә аяҡ аҫтына һалып тапарҙай хаслыҡ ҡыла. Кемдеңдер ялғаны арҡаһында Әбделхаҡ милиция тарафынан ҡулға алына. Быны ишетеп, улы Әхәт үҙенә тынғылыҡ тапмай интегә. Атаһының Өфөлә бикле тотолоуын асыҡлағас, егет велосипедына атлана ла баш ҡалаға юл тота.

Егет – егетлеген итә, ат эсерә буранда, тигәндәй, һауа шарттарының ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, өҫтөндәге бер ҡат күлдәге менән генә байтаҡ ваҡыттан һуң кире әйләнә. «Атай ҡотолоп ҡайтасаҡ» тиһә лә, үҙенең йөҙөндә шатлыҡ әҫәре күренмәй. Ысынлап та, Әбделхаҡ бер заман Маҡарға ҡайтып төшә, әммә уның йөҙөнән нур ҡасҡан, рухы һындырылған. Ғаиләлә һаҡланған легендаға ҡарағанда, Әхәт атаһын ҡотҡарыу хаҡына ике тәгәрмәсле йүгерек арбаһын ғына түгел, хатта алтын сәғәтте лә сарыф иткән. Булғандыр, сөнки маҡсат итеп ҡуйғанды еренә еткереп атҡарырға яратыуы үҫмер сағынан күренә. Нахаҡҡа ҡулға алынған атаһын ҡотҡарыу өсөн егет үҙен ҡорбан итергә лә риза булған. Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тигәндәй, Әбделхаҡ Әхмәтйән улының Ҡарамышевтар фамилияһын йөрөтөүе лә, моғайын, күпте һөйләйҙер.

Армия сафтарында Әхәт булдыҡлылығы менән башҡаларҙан айырылып тора. Урыҫ телен, математика, физика кеүек фәндәрҙе «һыу кеүек эскәнлектән», хәрби белемде тиҙ үҙләштерә. Тарихи шәхестәрҙән А. В. Суворовты бик яҡын күреп, уның «Наука побеждать» тигән китабын ныҡлы өйрәнә. Полкташтары араһында уның: «Был китап беҙҙең өсөн, совет һалдаты өсөн, яҙылған», – тигән хәбәр таратыуы менән хатта командирҙарҙы ла ғәжәпкә ҡалдыра. Урта буйлы, көләс ҡарашлы, баҫҡан урынында бейеп торған был егет һалдат йырҙарын да тиҙ өйрәнеп ала. Полигонға сыҡһа – беренсе, йүгереүҙә – иң алдан, теоретик дәрестәрҙә командирҙың иң маҡтаулы һалдаты. Полк мәктәбендә снайперҙар тураһында һүҙ сығыуы була, Әхәт Әхмәтйәнов уға беренселәрҙән булып яҙыла. 1942 йылдың 12 августында Ленинград фронтына килгәндә яҡташыбыҙ инде өлгөрөп еткән снайпер була.

«Һәр һунарсы снайпер була алмай, – тип үҙ фекере менән уртаҡлаша өлкән сержант Әхмәтйәнов. – Был һөнәр серҙәренә төшөнөү өсөн зирәк аҡыл, юғары һиҙгерлек, күп кешеләрҙә осрамаған тапҡырлыҡ кәрәк. Башҡалар дошман өҫтөнә ут яуҙырып еңһә, беҙ уларҙы берәмләп сүпләйбеҙ... Дошмандың ҡотон алыу өсөн беҙгә бер генә пуля кәрәк. «Һунар»ға сыҡҡанда мин үҙемде яңғыҙ бүре һымаҡ хис итәм. Бер дошманды теге донъяға оҙатыу өсөн миңә бер пуля ла етә. Ни бары бер пуля. Шуны онотмағыҙ!

Шундай хата ебәреүселәр була: үҙе тоҫҡап атҡан фашистың үлгәнме-юҡмы икәнен күрергә теләп, снайпер башын ҡалҡыта, – тип дауам итә инструктор Әхмәтйәнов. – Эйе, үҙем шаһит булдым быңдай тәжрибәһеҙлектең, өйрәнсек егет «һунар»ға сыҡҡан тәүге көнөндә үк ятып ҡалды. Уның көтмәгәндә башын ҡалҡытыуын һағалап тороп, немец снайперы уны мушкаға алып та өлгөрҙө. Беҙҙең өҫтөнлөк шунда: дошман яғында өҙлөкһөҙ хәүеф тыуҙырыусы көс булырға тейешбеҙ. Артиллерия снаряды йәки авиация бомбаһының ҡайһы ваҡыт бушҡа шартлауы ихтимал, ә беҙҙең пуля дошмандың башына етмәй ҡалмай. Бер пуля – бер үлем».

Снайпер Әхәт Әхмәтйәновтың яу юлын өйрәнеүемдә хуплап, ҡарт журналист, дуҫым Әлмир Нәбиуллин былай тине:

– Фронттағы яҡташтарыбыҙ Әхәтте яҡшы белгән, үрнәгенә эйәрергә тырышҡандар, сөнки уның уңыштары тураһында фронт гәзиттәре даими хәбәр итеп торған. Ә татар телендә сыҡҡан фронт гәзиттәре тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Ҡайһыһын асып ҡарама, яҡташыбыҙ Әхмәтйәновтың исеме ярылып ята.

Ә. Нәбиуллин 60-сы йылдарҙа ғилми эш башлап, Мәскәү өлкәһенең Подольск ҡалаһында урынлашҡан Ҡораллы Көстәр үҙәк архивында һуғыш осоро гәзиттәрендә фронт темаһы буйынса мәғлүмәттәр туплау менән шөғөлләнә. Әхәт Әхмәтйәновты һүрәтләгән материалдар араһында быға саҡлы миңә мәғлүм булмағаны ла бар. Ул яҡташыбыҙҙың һалдат Саучев менән бергә немец снайперын әсир алыуы тураһында.

...Броня ҡалҡанға ышыҡланып «һунар» итеүсе фашист снайперы берәү генә булмаған. Ул мәлғүнде мәргән башҡорт яугиры тиҙ генә теге донъяға оҙата алмай. Баш вата торғас, уйлап тапҡан хәйләһе тәү ҡарашҡа дыуамаллыҡ, аҡылһыҙлыҡ кеүек ҡабул ителә. Әхәт үҙе билгән урындан сыға ла, асыҡ урында тороп, фашист снайперына ата башлай. «Мин был аҙымды ныҡлы уйлағандан һуң ғына яһаным»,– тип аңлата ул был тәртибен һуңынан. Яҡташыбыҙ, әлбиттә, дошманына бер урындан ғына тороп ут асмай, атҡан һайын урынын алмаштырып тора. Маҡсаты – әлеге немец снайперының иғтибарын үҙенә йәлеп итеү. Ә Саучев был ваҡытта алға үрмәләүен белә.

Снайпер Әхәт Әхмәтйәнов хаҡында фронт баҫмаларында «ул фрицтарҙы көндөҙ ҙә, төнөн дә «сүпләй» тора» тип яҙалар, хатта уға бағышлап шиғри юлдар ҙа бирелә (рус теленән тәржемә):

*Изге антыңды онотма,*
*Яуҙа аяуһыҙ һәм ҡурҡыу белмәҫ бул!*
*Ҡурҡаҡтар һәләк булғанда,*
*Бөркөттәр еңеүгә ирешер.*
*Бөркөт булайыҡ, артҡа сикмәйек!*

Ғаилә архивында 1943 йылдың июлендә 260-сы уҡсылар полкы штабы тарафынан өлкән сержант Әхмәт Әхмәтйәновҡа бирелгән танытлыҡ һаҡлана. Унан күренеүенсә, яҡташыбыҙға ҡыҫҡа ваҡытта полктың снайпер постарын тикшереп сығыу, бер ыңғай «һунарсы»ларҙың хәрәкәт итеү рәүешен, яңы килгән снайперҙарҙы өйрәтеүҙе тикшереү бурысы йөкмәтелә. Дошман разведкаһы был «иңиң» мәргәндең кемлеген яҡшы белә. Үҙ позицияларында фашист командирҙары «Әхәт һунарға сыға» тигән белдереүҙәр яҙырға тотона. Тикмәгә түгел, сөнки Маҡар егете айырым көндәрҙә ике, хатта өс немецтың башына етә торған булған. Ул, ғәҙәттә, ябай һалдаттарҙы түгел, офицерҙарҙы эҙәрлекләй. Ләкин, ҡунаҡ ашы ҡара-ҡаршы тигәндәй, уның үҙен дә дошман снайперҙары сығырынан сығып сәпкә алырға тырыша.

Бер саҡ Әхәт үҙенең уңайлы урынында «һунар»ын дауам итеп, журналына «1» тип яҙып ҡуйыуы була, алыҫ түгел дошман минаһының шартлау тауышын ишетә. Тимәк, был тирәнән йәһәтерәк шылыу хәйерле. Мәргәнебеҙ йыйына башлағанда ҡулына күҙе төшөп, ҡуйы ҡыҙыл ҡан һарҡыуын шәйләй. Эйе, мина ярсығы тейгән, тик һөйәккә барып етмәгән. «Хәҙер фашист миңә көн күрһәтмәйәсәк», – тигән һығымтаға килеп, Әхәт был турала командованиеға еткерә.

**Интернет селтәренән...** Татарстандан килгән оялсан математика уҡытыусыһы,

өлкән сержант Әхәт Әхмәтйәновтың исеме ул ваҡыттағы фронт гәзиттәре биттәренән төшмәҫ данлыҡлы «ата» снайпер ине. Уның тапҡырлығы, мәргәнлеге, үҙ эшенең юғары оҫтаһы булыуы хаҡында «На страже Родины», «Красная звезда» гәзиттәрендә йыш яҙылған. Әхәт Әхмәтйәнов һирәк осрай торған снайпер оҫталығына эйә. Миҫалға «Минаға атыу» тип аталған мәҡәләне килтереү урынлы.

## Минаға атыу

Был ваҡиға күптәрҙе һоҡландыра һәм ғәжәпкә ҡалдыра, сөнки снайпер Әхмәтйәнов, бығаса бер кемдең дә аҡылына килмәгән алымды ҡулланып, вермахттың Ораниенбаумға махсус рәүештә килтерелгән снайперын дөмөктөргән. Ул яуыз фашист һуғыш юлдарында бер нисә йыл йөрөү осоронда күптәрҙең башына еткән. Бәлки, Әхмәтйәновты ла ер йөҙөнән һөрөп ташларға тейеш булғандыр. Ихтимал, сөнки Әхмәтйәнов һәм уның өйрәнсектәре юғары һиҙгерлек күрһәтеп, нәтижәле эшләй башлағас, фашистарҙың ҡотҡо һалыусылары арт һандарын ҡыҫып, маҡтаныуҙан һәм беҙҙекеләрҙе хурлауҙан туҡтарға мәжбүр була. Элгәре, урыҫтар һуғыша белмәй, көслө ҡоралдары юҡ, булғанын да ҡуллана алырҙай белгестәре күренмәй, тип көн дә тиерлек ҡабатлай торған булғандар. Ә хәҙер кикректәре шиңде. Иртән торғанда ла, кис ятҡанда ла һалдаттарына «Һаҡ булығыҙ, урыҫ снайперҙары сыға! Башығыҙҙы күрһәтмәгеҙ!» кеүек иҫкәртеүҙәрҙе тәҡрарлауҙан туҡтамайҙар. Яуыз снайперҙың «һунар»ға сығыуы беҙҙең командованиены борсолоуға һала, һәм Әхмәтйәновҡа уның ҡәбәхәт яҙмышын хәл итеү бурысы ҡуйыла.

«Немец снайперы йәшеренеү системаһы һәм атыу оҫталығы менән беҙҙе тәрән аптыраушта ҡалдырҙы, – тип һөйләгән Әхәт ағай хәрби журналистарға. – Мин уны бик оҙаҡ эҙәрлекләгәс кенә таба алдым».

Эҙәрлекләү һөҙөмтәһе тураһында командованиеға еткергәс, уларҙа сәйерһенеү, үҙ көсөбөҙгә шикләнеү кеүек фекер тыуа. Ләкин Әхмәтйәнов «юҡ итмәһәм – мин булмам» тип сәмсел эшмәкәрлеген туҡтатмай. Фашист снайперы махсус ҡалҡан артына ышыҡланып «һунар» итә икән. Әхмәтйәнов уға винтовкаһынан атып ҡарай, әммә теге ҡалҡан шылт та итмәй. Броня тишә торған пуля ла файҙа килтермәй. Шулай ҙа, этләшә торғас, Маҡар мәргәне дошманының перископбын емерә ата. Был хәлдән һуң теге урынын ташлап ҡасырға мәжбүр була.

«Уның позицияһы бик ҡулай, моғайын, иртәгә ул тағы ошонда киләсәк, – тип дауам итә Әхмәтйәнов. – Төнөн мин фашистарҙың сәнскеле тимер сымдары аша шыуышып үтеп, теге снайперҙың броня ҡалҡанына барып еттем. Йәһәт кенә ерҙе соҡоп, 82 миллиметрлы минаны броняның эргәһенә күмдем дә тупаҫ башын үҙебеҙҙең яҡҡа ҡаратып ҡуйҙым. Уға аҡ ҡағыҙ йәбештергәс, ротаға әйләнеп ҡайттым». Был ваҡиғаны күп гәзиттәр ҡабатлап яҙа. Ләкин хәбәрселәр «ҡағыҙ бите йәбештерҙе» тип хәҡиҡәттән ситкә тайпылған. Һуғыштан һуң һөйләгән хәтирәләренең береһендә Әхмәтйәновтың «биш тин аҡса ҙурлығы ғына аҡ ҡағыҙ» тигән аңлатмаһы бар.

Иртәгәһен ҡояш күтәрелгәнсе яҡташыбыҙ үҙ урынын биләп, дошманының килгәнен көтә. Аҡ ҡағыҙ уға перископ аша асыҡ күренә. Хаталанып ҡуйырмын, тигән уй снайперҙың башына инеп тә сыҡмай. Бер генә һорау борсой: «Килерме-юҡмы?» Бына бер мәл броня өҫтөндә яңы перископ күренде. Тимәк, фашист үҙ алымының отошһоҙ түгеллегенә шикләнмәй.

«Мин аҡ ҡағыҙҙы сәпкә алам, ара ни бары 300 метр самаһы. Бер нисә секундтан

уңышҡа ирешәсәгемә өмөтләнеп, тәрән тыныслыҡ тойғоһо кисерәм һәм көслө бармағым менән тәтегә йомшаҡ ҡына баҫам». «Һә!» тигәнсе шартлау тауышы яңғырай, ер фонтаны күтәрелеп, броняLы ҡалҡан ҡайҙалыр оса, ул урында тәрән соҡор барлыҡҡа килә. Снайперҙан нимә тороп ҡалғанын, моғайын, немецтар үҙҙәре лә белә алмағандыр. Был көн снайпер Әхәт Әхмәтйәнов «шәхси үс иҫәбе»нең 204-сеһен теркәп ҡуя.

Снайперҙарға хәрби етәкселек тарафынан ҡәҙер-хөрмәт шунан да күренеп ҡала: уларға арҙаҡлы шәхестәр менән осрашыу мөмкинлеге бирелә. Ут, алыш ҡыҙған мәлдәрҙә һалдаттарға баш күтәрергә, тын алырға форсат юҡ, ә снайперға мөнәсәбәт өҫтөнлөклө. Бер көн Әхәтте иҫкәртеп ҡуялар:

– Һеҙҙең менән Дегтярев осрашырға теләй.

– Кем ул?

– Атыу ҡоралдары уйлап табыусы конструктор. Алдан һорауҙар әҙерләп тороғоҙ!

**Энциклопедиянан.** Василий Александрович Дегтярев – совет конструкторы, генерал-майор-инженер, артиллерия хеҙмәте белгесе. Социалистик Хеҙмәт Геройы. Бер нисә пулемет һәм пистолет-пулемет һ.б. уйлап сығарған техник фәндәр докторы, ике тапҡыр Сталин премияһы лауреаты...

Күренеүенсә, Дегтярев снайпер винтовкаһы ижад итмәгән, әммә уның мәргәнлеге менән дан ҡаҙанған снайперҙар менән осрашырға теләүе тикмәгә булмағандыр. Осрашыуға Әхмәтйәнов менән бергә Федор Резниченконың да саҡырылыуы ошо фаразға ишара яһай кеүек. Был ваҡытҡа орденлы өлкән сержант Резниченконың 285 фашисты дөмөктөрөүе билдәле.

Мөһим ғәмәлдең шаһиты булараҡ, батыр яҡташыбыҙ бүләккә бирелгән портретты һаҡлап, ошо юлдар авторына ул һүрәтте тотоп ҡарарға ла насип булғайны. Юғарыла телгә алынған Игнатьев менән иҫтәлекле осрашыу мәлендә булғайны был хәл. А-4 форматының дүрттән бер өлөшө ҙурлығындағы фотола урта йәштәрҙәге Дегтярев генерал кейемендә күренә. Һүрәттең артында «250 немец фашисын тар-мар иткән мәргән атыусы Әхәт Әхмәтйәновҡа яҡты иҫтәлеккә» тип юғары камиллыҡта матур хәрефтәр менән яҙылған һәм арҙаҡлы конструкторҙың ҡул тамғаһы ҡуйылған. Хатта фронт шарттарында фоторәсемдең таушалмағанлығы уға ихтирамдың юғары булыуына ишаралай. Ошондай уҡ фотоһүрәт, моғайын, Резниченкоға ла бирелгәндер.

Ҡоралдар белгесе һәм яҙыусы Г. Д. Нагаевтың «Русские оружейники» тигән китабының «Ленинград фронты снайперҙары» тип аталған яҙмаһында 1939 йыл аҙағында башланған Фин һуғышы телгә алына. Аҡ финдарға ҡаршы һуғышта конструктор Ф. В. Токарев уйлап тапҡан үҙ ҡоролошло винтовканы уңышлы ҡулланыу хаҡында ла әйтелә. Белгес баһалауынса, СВТ (самозарядная винтовка Токарева) үтә ҡырыҫ ҡыш шарттарында ла тотҡарлыҡһыҙ эшләй һәм совет һалдаттары ҡулында дошманға ҡаршы көслө ҡоралға әүерелә. Оҙаҡламай ошо компанияла Токаревтың оптик прицеллы үҙ ҡоролошло винтовкаһы ла күренә башлай. Совет һалдаттары уға «снайпер винтовкаһы» тигән исем бирә. СВТ менән ҡоралланған совет һалдаттары ҡуйы урманға йә булмаһа тәрән көрт баҫҡан урындарға ышыҡланып дошманды ҡыйрата. Был ҡоралды уңышлы ҡулланған һалдаттар Токаревҡа фронттың төрлө тарафынан хаттар яуҙыра башлай.

*«Ҡәҙерле Федор Васильевич! Бөйөк Октябрь бишеге булған Ленинградтан, уның һаҡсыһы Кронштадт ҡәлғәһенән, фронттың Н-се участкаһында һуғышыусыларҙан сәләм ҡабул итегеҙ. Беҙгә хәбәр ителеүенсә, Һеҙ Ораниенбаум ҡалаһында уҡығанһығыҙ, унда Һеҙҙең конструкторлыҡ эшмәкәрлегегеҙҙең тәүге*

*осоро үткән. Бөгөн был ҡаланы беҙ күкрәк көсөбөҙ менән һаҡлайбыҙ. Ышанығыҙ, хөрмәтле Федор Васильевич, Һеҙ ихлас яратҡан был ҡаланы һәм үҙебеҙгә тапшырылған рубежды беҙ дошманға бирмәбеҙ, күҙебеҙ ҡараһылай һаҡларбыҙ.*

*«За отвагу» миҙалы менән бүләкләнгән снайпер Михаил Пухов бер операцияла Һеҙ ижад иткән үҙ ҡоролошло винтовка менән 30 гитлерсыға ҡаршы бәрелештә еңеүсе булып сыҡты. Һуңынан әйтте: «Был винтовканы уйлап тапҡан кешегә минән мәңгелек рәхмәт». Ҡоралығыҙҙың көсөн һәм камиллығын тойған һәр һуғышсы Һеҙгә рәхмәтле. Беҙгә хат яҙһағыҙ ине. Дошманды тағы ла уңышлыраҡ ҡыйратыу өсөн был винтовканы тағы ла нәтижәлерәк ҡулланыу мөмкинлектәре бармы? Һеҙҙең кәңәштәр?*

*Ихтирам менән: 285 фашисты юҡ иткән орденлы өлкән сержант Федор Резниченко һәм 250 фашисты дөмөктөргән өлкән сержант Әхәт Әхмәтйәнов».*

Уны «хөрмәтле Токарев олатай» тип ололайҙар. Баҡһаң, немец винтовкаһынан атыусы фин снайперҙары яҡын арала ғына уңышҡа ирешә алһа, беҙҙекеләр күпкә алыҫыраҡтан да сәпкә тейҙерә торған булған. Нагаев раҫлауынса, конструктор Токарев һуғышсыларҙың фекеренә ҡолаҡ һалыусан кеше була. 1945 йылда Мәскәүҙән Ленинград фронтына снайпер винтовкаһының яңы өлгөһө килеп төшә. ДПА-5903 тип исемләнгән был ҡорал күренекле снайпер сержант Матвей Звягинцевҡа тапшырыла. Винтовканы фронт етәксеһе ҡулынан алғанда, уның 50 немецты дөмөктөргәнлеге билдәле булып, ҡыҫҡа ваҡытта снайперҙың шәхси үс алыу иҫәбе 166-ға етә. Ләкин 1944 йылдың 19 ғинуарында снайпер Матвей Звягинцев немецтарҙың көслө төркөмө тарафынан ҡамауға алына һәм, тиңе булмаған алышта дошмандың туғыҙ автоматсыһын юҡ итеп, үҙе лә һәләк була.

## Илья Эренбург һәм «яҡут» Әхәт Әхмәтйәнов

Күренекле публицист Илья Эренбургтың яҙмаларын һуғышсылар көтөп алған һәм доға урынына ҡат-ҡат уҡығандар. Кем дә булһа Эренбургтың ҡәләме осона эләккән икән, ҡаһарман, һис шикһеҙ, оло иғтибарға лайыҡ. Журналистан маҡталған яугирға ғорурланып, ололап ҡарау урынлы була. Эренбург ваҡланмай, мәҡәлә яҙа икән, иң юғары ҡаҙаныштар тураһында ғына. «Правда», «Красная звезда» гәзиттәре биттәрендә уның яҙмалары йыш күренә. Европа, бигерәк тә Америка илдәрендәге абруйлы баҫмалар публицистың яҙмаларын тотҡарлыҡһыҙ баҫтыра.

Әхәт Әхмәтйәнов тураһында ла ул «Известия» гәзитендә мәҡәлә баҫтырып сығара. Уның мәргәнлегенә һоҡланыуын, ирешкән уңыштарына шаҡ ҡатыуын тасуирлай. Бик күркәм һәм ҡыуаныслы мәҡәлә Әхмәтйәновтың ҡулына килеп эләккәс, ғорур, ләкин батыр мәргән ҡаштарын йыйырып, ҡул ғына һелтәй. Шатланаһы урынға рәнйей, сөнки мәҡәләлә хата киткән: публицист мәргән яугирҙың милләтен «яҡут» тип күрһәткән. «Мин башҡорт» тип күкрәк киреп йөрөгән кеше өсөн был бик күңелһеҙ, ләкин бер ни ҙә ҡылыр әмәл юҡ, мәҡәлә ташҡа баҫылған, илгә таратылған. Башҡортостанда ла уҡығандарҙыр, тик кемдәр шатлыҡ кисерҙе икән?

Илья Эренбургтың был яҙмаһы Американағы «Нана» агентлығына ла ебәрелгәндер ҙә уның аша «Совинформбюро» хәбәрҙәре күп илдәргә таратылғандыр, тигән фараз бар. Һис шикһеҙ, мәргән Әхмәтйәновтың фронттағы уңыштары тураһында планетабыҙҙа миллиондарса уҡыусы хәбәрҙар булғанлығын күҙ уңында тоторға нигеҙ бар. Мәшһүр яҡташыбыҙ тураһында үҙебеҙҙә лә күптәр яҙып,

улар ҙа Эренбургтың хатаһын ҡабатлай, хатта арттырып та ебәрә. Әммә береһе лә хәҡиҡәтте эҙләп маташмай. Түбәндә килтерелгән яҙма үрнәктәрен данлы яҡташыбыҙҙың Салауат ҡалаһының муниципаль телевидениеһында эшләгән ейәнсәре Әлфирә Сабитова йыйған.

«Социалистическая Якутия» гәзитендә 1944 йылда баҫылып сыҡҡан «Артиллерия шартлауы аҫтында тыуған яҡ гәзитен уҡыйым» тигән мәҡәләлә шундай юлдар бар: «11 ғинуар. Фронттан сәләм! Бер ҡасан булмағанса бәхетле мин бөгөн: һалҡын землянкала, орудиелар шаңдауы, пулеметтар тыҡылдауы аҫтында тыуған яғымдан килгән «Социалистическая Якутия» гәзитен уҡыйым. Был гәзиттең беҙгә, фронтовиктарға, маҡтау һәм һөйөү хисе менән тулы булыуы бөтәбеҙҙе лә рухландыра».

«16 ғинуар. Яҡут Әхәт Әхмәтйәнов һунарсы буларaҡ танылған. Ул айыуға, бүрегә һәм төлкөгә һунар иткән, ҡараңғы Себер урмандарында хужа булған. Һунарсы тәжрибәһе Бөйөк Ватан һуғышының беренсе көндәрендә үк кәрәк була. Ленинград фронтында Әхәт снайпер булып китә. Яңыраҡ ул 293-сө гитлерсыны юҡ итте...

ТАСС махсус хәбәрсеһе Павел Лукницкий».

Һуғыштан һуң яҙыусы М. И. Гордон фронт ваҡиғалары тураһындағы яҙмаларҙы «Невский-2» исемле китабында туплай. Унда «Әхәт Әхмәтйәнов» тип аталған белешмә лә урын алған. «Татарстанда математика уҡытыусыһы булып эшләгән тыйнаҡ Әхәт Әхмәтйәнов снайпер булараҡ танылды. Уның исеме фронт гәзиттәре битенән төшмәне. Өлкән сержант Әхмәтйәнов данлыҡлы снайпер ине. «На страже Родины» һәм «Красная звезда» гәзиттәрендә уның батырлығы, тапҡырлығы һәм мәргәнлеге тураһында күп яҙыла килде. Ул гитлерсылар араһынан иң яуызын эҙләп табып, сәпкә ала ла мәргәнлеге менән юҡ итә тора».

Хәбәрселәрҙең иғтибарһыҙлығы арҡаһында яҡташыбыҙ әле яҡут кешеһенә, әле татарға әүерелә торһа ла, һуғышсан бурысын намыҫ менән үтәй. «Мин башҡорт!» – тип һөрән һалырға, күрәһең, мөмкинлеге булмай.

Күренекле генә яҙыусының яҡташыбыҙ өлгөһөндә дөйөмләштерелгән урыҫ снайперы образы тыуҙырырға тырышыуы менән бәйле хәл дә күҙәтелә. 1983 йыл нәшер ителгән 12 томлы «Венок славы» китаптарының III томында яҙыусы Виталий Василевскийҙың «Удар в ночи» исемле хикәйәһе урын алған. Ысынбарлыҡтан алыҫлашмаҫҡа тырышҡан автор ваҡиғаның Ленинград ҡалаһынан 32 километр төньяҡтараҡ 1942 йылдың августында барғанлығын иҫкәртеп үтеүҙе кәрәк тапҡан. Хикәйәлә төп персонаж – снайпер сержант Романцов. Һуңынан белдереүенсә, яҙыусы был образдың прототибы итеп Ленинград фронтындағы иң көслө һәм киң танылыу тапҡан Әхәт Әхмәтйәновты алған. Яугир булараҡ снайпер Романцов камиллыҡҡа, оҫталыҡҡа эйә, дошманға ҡот осҡос хәүеф һала.

Персонаждың мәшһүр яҡташыбыҙ икәнлеген Виталий Василевский 1971 йылдың йәйендә Бәләбәй ҡалаһына килгәнендә асып һала. Баҡһаң, Златоуст ҡалаһында тыуған авторҙың мәктәп йылдары Бәләбәйҙә уҙған икән. Ул 1-се мәктәптә уҡыған йылдарында буласаҡ яҙыусы Сергей Крушинский менән бергә ҡулдан яҙылған «Костер» исемле журнал сығарғандар. В. Василевский – Ә. Әхмәтйәнов менән полкташ. Баштараҡ взвод командиры, һуңыраҡ «На страже Родины» гәзитенең хәбәрсеһе булып йөрөгән. Снайпер образын һүрәтләгәндә уны тормоштағы кеүегерәк теркәһә лә яҙыҡ булмаҫ ине, сөнки һуғышта урыҫ булмаған халыҡтарҙан да һоҡланғыс батырҙар аҙ осрамай. Башҡорттар иһә айырыуса иғтибарға лайыҡ.

Бәләбәйҙәге сәфәрендә В. Василевский мәргән снайпер Әхәт Әхмәтйәновтың

Башҡортостанда йәшәүен, тәүҙә уҡытыусы булып эшләүен әйтә, ләкин ҡайһы ҡала йәки райондан икәнлеген атамай. «Әхәт Әхмәтйәнов үҙ-үҙен аямайынса, ихлас һуғышты, илде талап, халыҡты мәсхәрәләүсе фашистарҙан үс алыуҙы изге бурысы һананы, – тип һөйләй В. Василевский Бәләбәйҙәге машина эшләүселәр техникумы студенттары алдында сығыш яһап. – Һуғыштан һуң да, ситкә сығып китмәйенсә, ошонда йәшәйҙер. Һеҙ уны эҙләп табығыҙ!» – тип кәңәш бирә. Уның иҫтәлектәре ҡаһарман яҡташыбыҙға оло ихтирам, һоҡланыу һәм ғорурланыу хистәре менән тулы. Магнитофон таҫмаһына яҙылған был фәһемле телмәрҙе техникум эҙәрмәндәре әле лә һаҡлай һәм снайпер Әхәт Әбеделхаҡ улы Әхмәтйәновты эҙләп табырға кәрәклеген ваҡыт-ваҡыт яңыртып тора икән.

Интернеттан алынған яҙмала ошондай юлдар бар: «30 йыл үтеп китте. Беҙ, Бәләбәй машиналар эшләү техникумы студенттары, Әхәт Әхмәтйәновты эҙләп табыу эшенә яңынан тотонабыҙ. Уның тураһындағы материал «Жди меня» программаһына ла индерелде, Республика хәрби комиссариатына юллама ебәрелде. Виталий Василевскийҙың улы – «Новый мир» журналының баш мөхәррире Андрей Василевскийға ла хат яҙып һалдыҡ. Унан тыш, Башҡортостанда ла Әхәт Әхмәтйәновты белгән кешеләр булырға тейеш, тигән ҡараштабыҙ. Ғаиләһендә документтары, фотолары һаҡланалыр бит! Уны белгән фронтовиктар ҙа барҙыр. Снайперҙың полкташтары нимә лә булһа хәбәр итһәләр ине, тип уйлайбыҙ. Бәлки, уның менән олатайығыҙ осрашҡандыр? Бер котелоктан, бер ҡалаҡтан ашаған, бер телем икмәкте бүлешкән кем дә булһа юҡмы икән ни? Виталий Василевский китабында Романцов фамилияһы менән һүрәтләнгән Әхмәтйәновтың ғаиләһе булыуы ихтимал, уларҙа мәшһүр снайперҙың документтары, фотолары һаҡланмаймы икән? Беҙҙең эҙләнеүҙәргә кем дә булһа яуап бирергә тейештер бит, ниңә бирмәйҙәр икән?»

«Социалистическая Якутия» гәзитендә яҡут улы Әхәт Әхмәтйәнов тураһында уҡығас, – тип яҙа техникум уҡытыусыһы, – аптырашта ҡалдым һәм йылдар буйы эҙләнеүемдең бушҡа булыуын аңланым. Беҙ Башҡортостанда эҙләгән батырҙың ҡарлы-боҙло Яҡутстандан, Себер тайгаларынан сығыуы асыҡланды. Ҡыҙғаныс, – ти хат авторы, – беҙҙе ҡыҙыҡһындырған Әхмәтйәнов тураһында башҡаса бер ни яҙылмаған. Был Әхмәтйәнов снайпер Романцов прототибы ролен үтәгәнме? Әхмәтйәновты Башҡортостандан тип күрһәтеп, Василевский яңылышмағанмы? Техникум уҡыусыларына бурыс йөкмәтеүе урынһыҙ булмағанмы? Йомаҡ серле булып сыҡты. Беҙ уны сисә алманыҡ», – тип тамамлана бәләбәйҙәрҙең Интернетта урын алған яҙмаһы.

1968 йылда Подольск ҡалаһындағы үҙәк архивта эшләгән яҡташыбыҙ, журналист Әлмир Нәбиуллиндың шәхси архивында бығаса билдәле булмаған тағы бер батырлыҡ тураһында очерк һаҡлана.

«Әхмәтйәнов хеҙмәт иткән полк ҡаршыһында мәкерле фашист снайперы оялап алыуы, броня ҡалҡанға ышыҡланып «һунар» итеүе асыҡлана. Әхәт Әхмәтйәнов броня артындағы снайперҙы ҡулға төшөрөү планын ҡора.

Бына рядовой Саучев йәшеренеп кенә алға шыуыша. Әхәт асыҡ ергә сыға ла, урынын тиҙ-тиҙ алмаштырып, снайперға табан ут сәсә. Маҡсаты – уның иғтибарын үҙенә йәлеп итеү. Ул арала Саучев дошман снайперына яҡынлаша. Әхәт туҡтауһыҙ ата.

Мөғжизә: Саучев һеләүһен тиҙлегендә броня артындағы снайперға ташланғанда, Әхәт тә осоп килеп етә. Икәүләп немецтың ауыҙын томалап, ҡулдарын шаҡарып бәйләйҙәр ҙә ҡайтыр юлға сығалар.

Командованиела кемдер Әхәттең был планын  дыуамаллыҡ тип атағайны, снайперҙы тере килеш алып ҡайтҡас, өндәшмәҫ булды».

Әҙәм ышанмаҫтай был тарихты Ә. Нәбиуллин 1-се Украина фронтының «За честь Родины» гәзитенән күсереп алған һәм «Кызыл таң» гәзитенең 1978 йылғы 24 июнь һанында баҫтырып сығарған. Әхәт Әхмәтйәновты оҫта снайпер итеп һүрәтләү менән бергә башҡорт тоҡомонан булыуын да атағандар.

Ленинград яҙыусыһы, йәмәғәт эшлеклеһе  Николай Тихонов исеме заманында йыш телгә алынған талант эйәһе ине. Бер полк снайперҙары уның менән танышырға теләк белдергәс, Тихонов: «Һеҙ миңә иң булдыҡлы иптәшегеҙҙе, фашистарға траншеянан күтәреп ҡарарға ирек бирмәгәнен күрһәтегеҙ!» – ти.

– Ундайҙар беҙҙә аҙ түгел, – тип яуаплай полк командиры һәм исемдәрен һанап китә. Николай Семенович  Әхмәтйәновты һайлай һәм ошо турала яҙып сыға.

«Алдыма сағыштырмаса ҡыҫҡа буйлы, тар яурынлы, күкрәгенә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены таҡҡан ир килеп баҫты. Снайпер Әхәт Әхмәтйәнов икән. Башҡорт. Уҡытыусы. Егерме биш йәштә. Фронтҡа үҙе теләп килгән. Бер туған һеңлеһе Әхәттең  күҙ алдында тиҙ арала һәләк булған. Әхәттең күҙҙәре һиҙелерлек ҡыҫылған, дошманды өҙлөкһөҙ эҙәрлекләү, күҙгә күсергәнеш  төшөүҙән киләлер».

Ике арала һөйләшеү былайыраҡ булып ала.

– Винтовкаңда йондоҙҙар төшөрөлгән. Нимәне аңлаталар?

– Ә-ә, был матур һүрәттәрме?

– Эйе, ошо көмөш төҫөндәге йондоҙҙар.

– Иң ҙурҙары икәү, ике йөҙ фашисты аңлата.

– Кесерәктәре?

– Уларҙың һәр береһе егермешәр фашисты.

– Ә быныһы, бик бәләкәйе?

– Быныһы пустяк, ни бары ун фашисты. Беҙ уны иртәгә үк үҙгәртәбеҙ.

Һөйләшеү яҙыусыла ыңғай тәьҫорат ҡалдыра. Николай Тихонов снайпер  Әхмәтйәнов тураһында гәзиттәрҙә мәҡәләләр баҫтыра. Һуңынан был документаль очерк «Венок славы» китаптарының  береһенә индерелә. Рәхмәт әҙипкә, яҡташыбыҙҙың булмышын дөрөҫ тамғалаған, башҡорт икәнен  асыҡлауҙы кәрәк тапҡан.

**Энциклопедиянан.** Снайпер атамаһы тәү тапҡыр Бөйөк Британия армияһында 1914 – 1918 йылдарҙағы Бөтә донъя һуғышында барлыҡҡа килә. Совет ҡоралды көстәрендә снайперҙар әҙерләү 1941 – 1945 йылдарҙа киң ҡолас менән йәйелдерелә. Уларға дошман снайперҙарын, офицерҙарын, күҙәтеүселәрен, элемтәселәрен, орудие һәм пулемет расчеттарын, түбәндән осоусы самолеттарҙы юҡ итеү бурысы йөкмәтелә.

Фашистик Германия армияһында снайперҙар 30-сы йылдарҙа уҡ күпләп өйрәтелгән. Ҡыҙыл Армияла уларҙың  һуңлап әҙерләнә  башлауы ҙур юғалтыуҙарға килтерә. Уның  ҡарауы, беҙҙең  мәргәндәр иҫәп яғынан ғына түгел, сифат буйынса ла алға сыға һәм Бөйөк Ватан һуғышының  хәл иткес осорҙарында дошмандың йәнле көсөн генә түгел, әхлаҡи ныҡлығын һындырыуҙа  ла шаҡтай ҙур роль уйнай.

## Ғаилә альбомы

Уны Әлмира Әхәт ҡыҙы атаһынан ҡалған бай материалдарҙан туплаған. «На страже Родины» исемле фронт гәзите һәм башҡа баҫмаларҙа мәргән яҡташыбыҙҙың фоторәсемдәре, уның тураһындағы яҙмалар йыш донъя күреүен ошо альбом биттәрендә һаҡланған баҫмаларҙан да асыҡлап була. 1942 йылдың 22 декабрендә сыҡҡан гәзиттә, Әхәт Әхмәтйәнов 138 фрицты дөмөктөрҙө, бай

тәжрибәһен йәштәр менән уртаҡлаша, тип хәбәр ителә. «Йәш снайперҙарҙы ул уҡыу класында ла, ут һыҙығында ла өйрәтә, ҡәбәхәт фашистарҙы аяуһыҙ тар-мар итеү алымдарын күрһәтә. Һанаулы ғына көндә 30 йәш мәргәнде өйрәтте, улар иһә остаздары етәкселегендә әүҙем эшләп китте, бер нисә көн эсендә күмәкләп 162 фашисты юҡ иттеләр». Гәзиттә баҫылған фотола Әхмәтйәновты ҡәнәғәт егеттәр уратып алған, йөҙҙәрендә шат йылмайыу балҡый.

Сираттағы баҫмала Әхәт Әхмәтйәнов «Яҡут халҡының данлыҡлы улы» тип атала. Бик оҫта һәм нәтижәле снайпер булыуы өҫтөнә, өлкән сержант Әхмәтйәнов – яҡшы әҙерлекле уҡытыусы һәм инструктор. Уның булдыҡлылығы менән 138 йәш егет мәргәнлек юғарылығына күтәрелеп, 1350 фашисты юҡ итте. Араларынан иң уңышлы «һунар» иткәндәре өлкән сержант Арифйән Яҡупов, рядовойҙар Полина Николаева һәм Федор Орфей. Улар орден менән бүләкләнде.

Әхмәтйәнов һәм уның өйрәнсектәре, дошманды ҡыйратыуҙы нәтижәле алып барыу менән бер рәттән, һөнәри оҫталығын камиллаштырыу өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләй. Әсир алынған дошман снайперы һөйләй: «Батальоныбыҙ урыҫ снайперҙарынан күп зыян күрә. Мин хеҙмәт иткән ротала дүрт айҙа 119 кеше юғалды».

Әлмира Әхмәтйәнованың хәтерләүҙәренән. «Ошо өйҙө һалғанда, әтейем бүрәнәне урмандан берәмләп ташыған. Иртә таңда ҡул санаһын алып китә икән дә, әнейем уны көтә икән. Һыңар бүрәнәһен өҫтөрәп ҡайтып килгәне күренгәс, әнейем ҡаршы сыға ла, әтейемә еңеллек килтереп, ярҙамлаша икән. Фронттан өс йәрәхәт менән ҡайтҡан әтейем ошо рәүешле бүрәнә ташып өй һалған. Бура күтәргәндә лә бер үҙе, бүрәнәнең бер башын арҡан ярҙамында күтәреп һала ла икенсе башына тотона. Ҙур булмаһа ла, өй һалған.

Әнейем миңә ауырлы хәлдә лә әтейемә ярҙам иткәндә, мин дә уның менән «көс һала» торған булғанмын. Әтейем һуңынан шаяртып шулай тип әйтә торғайны.

Йылдар уҙа килә, әтей был өйгә ҡушымта һалды, унан һуң – мин. Хәҙер өйөбөҙ ҙур, верандаһы бар. Баҡсала – ул ултыртҡан ағастар. Биш балаға биш алма ағасы. Ҡартайһалар ҙа – һаҡлайбыҙ. Әтейебеҙ көсө, уның төҫө итеп һаҡлайбыҙ».

## Ленинград ветерандары юллай

Ҡаһарман яҡташыбыҙҙың Ленинград фронтындағы ҡаҙаныштары һәр кемде һоҡландыра. Тик ни өсөн Әхәт Әхмәтйәновҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелмәгән? Нимә ҡамасаулаған? Шәхси үс алыу иҫәбе 130 – 150-гә еткән снайперҙарға был юғары исем бирелә килгән бит. Дивизияның иң яҡшы снайперы һәм инструкторы булараҡ, ул командованиеның һуғышсан бурыстарын үҙ-үҙен аямайынса үтәй килгән. Уның «ауға сығыуы» һәр саҡ нәтижәле, быны «үс алыу иҫәбе»ндәге календарь яҙмалар ҙа дәлилләй. Документтар менән нығытылған мәғлүмәттәргә ярашлы, яҡташыбыҙҙың 502 дошман һалдатын һәм офицерын юҡ иткән, 200 снайпер әҙерләп сығарған.

Башҡорт халҡының был данлыҡлы улы тураһында дивизияның «Боевой удар», Приморье оператив төркөмөнөң «Боевое знамя», 2-се удар армияның «Отважный воин», Ленинград фронтының «На страже Родины» гәзиттәре бер нисә тапҡыр яҙа. Башҡортостандың республика һәм район гәзиттәрендә лә арыу-талыуҙы белмәҫ снайпер Әхәт Әхмәтйәнов тураһында шулай уҡ хәбәр ителә килә. Уның һуғышсан уңыштары Т. Грицтың йәштәр өсөн «Меткие стрелки» китабында ла телгә алына. Ҡаһарман яҡташыбыҙ тураһында мәғлүмәт һәм очерктар элгәре Башҡортостанда мәктәп дәреслектәренә индерелә ине.

Теге йәки был батырлыҡ өсөн Советтар Союзы Геройы исеме биреү, ғөмүмән,

дәүләт наградалары юллау буйынса СССР Юғары Советы Президиумына мөрәжәғәт итеү хоҡуғы ул саҡта хәрби комиссариаттарға бирелгән була. Ошоға ярашлы, 168-се уҡсылар дивизияһы ветерандары советы 260-сы полк снайперы, өлкән сержант Әхәт Әбделхаҡ улы Әхмәтйәновҡа Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһында үтенес ҡуҙғатыуығыҙҙы һорай.

«Бүләкләү ҡағыҙын тултырыу өсөн мәғлүмәттәрҙе һәм һуғышсан батырлыҡтың ҡыҫҡаса яҙмаһын һеҙгә ошо хат менән бергә юллайбыҙ, – тиелә Ветерандар советы рәйесе, отставкалағы майор М. Фейнгауз ҡул ҡуйған документта. – Ҡала хәрби комиссариаты үтенесебеҙҙе кире ҡаҡмаҫ һәм тейешле материалдарҙы СССР Юғары Советы ҡарамағына тиҙ көндәрҙә ебәрер, тигән ышаныста ҡалабыҙ». Артабан ҡаһарман яҡташыбыҙҙың хәрби наградалары Ҡыҙыл Йондоҙ, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары хаҡында ла әйтелә. «Әммә, батырлығы тиңдәшһеҙ булыуына ҡарамаҫтан, уға яңы наградалар бирелмәгән. Әхәт Әхмәтйәнов иң юғары наградаға, һис шикһеҙ, лайыҡ, – тип дауам ителә юлламала. – Ошо хатҡа ҡушып, «шәхси үс иҫәбе»нең күсермәһен, Ленинград Тарихи дәүләт музейының белешмәһен һәм наградa тултырыу өсөн кәрәкле текстарҙы ҡушымта итеп ебәрәбеҙ». Ҡарар тураһында күсермәне ебәреү өсөн Ветерандар советы үҙенең адресын да атай: «191011. Ленинград. Фонтанка, 7, ДОСААФ йорто, 168-се уҡсылар дивизияһы Ветерандар советы».

Әммә был документҡа тейешле иғтибар бирелмәй. 1942 йылдың февралендә шул уҡ Ленинград фронтында һигеҙ айҙа 144 дошман һалдатын юҡ иткән снайпер Пчелинцевҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән. Икенсе бер мәргән Вежливцев 1941 ноябренән 1942 йылдың ғинуарынаса 134 фашисты дөмөктөргәне өсөн шулай уҡ ошо Герой исемен алған. Әйткәндәй, «онотолоп» ҡалғандар Әхмәтйәновтан башҡа ла күренә. Яҡут халҡының улы Охлопков, 1942 – 1944 йылдарҙа 429 фашисты юҡ итеүгә ҡарамаҫтан, Советтар Союзы Геройы исемен 1965 йылда ғына алған. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында батырлыҡ күрһәткән снайперҙарҙан 87 кешенең ошо юғары исемгә лайыҡ булыуы билдәле. Әхәт Әхмәтйәнов, әлбиттә, 88-се булырға хаҡлы. Һуғыштың тәүге йылында уҡ контузияланған. Ҡорһағына снайпер пуляһы тейеп, йәрәхәте төҙәлгәс, тәре һымағыраҡ йөй һаҡланып ҡалған. Башҡа йәрәхәттәре лә күп. КПСС өлкә комитетының беренсе секретары Сабир Ваһапов уға үҙе ышаныс белдерә, һәм Әхәт Әхмәтйәнов район мәғариф бүлеге мөдире булып эшкә тотона. Төрлө осорҙа тултырылған ыңғай характеристикалары йыш осрап, булдыҡлы кеше икәнлеге раҫланып тора.

2013 йылдың 10 авгусында Әхәт Әхмәтйәновҡа ҡарата ғәҙел мөнәсәбәт булдырыу, уның тиңдәшһеҙ батырлығын хәтергә төшөрөп, һүҙ йөрөтөү өсөн сәбәп бар. Ишембай ҡалаһы һәм районы йәмәғәтселеге был уңайҙан киң күңеллелек күрһәтә алыр, моғайын. Батырҙы инҡар итеү мөмкин түгел, уның рухы күңелебеҙҙә йәшәй, батырҙары бар халыҡтың ғына киләсәге бар, тип йәштәр күңеленә Әхәт Әхмәтйәновтың да данын һеңдерә алһаҡ ине. Снайперлыҡта уҙып китеүсе табылмаған яҡташыбыҙ – Башҡортостандың алтын йондоҙона тиң шәхес.

1945 йылдың майында Бөйөк Еңеүгә ирешкәс, беҙ, дүртенсе синыф малайҙары, һуғыш артабан бер ҡасан да булмаясаҡ, тип бәхәсләшкәйнек. Бала аҡылы хәҡиҡәттән йыраҡ йөрөмәгән, халҡыбыҙ ҙур бәрелештәргә дусар ителмәйенсә, имен йәшәп ята. Ләкин иртәгәһен кем белә: планеталағы хәлдәр ағышына күҙ һалһаң, тән өшөп ҡуя, сөнки һуғыш һәм тыныслыҡ проблемаһы ҡырҡыулаша бара. Әхәт Әхмәтйәнов үрнәгендә үҫкән егеттәр кәрәк булмаҫ, тип кем раҫлай ала?

**Фәрит ВАХИТОВ.**

# БИРЕШМӘНЕК

Йыл һайын июнь аҙағының йәмле кистәрендә дөйөм урта белем биреүсе мәктәптәрҙә, күп йыллыҡ көсөргәнешле уҡытыу-тәрбиә эштәренә йомғаҡ яһау рәүешендә, йөрәктәрҙә йылы хәтирәләр ҡалдырып, шаулап-гөрләп сығарылыш кисәләре уҙа. Ғәҙәттәгесә, ҡулдарына урта белем тураһында танытма алған йәштәр, уҡыуҙарын дауам итеү өсөн, үҙҙәре һайлаған юғары йәки махсус урта белем алыу өсөн, уҡыу йорттарына юллана. Тарих биттәренән күренеүенсә, урта мәктәптәрҙе 1941 йылда тамамлаған йәштәр өсөн бындай тамашалар ҙур һәләкәткә әүерелеп, йөрәктәрҙә уңалмаҫлыҡ яра булып уйылып ҡала. Фашистик Германияның Советтар Союзына һуғыш иғлан итмәйенсә һөжүм яһауы тураһындағы хәбәр бөтә илгә йәшен тиҙлегендә тарала. Урта мәктәптәрҙе кисә генә тамамлаған ҡыҙҙар-егеттәр, илде дошмандан һаҡлау өсөн, сығарылыш кисәләренән туп-тура хәрби комиссариаттарға ағыла. Ҡан ҡойғос һуғыш дүрт йылдан ашыу дауам итеп, миллионлаған кеше фашистарҙың йәбер-золомо аҫтында баш һалды, тыуған яҡтарына, ғаиләләренә әйләнеп ҡайта алманы. Ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, мәктәп йәшендәге балалар, «яҙмыштан уҙмыш юҡ» тип, аслыҡты ла, һалҡынды ла кисерҙе, уҡыуҙарын дауам итте. Уларҙың иҫән ҡалғандары быйыл урта мәктәпте 1953 йылда тамамлауҙарына 60 йыл тулыу тантанаһын билдәләй. Был тарихи дата 1935 йылда донъяға килеп, һуғыш михнәттәрен үҙ елкәһендә татып үҫкән, ир ҡорона еткән аҡһаҡал ветерандарға, шул иҫәптән миңә лә ҡағыла. Бөгөн уларҙы, законлы уҡ булмаһа ла, «һуғыш йылдары балалары» тип атайҙар.

Беҙ 1950 йылда ете класты тамамлағанда, Ҡыйғы районында өс кенә урта – Ләүзәлә – урыҫ, Үрге Ҡыйғыла – татар, Абзайҙа башҡорт мәктәптәре эшләй ине. Белемгә ынтылыш ҙур булғас, беҙ, милләтебеҙгә ярашлы, ошо мәктәптәрҙең береһен һайланыҡ. Шулай итеп, Үрге Ҡыйғы урта мәктәбендә өс параллель һигеҙенсе класс комплектланды.

Сер түгел, ул замандарҙа уҡыу-йәшәү шарттары бик ауыр булды. Ҡыйғы йылғаһына ҡоролған ябай электр станцияһы теге йәки был сәбәптәр арҡаһында эшләмәһә, класта берҙән-бер етеле кәрәсин лампаһы, ул да булһа уҡытыусы өҫтәлендә ҡабынып ине. Уҡыу әсбаптары етешмәүе уҡыусылар өсөн бигерәк тә ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырҙы. Ара-тирә ҡыҙыл сөгөлдөр һуты, ҡором иҙмәһе менән гәзит юлдары араһына яҙып уҡырға тура килде. Егерме километрлы ике Ҡыйғы араһын йәйен дә, ҡышын да аҙна һайын йәйәүләп ҡайта торғайныҡ. Хәҙерге балалар файҙаланған радио, телефон, телевизор, компьютер кеүек аудио-видео техника төшөбөҙгә лә инмәне, шуғалыр ҙа беҙҙе бөгөн «таш быуат кешеләре» тип тә ебәрәләр. Йәшлеккә әйләнеп ҡайтаһы ине лә шартлатып уҡыйһы ине, тик һуғыш балаларына ундай бәхет тәтемәне. Мин хәҙер йыш ҡына, бала саҡта йүнләп уҡып булманы, тип уйлайым да йәшлегемде һағынам.

Шуны билдәләп үтергә кәрәк: һуғыштан һуң (1950 – 1951) беҙҙең мәктәпкә Силәбе педагогия институтының тәүге сығарылыш төркөмөнән бер төркөм йәш урыҫ уҡытыусылар (И. Мясникова, П. Гаврилов) килде. Улар, ҙур көс һалып,

балаларҙы урыҫ телендә уҡырға, яҙырға, һөйләшергә өйрәтте. Инглиз телен дә өйрәнә башлағайныҡ та, тик өс йыл бик тиҙ үтеп китте, сөнки 5 – 7 класстарҙа был предметты уҡымағас, программа үтәлмәй ҡалды. Аттестатҡа «иностранный язык не изучал» тип яҙып ҡуйҙылар.

Тәрән тылда йәшәгән атайҙар, әсәйҙәр, йәш-елкенсәк «Бөтә көстө фронтҡа!» тип баҫыуҙа, фермаларҙа эшләне. Уҡыусы балаларҙы ла йәйге каникул көндәрендә колхоз эшенә йәлеп итәләр ине. Улар мал ҡараны, иген икте, урып алды. Бойҙай орлоғо араһынан ҡара һолоно ҡул менән сүпләнек, тиһәк, ышанмаҫтар ҙа инде. Тәүҙә сәсеү орлоғон мейес башында киптерә инек. Аслы-туҡлы йәшәһәк тә, бирешмәнек. Аҙ-маҙ ғына ондо шырпы ҡабы менән йә иһә ағас ҡалаҡ менән бүлә торғайнылар.

Ғаилә ағзаларын үлем ҡосағынан йолоп алыу өсөн, йәш-елкенсәк, малай-шалай ашарға яраҡлы үләндәр йыйҙы. Яҙға сыҡҡас, көҙгө ураҡта ергә ҡойолоп ҡалған бойҙай башаҡтарын, ризыҡ булыр тип, сүпләй инек. Ул саҡта, көс етмәгәнлектән, игендәрҙе күпләп юғалтыуға юл ҡуйыла ине шул. Күптәр астан интегеп донъя ҡуйҙы, беҙ ҙә ғаиләбеҙҙән ике кесе туғандарыбыҙҙы юғалттыҡ. Атайыбыҙ, һуғыштан әйләнеп ҡайтҡас, комбайнсы булып эшләй башланы, тик шунда ғына өйөбөҙгә тәмле икмәк еҫе таралды.

Һуғыш барған йылдарҙа ла ауыл йәштәре, ифрат ҙур сабырлыҡ күрһәтеп, белемгә ынтылды, тыуған колхоздарына ярҙамлашты. Иң мөһиме, ауыл таралманы. Минең районлаш тиҫтерҙәрем хәҙер Өфөлә йәшәүсе Рәғиб Ғимаев менән Сафа Әхмәтов Өфө нефть институтын тамамланы. Бөгөн улар – техник фәндәр докторҙары, профессорҙар һәм атҡаҙанған фән эшмәкәрҙәре. Рәғиб оҙаҡ йылдар Башҡорт дәүләт университетына етәкселек итте. Беҙ был яҡташтарыбыҙ менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ, уларҙы балҡып янған йондоҙҙарға тиңләйбеҙ.

Үрге Ҡыйғы урта мәктәбендә белем алған йылдарҙағы «В» класынан уҡытыусы, табип, ауыл хужалығы белгесе, партия хеҙмәткәре, хәрбиҙәр сыҡты. Ул замандарҙан һуң күпме һыуҙар аҡты, тоҙ ҙа тоҡлап ашалды, байтаҡ класташтарым, тиҫтерҙәрем яҡты донъяны ташлап, баҡыйлыҡҡа күсте.

Дошманды үҙ ояһында ҡыйратҡас, совет кешеләре халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға күп көс һалды. Тыуған ауылым Түбәнге Ҡыйғыла эреләтелгән Калинин исемендәге колхоз малсылыҡ, игенселек, төҙөлөш, кадрҙар әҙерләүҙә ҙур уңыштарға өлгәште. Һөҙөмтәлә колхоз рәйесе Әҡсән Шәрипов Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән иң юғары исемгә лайыҡ булды. Тракторсы Талип Ласынов, бригадир Ҡәүи Фазлыев, һөт комплексы етәксеһе Рәшит Закиров тырыш хеҙмәттәре өсөн Ленин ордендары менән наградланды.

Ҡыйғы районында тыуып үҫкән, хәҙер Өфөлә йәшәүсе бер туған Бәшировтар, Радил Мөхәмәтдинов, Ансар Вафин, Йыланлы ауылынан – Мөғәллимә Әхтәмйәнова, Рәзинә Латифйәнова, Арыҫландан – Шәүрә Ғәҙелшина, Йүкәленән – Йәнтимер Ғәйнанов, Һарығулдан – Григорий һәм Сергей Павловтар, Үрге Ҡыйғынан – Сәмиғулла Хилажев һәм Малик Ғималетдинов, Түбәнге Ҡыйғынан Рөстәм Хәкимйәнов, Рәфис Ҡыямов һ.б. индерергә булыр ине.

Әммә 80-се йылдың икенсе яртыһында башланған үҙгәртеп ҡороуҙар шауҡымында өлгәшелгән уңыштар һеперепт түгелде, колхоздың мөлкәтен талап-емереп ташыусылар күбәйҙе, йәштәр араһында тәрбиәүи эш юҡҡа сыҡты. Хәҙер йәш быуындың яҡты киләсәккә ынтылышы күренмәй. Ҡайҙа булды һуң данлыҡлы стахановсылар хәрәкәте? Эльвира Гулина, Банат Батырова кеүек хеҙмәт ҡаһармандарының ҡыйыу башланғысы?

**Марсель САБИРЙӘНОВ.**
Ҡыйғы районы.

# «БАТЫРҘАРҘЫҢ ДА БАТЫРЫ»

Яҡташыбыҙ Мортаза Ғәлиәкбәров тураһында фронт командирҙары шулай тиер булған. Әбйәлил районының Ташбулат ауылында тыуып үҫкән ҡаһарман егеттең күҙҙәре үткер, ҡулдары ныҡ була, әммә, иң мөһиме, ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге менән айырылып тора ул. М. Ғәлиәкбәровтың сираттағы ҡаһарманлығына һоҡланған подполковник Чудинов, 13851-се хәрби часть начальнигы, 1944 йылдың 11 февралендә яуҙар тынып торған арала егеттең атаһына Маҡтау хаты оҙата. Бына ул: «Һаумыһығыҙ, хөрмәтле Иҙрис Ғәлиәкбәров иптәш – ҡыйыу яугир, башҡорт халҡының данлы улы Мортаза Ғәлиәкбәровтың атаһы!

Хәрби часть етәкселеге Һеҙгә улығыҙға иҫ киткес матур тәрбиә биргәнегеҙ өсөн оло рәхмәт белдерә. Шуны ҡыуанып хәбәр итәбеҙ: улығыҙ иҫән-һау. Ленинград ҡалаһын азат итеү, Ленинград өлкәһен фашистарҙан таҙартыу өсөн барған һуғыштарҙа улығыҙ баһадирҙарса алышты. Мортаза һәр ваҡыт үҙ взводының башында, яуға ла ул беренсе булып инә. Бер бәрелештә генә ул автоматынан һигеҙ дошманды ҡырып һалды. Ҡыйыулығы өсөн улығыҙ «Батырлыҡ өсөн» миҙалы, III дәрәжә Дан һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендарына лайыҡ булды.

Аҫылдарҙың да аҫылы, батырҙарҙың да батыры улығыҙ. Мортаза яуҙа үҙенең командирын һаҡлай, атаһы, Тыуған иле хаҡында бер ваҡытта ла онотмай, был уға көс өҫтәй. Бөйөк ата-бабалары – башҡорт халҡының азатлығы өсөн көрәшкән баһадирҙар рухына тоғролоҡ һаҡлап, ул дошманға ҡарата аяу белмәй, бик оҫта һуғыша. Беҙҙең часть яугирҙары, сержанттары, офицерҙары Мортазаны ҡыйыулығы өсөн хөрмәт итәләр. Ҡыҙыл Армияға шундай һалдат үҫтереп биргәнегеҙ өсөн Һеҙгә рәхмәт әйтә һәм сәләм оҙаталар.

Беҙ уның тағы ла уңышлыраҡ һуғышасағына өмөт белдерәбеҙ, Гитлерҙың бер эте лә уның ҡулынан ҡотола алмаҫ, тигән ышаныста ҡалабыҙ. Һеҙгә һаулыҡ, эшегеҙҙә уңыштар теләйбеҙ. Улығыҙ өсөн борсолмағыҙ. Ул Һеҙҙең ғаилә исеменә тап төшөрмәҫ, артабан да данлы юлына тоғро ҡалыр...»

119-сы уҡсылар полкы командиры майор Данилов йәнә 11 көндән, 1944 йылдың 22 февралендә, ҡыҙылармеец Мортаза Ғәлиәкбәровтың наградалар ҡағыҙына түбәндәгеләрҙе теркәп ҡуя: «1944 йылдың 21 февралендә Тимер юл районының Аунер станцияһы эргәһендә барған ҡаты алыштарҙа М. Ғәлиәкбәров яраланған пулеметсыны алмаштырҙы һәм, дошманға яҡын уҡ килеп, ҡул пулеметынан 18 фрицтың ғүмерен өҙҙө. II дәрәжә Дан орденына лайыҡ».

1944 йылда «Красная Башкирия» гәзитенең февраль һандарының береһендә Советтар Союзы Геройы Т.Т. Кусимовтың «Дошманға аяу булмаҫ» исемле мәҡәләһе донъя күреп, унда башҡорт атлыларының ҡаһарманлығы хаҡында һөйләнелә. Әлеге мәҡәлә таңғәлендә тағы бер һүрәтләмә күрәбеҙ, капитан Ф. Фәйзуллин «Хоҙайбирҙин көрәшкән урындарҙа» исемле яҙмаһында Мортаза Ғәлиәкбәровтың батырлыҡтары тураһында бәйән итә. Шулай итеп, бер гәзит битендә

Әбйәлил районының күрше генә ауылдарында үҫкән ике яҡташ «осраша». Капитан бына ниҙәр яҙа: «Ленинград фронты яугиры булараҡ, Мортаза Ғәлиәкбәров Ленинград кешеләренең ҡаны һәм күҙ йәше, был гүзәл ҡалалағы емереклектәр өсөн дошманға ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә ант бирә. Ғәлиәкбәров хеҙмәт иткән часть оборонаның мөһим урындарының береһенә – «Булгаково бейеклеге»нә оҙатыла. Ҡыйыу яугирға бер төркөм автоматсылар менән дошман тылына үтеп инеп, фашистарҙы ҡамарға ҡушыла. Был фарманды үтәү ҙур хәрби оҫталыҡ талап итә, яугирҙар дошман яғына шыуышып, ҙур араны үтә һәм хәрби позиция биләй. Күпмелер ваҡыт үткәс, улар дошман офицерҙарын күреп ҡалалар һәм, улар үҙҙәренең тапҡырына етеү менән, ҡапыл килеп сығалар ҙа: «Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ!» – тип ҡысҡыралар. Фашистар өсөн был көтөлмәгән хәл була, улар ҡаушап ҡала... Автоматсылар әсирҙәрҙе ҡоралдары һәм ҡиммәтле документтары менән үҙҙәренең команда пунктына оҙата.

Бер ваҡыт Ғәлиәкбәров оборонаның иң ауыр участкаһын һаҡлауға ҡуйыла. Рәсми документтарҙа ла был урынды «ҡыяр» тип атап йөрөтәләр, сөнки ул дошман оборонаһына ҡыяр сүрәтендә инеп урынлашҡан була. Немецтар бер нисә тапҡыр унан беҙҙең һаҡты алып ташлап, «тел» төшөрөргә маташа.

Бер мәл гитлерсылар ошо урынға автоматтар һәм ике пулемет менән ҡоралланған ҙур һалдат төркөмө ебәрергә ҡарар итә. Ғәлиәкбәров дошмандың үҙенә яҡынлауын көтөп ята һәм тегеләр килеп етеү менән ут аса, немец һалдаттары боҫорға мәжбүр була. Фашистар берәмләп үтергә маташып ҡарай, әммә Ғәлиәкбәров береһен дә күҙ уңынан ысҡындырмай: дошманға баш күтәрергә ирек бирмәй. Ҡапыл уның патрондары бөтә. Бер дискыны ҡапшап ҡарай егет, икенсеһен, ләкин патрондар булмай сыға. Шул саҡ Ғәлиәкбәров граната ырғыта башлай... Батыр яугир окобы эргәһендә ун бишләгән фашист ятып ҡала.

Ҡасандыр Совет власы өсөн РКП (б)ның Х съезы делегаты, Граждандар һуғышы батыры, башҡорттоң данлы улы Хоҙайбирҙин көрәшкән Ленинград ерендә Ғәлиәкбәров бына шундай ҡыйыулыҡ күрһәтә».

...Уға тыуған яҡтарына, йәш кәләше, туғандары һәм дуҫтары янына әйләнеп ҡайтыу насип булмай. Польшаны азат итеү өсөн барған алыштарҙа батырҙарса һәләк булып ҡала Мортаза Ғәлиәкбәров. Һалдат Кендзежиндағы хәрби зыяратта «Туғандар ҡәберлеге»ндә ерләнгән. Был хаҡта уның туғандарына Польшаның «Ҡыҙыл Тәре» идараһы хәбәр итә. Ошо юлдарҙың авторы һәм батыр яҡташыбыҙҙың ҡустыһы Шаһыбал бынан бер нисә йыл элек Мортаза Ғәлиәкбәровтың ҡәберенә барҙыҡ. Ниәтебеҙ – уның ҡәберенә бер ус тыуған ер тупрағы һалыу ине. Шунда беҙ Польша ерендә һәләк булған совет һалдаттарының һәм офицерҙарының иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлауҙарын үҙебеҙ күреп ышандыҡ. М. Ғәлиәкбәров 18186 совет яугиры араһында 87-се булып теркәлгән. Зыяраттағы обелискта «Беҙҙең азатлыҡ өсөн көрәштә баш һалған Совет Армияһы яугирҙарына дан!» тигән яҙыу бар. Зыярат ҡала тәрбиәһендә, католиктар һәр ҡәбергә май шәме ҡуя, яугирҙарҙың һуңғы төйәген тәртиптә тота.

Һуғыштың ҡара ҡанаты ҡағылмаған бер генә ғаилә лә юҡтыр, моғайын. Еңеү яулаған батырҙарыбыҙҙы оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Беҙҙең бурыс – кешелек донъяһында яңы яуҙар булдырмау. Ә Ер йөҙө һаман тыныс түгел...

**Гөлсөм ХИСМӘТОВА.**

## «ТҮГЕЛЕП ИЛАП ҠАЛДЫМ...»


Менәүәрә Йомағолова

Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәре Һәҙиә һәм Ғөбәй Дәүләтшиндарҙы яҡындан белгән, яҙмыштарының үтә лә фажиғәле көндәренең шаһиты булған, ғаиләгә 1937 йылда ябырылған тәрән ҡайғыларҙы бергә кисергән, ул саҡтағы 16 йәшлек ҡыҙ, әлеге көндә иһә туҡһан йәштән уҙған ил инәһе Йомағолова Менәүәрә Заһит ҡыҙы ғүмер кисерә.

Инәйҙең киң мәғлүмәтле, уҡымышлы икәне үҙен тотошонан, һөйләшенән, ғөмүмән, бар булмышынан һиҙелеп тора. Ныҡ олоғайыуына ҡарамаҫтан, данлы шәхестәр янында үткәргән, хәтерендә мәңгелеккә уйылған онотолмаҫ көндәрҙе әле кисергәндәй бәйән итә. Алҡымына килеп тығылған кисерештәре уға тыныс һөйләргә ирек бирмәй: ул йә репрессия осороноң ҡәһәрле көндәрен онота алмай һулҡ-һулҡ илай, йә йылмайып, ҡыҙыҡлы мәлдәрҙе хәтерләй. Ваҡыты-ваҡыты менән хәтер һандығынан шиғырҙар ҡаҙып сығара.

*Әсе яҙмыш мине ҡурсалаған*
*Сәңгелдәктә ятҡан сағымдан…*

– тип Ғөбәй Дәүләтшиндың уҡыусыға билдәһеҙ булған, оҙаҡ ваҡыт үҙҙәренең ғаилә архивында һаҡланып, юғалыуға дусар булған шиғырҙы һөйләй башлай ҙа дауамын иҫенә төшөрә алмай өҙгөләнә.

– Ә был шиғырҙы беләһегеҙме? – тип һорай ул, миңә мөрәжәғәт итеп.

*Төйөнсөгөм йөкмәп,*
*Ҡаптыр тундан*
*Килеп индем, малай, ҡалаға.*
*Атаҡ, атаҡ!*
*Аһа…*
*Ташҡа үлсәйем…*
*Өфө тигәндәре ошо икән.*
*«Аҙашырлыҡ, яман, таш ҡала»… тип*
*Һөйләүҙәре ерле буш икән.*

– Ғабдулла Амантайҙың шиғыры бит был. Ҡайҙан беләһегеҙ? – тип ғәжәпләнәм.

– Мин уның шиғырын ғына түгел, үҙен дә һәйбәт белә инем. Ғөбәй олатайымдар менән аралашып йәшәнеләр бит улар, – тип яуап бирә инәй.

Сер йомғағы яйлап ҡына артабан һүтелә. Менәүәрә Заһит ҡыҙы тыумышы менән Һамар өлкәһе Ташбулат ауылынан. Ғөбәй Дәүләтшиндың туғаны, уның кеүек, апанды ырыуынан.

– Кәрәлекте һыулай ине беҙҙең уйым-уйым апанды тоҡомо. Өс йөҙҙән ашыу хужалыҡтан торған ауылым 8 башҡорт ауылының иң беренсеһе, иң ҙурыһы ине, – ти инәй.

Үткән быуаттың 20-се йылдар аҙаҡтарында Ғөбәй Дәүләтшиндың һәм уның яҡташы Зәбихулла Исламғазиндың юллауы буйынса Һамар башҡорттарын Башҡортостанға күсереү башланғас, һигеҙ йәшлек ҡыҙ ата-әсәһе, күп һанлы туған-тыумасалары менән бергә тыуған ерҙән алыҫ сәфәргә юллана.

Яңы ерҙә туғандар бер-береһе менән артабан да тығыҙ аралашып, бер-береһенә ярҙам итешеп йәшәй. Баймаҡ районының Урғаҙа йылғаһы буйында Үҙән исемле ауыл төҙөп ултыралар. Атаһы Заһит олатай ҡыҙын Өфөгә алып килгәс, фатирға Дәүләтшиндарға төшөрә. Эргә-тирәлә башҡорт мәктәбе булмағанлыҡтан, татар мәктәбенә уҡырға бирә.

– Ун биш-ун алты йәшлек сағым. Киров урамының 5-се һанлы йортонда тора ине Ғөбәйҙулла олатайымдар (атайымдан йәшкә олораҡ булғас, мин уны «олатай» тип йөрөтә инем). Ике йыл буйы йәшәнем мин был ғаиләлә. Шул тиклем илгәҙәк инеләр Һәҙиә инәй менән улар бер-береһенә. Бергә-бергә күңелле итеп йөрөрҙәр ине. Матур кейенеп, ҡушлап сығып китерҙәр ине. Һәҙиә инәйемдең бер шиғырынан олатайыма арнап яҙған юлдары ошо бәхетле саҡтарҙың бер атҡыһы булып хәтеремә уйылған:

*Ырғыҙ тигән тыуған төйәгем бар,*
*Ырғыҙ тигән тәмле һыуым бар.*
*Ырғыҙымда тыуған мөхәббәтем –*
*Йәнем кеүек күргән ирем бар.*

Сәғит Агишҡа, Сәғит Мифтаховтарға ҡунаҡҡа барыр инеләр. (Драматург Сәғит Мифтахов – минең еҙнә ине. Тик бәхеткәйҙәре ҡыҫҡа булды, атылып үлеп ҡалды бит Асия апай.)

Ғөбәй олатайым сөсикмәк, ҡарын ашарға ярата ине. «Ауылдан күстәнәскә нимә алып киләйек?» – тип һораһалар, ике лә уйлап тормай: «Ҡарын килтерһәгеҙ, етә», – ти торғайны. Дуҫ яҙыусыларын ҡарын ашарға саҡырыр ине. Ҡыҙыҡ һүҙҙәр һөйләй-һөйләй, бергәләп табын ҡороп ултырырҙар ине. Бындай табындарҙа Булат ағай Ишемғол үтә лә шаян булыуы менән айырылып торор ине.

Ғөбәй олатай талғын ғына тауыш менән матур итеп йырлай ине. «Кәрәлекәйем» де йырлап алайым әле», – тигән булыр ине.

Инәй ошо мәлдә Дәүләтшиндарҙы һағынып, тыуған-үҫкән илен хәтерләп:

*«Кәрәлекәй буйы һарымһаҡ,*
*Ни эшләрбеҙ ситтә, һағынһаҡ?»*

– тип кинәт кенә моңланып ҡуя ла һүҙен артабан дауам итә.

– Мин алтынсы класта уҡый инем. 1937 йылдың август аҙаҡтары. Һәҙиә инәйем күптән түгел А.П. Чехов исемендәге шифахананан ҡайтҡан.

Әсәһе Гөлйәүһәр инәй менән икәүләп кенә ултырғаныбыҙҙа, бер кеше килеп инде. «Дәүләтшиндар ошонда торамы? Үҙҙәре ҡайҙа?» – тип һорай.

– Ғөбәй олатайым эштә, Һәҙиә инәйем хәҙер ҡайтырға тейеш, – тинем мин.

Тағын бер әҙәм килеп инде. Стенаның буйынан-буйына һуҙылған китап кәштәләрен тикшерергә тотондолар былар. Нимәгә икәнен дә аңлатмайҙар. Гөлйәүһәр

инәй һаңғырау бит инде, минән һорай: «Нимә булды? Һәҙиә ҡасан ҡайта?» – ти.

15 минуттар самаһы үткәндер, килеүселәр бишәү булып киттеләр. Бөтәһе лә китаптарҙы аҡтара, ниҙер эҙләйҙәр.

Бер кеше парадный ишектән олатайҙы ҡаршы алды. Ғөбәй олатайым, улар менән һөйләшә-һөйләшә, сисенә башланы. «Кеше бар, нишләп сисенә икән,» – тип аптырайым. Олатай:

– Ҡыҙым, икенсе салбар бир. Ике пар ойоҡ, ҡулъяулыҡтар әҙерлә, – тине.

Әммә үҙе мин биргән әйберҙәрҙе алмай, шифоньерҙан баҡсала кейә торған иҫке кейемдәрен алып кейә башланы. Мин, аптырап, ни эшләргә белмәйем. Теге кешеләр һаман да ниҙер яҙа. Берәһе Һәҙиә инәйҙең ҡайҙалығын һораны.

Йыртылмаған китап ҡалманы. Томлы-томлы иҫке гәзиттәрҙе аҡтарып бөтөрҙөләр. Кейемдәр тапалып ятты. Күлдәктәренең еңенә тиклем ҡырҡылып бөтөлдө.

Һәҙиә инәй ҡайтып инде, үҙе сисенә, үҙе илай. Олатайҙан:«Ашайһыңмы? – тип һораны. Мин йылытып биргән төшкө аштан ҡалған итле картуфты ашамаған, инәһенә: – Йомортҡа булһа ла ҡыҙҙырып бир», – тине.

Ҡыҙы хәл-әхүәлде аңлатып биргәс, үҙен әлегәсә ҡулда тотҡан Гөлйәүһәр инәй ҙә илай башланы. Бер кеше килеп инеп: «Долго мытаритесь!» – тип ризаһыҙлығын белдерҙе.

Шулай итеп, олатайымды алып киттеләр ҙә барҙылар. Аҫтын-өҫкә килгән өй эсендә ҡайғыға сумып, илап тороп ҡалдыҡ. Был көн һис кем ләм-мим өндәшмәне. Бер-беребеҙгә күтәрелеп тә ҡарай алманыҡ.

Иртәгәһенә иртүк Һәҙиә инәйем өйҙән сығып китте. Әммә уға олатайҙы күрһәтмәгәндәр, передачаһын да алмағандар.

Кис Хәсән ағай (яҙыусы Бәшәр Хәсән – **Г. Ҡ.**) шылтыратты: «Ишеттем, Һәҙиә, ишеттем. Мин дә көтөп ултырам, ҡасан минең арттан килерҙәр», – ти.

Һәҙиә инәй көн дә, олатайыма тапшырырға тип, гәзит, берәр банка ҡаймаҡ, тәмәке һатып ала. Тик тапшыра алмай. Мине лә эйәртеп барҙы бер көн төрмәгә. Ҡапҡа алды баҙар шикелле ине. Ул бала-сағаларҙың илашҡаны ҡайҙа! Һәҙиә инәй записка яҙып ебәрҙе, яуап көтөргә ҡушҡандар. Кискә тиклем көттөк. Аҙаҡ берәү сығып: «Һәҙиә апай, бер ниндәй ҙә хәбәр көтмәгеҙ. Кемдән генә һораһам да: «Фамилияһы бында күрһәтелмәгән, ул бында юҡ», – тигән хәбәр килтерҙе.

Зым-зыя юғалды шулай итеп олатайым. Бер көн Һәҙиә инәйем урамдан ҡайтып инде лә түгелеп илай: «Ҡыҙым, ҡыҙым! Олатайың юҡ хәҙер…» Кисен күрше мәрйәгә: «Атҡандар, тип ишеттем,» – тип һөйләне (Менәүәрә инәй быны һөйләгәндә үҙе лә һулҡылдап илай – **Г.Ҡ.**).

Дауыт Юлтыйҙың ҡатыны Фатима апай килеп инде. Күмәкләшеп илаштыҡ. Телефонды ла өҙөп ташланылар ошо көндәрҙә.

Шул ваҡытта күргәндәрем һис тә оноторлоҡ түгел. Күтәргеһеҙ оло ҡайғы, ҙур ҡаза ине был беҙгә. «Әйҙә, булмаһа, сәй эсеп ҡарайыҡ», – тигән була Һәҙиә инәй. Тик эсеп тә, ашап та булмай шул.

Инәйемде лә алып китеп барырҙар, тип ҡурҡабыҙ. Бер рәхәтләнеп йоҡлай алманыҡ был көндәрҙә. Гел кейемдә. Йөрәккә ғазап ҡына булды был көндәр.

Фатир һаҡ аҫтында. Һаҡсыларҙың береһе, оло ғына башҡорт ире, рәхмәт яуғыры, инәйемә яҡшы мөнәсәбәттә булды. Тик үҙе тегеләренән ҡурҡа ине.

Атайым ауылдан килгән. Уға инергә рөхсәт итмәйҙәр, мине сығармайҙар. Керһәң дә, сыҡһаң да – тентейҙәр. Теге башҡорт ағайы: «Нимә булды, ҡарындаш?» –

тип һорай. Атайымды индермәгәндәрен әйттем. Ул мине өйҙән сығарырға рөхсәт алды. Яңғыҙымды ғына ебәрмәй, береһе артымдан оҙатып сыҡты. Ул атайымдың документтарын тикшерҙе, әммә инергә рөхсәт итмәне.

– Аҙыҡ алып килгән бит ул, – тип асырғанам. «Аҙыҡ кәрәкмәй!» – тип яман аҡырып ебәрҙе теге.

Атайым килтергән майға бешкән көлсәне, бауырһаҡты ваҡлап бөтөрҙөләр. Теге башҡорт һаҡсыһы сәй ҡайнатыуымды һорай.

– Бына сәйнүк, ҡайнатығыҙ ҙа эсегеҙ! – тип сәйнүкте шалтыратып килтереп ултырттым.

Һаҡсыларҙың береһе, татар милләтенән булғаны, бигерәк тә яман, усал булып сыҡты. Аҙаҡ Өфө урамдарында күреп ҡалһам, атып йығырҙай була инем уны.

Ҡурҡыуыбыҙ алдыбыҙға килде: күп тә үтмәй, Һәҙиә инәйемде лә ултыртып ҡуйҙылар. Түгелеп илап тороп ҡалдым тағы ла. Унан һуң беҙҙең йәшәүебеҙҙе… Аллам һаҡлаһын! Ул ваҡыттағы күҙ йәше, ул ваҡыттағы ҡайғы!

Ә бит уларға йәшәргә лә йәшәргә ине. Бала бәхетен дә татый алманылар, Булаттары ғүмерһеҙ булды.

Былар иҫемә төшһә – бик ауыр. Иламайынса түҙеп булмай. Үткәндәрҙе онотмаһындар ине! Үткәндәр бик кәрәк. Рәхмәт килеүегеҙгә! – тип һамаҡлап ала Менәүәрә инәй.

– Ғөбәйҙулла олатайым донъяларҙың боларып китерен һиҙеп йөрөгән булған икән. Атайым аҙаҡ шулай һөйләне. Үҙәнгә һуңғы килгәнендә беҙҙең өйҙөң тәҙрәләрен кейеҙ менән ҡаплап ҡунаҡ булыуҙарының сере: әҙәм күҙенән, һүҙенән һаҡланыу өсөн булғанын мин аҙаҡ ҡына аңланым, – тип ҡуя ул аҙаҡ уйсан ғына.

Менәүәрә Заһит ҡыҙы ошо һағышлы хәтирәләргә солғанышында, япа-яңғыҙ ғүмер көҙөн кисерә. Ни өсөн былар тураһында ул элегерәк һөйләмәгән, тиһегеҙме? Үҫмер генә ҡыҙ баланың дауыллы заман өйөрмәләренең ҡап уртаһында ҡалып, шаңҡып, ҡурҡып ҡалыуы ғәжәпме ни?! Тағы ла төп сәбәптәрҙең береһе – уның ғүмеренең байтаҡ өлөшө Урта Азияла үтеүендә.

Ғүмер буйына Ғөбәй олатаһы һәм Һәҙиә инәһенең рух шәрифтәренә аяттар бағышлатып йәшәй ул. Ғөбәй Дәүләтшин уларҙың ғаиләһенә һаҡлау өсөн тапшырған архивтың йөкмәткеһен Ҡөрьән доғаларындай күңеленә һеңдереп, уларҙы бары тик Ғәзим Шафиҡовҡа тапшырыу уйы менән яна Менәүәрә инәй оҙаҡ ваҡыт. Тик, үкенескә күрә, данлыҡлы публицистың ғүмеренең һуңғы йылдары була был осор. Ғәзим Ғәзиз улы Иҫке Сибайға килә алмай. Архив та төрлө сәбәптәр арҡаһында юғала. Шулай ҙа, тулыһынса уҡ булмаһа ла, өлөшләтә Менәүәрә инәйҙең хәтерендә тергеҙелеп, ҡағыҙ биттәренә теркәп ҡуйылды, шөкөр. Әлеге көндә яҙмалар Һәҙиә Дәүләтшина музейы фондына һаҡлана. Улар ентекле өйрәнелгәс, уҡыусыға тәҡдим ителәсәк.

**Гөлнур ҠАСҠЫНОВА,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**Башҡорт дәүләт университетының**
**Бөрө филиалы доценты.**

## Юғары бейеклектәр яулап...

*Күренекле яҙыусы Талха Ғиниәтуллинға журнал аша хат*

*Хөрмәтле Талха Йомабай улы!*

*Иң элек Һеҙгә дөрөҫлөк, ихласлыҡ менән һуғарылған әҫәрҙәрегеҙ өсөн рәхмәт белдерергә рөхсәт итегеҙ. Прозағыҙҙы мауығып, фәһемләнеп уҡыйым, бәғзе хикәйәләрегеҙҙең йөкмәткеһен биш йәшлек ейәнемә лә һөйләгәнем бар. Шуға аптырайым: бәләкәс кенә малайҙы етди тормош ваҡиғалары ҡыҙыҡһындыра, имеш. Ейәнем һәр саҡ иғтибар менән тыңлай ҙа һуңынан ҡәҙимге һорауҙар бирә. Мәҫәлән: «Тәлғәт артабан нисек йәшәй?»*

*Һеҙ – нескә психолог, өҫтәүенә, бик тәүәккәл әҙип. Күп кенә хәл-ваҡиғаларҙы ғәҙәти замандаштар төбөнә төшмәй, күҙ йомоп ҡына баһалаһа, Һеҙ иһә асыҡтан-асыҡ, бер ниндәй аштырыуһыҙ-шаштырыуһыҙ яҙаһығыҙ, шуға ла бөтә әҫәрҙәрегеҙҙә лә тормош дөрөҫлөгө, теүәлерәк әйтһәк, тормоштоң әсе һабаҡтары ярылып ята. Геройығыҙ (күп осраҡта Һеҙ үҙегеҙ хаҡында яҙаһығыҙҙыр, тигән уй тыуа) уҡыусылар алдында дыуамал, йәмһеҙ, хатта мыҫҡыллауҙарға дусар бәндә булып күренеүҙән тартынмай, ә бит авторҙарҙың күптәре, минеңсә, үҙҙәрен битәрләнгән сүрәттә хикәйәләргә баҙнат итмәй. Был фекерҙе яҙғанда мин «Гегемон» повесының аҙағын күҙ уңында тотам.*

*Ҡайһы берҙә персонаждарығыҙ ниндәйҙер әхлаҡһыҙ аҙым яһай, ҡурҡаҡлыҡ күрһәтә, эргәләрендәге кешеләргә битараф, хатта боҙоҡ уйлы ла кеүек. Әммә улар күңелдә үҙҙәренә ҡарата нәфрәт уятмай, сөнки үҙ булмыштарын анализларға, ҡылған эштәрен намыҫ бизмәненә һалырға һәләтле. Ни хәл итәһең, уҙған осорҙарҙа беҙ китаптарҙа, кинофильмдарҙа гелән тип әйтерлек үтә ыңғай геройҙар менән танышырға мәжбүр булдыҡ. Һеҙҙең прозағыҙ иһә «бөтә яғы ла килгән идеаль әҙәмдәр булмай, кешеләрҙең бөтәһе лә – ябай, уларҙың һәммәһе ыңғай һәм кире һыҙаттарға эйә» тигән фекерҙе беренсе планға ҡуя. Ысынлап та, беҙ ҡасан кешене нисек бар шулай ҡабул итергә өйрәнербеҙ икән? Ә бит уйлап сығарылған яҙмыштар, алдаҡ ситуациялар тамам бүктерҙе. Элегерәк беҙгә мелодрамалар, һинд фильмдары, аҙағы «бәхетле» осланған бәйәндәр ҡыҙыҡ һымаҡ ине. Хәҙер инде беҙҙе шоу менән шаңҡыталар, тышы ялтыр, эсе бушаҡ китап уҡырға, мәғәнәһе самалы телесериалдар ҡарарға әйҙәйҙәр. Уйлауымса, тиҙҙән уларҙың ғүмере ҡыҫҡарасаҡ, ә Һеҙҙең китаптарығыҙ тарихи һәм социаль һимматкә эйә, сөнки уларҙа тормош дөрөҫлөгө художество дөрөҫлөгө менән үрелеп һүрәтләнә.*

*Элек мин классик әҫәрҙәрҙе уҡығанда оҙон-оҙон тасуирланған тәбиғәт күренештәрен битләп кенә уҙа инем. Бәлки, йәшлегемә барғанмындыр. Ә Һеҙҙең китаптарығыҙҙа тәбиғәт мөһим роль уйнай: тәбиғәтте ифрат белеп һәм яратып һүрәтләйһегеҙ, ғәжәп сағыштырыуҙар табаһығыҙ, һөҙөмтәлә үҙеңдән-үҙең әҫәрҙең мөхитенә сумаһың...*

*«Тау артында ниҙәр бар?» тигән автобиографик повесығыҙҙа ниңәлер «Исповедь» тигән ярҙамсы баш ҡуйғанһығыҙ. Эйе, яҙмышығыҙ ҡатмарлы, ауыр... Тик Һеҙ ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәгәнһегеҙ, үҙ рухығыҙ менән юғары бейеклектәр*

*яулағанһығыҙ, һәр саҡ белемгә ынтылғанһығыҙ. Хоҙай, Һеҙгә оло талант бүләк итеп, ҡаты һынауҙар алдына ла ҡуйғандыр, тим. Ана шул һынауҙарҙың барсаһы ла әҫәрҙәрегеҙҙә сағылыш таба.*

**Алина ЙӘНТҮРИНА,**
**филолог.**
**Учалы ҡалаһы.**

## *«Ҡурай һәм ҡурайсылар»*

*Былтыр миңә Юлай Ғәйнетдиновтың ошо исемдәге китабы менән танышырға насип иткәйне. Үкенескә ҡаршы, был баҫманың тиражы ни бары 500 генә дана, имеш.*

*...Үҙем ҡурайсы түгел мин, мәгәр бәләкәйҙән ҡурай моңона ғашиҡмын. Егерме йылдан ашыу диңгеҙ офицеры булып хеҙмәт иткәндә, һирәкләп кенә пластинкаларҙан һәм магнит таҫмаларынан ҡурай моңон тыңлап тыуып үҫкән Инйәр буйҙарын, гүзәл Башҡортостаныбыҙҙы һағыныуымды баҫа торғайным. Хәҙер иһә ғәжәби һәм ябай ҡоралда уйналған музыканы концерттарҙа йә иһә телевизорҙан тыңлап кинәнәм. Белеүемсә, минең ише моңһөйәрҙәр – аҙым һайын. Бына шуға күрә лә данлыҡлы ҡурайсы, педагог, тележурналист, башҡорт фольклоры белгесе, халыҡ көйҙәрен пропагандалаусы Юлай Ғәйнетдиновтың ошо китабын күберәк тираж менән ҡабатлап нәшер иткәндә, һис шикһеҙ, мең-мең замандашҡа ифрат оло бүләк буласаҡ.*

*Бер генә киҫкә күршемдән алып торғайным мин «Ҡурай һәм ҡурайсылар» тигән аҫыл китапты. Әле бына, хат яҙғанда, уның эстәлеген нисектер анһат күҙ алдына баҫтырам һымаҡ. Йыйынтыҡта халыҡ ижадынан һәм әҙиптәрҙең әҫәрҙәренән ҡурай, мәшһүр ҡурайсылар хаҡындағы тос фекерҙәр, боронғо һәм хәҙерге заман ҡурайсылары хаҡында мәғлүмәттәр (күбеһе – фотолар менән), музыканттарыбыҙҙың Бөтә донъя, Бөтә Рәсәй, Халыҡ-ара фестивалдәрҙә, конкурстарҙа алҡыштар яулауы, ҡурай буйынса семинарҙар, симпозиумдар, ҡурай түңәрәктәре, ҡурай яһау оҫталары, музыка уҡыу йорттарында ҡурайсылар тәрбиәләү хаҡында материалдар урын алған. Иң мөһиме, баҫманың һуңғы өлөшөндә легендалары менән һирәк көйҙәрҙең ноталары, ә ҡаты тышлыҡтың эсенә 30-ға яҡын бик тә популяр йыр-көйҙөң мәшһүр оҫталары, шулай уҡ теге йәки был төбәктә дан алған таланттар башҡарыуында һирәк ишетелгән вариациялар яҙыулы диск ҡыҫтырылған. Йәнә шул: китапта теге йәки был районның атаҡлы ҡурайсы-йыраусылар исемлеге төҙөлгән, артабан аталы-уллы Ишғәле, Ишмулла, Сәйфулла Дилмөхәмәтовтар, Заһир Исмәғилев, Ғата Сөләймәнов, Рәхмәтулла Бүләкәнов, Кәрим Диаров, Мөхәммәт Түләбаев, Абдулла Хәлфетдинов, Ғатаулла Ҡаһарманов, Талип Латипов, Яппар Шафиҡов ише данлы уҙамандар хаҡында һүрәтләмәләр уҡып кинәнәһең. Ана бит, әле мин һанаған теҙмәлә генә биш кеше – Иҙел башынан, йәғни Белорет тарафтарынан. Бына ни өсөн танһыҡ үә ҡиммәт әлеге китап. Бер миңә генәме икән?!*

*Ҡабатлайым: «Ҡурай һәм ҡурайсылар» йыйынтығын, (әлбиттә, өҫтәмәләр менән) ҙур тираж менән яңынан нәшер итеү зарур. Уйлап ҡараһаң, былтыр Көйөргәҙе районында ғына, ана, Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенә арналған мәҙәни сарала... меңгә яҡын ҡурайсы ҡатнашҡан! Шуларҙың һәр береһенә ҡәҙерле аманат булыр ине ләһә әлеге китап. Ғөмүмән, был китапты мин һис бер икеләнеүһеҙ ғилми энциплопедияға тиңләйем.*

**Вәғиз АСҠАРОВ,**
**отставкалағы II ранг капитаны,**
**Өфөлә йәшәүсе белореттарҙың «Иҙел башы»**
**яҡташтар ойошмаһы рәйесе.**

### Ғалим һәм әҙип юбилейында

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы академигы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғайса Хөсәйеновҡа 85 йәш тулыуға бағышланған «Хәҙерге әҙәбиәт ғилемендә һәм әҙәбиәттә, фольклористика һәм археографияла актуаль мәсьәләләр» тип аталған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтте. Сарала республикабыҙ юғары уҡыу йорттарынан, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Төркиә, Әзербайжан, Төркмәнстандан һәм башҡа илдәрҙән килгән ғалимдар ҡатнашты.

Юбилярҙы төрлө министрлыҡ, ведомстволар, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Яҙыусылар союзы, республика гәзит-журналдары вәкилдәре, ижадташ дуҫтары, шәкерттәре, яҡташтары – ҡырмыҫҡалылар ҡотланы.

– Ғайса Батыргәрәй улы 60 йылдан ашыу фәнгә тоғро хеҙмәт итә, – тине ҡотлау телмәрендә республикабыҙ хөкүмәтенең Премьер-министр урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова. – Уның етәкселегендә ойошторолған ғилми экспедицияларҙа бихисап әҙәби ҡомартҡылар табылды, боронғо ҡулъяҙмалар фонды булдырылды. Ул фольклорсы ғына түгел, билдәле әҙип, әҙәби тәнҡитсе, әҙәбиәт тарихын, күренекле яҙыусыларҙың ижадын өйрәнеүсе ғалим.

Фәнни-ғәмәли конференцияны Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова алып барҙы.

Көндөң икенсе яртыһында ғалим һәм яҙыусының юбилейына арналған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үҙенең эшен секцияларҙа дауам итте.

***

Башҡорт дәүләт университетының ҙур залында Ғайса Хөсәйеновҡа 85 йәш тулыуға арналған «Күп милләтле дәүләт шарттарында туған телдәрҙе һәм әҙәбиәттәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү: проблемалар һәм перспективалар» тигән темаға халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция уҙҙы.

Пленар ултырышта вуз проректоры Малик Балапанов, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, БР мәғариф министры урынбаҫары Венера Вәлиева, Яҙыусылар союзы идараһы исеменән С. Юлаев исемендәге премия лауреаты шағир Ирек Кинйәбулатов, академик Марат Зәйнуллин ҡотлау һүҙҙәре менән, профессор Тимерғәле Килмөхәмәтов, доценттар Фәнзил Санъяров, Айнур Үтәшев, Зәкиә Мырҙағолова, Азамат Ғәлләмов, филология фәндәре кандидаты Аҫҡар Хужәхмәтов көнүҙәк докладтар менән сығыш яһаны. Конференцияны филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһының академик-секретары Ғиниәт Ҡунафин алып барҙы.

Һуңынан студенттар йөкмәткеле концерт күрһәтте.

* * *

Халыҡ яҙыусыһы, БР Фәндәр академияһы академигы Ғайса Хөсәйеновтың юбилейына арналған саралар уның тыуған яғында – Ҡырмыҫҡалы районында ла үтте.

### «Көндәлектәр»гә арналған кисә

Башҡортостан Яҙыусылар берлегендә сираттағы әҙәби кесаҙнала халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ике томлыҡ «Көндәлектәр» китаптарының исем туйы булды.

Кисәлә сығыш яһаған ҡәләмдәштәре: Ғайса Хөсәйенов, Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар, Рафаэль Зиннуров, Факиһа Туғыҙбаева, Гөлфиә Юнысова, Марс Әхмәтшин, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина һәм башҡалар көндәлектәрҙә бер кеше яҙмышы ғына түгел, республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихына ҡағылған мөһим хәлваҡиғалар яҡтыртылыуын билдәләне.

Кисә аҙағында Рауил Бикбаев яңы шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе, кесаҙнала ихлас ҡатнашыуҙары өсөн ҡәләмдәштәренә, юғары уҡыу йорттары студенттарына рәхмәт белдерҙе.

### Шиғри спектаклдә – студенттар

Өфөнөң Йәштәр һарайында Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил

Бикбаевтың «Хазина» поэмаһы буйынса М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артистары һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының «Замандаш» театр-студияһы студенттары тәрән мәғәнәле шиғри спектакль күрһәтте.

Әҫәрҙе сәхнәгә РФ-ның һәм БР-ҙың халыҡ артистҡаһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, профессор Таңсулпан Бабичева ҡуйған.

Артабан тамашаны шулай уҡ шиғри һүҙ дауам итте. Шағирҙар Рауил Бикбаев, Абдулхаҡ Игебаев, Ирек Кинйәбулатов, Гүзәл Ғәлиева, Салауат Әбүзәр, Азамат Юлдашбаев, Тамара Искәндәриә, Лариса Абдуллина, Хисмәтулла Юлдашев, Зөфәр Вәлит заман һәм тормош, яҙ һәм мөхәббәт хаҡында шиғырҙарын уҡыны.

### Исем туйлай альманах

Мәскәүҙә, Әҙәбиәтселәрҙең үҙәк йортонда, Шиғриәт академияһы тарафынан төҙөлгән йыллыҡ альманахтың исем туйы үтте. Баҫманың быйылғы һаны бөйөк совет шағиры Владимир Маяковскийҙың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналды. Унда билдәле башҡорт сатиригы, Шиғриәт академияһының мөхбир ағзаһы Марсель Сәлимовтың «Шағир һәм Советтар Союзы гражданы Маяковский иптәш менән һөйләшеү» тигән шиғыры баҫылған. Уны урыҫсаға Николай Переяслов тәржемә иткән.

Шиғриәт кисәһен академия президенты Валентин Устинов менән альманахтың баш мөхәррире Валерий Иванов алып барҙы. Билдәле шағирҙар Валентин Бояринов, Владимир Силкин, Николай Филин, Вячеслав Куприянов, Валерий Латынин, Инна Парфенова һ.б. менән бер рәттән Марсель Сәлимов та сығыш яһаны.

### Яугир һәм шағирҙы хәтерләп...

Бүздәк районының Ҡаңны-Төркәй мәктәбендә күренекле йәмәғәт эшмәкәре, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, фронтовик-яҙыусы Хәким Ғабдрахман улы Ғиләжевтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә уҙғарылды. Сарала район һәм ауыл хакимиәте вәкилдәре, Өфөнән әҙиптәр – ошо ауылда тыуып үҫкән күренекле шағирә Ф. Туғыҙбаева, әлеге мәктәптә хеҙмәт юлын башлаған шағир һәм прозаик Б. Ноғоманов, «Ағиҙел» журналы хеҙмәткәре С. Шәрипов, шулай уҡ Хәким Ғиләжевтың улы Азамат, ҡыҙы Гөлнар, мәғариф ветерандары йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, ә урындағы таланттар сағыу концерт күрһәтте.

### Милли баҫмалар күбәйҙе

Силәбе өлкәһендә башҡорт баҫмалары ишәйә. Мәҫәлән, «Шәжәрә» журналының һәм «Арғужа», «Аҡ тирмә» гәзиттәренең тәүге һандары донъя күрҙе, Арғаяш районында «Арғужа» гәзите ҡайтанан сығарыла башланы. «Аҡ тирмә» гәзитенең һәм «Шәжәрә» журналының ойоштороусыһы булып Башҡортостан Республикаһының «Аҡ тирмә» йәмәғәт ойошмаһының Силәбе филиалы – «Аҡ тирмә» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте сығыш яһай. Гәзит – айына бер, ә «Шәжәрә» журналы иһә, өлкәлә йәшәгән башҡорттарҙың этногенезына бағышланып, кварталға бер сығасаҡ.

### Рәсүл Ғамзатов иҫтәлегенә

Өфөнөң Әй урамында урынлашҡан «Халыҡтар дуҫлығы» китапханаһында исеме донъяға билдәле авар шағиры Рәсүл Ғамзатовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған әҙәби кисә уҙҙы.

Кисәне асып, китапхана мөдире Роза Аҡбашева Р. Ғамзатовтың һоҡланғыс ижады, уның Башҡортостан менән дуҫлығы хаҡында мауыҡтырғыс һөйләне.

Р. Ғамзатовты күреп белгән әҙиптәр: С. Юлаев исемендәге премия лауреаттары Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар шағирҙың башҡорт теленә тәржемә ителгән шиғырҙарын, уға арнауҙарын уҡыны.

Р. Ғамзатов менән тиҫтәләрсә йылдар дуҫ булып йәшәгән Мостай Кәримдең ҡыҙы Әлфиә Кәримова ла йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

БР-ҙағы Дағстан милли-мәҙәни үҙәге рәйесе Магомед Султанмагамедов, башҡа милли үҙәктәр вәкилдәре шулай уҡ ихлас һүҙҙәрен әйтте.

Баш ҡаланың 41-се, 44-се мәктәптәре уҡыусылары Р. Ғамзатовтың шиғырҙарын яттан һөйләне.